Agidel 3:Agidel 3.qxd  13.04.2009  23:29  Page 1

# АҒИҘЕЛ

Өфө,
март
2009

3 (1032)

ӘҘӘБИ-НӘФИС  ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 2

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Харис Сәғитов *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.03. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 462 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0028.09.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2008 (3, 1032)

# БЫЛ АНДА:

*Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл*

**Рауил БИКБАЕВ.** Ил амлы ижад юлында. ....................................5

ШИҒРИӘТ

**Мөхәммәт Илбаев.** Батырҙар. П о э м а. ..........................................9
**Әлфиә Әсәҙуллина.** Күңелемдә Хоҙай йәшәй. Ш и ғ ы р ҙ а р. ........15
**Фәтих Сайфран.** Мөхәббәтең менән... Ш и ғ ы р ҙ а р. .................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Мөнир Ҡунафин.** Тәңре өрөк ҡапҡанда. Х и к ә й ә. .......................22
**Сәлимйән Бәҙретдинов.** Аҡкош ауазы. Х и к ә й ә. .........................46

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Гөлнур Яҡупова.** «Аҡ юл!» тиеп бышылданы остазым... ................51
**Ирек Кинйәбулатов.** Аҡ шишмәнең тынмаҫ тауышы. ...................53
**Алла Докучаева.** «Был донъяла тауҙар бар сағында...» .................57

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Ирек Кинйәбулатов.** Офоҡтарҙа аҡ түбәләр тора...
*(Әхмәт Сөләймәновҡа 70 йәш.)* ........................................................59

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Ғәли Ибра имов.** «Кинйә» хаҡында уйланыуҙар *(Көндәлектәренән)* ...71
Кинйә. Т а р и х и р о м а н. III китап.
Бүгәсәү батша анаты. Башы. ........................................................78
**Ғәли Ильясов.** Таштар. Ш и ғ ы р ҙ а р. .........................................134

“АҒИҘЕЛ” КОНКУРСЫ

*«Күңелемдә — донъя сере»*

**Фәнил Бүләков.** «Күңелемдең ҡылдарына...» Ш и ғ ы р ҙ а р. ......137
**Айгиз Сафин.** «Бер ҡасан да осмаҫ инем...» Ш и ғ ы р ҙ а р. .........139

ПУБЛИЦИСТИКА

**Миҙхәт Саҙрыев.** Мәғариф философия ы. .................................141
**Фәнил Шәрипов.** Ҡаңлылар байрағы аҫтында. ............................148
**Сәләхетдин Карамов.** Уҡылмаған хат. Аҙағы. ..............................154
**Мәхмүт Хужин.** Баҙар шәүлә е. ..................................................175

САТИРА ӘМ ЮМОР

**Марат Кәримов.** Ҡыҙыл калейдоскоп. Х и к ә й ә. ........................180

БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА: НЕФТЕКАМА

**Мәғсүм Фәйрушин**. Нефтте Камалай ағыҙҙы. ..............................185

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 4

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*75 лет образованию Союза писателей Башкортостана*

**Р. Бикбаев.** На пути творческих вершин.

ПОЭЗИЯ

**М. Ильбаев** *(поэма)*, **А. Асадуллина, Фатих Сайфран** *(стихи)*.

ПРОЗА

**М. Кунафин.** Орех во рту Тэнгри *(рассказ)*.
**С. Бадретдинов.** Душераздирающий крик лебедя *(рассказ)*.

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Г. Якупова.** Напутствие учителя.
**И. Киньябулатов.** Белый родник.
**А. Докучаева**. "На свете есть горы..."

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**И. Киньябулатов.** На горизонте – белые вершины *(А. Сулейманову 70 лет)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Г. Ибрагимов.** Замысел романа *(из дневниковых записей)*;
Кинзя. Послы Пугачева *(исторический роман. III книга). Начало.*
**Г. Ильясов.** Камни *(стихи)*.

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

*В душе – тайна мира*

**Ф. Буляков, А. Сафи**н *(стихи)*.

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Садрыев.** Философия образования.
**Ф. Шарипов**. Под знаменем канлинцев.
**С. Карамов.** Непрочитанное письмо. *Окончание.*
**М. Хужин.** Тень рынка.

САТИРА И ЮМОР

**М. Каримов**. Красный калейдоскоп *(рассказ)*.

ГОРОД, ГДЕ МЫ ЖИВЕМ: НЕФТЕКАМСК

**М. Файрушин.** Там течет Кама-река.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 5

*Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл*



**Рауил БИКБАЕВ,**
*Башҡортостан Республика ы Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе*

# ИЛ АМЛЫ ИЖАД ЮЛЫНДА

Башҡортостан Республика ы Яҙыусылар союзына — 75 йыл. Тәүге көндәренән үк был ижади ойошма, тере организм кеүек, туҡтау ыҙ эҙләнде, үҫте әм камиллашты.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы — республикалағы ижади ойошмаларҙың иң өлкәне. Ул 1934 йылда барлыҡҡа килә, башҡорт мәҙәниәтенең бөйөктәрҙән-бөйөк ҡомартҡы ы — “Урал батыр” эпосы дәүеренән алып башҡорт үҙ сәнғәтендә мө им ваҡиға булып тора әм әҙәбиәт мөхитендә ижади көстәрҙе берләштереүсе ышаныслы үҙәккә әйләнә. Уҙған быуат башында уҡ әле күп кенә уҡыу йорттарында, мәҫәлән, Өфөләге данлыҡлы “Ғәлиә” мәҙрәсә ендә, шәкерттәрҙең әҙәби түңәрәктәре эшләгән. 1917 йылда Шәйехзада Бабич Ырымбурҙа башҡорт ижади йәштәрен “Тулҡын” әҙәби ойошма ына туплай. Егерменсе йылдар башында Башҡортостанда тәүге әҙәби берләшмәләр барлыҡҡа килә. Ошо уҡ осорҙа РАПП (Российская Ассоциация пролетарских писателей) йоғонто онда БАПП төҙөлә. Был эҙләнеү йылдарында хаталар ҙа, бер сиктән икенсе сиккә уғылыуҙар ҙа, яңыса тойолған әр төрлө теориялар менән мауығыуҙар ҙа (мәҫәлән, “вульгар социализм”) була.

Илебеҙҙең ошо етмеш биш йыллыҡ, йәғни Яҙыусылар союзы төҙөлгәндән алып үткән тарихына ҡараш ташла аҡ, күҙ алдыбыҙға ярай ы сыбар ваҡиғалар килеп баҫыр. Халыҡҡа мәғариф емештәре килтереүсе әм уны яңы белем баҫҡыстарына күтәреүсе культура революция ы, шул уҡ ваҡытта тарихта тиңдәше булмаған ҡанлы террор, уғыш әм халҡыбыҙҙың ошо уғышта Бөйөк Еңеүе... Дә шәтле яуҙан саҡ аяҡҡа баҫҡан ҡеүәтле ил йы анды үҙләштерә, шул уҡ ваҡытта кешеләрҙең күңелдәрен зәғифләүсе күңел еҙ ваҡиғалар булып ята. Алда яңы офоҡтар асыла, әммә шул уҡ ваҡытта алдынғы ҡараштарҙы ауыҙлыҡларға, тыйырға тырышалар. Яҙыусылар яңы, бығаса әҙәбиәтебеҙҙә булмаған ҡатмарлы жанрҙар ижад итеүгә ил амлана, әм шул уҡ ваҡытта улар эҙәрлекләүгә дусар ителә, китаптары яндырыла.

Барлыҡ был ваҡиғалар Башҡортостан Яҙыусылар союзына ла ҡағылды. Төрлө ө булды. Яңы ғына ойошторолоп, ул ижади берләшмә емерелеүгә дусар

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 6



ителде. Утыҙынсы йылдар аҙағында яңынан көстәрҙе тупларға, яңынан күтәрелергә тура килде. Әммә, әр төрлө кәртәләргә ҡарамай, туҡтау ыҙ юғалтыуҙарҙың үҫешкә ҡамасаулауына ҡарамай, ижад итеү, төҙөү әм берләштереү әр ваҡыт Союзыбыҙҙың төп маҡсаты булды.

Бөгөн беҙ ижади берләшмәбеҙҙе төҙөгән, ә аҙаҡ ҡанлы утыҙ етенсе йылдың ҡорбаны булған өлкән ҡәләмдәштәребеҙҙе оло хөрмәт, рәхмәт тойғо о әм бер үк ваҡытта сик еҙ ағыш менән иҫкә алабыҙ: Дауыт Юлтый, Афзал Та иров, Төхвәт Йәнәби, Ғабдулла Амантай, Булат Ишемғол, Ғөбәй Дәүләтшин...

Был тойғоларға Бөйөк Ватан уғышы яландарында әләк булғандар өсөн ҡайғырыу өҫтәлә: Низам Ҡәрип, Мәлих Харис, Мөхәмәтйәров Хәй, Сәғит Мифтахов, Хөсәйен Ҡунаҡбай, Маз ар Абдуллин, Бәҙрүш Моҡамай әм башҡалар.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы — изге, тылсымлы йорт. Әҙәбиәтебеҙҙең иң матур биттәрен яҙған Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти, Ғ.Сәләм, әҙиә Дәүләтшина, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Зәйнәб Биишева, Хәким Ғиләжев, Ибра им Абдуллин, Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабаевтарҙың таланты ошонда асылды. Рәшит Назаров, Рәмзилә Хисаметдинова үҙҙәренең тәүге шиғырҙарын ошонда уҡыны. Фәрит Иҫәнғолов, Әсғәт Мирза итов, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Әхиәр Хәким, Динис Бүләков, Ғәзим Шафиҡовтар ошо Союздың ижад атмосфера ында әҙәби тәжрибә тупланы. Әхнәф Харисов, Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитовтарҙың ижад яҙмыштары Союз менән айырылғы ыҙ бәйләнгән. Илебеҙҙәге бүтән ҡай ы Союз Мостай Кәрим кеүек титаны менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала?!

Башҡортостан Яҙыусылар союзының төп маҡсаты ижади көстәрҙе бергә туплау, әҙәби фекерҙе үҫтереү, бәйләнештәрҙе нығытыу бул а ла, етмеш биш йыл эсендә ул сик еҙ күп яҡлы, ҡатмарлы әм ижтимағи ә әмиәтле бурыстарҙы атҡарҙы. Ил тормошо йылъяҙма ын ижад итеүселәр союзы бер ҡасан да ижад эше менән генә сикләнмәне. Тарихи ынылыш мәлдәрендә ул мәғрифәтсе лә, тәрбиәсе лә, халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлаусы ла, кәрәк саҡта — яугир ҙа, көрәшсе лә булды. Башҡортостан Яҙыусылар союзы әр ваҡыт заман әм халыҡ менән бергә атланы. Союз тарафынан берләштерелгән яҙыусылар ижтимағи хәл-ваҡиғаларҙы теркәп кенә ҡалмай, бәлки, яңы ысынбарлыҡты төҙөй, ижад итә. Халыҡтың рухи тормошонда әҙәбиәттең йоғонто о ба алап бөткө өҙ. Яҡты хистәр әм изге ниәттәр уятыусы үҙ оҫталары ватандаштары өсөн рухи тәрбиәселәр, кәңәшселәр булды әм булып ҡала.

Мин, әлбиттә, әр ҡай ыбыҙға ҡәҙерле Союзды Мәккәгә сағыштырырға йыйынмайым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, изге эштәр менән рәттән ғәҙел еҙлектәр ҙә булды. 1937 йылдағы насар даны сыҡҡан йыйылыштарҙа эш бер-бере ен әшәке битәрләүҙәргә әм нахаҡ ғәйепләүҙәргә тиклем барып еткән. уғыштан унғы йылдарҙа Мөхәмәтша Буранғолов ошо Союзда ғәм халыҡ алдында хөкөм ителә. Ошо уҡ осорҙа Баязит Бикбай уйлап сығарылған гона тарҙа ғәйепләүгә дусар ителгәс, Яҙыусылар союзы үҙенең тәүге орденлы яҙыусы ын лайыҡлы рәүештә яҡлап ҡала алманы. Шулай уҡ Рәми Ғарипов та был ойошмала яҡлау тапманы.

Уҙған быуаттың 80-се йылдарының икенсе ярты ында “үҙгәртеп ҡороу” тип аталмыш ығы-зығылы осорҙа беҙҙең яҙыусылар ҡоронда ла үҙ ireклеген баш-баштаҡлыҡ, ни ҡыл ам да ярай, тип ҡабул итеүселәр табылды әм, намыҫ менән әхлаҡ сиктәренән үтеп, үҙҙәренә оҡшамағандарҙан үс алырға, уларҙы юҡҡа сығарырға маташты.

Әлбиттә, бөтөн был негатив күренештәрҙә Яҙыусылар союзын ғәйепләргә ярамай. Күп ваҡыт бындай йәм еҙ хәл-ваҡиғалар ижади ойошмала тороусылар әм ижад итеүселәр иркенән тыш була торғайны. Ҡөҙрәтле партия Үҙәк Комитеты үҙенең ҡарарҙарында башҡорт драматургтарына ҡара тап яҡҡан бер мәлдә республика Яҙыусылар союзының ғына быны юйып ташларға көсө етә инеме уң? Совет әҙәбиәте эҙәрлекләүҙәр, тыйыуҙар әм сикләүҙәр шарттарында ла художест-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 7



волы фекерләү әм ижад итеү әләтен аҡлап ҡала алыуы арҡа ында ғына донъяла танылыу яуланы. Быңдай еңел булмаған ынауҙар Башҡортостан Яҙыусылар ойошма ына тупланған әҙиптәр иңенә лә төштө. Беҙҙең ижади союздың етмеш биш йыллыҡ юлы, — ваҡыты-ваҡыты менән икәлтәле булыуына ҡарамаҫтан, үҫеш әм нығыныу юлы ул.

Ҡаҙаныштарыбыҙҙың бары ы хаҡында ла ентекле өйләү өсөн етмеш биш йыл эсендә булған бөтә әҙәби әм әҙәбиәт тирәләй күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы яңы күҙлектән ҡарап сығырға кәрәгер ине. Бер фактҡа ғына иғтибар йүнәлтәйек: уҙған быуат аҙағында башҡорт әҙәбиәте тарихына арнап нәшер ителгән алты томлыҡтың дүрт томы тап ошо осорҙо өйрәнеүгә арналған. Ә бит был фундаменталь фәнни хеҙмәт үҙенең тикшеренеүҙәрен быуаттар төпкөлөнән башлай, меңәр йыллыҡ дәүерҙәрҙе үҙ эсенә ала. Был үлсәмдәр менән сағыштырғанда, етмеш биш йыл әллә ни күп тә түгел, әммә унда сик еҙ тәрән йөкмәтке ыйған.

Илленсе йылдар аҙағында — алтмышынсы йылдар башында Башҡортостан Яҙыусылар союзы Рәсәй Федерацияы ында ғына түгел, ә барлыҡ ССР Союзында иң көслө ижади ойошмаларҙың бере е ине. Шул замандарҙан алып башҡорт әҙәбиәте үҙенең художестволы үҙ үрнәктәре менән илебеҙҙә танылыу яулап ҡына ҡалмай, сит илдәр әҙәбиәт майҙанына сыға.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы өсөн унғы егерме йыл — ҡатмарлы тарихи ваҡиғалар осоро. Бөтә илебеҙ өсөн яуаплы был арауыҡта беҙҙең ойошмабыҙ ижади тормош менән йәшәне. Мәскәүҙә әм ҡасандыр ик еҙ-сик еҙ илебеҙҙең күпселек региондарында Союздар тарҡалған, бүленгән саҡта, — хәйер, Советтар Союзы үҙе лә тарҡалды — беҙ ижади ойошмабыҙҙың бөтөнлөгөн, берҙәмлеген әм йоғонтолологон аҡлап ҡала алдыҡ. Был — беҙҙең әҙәбиәтебеҙ берҙәмлегенең өҙөмтә е, беҙҙең ижади ойошмаларыбыҙҙың уртаҡ маҡсат әм ынтылыштар менән йәшәүенең сағылышы.

Башҡортостан Яҙыусылар союзының ике быуат ара ындағы, меңйыллыҡтар киҫешендәге төп эшмәкәрлек асылы — дәүләтселек өсөн көрәш, республика халыҡтары ара ында дуҫлыҡ әм килешеп йәшәүҙе аҡлап алып ҡалыу, ҡәләмдәштәрҙе бөгөнгө көнгә лайыҡлы яңы әҫәрҙәр ижад итеүгә ил амландырыу ул. Яҙыусы үҙенең көсө сағылыуына лайыҡ миҫалдар бөтә замандарҙа ла етерлек. Бөгөн, Башҡортостан дәүләтселегенең яҙмышы, республика халҡының киләсәге хәл ителгәндә, яҙыусы үҙе айырым мәғәнә, ә әмиәт ала. Шуға ла Башҡортостан яҙыусылары әр саҡ ижтимағи ваҡиғалар эсендә, әр саҡ тормоштоң алғы ызығында. Был — яңғырауыҡ үҙҙәр генә түгел, был — яҙыусыларыбыҙҙың гражданлыҡ йөҙө, намыҫ ҡушыуы.

Туған тел яҙмышы, тарихты объектив ба алау, республиканан ситтә йәшәүсе ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ яҙмышы, тыуған тәбиғәткә аҡсыл ҡараш — был бик ҡатмарлы, көнүҙәк әм кисектерге еҙ мәсьәләләр яҙыусыларыбыҙ тарафынан иң беренсе сиратта күтәрелә.

Республикалағы иң күренекле ижтимағи ваҡиғалар, Бөтә донъя ҡоролтайҙары, Башҡортостан Президентын айлауҙар, күрше региондар менән бәйләнештәр, Мәскәүҙә осрашыуҙар, сит илдәргә командировкалар — бына Башҡортостан Яҙыусылар союзының күп яҡлы эшмәкәрлегенең ҡай ы берҙәре. Ижади секцияларҙа яңы әҫәрҙәрҙе тикшереү, дөйөм йыйылыштар әм съездарҙа фекер алышыу, башлап яҙыусылар өсөн семинарҙар үткәреү, шиғриәт байрамдары, ижад кисәләре, юбилей тантаналары, Өфөлә яҙыусылар осрашыуҙарын ойоштороу әм республика райондарына, күрше өлкәләргә барыу, әҙәби мираҫтар буйынса комиссиялар эше, ҡәләмдәштәрҙең китаптарын нәшер итеүгә ярҙамлашыу, уларҙың йәшәү-торлаҡ шарттарын хәстәрләү — быларҙың бөтә енә лә өлгөрөү өсөн ваҡыт еткерә алмай аптырай ың ҡай ы саҡта. Ҡай ы берәүҙәр өсөн бындай саралар байрам ғына, әммә Яҙыусылар союзында эшләүселәр өсөн — мәшәҡәтле көндәлек хеҙмәт. Союзға яңы ағзалар ҡабул итеү ҡыуанысы әм коллегаларынды юғалтыу,

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 8



уларҙы унғы юлға оҙатыуҙы ойоштороу — былар бөтә е лә Союз иңендә, Союз елкә ендә. Бөтә был эштәрҙе Союз аппаратындағы алты яҙыусы әм бер нисә хеҙмәткәр атҡарып сыға. Ярай әле, халыҡ урта ында әүҙем эшләүсе Стәрлетамаҡ, Сибай, Учалы, Яңауыл, Күмертау ҡалалары региональ яҙыусылар ойошмалары бар. Ҡәләмдәштәребеҙҙең тормош шарттарын яҡшыртыу буйынса Рәсәй Федерацияы ы Әҙәби фондының Башҡортостан бүлексә е хәленән килгәнсә хәстәрлек күрә. Башҡортостан Яҙыусылар союзы, уның идара ы, региональ ойошмалар әр ваҡыт барлыҡ яҙыусыларҙың ижад потенциалына таяна, улар хаҡында ҡайғырта.

Беҙҙең иң ҙур таянысыбыҙ — хөрмәтле Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың әм республика Хөкүмәтенең даими хәстәрлеге. Асығын әйтергә кәрәк: ошондай хәстәрлек әм ярҙамдан башҡа Башҡортостан Яҙыусылар союзының ил амлы ижад тормошон күҙ алдына ла килтереп булмай.

Беҙ был хаҡта бер ҡасан да онотмайбыҙ. Ошо ярҙам әм иғтибарҙан башҡа беҙҙең ижади ойошмабыҙ ғына түгел, уның баҫма ы "Ағиҙел" журналы ла булмаҫ ине. Был — бәхәс еҙ. Әммә Президент әм Хөкүмәтебеҙ "Ағиҙел"де аҡлап алып ҡалырға ғына ярҙам итмәне, улар яңы баҫмаларға юл асты. ик әненсе йылдарҙа миллионлаған тираждар менән баҫылған үҙәк журналдар 3-4 мең данаға ҡалғанда йәи ә бөтөнләй донъяға сығыуҙан туҡтағанда, беҙҙә башҡорт телендә "Аҡбуҙат" әм "Шоңҡар", татар телендә "Толпар" әм "Әллүки" исемле яңы журналдар, рус телендә "Бельские просторы" әм "Истоки" тигән яңы баҫмалар сыға башланы. Мин бында Яҙыусылар союзы ҡатнашлығында донъя күреүсе баҫмаларҙы ғына телгә алдым.

Республика етәкселегенең ярҙамынан тыш башҡорт телендә китаптар нәшер итеүсе донъялағы берҙән-бер "Китап" нәшриәтенең хәлдәре бик ҡыҙғаныс булыр ине. Бәхетебеҙгә, халыҡтың рухи үҫешендә айырым роль уйнаусы ошо нәшриәтебеҙ быndай яҙмыштан йолоп ҡалынды. Әлбиттә, З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә уҡыу әсбаптары ла, ижтимағи-сәйәси баҫмалар ҙа, бүтән төр йыйынтыҡтар ҙа баҫыла. Шунлыҡтан, күрелгән барлыҡ сараларға ҡарамаҫтан, художестволы әҙәбиәттең өлөшө йылдан-йыл ҡыҫыла бара.

Әҙәбиәт — ул Гүзәллек донъя ы, шуға күрә ул бөтә ерҙә лә булышлыҡ итеүгә әм ихтирам-иғтибарға лайыҡ. Милли үҙ сәнғәте дәүләт дотация ынан башҡа йәшәй әм үҫешә алмай. Республика етәкселеге киләсәктә лә Яҙыусылар союзын, милли әҙәбиәтебеҙҙе, милли баҫмаларыбыҙ әм нәшриәтебеҙҙе ярҙамынан ташламаҫ, тип ышанабыҙ.

Үҙ сафында ике йөҙҙән ашыу яҙыусыны туплаған Союзыбыҙҙа бөгөн утыҙға етеп килгән йәш ҡәләмдәштәребеҙ ҙә, ик ән йәште үтеп киткән аҡ аҡалдарыбыҙ ҙа бар. Улар башҡорт, рус әм татар телдәрендә дәртләнеп, ил амланып ижад итә. Оло хөрмәткә лайыҡлы ветерандарыбыҙ Кәтибә Кинйәбулатова, Нәжиб Асанбаев, Ғайса Хөсәйенов, Суфиян Поварисов — үҫеп килеүсе быуындар өсөн үҙ Оҫтаы әм Кеше үрнәктәре ул.

Союзыбыҙҙың етмеш биш йыллыҡ үткән юлын байҡап әм рухи эҙләнеүҙәр, ирешелгән уңыштар хаҡында уйланып алғандан уң, Пушкин кеүек ҡысҡырып ебәрге килгән саҡтар була: "Дуҫтар! оҡланғыс беҙҙең Союзыбыҙ!" Әммә беҙ бер ҡасан да үҙебеҙгә йөкмәтелгән сик еҙ оло яуаплылыҡ, юғары талаптар әм бурыстар, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың бөгөнгө ө әм киләсәге хаҡында онотorға тейеш түгелбеҙ! Беҙҙе уртаҡ бәхет әм уртаҡ ғазаптар — туған телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә, рухиәтебеҙгә хеҙмәт итеү берләштерҙе, берләштерә. Был изге юлыбыҙҙа, әйҙә, ижад ҡыуаныстары юлдаш бул ын әм беҙҙең әҙәби асыштарыбыҙ бөтә ватандаштарыбыҙҙың дөйөм шатлығына, уртаҡ байлығына әүерел ен, ойошмабыҙҙың юбилейы бөтә халыҡ байрамына әйлән ен.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 9





**Мөхәммәт**
**ИЛБАЕВ**

# БАТЫРҘАР

## ПОЭМА

### Тау батыр

*– Эй, Тау батыр, Тау батыр!*
*Ни ҡыл аң да, ау батыр!*
*Буй- ыныңа буй етмәй,*
*Ҡеүәтеңә уй етмәй!*
*Ырыу – аҡыл ҡаҙна ы –*
*иңә өмөт бағланы.*
*Фарман үҙен йыҡманың,*
*Бары ын бергә тупланың.*
*Бары ын бергә тупланың!*
*Кеселәргә күҙ булдың…*
*Ололарға үҙ булдың…*
*Көтмәгәндә ҡырылдың –*
*Изге юлдан боролдоң,*
*Изге юлдан боролдоң!..*
*Ят ырыуға ҡаш аттың,*
*(Ҡаш тигәнем – таш аттың!)*
*Яу күтәреп, тиҙ генә*
*Ябырылдың Иҙелгә:*
*Быуҙың, алып алҡымдан,*
*Йәнен ҡурҙың ялҡында.*
*Урман илен өркөттөң,*
*Донъяларын елкеттең!*
*Үрт алдың да үртәнең,*

---

*Мөхәммәт Илбаев 1939 йылдың 13 мартында Ейәнсура районының Мөхәмәтйән ауылында тыуған. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлай. Тәүге шиғырҙар китабы 1968 йылда донъя күрә.*

*Күмертау ҡала ында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағза ы. Ҡәләмдәшебеҙҙе 70 йәше менән ҡотлайбыҙ!*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 10



*Үртәп, үҙең өркә ең,*
*Үртәп, үҙең өркә ең…*

*Уларҙа ни үсең бар?*
*Ҡайҙан… хәрәм көсөң бар?*
*Тау батыр нишләп аҙа,*
*Әллә аҡылдан яҙа.*
*Әллә аҡылдан яҙа?..*
*– Тау батырҙа күңел киң,*
*Күңел киңгә үҙем киң!*
*Аҙ ам-туҙ ам, танмайым,*
*Әммә шуны аңлайым:*
*Ят ырыуҙар ҡуҙғалды,*
*Йән әсетеп, ҡур алды.*
*Иҙелдәр бик ыулылар,*
*Ҡамап, тынды быуҙылар.*
*Эркелеп үк килделәр,*
*Илебеҙгә инделәр!*

*Баҫты беҙҙе Урман да…*
*Ни етмәй уң уларға?–*

*Үҙ еренә ыймайҙар,*
*Бөлдөрөргә уйлайҙар!..*
*Ҡылыҡтары хаҡ түгел.*
*Беҙ ҙә ерҙә ят түгел.*
*Беҙ ҙә ерҙә ят түгел!*

*… «Бер!» тигәс тә, бер булдыҡ,*
*Бергә булғас, көр булдыҡ*
*«Өс!..» тигәс тә, көс булдыҡ.*
*Ҡалмаҫ элек көлкөгә,*
*Баш бирмәбеҙ ау көйгә,*
*Баш бирмәбеҙ ау көйгә!*

## *Иҙел батыр*

*– Иҙел батыр, иң батыр,*
*Юҡтыр иңә тиң батыр!..*
*Ырыу үҙең боҙманың,*
*Аманаттан уҙманың,*
*Аманаттан уҙманың!*
*Ба а алып, балҡының.*
*Изге эштәр талҡының.*
*Тора-бара баҫылдың,*
*Оторо яҡтан асылдың:*
*Ҡылып ҡуйҙың хилафлыҡ –*
*Иҫ-аҡылға ыймаҫлыҡ,*
*Иҫ-аҡылға ыймаҫлыҡ!*
*Таулы илен ҡаҡшаттың,*
*«Юҡ итәм!..» тип баш ваттың!*
*Әйттең: « еҙме – түр менгән?*
*Тигеҙләйем ер менән!»*
*Урманға ла уҡталдың,*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 11



*Төп-тамырын ҡуптарҙың,*
*Яуың ис ни аямай,*
*Ҡар алана, яйламай!*
*Күтәрелә, ағыла*
*әм дә ҡаты ҡағыла.*

*Бәлә эҙләп бәйләндең,*
*Гона лыға әйләндең.*
*Күңел шомло уй иҙә…*
*Иҙел батыр ни иҙә?*
*Иҙел батыр ни иҙә?..*

*–Иҙел батыр иҙелмәç,*
*Үҙенә үҙ тейҙермәç.*
*Ят ырыуҙар ҡә әрле,*
*( иҙҙек быға ҡәҙәрле.)*
*Таулылыр ҙа ҡурҙылар –*
*Маҙа алып торҙолар.*
*Урман түгел моң оҙҙан,*
*Улары ла боҙолған:*
*Үҙҙәре ( ай!) үрсемле,*
*Үрсей-үрсей күсемле.*
*Беҙҙе ҡамап алдылар,*
*Хафа-яфа алдылар.*

*Күнеп яҙмыш ҡушҡанға,*
*Әүерелдек дошманға.*
*Яу уң ниҙе хуп күрә?–*
*Барлығыңды юҡ күрә,*
*Барлығыңды юҡ күрә!*
*Юҡҡа анлау – кәм етеү,*
*Кәм етеү бит – йән өтөү!*
*Аҡылын йоҡкан аҙма ын, –*
*Туҙҙырырбыҙ ҡаҙна ын,*
*Туҙҙырырбыҙ ҡаҙна ын!*

## Урман батыр

*– Урман батыр, уң батыр!..*
*Булманың ин туң батыр.*
*Бирелдең ҙур хеҙмәткә,*
*Лайыҡ булдың хөрмәткә.*
*Ырыу зарын онотто –*
*ине айлап ул отто!*
*Ышанысын аҡланың –*
*Берҙәмлекте аҡланың,*
*Берҙәмлекте аҡланың!*

*Төңөлгәндәр төркөмө*
*Терелделәр бер көнө.*
*Бүленгәндәр бер булды,*
*Күңелдәре көр булды.*
*ауаланған аралар*
*Сауап ала баралар.*
*Өçтөнлөккә юҡ нигеҙ –*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 12



*Бары ы ла бер тигеҙ,
Бары ы ла бер тигеҙ!*

*Бул а ырыу тәхете,
индә икән бәхете.
Әммә донъя үҙгәрә…
Күҙ тейҙе бит иңә лә,
Күҙ тейҙе бит иңә лә!
Иҙелдәргә барҙың ин,
Илен ҡамап алдың ин.
Аҡ-ҡараны күрмәнең.
Тау иленә үрләнең!
Был ни тигән эшеңдер,
Урман батыр, төшөндөр,
Урман батыр, төшөндөр!*

*–Урман батыр оттормаç,
Яман хәбәр йоҡтормаç.
«Уçал бул аң, аçалар,
Йыуаш бул аң, баçалар…”
Ярап булмай донъяға!
Изге микән бер Алла…*

*Бәйет әйтеп тормайым,
Үҙ көйөмә йырлайым:
Ерҙә урман бер түгел,
Бер булмағас, сер түгел.
Йыйын оңҡот төç бирҙе –
Ошо хәлгә еткерҙе.
Алда ниҙәр бул а ла,
Ҡупҡан янъял ҡуҙ а ла,
Урман уңмай туҡталмаç!..
Шун ыҙ беҙҙә ҡот ҡалмаç,
Шун ыҙ беҙҙә ҡот ҡалмаç!*

## Утйән батыр бар булғаны

*–Утйән батыр, ин ҡайҙан?…
Әллә төштөңмө Айҙан?..*

*үрәтең бар, ының юҡ,
ыҙып алған юлың юҡ.
Аҙып-туҙыр йүнең бар,
Аҙымың юҡ, эҙең бар.
Эҙеңдән ер биҙәрә –
Танымаçлыҡ үҙгәрә!..
ин, ахыры, аҙғын йән!
Ҡарғыш төшкән ҡан ыҙ йән!
ын ыҙ, өм өҙ үрәтең
Үҙ башыңдан, күрә ең:
Ярлыҡамаç гона ҡа
Батҡан ыңдыр бер якта.
Ғибрәт булып ҡалған ың.
Ғибрәт булып ҡалған ың!..*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 13



*Бер икерҙең, йөҙ тулап –*
*Йән өрҙөң бит Күк улап.*
*Боҫрап, болот ҡалҡҡандай,*
*Томра томан ятҡандай,*
*Ҡабарҙың да таштың ин,*
*Йә әннәмгә аштың ин.*
*Йә әннәмгә аштың ин!..*

*Утйән батыр, ин ҡайҙан?..*
*Төштөңмө ергә Айҙан?..*

*Бармы инең төйәгең,*
*Хәтер еҙ йән эйә е?*
*Бул а, ҡай ы төбәктә?..*
*Күҙ көйҙөрөп йөҙәтмә –*
*Юғала ал тиҙерәк,*
*Ғибрәтле ин бигерәк,*
*Ғибрәтле ин бигерәк!..*

*Ер ин еҙ ҙә " елкенә":*
*Көнө – аңҡы-тиңкелә.*
*Көнө – аңҡы-тиңкелә.*

*Утйән батыр:*
*– Әйтә алмайым – ҡайҙан мин…*
*Үҙ-үҙемә хайран мин!..*
*Кемдәр мине бар иткән –*
*Шулар юҡ – ары киткән.*
*Ҡалғанмын мин иректә…*
*Ирек мине илертә,*
*Ирек мине илертә! –*
*Юҡ тыйыусым, юҡ аллам!–*
*Шуға сик еҙ ҡыуанам.*
*Шуға сик еҙ ҡыуанам!*
*Үҙем хужа үҙемә,*
*Баҫыусы юҡ эҙемә.*
*Батша ыҙҙа уй башҡа,*
*Буйлап китер уй башҡа…*
*Ал-ял белмәҫ юлда мин.*
*Ҡайҙа ет әм, шунда мин!*
*Ҡайҙа ет әм, шунда – мин!*
*Күсә йөрөп үҫәм мин!*
*Күсә йөрөп үҫәм мин!*
*Туҡтап тороу килешмәй –*
*Ҡеүәтләнәм йөрөшләй!*
*Ҡеүәтләнәм йөрөшләй!*
*Эҙем ергә уйылмай,*
*Әммә үҙе юйылмай.*
*Бары ын үртәп яндырам,*
*Ҡара тамға ҡалдырам,*
*Ҡара тамға ҡалдырам!*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 14



Утйән батыр – атым шул.
Барлығымдың хаҡы шул:
Ер менән Күк ара ын
Барҙыр баҫып ала ым!
Шул бик ирмәк, шул ҡыҙыҡ,
Зауыҡ миңә был ҡылыҡ.
 әм дә шуны тылҡыйым:
Юғалырға юҡ  уйым!
Юғалырға юҡ уйым!

### Тау батырҙың иңрәүе:

Йә, ила и!.. Ярҙам бир!–
Гона лыңа язаң бир!
Гона лыңа язаң бир!
Тик  ын ғына елкеткән–
Бары ын берҙәй өркөткән,
Таш суҡмарҙы уйнаткан –
Бары ын берҙәй ҡыйраткан,
А , мин икән – Тау батыр.
Ер түренән екергән,
Күк үренә төкөргән,
Сама белмәй шашынған,
Ут яратҡан таш  ындан,
А , мин икән – Тау батыр.
Киң донъяны тар күргән,
Юҡ бәләне бар күргән,
Ят ырыуҙа тап күргән,
Үҙ ырыуын ят күргән, –
А , мин икән – Тау батыр.
А , мин икән – Тау батыр…

Урман тигән ил ҡайҙа?–
Елдән ора – көл ҡайҙа?..
Иҙел эскән  ыу ҡайҙа?
Күктән ора – быу ҡайҙа?..

Тау ишелде, таралды…
Бына – Утйән яралды.
Бына – Утйән яралды.
Уҡынам да арбайым –
Утты тыя алмайым.
Утты тыя алмайым…

Яраштырған яу булмаҫ,
Яулы ырыу ау булмаҫ –
Шуны белгән бар микән,
Шуны белгән бар микән..

Йә, ила и!.. Ярҙам бир! –
Гона лыңа язаң бир!
Гона лыңа язаң бир!

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 15





**Әлфиә**
**ӘСӘҘУЛЛИНА**

## *Күңелемдә Хоҙай йәшәй*

*Кем телендә тибрәлгән*
*Ирешкәндер аңыма:*
*Рәхмәт уҡып, сәждә ҡылам*
*Бары бер Хоҙайыма.*

*Бисмилланан көн башлана,*
*Яҫтыҡтан баш ҡалҡытҡас.*
*Изге Ҡөрьән сүрәләре*
*Түгел ис тә ялҡытҡыс.*

*Йылы ғына ағым, гүйә,*
*Бәүелтә наҙлап, бәпләп,*
*Ҡаршылыҡты ашаҡлатып,*
*Алып китә етәкләп.*

*Күңелемдә Хоҙай йәшәй –*
*Юҡ ис бер ауырлығы.*
*Ғүмерҙе иммәтле итә*
*Ышанысым барлығы.*

## *Теләгеңде ҡабатласы…*

*Үҙең үк еҙ етем үҫкәнгәме,*
*Теләгеңдең, әсәй, иң ҙуры:*
*"Балаларым етем ҡалма ындар,*
*Ғүмеребеҙ оҙон булғыры!"*

---

*Әлфиә Әсәҙуллина 1959 йылдың 2 мартында Ауырғазы районының Үтәймулла ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә эшләй. Яҙыусылар союзы ағза ы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 16



*Ишеткәндер Хоҙай, еҙҙең бына*
*ик әненсе тиҫтә ваҡлана.*
*Хәстәр менән аман янып йәшәү,*
*Уфтаныуҙар аман: "А , бала!"*

*Күҙ уңынан ысҡынмайса үҫтек,*
*Әҙәп-тыйыуҙарға таянып.*
*Өгөт-нәсихәттәр тотҡанғамы,*
*Хәүеф-хәтәр ҡалды айбанып.*

*Әжәл тырнағына эләк ә лә*
*Ҡустым менән еңлем бик иртә,*
*еҙгә булған өйөү, ихтирамды*
*Биш балағыҙ әле йөрөтә.*

*Атай нигеҙенең тартыу көсөн*
*Йөрәк менән тоя әммәбеҙ.*
*Ваҡыттарҙан өҫтөн булма аҡ та,*
*Түбәндә лә түгел әммә беҙ.*

*Заман улышында – улышыбыҙ,*
*Ғүмер ағышында – булмышыбыҙ*
*Ҡанаттарын киргән ҡоштарҙай.*
*Хеҙмәт менән – хәләл икмәгебеҙ,*
*Иңдәребеҙ йөктән бушанмай.*

*Таң күҙҙәре әле асылғансы,*
*Аяҡ өҫтө инде эш өйгән.*
*Атай-әсәй, еҙҙең өлгөгөҙҙә*
*Бала саҡтан быны төшөнгән.*

*Кеше өлөшөнә ҡул уҙмаҫҡа,*
*Ятҡанда ла алтын өйөлөп, –*
*Сабып сығып нәфсе алдарына,*
*Тәрбиәгеҙ баҫты иң элек.*

*Туған телдең ғәзизлеген тәүҙә*
*Күкрәк өтө аша татыныҡ.*
*Тел ҡеүә е биргән сик еҙ ҡөҙрәт –*
*Ҡара төндө еңгән яҡтылыҡ.*

*Тыуған ерҙә йәндәр сихәтләнә,*
*Еле генә ыйпап ут ә лә.*
*Күҙ ҡарашы, йүгереп урман-ҡырҙа,*
*Хискә, тойғоларға үрт ала.*

*Рух тамыры улҡып ут емерә,*
*Йән сөйөлә тойоп иркенлек.*
*Уй балҡышы, ҡыуа ул ағышты,*
*Тыуған ерҙә генә хөр киңлек.*

*Тыуған йортта…*
*… Сүгеп кенә бара атай, әсәй,*
*Болоҡ оуҙар йәнде ҡаната.*
*еҙҙән башҡа йәшәп өйрәнмәнек,*
*Теләгеңде, әсәй, ҡабатла!*
*Теләгеңде, зин ар, ҡабатла…*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 17



## *Минең яҙым*

*Яҙҙар килгәс яҙылып та китәм,*
*Кендек инәй булған яҙ үҙе.*
*Ҡыштың ҡыҫымынан ҡотолған да*
*Гөл-сәскәләр атҡан ер йөҙө.*

*Яр ыу йөрәк яҙын ҡабынғанда*
*Ташҡын ыуҙай өйөү йөрөтә.*
*Аҡ донъяға, матур кешеләргә,*
*Тел тибрәтеп, моңло йыр илтәм.*

*Яҙҙар яр ыу ҡар ыуҙары менән*
*Ергә еңеп, тамыр имләгән.*
*абаҡ оноп ҡыяҡ тирткәс кенә,*
*Емеш бирер сәскә төйнәлә.*

*Ерем ҡөҙрәте был! Мин еремә*
*Түл йәйҙергән өсөн бурыслы.*
*Ҡояш йөҙөн ҡарлы болот ҡаплап,*
*Иҫкәндә лә елдең ҡырыҫы.*

*әммә е лә миңә тәғәйенле,*
*Йөҙ сөйөрөп түгел уҙмалы.*
*Емештәре тамып торған ергә –*
*Йыл әйләнә йәйгә ҡыҙмамын.*

*Бөтә е лә бында үҙемдеке:*
*алҡын ҡышы, яҙ, йәй, көҙ мәле.*
*Миҙгел айын алышынып тора*
*Тәбиғәттең затлы күлдәге.*

*Йөрәк тибешендәй ҡабатланып*
*Яңыра ла тыуа әр бер таң.*
*Көн сыуағы күңелдәрҙәй яҡты,*
*Көмөш ямғыр ибелә болоттан.*

*Яҙҙар менән яҙылам да китәм,*
*Ҡышҡы ойоу ыпырып алғандай.*
*Нур шәлкемен устарына ҡыҫып,*
*Ҡояш үҙе сәскә онғандай.*

***

*Йән аулығын, тән аулығын*
*Еткеле бир ен Хоҙай,*
*Уларҙан тыш был донъяла*
*Әҙәмсә йәшәп булмай.*

***

*Күтәрелеп күҙҙәремә ҡара –*
*Йәшәү көсө унда, дәрт, ил ам.*
*Йәндәреңде имләп торғоҙорлоҡ,*
*икәлтәлә абынып йығыла ың.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 18



***

Сарсауыңдан урт сатнаған саҡта
Йотом ҡымыҙ булыр изгелек.
 ыу ындарың ҡандыр –
мәрхәмәтем
Күңелең ҡыйралышын тергеҙер.

***

Тәҡәтемде ҡорота шул
Ашығыу, ҡабаланыу.
Юғалып ҡалған үҙемде
Ҡыйын шул мәлдә табыу.

***

Йәнде-тәнде, аяҡ-ҡулды
Бығаулаған тыйыуҙар.
Тыйыуҙарға күнеп кенә
Йәшәй алмай ҡыйыуҙар.
Ҡыйыуҙар үҙ-уҡтар ата,
Маңлай яра ҡыйыуҙар.
Ҡыйыуҙарҙың ҡылығынан
Донъялар шаңҡып ҡолар.

***

Уттың да төрлө ө була
Ҡайҙа яныуға ҡарап.
Йөрәктә – йә, өйөү, ағыш.
Янғын сығыуы – харап.

***

Әҙәмдәрҙең холоҡтары ҡыҙыҡ:
Тәүҙә ҡыла – шунан үкенә.
Үкенеүҙәр әллә үҙгәртәме?
Бөтә енә ҡабат ул күнә.

## Әсәйемә

Үҙемдең дә хәлем хәл өҫтөндә,
Әсәкәйем, килде инән хәбәр.
Йәнгенәмде бүлеп бирер инем,
 ин аяҡка баҫа, тип әйт әләр.

Күҙҙәреңдең ҡаралары менән
Төндөң ҡараңғы ын сигендереп,
Бишек тирбәлдерҙең көйҙәр көйләп,
Керпегеңә әлмәк йоҡо элеп.

Йөрәгеңде ҡыҫып устарыңа
Янып-көйөүҙәрең беҙҙең өсөн,
Йөҙҙәреңә япты үрмәксе ау,
Сәстәреңә бәҫтәр үрҙе төҫөн.

Хәлкәйҙәрең нисек икән, әсәй,
Яткан көйө мин дә уфтанамын.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 19



*Осоп ҡына ҡайтыр әмәлем юҡ,*
*ағыштарға батып ут янамын.*

*Итәк кенә тулып үҫтек бит беҙ,*
*Итәгеңде бүҫеп ҡойолманыҡ.*
*Тауҙай ауырлыктар тыуҙыр аҡ та,*
*Ҡош мамығы төҫлө тойомланың.*

*Кесерәйҙе инде ҡупшы кәүҙәң,*
*Йөҙҙәреңдең шиңде ылыулығы.*
*Күҙҙәреңдең нуры көс өҙләнде,*
*Ҡалды бары беҙҙең быуын нығып.*

*Шәмдәй генә ҡалып быҫҡы аң да,*
*Ҡояштай ың бит ин, әсәй, беҙгә.*
*Күтәрелеп ҡаршы атлайыҡсы*
*Атыр таңға, килер көнөбөҙгә.*

***

*Йәшлегемдең наҙы, таты булдың,*
*Тоҙо булып еңдең йәшемә.*
*Ғүмер юлы саҡ башлана төҫлө,*
*Күңел тойған хәтле йәш миңә.*

*Зәңгәр күкте телгән ҡошҡайҙарҙың*
*Ҡанаттарын елдәр аралай.*
*Беҙҙең ғүмер төҫлө, ҡаурыйҙары*
*Ҡош юлына ҡойолоп ҡалалар.*

*Икебеҙҙең күңел ҡылдарынан*
*Моңло бер көй сыға зыңғырлап.*
*Күктең үҙе йәшкәҙәгән күҙле*
*Мөхәббәтле сихри йыр тыңлап.*

## *Тау*

*Ҡатлы-ҡатлы суғырмаҡлы таштар –*
*Күкрәк киреп торған тау ыны.*
*Ҡалай мө абәт ул, ҡалай ғорур,*
*Таш ба адир инде торғаны.*

*Күкрәгендә күпме ағас үҫә,*
*Шау таштарҙан ғына тор а ла.*
*Киң күңелле, оло йөрәкле тау –*
*Итәгенән гөрләй шарлама.*

*Беҙ күргәне генә таң ҡалырлыҡ,*
*Ҡалғандарын бел әк, иҫ ҡорор –*
*Яталыр ул, бәлки, шып-шым ғына,*
*Ҡуйынына алтын ҡыҫтырып.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 20





**Фәтих**
**САЙФРАН**

## Мөхәббәтең менән...

*Мөхәббәтең менән уҡырайт күҙҙәремде,*
*Яндарымдан йыраҡ китмә ин.*
*Ҡолаҡтарым инең үҙҙәреңдән башҡа*
*Бер кемде лә инде ишетмә ен.*

*Мөхәббәтең менән мине йоҡлат әле*
*Үҙең йоҡлай торған түшәгеңдә.*
*Юҡ, юҡ, урын табалмаған был башымды*
*Ҡуйып йоҡлайымсы түштәреңә!*

*Мөхәббәтең менән мине уят, йәме.*
*Башҡайымдан ыйпап тының менән.*
*Ғүмерең буйы мине яратырға*
*Йөрәгемдән иңә урын бирәм!*

***

*Мин бөгөн кем уң ул?*
*Үҙем өсөн йәшәмәгән...*
*Кемдер өсөн йәшәгәнмен –*
*Ни фәтүә йәшәгәндән?*

*Быға яуап тапты микән*
*Беҙгә кәҙәр йәшәгәндәр?*
*... Иң ҡурҡҡаным: был донъяла*
*Тағы ҡабат йәшәүемдән...*

***

*Тау янында үк еп бер ҡыҙ илай,*
*Ҡайнар йәштәр тама күҙенән.*

---

*Фәтих Сайфран 1949 йылдың 25 мартында Балтас районының Бүләк ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Мәктәптә уҡыта, директор булып эшләй. Шиғырҙары республика матбуғатында даими баҫыла килә. Өс китап авторы.*

*Туймазы ҡала ында йәшәй.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 21



*Ҡыҙ янында үк еп шул тау илай,–*
*алҡын шишмә урғый үҙенән.*

*Тауҙар ҡатып ҡалған ағыштарҙан,*
*Ә ҡыҙға уң, ҡыҙға нишләргә?*
*Ниңә ҡайнар икән күҙ йәштәре,*
*Ниңә алҡын икән шишмәләр?!*

***

*әр бер шәхсән бәндә тормошонда,*
*анай кит әң, күпме абына…*
*Юлдарында бәхет маяҡтары*
*Нисә үнеп, нисә ҡабына?!*

*… Кеше уйлап, ҡайсаҡ уйламайса*
*Упҡындарҙың баҫа алдына…*
*Инде бөттөм тигән саҡта тағын*
*Тотоноп ҡала өмөт ялына!*

***

*Кешеләрҙең күҙҙәренә бағам:*
*Бармы икән берәр – ҡайғы ыҙ?*
*Ни ғәләмәт, бойоҡтарҙан туйҙым,*
*ағыш ыҙын килә айлай ы!*

*Тик уң улар бармы тирә-йүндә,*
*Төртөп күр әт, күр әң берәр ен.*
*… Эй, йүләрлек!.. Ситтән эҙләп йөрөйөм…*
*Йәнәшәмдән икән килә ең!*

## *Рәхәт ҡасан килә*

*Йәнкәйемә урын тапмағанда,*
*Ары-бире килеп йөрөгәндә,*
*Шундай саҡта, никтер, үҙ-үҙемә*
*Еп-пәрейҙәй булып күренгәндә –*
*Дуҫым килеп кер ә фатирыма,*
*Рәхәт булып китә йәнкәйемә.*

*Бер нәмәгә күңел ятмағанда,*
*Ашау-эсеү тамағыма үтмәгәндә,*
*Өйҙәгеләр мине ғәфү итмәгәндә –*
*Күршең хәлде бел ә көтмәгәндә,*
*Рәхәт булып китә йәнкәйемә.*

*Аяҡтарым саҡ-саҡ атлағанда,*
*Онотҡанда ҡатын иркәләргә,*
*ис нәмәгә иҫем китмәгәндә –*
*Шундай саҡта таныш ханым кер ә,*
*Рәхәт булып китә йәнкәйемә.*

*Ғүмер боҙо кинәт сатнағанда,*
*Күп нәмәгә аҡыл етмәгәндә,*
*Абынғанда ятҡан кәртәләргә,*
*Бере е лә ғәфү итмәгәндә –*
*Улдарымдан йылы үҙ ишет әм,*
*Рәхәт булыр кеүек йәнкәйемә.*



**Мөнир**
**ҠУНАФИН**

# ТӘҢРЕ ӨРӨК ҠАПҠАНДА

## хикәйә

*Бог слепил Человека из глины и остался у него неиспользованный кусок.*
*– Что еще слепить тебе? – спросил Бог.*
*– Слепи мне счастье, – попросил Человек.*
*Ничего не ответил Бог. Только положил Человеку в ладонь оставшийся кусочек глины.*

Фәйрүзә унғы мәлдә бөтөнләй хәлдән тайҙы. Ашҡаҙан, тағы ла әлеге ашҡаҙан. Әсә ен дә, олата ын да, иң оло аға ын да алып киткән ашҡаҙан. Әсә е алтмыш игеҙҙә хушлашҡайны яҡты донъя менән, ә уға ни бары алтмыш дүрт кенә. Әсә е йәшенә етергә әле ярты тиҫтә ғүмер бар. Иртәрәк йәбеште түгелме был яман шеш? Врачтар ҡапылда йәшерергә тырыш а ла, үҙе лә иҙенгәйне шул. Айҙан ашыу район дауахана ында ятыуы бушҡа ти еңме? Ашауын ашаған да кеүек, тик телең осо нимә ҡапҡанды ла тоймағас уң? Шаулап ултырған имән әле ин, бирешерлек түгел ең, тип таныш врачы тынысландырған була ла, тик, күңеле тәненән алда үнмә ен, тип өмөтләндереүе генәлер шу-ул. Ысынын әйткән әҙәм ҡатындарҙы имәнгә тиңләр инеме, антый, гәҙәттә нескә билле талға оҡшаталар йә, ҡайындай ҡупшы ың, тиҙәр бит. Холҡо менән имәндәй ҡаты, ныҡ, ыҙланыуҙарына түҙер был, тиеүелер. Аңлай, бары ын да аңлай Фәйрүзә. Үҙе түҙер ҙә ул, сыҙар, ҡапыл ғына ынмаҫ. Ә бына Мәргәне, Мәргәне уң? Яңғыҙы бер көн дә тора алмаясаҡ бит ул, кендеге менән йәбешкән ул Фәйрүзәгә. Әле ауылдан дауаханаға килеп йөрөгәнендә, балауыҙ ығып уҡ ултырма а ла, күҙе тулы ағыш ине, тиҙерәк ҡайт инде, ыйырың да ағынған, самауырың тел еҙ ҡалды бөтөнләй, тип амаҡлағаны бына аман ҡолаҡ төбөндә. Тик үҙе ере, мин дә ағындым, тип әйтергә теле әйләнмәй. Белә уны Фәйрүзә, яғымлы үҙ әйтке е кил ә, балалар ымаҡ, ҡулы менән үҙ башын үҙе ыйпай башлай. Әле лә шулайтып оҙаҡ ҡына ултырҙы. Тик

*Мөнир Ҡунафин Ғафури районы Сәйетбаба ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. "Йәшлек" гәзитенең яуаплы сәркәтибе. Яҙыусылар союзы ағза ы. Ике шиғри йыйынтыҡ авторы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 23



йөрәккә шифа булырҙай үҙен генә ҡыҙғанды. Хәйер, ҡыҙғанғандан да түгелдер, ирҙең теленән сығыр татлы тойғо о күҙҙәрендәге моңло ҡарашы аша Фәйрүзәнең йөрәгенә, кире енсә, ауыр уй булып ятты: "Минән ҡал а, нишләр был бахырҡай?"

Өйөн өҙөләп ағынып ҡайтты Фәйрүзә. әр нәмә әүәлгесә кеүек бул а ла, тәүҙә өй эсе ыуыҡ ымаҡ, түбәләге лампочкалар үрән янған кеүек тойолдо. Мәргән мейес тултырып ут яғып ебәр ә лә, берауыҡ аман йылына алмай бер булды. Күңелендәге шик-шөб ә е бар тәнен дерелдәтә ине, буғай. Самауыры ҡайнағансы тәүҙә йайлап ҡына гөлдәренә ыу ибеп сыҡты. Уларҙың хәлен белеште, эй ғүмеркәйҙәәре тип, арғайған япраҡтарҙы ҡайсы менән ипләп кенә ҡырҡты. Өйҙәге тынлыҡты Мәргәндең ғыжылдап йүткергән тауышы ғына боҙғоланы. "Мин юҡта үҙен йүнләп ҡарамағандыр ҙа, ана, тамағына ла бәргән, ней тәмәке ен ташламай, йүләр", – тип эстән генә уҡранып та ҡуйҙы Фәйрүзә.

Сәйҙе тәүҙә тауыш-тын ыҙ ғына эстеләр. Мәргәндең сабыйҙарса балҡып торған күҙҙәре генә табынға йәм өҫтәгәндәй булды. "Минең ҡайтыуыма өйөнгән булып ултырыуылыр инде ғәрипкәйемдең, оҙаҡламай яңғыҙы ҡаласаҡ, уф, ниндәй ынауҙар көтәсәген белмәй әле бахырым", – тип уйлап ултырҙы Фәйрүзә. Икенсе сынаяғын эсеп бөткәс, тирләп китеп, иңендәге шәлен алды. Йөҙө ал ыуланды, күҙенә нур ингәндәй булды уның. Уңарсы булмай, ҡатынының уйсан йөҙөнә беленер-беленмәҫ кенә яҡтылыҡ-йылылыҡ ятҡанын күреп, Мәргән дә телгә килде:

– Ҡай ылай сәй килеште, ин юҡта тәме лә, өҫтәлдең йәме лә юҡ ине, ай, бөгөн килеште, эсеп туйып булмай ҙа а. Йүткереү ҙә томаланғандай булды. Ҡушҡайын яланынан йыйып алып ҡайтҡан мәтрүшкә-фәләнде бешергәйнем, тоя ыңмы тәмен?

Фәйрүзә, тәү ҡапҡандай, сәйен әҙләп-әҙләп кенә йотҡолап ҡараны, үәт ҡыҙыҡ, уйҙарына бирелеп, сәйенең тәмен дә тоймай ултыр ынсы әле. Эйе шул, мәтрүшкә тәме лә ә, ауыҙы тәм тоя бит, тоя бит былай булғас! Ҡушҡайын мәтрүшкә ен дә тойма а инде.

– Ҡушҡайын яланыныҡын алғайныңмы? – тип ихлас йылмайҙы хужабикә. – Әйтәм, тыным иркенәйеп, күңелем бөтәшеп китте шул.

– Иртәгә Ҡушҡайын миндеге менән тәнеңде иҙрәткәнсе сабып та ал ам, бөтөнләй кеше булып китер ең әле.

"Шулай бул а икән дә бит, их, белмәй ең әле ин, Мәргән. Ҡушҡайын миндеге лә, мәтрүшкә е лә ярҙам итмәҫ инде хәҙер ҡатыныңа. Хәләлеңдең үлем яланына табан юл алғанын иҙенмәй еңме ни әҙерәк..." – Яман ыу уйҙарынан Фәйрүзәнең илағы ы килде. Ауыҙы, теле тойған мәтрүшкә тәмен тоҙло йәш тәме менән бутағы ы килмәне. Түҙҙе.

– Үҙенде сабырға кәрәк, бигерәк ныҡ ыуыҡ алдырған ың, – тигән булды, күҙен йәшереп.

Йоҡларға ятҡас, ҡатын иренең уға ғына хас еҫен еҫкәп, йылы ын тойоп берсә кинәнеп, ыйынып, берсә үҙенең балнис еҫе еңгән тәненән тартынып ятты. Мәргән дәртенең теҙгенен бер аҙ ысҡындырып ебәргәйне лә, ҡатынының, мунса ингәс, тигән иркә, ләкин ҡәтғи тауышын ишеткәс, хис-тойғо он тышаулап ҡуйҙы. Яҙ а, мунсала ысҡындырыр тышауын.

***

Фәйрүзәне йоҡо алманы. Үҙенән бигерәк Мәргәнен уйланы. Мин инде үлермен дә ҡотолормын, ә ул уң нисек йәшәр мин еҙ, тигән уй бауырына төштө. Күркәм бит әле ире, бик күркәм, йәшәй е ғүмере алда әле, теге осҡа тиклем бара ы ла бара ы. Сәсе генә ағарҙы ла, бер аҙ йөҙөн сырыштар баҫты инде. Ә йәш сағында ниндәй ине. Ул бөҙрә сәс, ул бө леүән кәүҙә. Торғаны менән кәртинкә бит, тип көнләшеп тә, оҡланып та әйтер ине әхирәттәре. Шөкөр, уҡа ы әле лә ҡойол-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 24



маған иренең, кисеттә дары ы ла етерлек, улай ти әң. Сырайы йәштәрсә, тоҡанырҙай аман да.

Димләп ҡауыштырғайнылар уларҙы. Фәйрүзә егерме бишен артылырға тора. Районҙәктә уҡытыусы булып эшләй. Уҡытыусы булыу ул саҡта бигерәк маҡтаулы, әр кем был өнәр эйәләрен алла урынына күрә ине. Егерме биш йәш. Ниндәй генә абруйлы әҙәм булмағайы, ултырып ҡалған ҡыҙҙар иҫәбендә Фәйрүзә. Төҫкә-башҡа бик күркәм булмағандыр: артыҡ нык ипкелле ине, шуның арҡа ында иң гүзәл мәлде – яҙҙы яратманы. Был миҙгелдә ул себен ярауҙары (кемдәрҙер уларҙы ҡояш ҡыҙсыҡтары тигән була, ысын исеме ана шулай ул ипкелдәрҙең) бигерәк шашып китеп, битте ҡаплау ғына түгел, ҡолаҡ япраҡтарына үрләй торғайнылар. Яҙҙан ҡасып, өйөнә, үҙенә бикләнә Фәйрүзә. Ә мөхәббәт яҙҙа шыта, яҙҙа бөрөләнә, яҙҙа сәскә ата. Өй ҡыйығынан тамған тамсыларҙың яра-там-там тип тамғанын ишетә, кесерткәндең дә сәскәләй күренгәнен иҙенә барыбер ҡыҙ йөрәге. Тик...

ипкеленән бигерәк, Фәйрүзә ирҙәрҙеке кеүек яҫы устарынан ояла торғайны. Был етеш еҙлек бала сағынан эшкә әр еҙлегенән килдеме, әллә нәҫелдәнме инде. Ят кеше менән өйләшкәндә, ике ҡулын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, йә кеҫә енә тыға, йә артына йәшереп бер була торғайны. Был үҙ артынса ҡатын-ҡыҙҙарға хас булмағанраҡ хәрәкәттәр я арға мәжбүр итер ине. уңынан ҡәйнә е: " Урушка-дәфтәр генә тотоп эшләгән бисәнең эшкә эрәте лә, әр еҙлеге лә булмаҫ, тип борсолоуын борсолғайным да, иллә мәгәр ошо көршәк ҡапҡасындай устарыңды күреп үҙ иттем мин ине, килен", – тип арҡа ынан өйөр булды.

Йәм еҙлеге арҡа ында институтта уҡығанда ла, эшләгән осоронда ла яҙмыш уны егеттәрҙең йылы ҡарашынан да, башҡа ынан да мәхрүм итте, “яратам”, “мөхәббәтем” тигән татлы үҙҙәр менән дә иркәләтмәне. өйөү илендә ул, гүйә, бөкрө-ғәрип ҡыҙ булды. Яҙмышына шулай күнә лә башланы. Кемгә димлә әләр ҙә риза ине, буғай, ул саҡта. Аҡйылға ауылындағы колхоз бухгалтерынан яусы булып килгәстәре, уҡыған әҙәмгә уҡыған кешене генә димләүҙәре инде, күрә ең, мөхәббәт тигән юлдаштарына арбаларында урын булмағандыр, йәшәгәндә тиң күрмәҫ барыбер, тип бик уйланғайны. Тик артҡа ла юл юҡ ине. Яңғыҙың ғүмер кисереп, яңғыҙың ҡартайып ултыра ыңмы ни! Буласаҡ иренең ғәрип икәнен белгәс, үҙенең ысынлап та үтем еҙ тауар икәнен аңланы. Ризалыҡ бир ә лә-бирмә- ә лә бәхет еҙ яҙмыш көтәсәк барыбер, тип юраны.

Бәхеткә күрә, юрағаны юш булманы, бәғерле булды яҙмышы. Ә инде сибәр Мәргәнде күргәс, үҙен ниңәлер йолҡош өйрәккә оҡшатты. Тиң түгел ине улар өйөү илендә: бере е – аҡҡош, икенсе е – йолҡош... Тик аҡҡошо сатан ине. Ә осар ҡошҡа аяҡ нимәгә – ҡанаты имен бул ын. Кәм енде, бик кәм енде тәүҙә Фәйрүзә. унғараҡ, ҡулдан осоп китер, тип ҡурҡты. Әммә аҡҡошо ярҙарына тоғро ҡалды.

– Ҡарасҡы кеүек йәм еҙ кәләште нимә тип алдың икән ин, Мәргән? – Был ораuҙы йыш бирә торғайны ҡатыны иренә.

– Күрә белмәгәндәргә генә йәм еҙ ул. Ҡалаҡҡа алып йоторлоҡ өймәлелектең үҙе бына. Ә өймәлекле өйәк тамаҡҡа тормай ул, – тип ихлас көлөп ебәрә ине Мәргән.

Иҫлә әң, ваҡытында, мәргәнлегең ҡайҙа булған, Мәргән, атҡан уғың аҙ баҡа - ына барып ҡапҡан түгелме, тип уның йәнен үртәүселәр булмаған ти еңме? Булғанды-ыр...

Ул саҡта, кире енсә, бөтә ағзалары теүәл, юғары белемле мөләйем ҡыҙ алдында Мәргәндең үҙен нисек кәм енеп, оялсан тотоуын Фәйрүзә белмәне лә. Юҡ, ире тыумыштан зәғиф булмаған. Әрме хеҙмәтендә ҡаза күреп, бер аяғын өҙҙөрөп ҡайтҡан ул. Госпиталдә ятҡанда өйгән ҡыҙының үҙен ташлауын ишеткән. Ғәрип

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 25



ир миңә кәрәкмәй, тип әйткән, имеш, теге е...

Аяғын ғына түгел, рухын ҡаҡшатып, тормошҡа, ҡыҙҙарға булған ышанысын юғалтып ҡайтҡайны Мәргән. Бер йығыл аң, ҡалҡыныуҙары ауыр икән шул. Яҡындары Мәргән алдында, кәләш, ҡатын кәрәк, тип үҙ ҡуҙғатырға ҡурҡыр булдылар. Был үҙҙәр уны сығырынан сығарҙы. Ул, үҙемә мәңге тиң тапмам, мин Квазимода, тип әм шуға ныҡлы ышанған бер иҫәргә әйләнгәйне, шикелле.

Бара-бара ваҡыт үҙенекен иттеме, йөрәктәге яралар бер аҙ бөтәштеме инде — үҙендә көс тапты кисәге алдат, бухгалтерлыҡҡа уҡып сыҡты, шунан ныҡлап эшенә сумып, үҙ эшенең оҫта ына әйләнде. Колхоз рәйесе: "Районда үҙәктәге ултырып ҡалған бер уҡытыусыны димләйек әле үҙеңә, ҡустым", — тигәс, ис көтмәгәндә, маташтырып ҡарағыҙ уң, тип ҡапыл риза булды ла ҡуйҙы. Уның сәбәбе ябай ине. Әйтелгән өйләмдә, юҡ, юҡ, тәҡдимдә түгел, әйтелгән үҙҙәр теҙмә ендә Мәргән өсөн үтә лә ҡәҙерле мәғлүмәт бар ине. Уҡытыусы булыуы ла, димләүҙәре лә әүрәтмәне уны. "Ултырып ҡалған" — уның хәленә инерҙәй иң татлы үҙ ошо ине. Утыҙын ҡыуған егеткә, тимәк, ул ғына тиң булырға мөмкин. Ниңәлер Тәңре уға шулай тип әшкәртте, шуға инандырҙы ла ҡуйҙы. Ә Фәйрүзәнең үҙен күргәс, йоҡлар йоҡо он, ашар ашының тәмен юғалтты ҡарт егет. Күрер күҙгә ғашиҡ итерҙәй ылыулығы булма а ла, ҡарашындағы тоғролоҡмо, артыҡ баҫалҡылыҡмы, әллә уның да яңғыҙлыҡтан арып, тик иңә генә мохтажмын, тигән ҡатын-ҡыҙға ғына хас йәлләткес, ым ындырғыс сихырмы — белмәҫ ең, бер тылсым көсө бар ине ҡарт ҡыҙҙа. Тәү күреүҙән үк уға тартылды Мәргән, уны юғалтыуҙан ҡурҡты. Алма ныҡ бешкән: өҙөлөп төшөр ҙә сереп юҡҡа сығыр. Юҡ, кемдер ауыҙына ҡабасаҡ түгел, ә серейәсәк бына. Уның ымаҡ... Районда үҙәккә барып танышып ҡайтҡас та, атаәсә ен аптыратып, иртәгә үк яусы ебәреүҙәрен, ҡыҙ риза бул а, никахты тиҙләтеүҙәрен ораны. Алма бешкән сағында тәмле була...

***

— Йәш саҡты уйлап ятам, Мәргән, — Фәйрүзә иренә еңелсә генә ҡағылып алды.— Бигерәк йәм еҙ инем бит ул мин. Нимә тип мине алырға булған ындыр. Ултырып ҡалыр был Мәскәй, тип йәлләнеңме икән, ә?

— Йәм еҙ бул аң да, тәмле ең шул... иртәгә мунсала... — тип мығырҙаны ире йоҡо аралаш.

Тәүге никах төнөн уйла а, Фәйрүзәнең тәне әле лә земберләп китә. Еңелсә ойошторолған табындан уң аулаҡ өйгә алып барҙылар. “Алып барҙылар” тигәс тә, күрше енең таҫма таҡ аң да талымланмаҫ бейә ен еккән булып, йүкә ҡабыҡлы йөк арба ында шығыр-шығыр килеп, дүрт өй аша үттеләр инде. Көнө буйы йәштәрҙе оҙатып йөрөгән ҡояш арығайны, офоҡҡа килеп ыйынып, күҙен йомам-йомам тип кенә тора ине...

Бер-бере ен икенсе тапҡыр ғына күргән ике йүләр — хәҙер шулай тигән була ың инде — нишләргә белмәй, тәүҙә ҡулдарын тотошоп киң икелә тын ғына ултырҙылар. Үҙҙәренсә яҙмыштарына күнеп ултырыуҙары шул булғандыр инде. Үҙҙәрен, хәлдәрен аңларға тырыштылармы, әллә ваҡытты тойоуҙары булдымы. Ваҡыт менән үлсәшмәҫкә улар был мәлдә бәхет тәмен ныҡлы ғына татып та өлгөрмәгәндәр ине әле. Бәхетлеләр генә уның менән бик иҫәпләшеп бармай торған. Тынлыҡта тек-тек килгән сылбыр баулы сәғәт тауышы ҡолағын ауырттырғайны шул саҡ Фәйрүзәнең. уңынан был йортҡа килгән айын шул сәғәттең сылбырын тартырға яратты, ваҡыттың ис кенә лә туҡтамауын теләне, ил генә текелдәүенән күңеленә ятышлы моң да тапты.

Ултыра биргәс, ҡыйыулығы етепме, әллә, ниҙер әйтергә тейешмендер, тип уйлапмы:

— Хәҙер беҙ бер-беребеҙгә хәләл инде, Хоҙай ҡаршында ла, кеше алдында ла, —

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 26



тип Мәргән уны ҡосағына алды. – Тиң күр әң, башҡаларҙан кәм булып йәшәмәбеҙ.

Берауыҡ тағы ла тын ултырғас, ҡуҙғалды ла:

– Тәүге төнөбөҙҙө бөгөн үткәрергә яҙған инде, хәләлем... уң булып китте, ин ята тор, мин хәҙер, – тип тәмәке тартырға сыҡҡан булды.

Фәйрүзә яңғыҙы ҡалғас, нишләргә белмәй, тубыҡтарын ҡосаҡлап ултыра бирҙе. "Тиң күр әң, ти. Тау янында тау булып баҫырмын, дала янында дала булып ятырмын да ул. Ә ин?.." Шунан ҡапыл ҡалҡынды, ҡолаҡты ярып алып барған сәғәттең сылбырын талғын ғына тартып ҡуйҙы: "Беҙҙең ваҡыт башланды, уртаҡ ваҡыт," – тип шыбырҙаны. Егет менән ҡыҙға тип әҙерләнгән ап-аҡ түшәккә оҙаҡ ҡарап торҙо ла, байрам күлдәген алып, тартынып-тартынып ҡына атлас юрған аҫтына инеп ятты. Кейәүен көттө. ыуыҡ булма а ла, ҡалтыранырға тотондо. Юрғанды мыҡтып-мыҡтып уранды, иренең ятыр урынын устары менән йылытты. Ниндәйҙер мөғжизә көттө.

Тәмәке еҫе менән бергә ҡыуара башлаған үләндәрҙә йәй еҫен алып ингәйне өйгә ире. Ҡулында – бер таяҡ әрем менән бергә таждары ҡойолам-ҡойолам тип торған сәскәле ике абаҡ үлән. Ҡараңғыла әрмәнеп табыуын әйт әле.

– Янына сәскә менән индем әле, Фәйрүзәкәй, – тигәйне Мәргән, ихлас йылмайып. Эй, ҡыҙ саҡ, антый саҡ, әллә иғтибар эсенә килешмәнеме, әллә үҙенең ҡиммәтен белеүе булдымы, Фәйрүзә:

– Сәскә тигәнең әрем түгелме? – тип баллы кискә бер семтем тоҙон өҫтәп ҡуйҙы.

– Әремдең дә үҙ йәме, үҙ тәме, – тине лә кейәүе гөлләмә ен аҡ ҡына мендәренә алды. Ана бит, иҫкә төштө, бына шул әрем еҫе, башты әйләндерер үҙенә генә хас еҫ бөгөн күңелде елкендереп, берсә ағышҡа алып, танау осон ҡытыҡлап тора бит. Тәүге никах төнөн хәтерләтеп.

Мәргән уттарҙы үндереп, туҡ-туҡ килеп кәләше ятҡан ике ситенә килеп ултырҙы ла сисенә башланы. Тын алырға ла ҡурҡып ятҡан ҡыҙ тағы ла нығыраҡ ҡалтыранырға тотондо. Шаҡ итеп иҙәнгә төшкән тимер киҫәге тауышына ул ғына түгел, Мәргән үҙе лә иҫкәнеп китте, шикелле: " Уй, Алла, тимер аяҡ та тыңлашмаған була", – тип ҡуйҙы. Уның тауышы нисектер ҡалтыранып сыҡҡан төҫлө тойолдо Фәйрүзәгә. Әллә үҙе өшөгәнгә... Ауған протезын икегә өйәп ҡуйғас, ҡыйыу ыҙ ғына юрған аҫтына инде Мәргән. "Өшөп тә өлгөргән ең инде әллә, ҡәҙерлем," – тип хәләлен үҙенә ҡыҫты. Битен, сәстәрен ыйпаны. Ҡулының ҡытыршылары тәүҙә ҡыҙҙың битен еңелсә әсеттереп сыйған кеүек бул а ла, бара-бара ҡытыҡлап, әле бығаса тоймаған рәхәтлек бирҙе. Иренең ирендәре маңлайына, күҙенә тейгәс, Фәйрүзә тәне буйлап, ҡалтыраныуҙы ҡыуа-ҡыуа, тулҡын-тулҡын йылылыҡ йүгергәнен тойҙо. Мәргәндең ҡайнар тыны үҙенең иренենә ҡағылғас, күҙҙәрен йомдо, күбәләк булып елпенеп-елпенеп осҡо о килде... Осҡо о килде, ә үҙе нығыраҡ кейәүенә ыйынды...

"Ой! А-ай! Юҡ! Юҡ? Ҡурҡыны-ыс..." Ике донъя бер бөтөнгә генә әйләнә башлаған, бар тәне, бар күҙәнәге менән Мәргәнгә ыйынған ғына мәлдә, Фәйрүзә ҡапыл иренең ул аяғы урынында аҫ яҡтан бушлыҡты тойоп, нисек икереп торғанын да иҙмәне. Ай яҡты ында ҡыҙҙың шарҙай асылған күҙҙәрен, ап-аҡ булған йөҙөн күреп, бер ни аңламаған Мәргән үҙенсә көйәләнде:

– Тәүҙә ҡурҡыта ул, ҡурҡыта, Фәйрүзә. Ҡыҙҙан ҡатын булыуы еңел эш түгел бит. – Бар йыуатыуы ошо ине. Вә-әт, тәжрибәле ир-егет ни! Эй, уңынан, нисә йылдар йәшәгәндән уң, Мәргәндең, еңел эш түгел ул, тигән үҙен мәҙәккә алып, бер лаҡапҡа әйләндергәйнеләр.

Фәйрүзә тынyслана алманы ул төндө.

– Яҡын килмә, Мәргән, яҡын килмә, үҙеңдән түгел, аяғыңдан, эйе, эйе, буш-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 27



лыҡтан, юҡ аяғынддан ҡурҡам, – тип икенсе урынға барып ултырҙы.

Мәргән бер үҙ ҙә ҡатманы, ныҡышманы ла, урынынан да ҡуҙғалманы. Нисек тороп ултырған – шул килеш ҡалды. Хатта тәмәке тартырға ла сыҡманы был төндө. Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисереп ултырғандыр ир заты. Шулай ике е ике урында ултырып тәүге таңдарын аттырғайны улар.

Аҙнанан ашыу ҡыҙ менән егет булып йөрөнөләр әле. Бер-бере енә ыйыныр, бер-бере енән йылыныр әмәлен дә тапманылар, сара ын да белмәнеләр, баҙнаттары ла етмәне. Шулай ҙа ғәйрәтле, тәүәккәл тоҡомдан ине шул Мәргән. Тәүге никах төнөнән уң аҙна тирә е үткәс, ер- ыу күреп киләйек, тип атын екте. Ҡушҡайын яланына, сабынлыҡтарына алып китте. арысай урталары бул а ла, йәй йылы- ы, йәй наҙы китмәгәйне әле. Барып еткәс тә, бесән мәлендә ҡалған ҡыуышты рәткә килтерҙе, тышҡы яҡты япраҡлы ағас сыбыҡтары менән бөтәштерҙе, эсенә кипкән йәшел бесән, үндек түшәне, арбалағы кәрәк-ярағын индереп ҡуйҙы ир кеше. Ҡыуышты уратып дилбәгә, йүгән, ҡамыт-ыңғырсағын алды. Уңарсы булмай, тағанға аҫҡан сәйнүктә сәй ҙә ҡайнап сыҡты. Мәргән ҡырағай сейә, ҡарағат япраҡтары өҙҙө, мәтрүшкә яңынан сығырға тейеш, тип уны эҙләп бер булды. Фәйрүзә үҙе бөтнөк, тәлгәш-тәлгәш балан, кипкән муйыл табып өлгөргәйне инде. Тирә-яҡҡа кипкән бесән еҫе менән бергә урманда ғына була торған усаҡ еҫе менән үләнле сәй еҫе таралды. Бермә-бер кәйефтәр күтәрелде, күрөшкәләге эҫе сәйҙе уртлағас та йөҙҙәргә йәйге миләш төҫөндәге ал ыулыҡ яғылды. Тирә-яҡҡа оҡланып ултырҙылар, ҡыҫыр-ҡыҫыр ғына тауыш биргән ҡоштарға ҡолаҡ алған булдылар, тынлыҡҡа сумған ағастарҙың буй- ынын күҙләнеләр...

– Гүзәл бит был тормо-ош, ай, күркә-әм, – тип Мәргән кәләшенең күҙенә баҡты. өйгәненең күҙҙәрендәге ҡәнәғәтлек осҡондарын, был тормошҡа Фәйрүзәгә генә хас бер яғымлы наҙ менән бағыуын күреп, берсә икереп тороп бейеге е, берсә хәләлен ҡулына алып әйләнге е килде. Дәртен йүгәнләр, дарманын тышап ҡуйыр хәлдә түгел ине ир заты. Ул ҡапыл Фәйрүзә ен киң ҡосағына алды ла шашып-шашып үбергә тотондо. Көттө был мәлде, түҙем еҙләнеп көттө кәләше лә: тартынманы ла, ҡаршылашманы ла, иренең ихтыярына бирелде. Мәргән, өйөп туйғы - ыҙ кәләшенең ыҡҡа килеүен тойоп, килбәт еҙ генә ҡалҡынды, шунан уны ҡулына алды ла, бер яҡҡа ҡыйшая биреп ултанлай- ултанлай, ҡыуышҡа инде...

Ике е лә шыр тиргә батып уянды. Күңелдәрендә әйтеп бөтөргө еҙ ләззәт биреүсе мәғәнәле бер наҙ уйнай ине. Бер-бере енә ни тиклем яҡын, ни тиклем ҡәҙерле икәндәрен белгертеүсе бер тойғо бөрөләнгәнен тойоп уянды ысыҡлы был таңда ике йәш йөрәк.

– Ҡыуышта ла ожмах тигәндәре ошо микән ни, Фәйрүзәкәй, – тип бышылдағайны өйгәне. Йылы түшәк булған, хан арайындағы ебәк-мамыҡтарға ла алыштырғы ыҙ урман бесәне еҫе, уларҙы оло донъя ығы-зығы ынан ҡурсалаған сыбыҡ япраҡтарының төндә күргән татлы мөхәббәт уйыны хаҡында әҙәп аҡлап ҡына шыбырлашыуҙары, ҡыуыш артындағы донъяның ниндәйҙер бөйөк эш көткәндәй саф та, моңло ла ысыҡҡа батып тынып ҡалыуы – бөтә е лә оло мөхәббәткә фатиха кеүек тойолдо Мәргәнгә лә, Фәйрүзәгә лә.

"Тор-ройыҡ! Тор-ройыҡ..." Ҡапыл ишетелгән ым ындырғыс тауышҡа иҫкәнеп китте ике е лә. Мәргән, тора алып, ҡыуыш ауыҙынан тышҡа баҡты. "Торналар!" – Күҙҙәрендә осҡон уйнатып, тышҡа атылды. Йөрәге дөп-дөп типкән Фәйрүзә лә ҡалҡынды.

– Э- е- әй, торналар, яҙын миңә ул алып ҡайтығыҙ, ишетә егеҙме, беҙгә ул кәрәк,– тип ҡоштар артынан ултанлап йүгергән иренең артынан ҡарап, ҡатын йылмайҙы. "Ҡалай тиҙ генә малайлы булмаҡсы был. Ыштаныңды күтәр тәүҙә. Үҙеңә торналарҙан аяҡ та ора аңсы, ғәрипкәйем",– тип ҡыҙғанып торғанын иҫләй әле Фәйрүзә. Мөғжизә артынан сапҡан малайҙай, Мәргән үҙен аямай, и-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 28



керәңләп торналар артынан йүгерҙе лә йүгерҙе, нимәгәлер эләгеп йығылып та китте, тороп тағы баҫты, йыраҡлашып өлгөргән ҡоштарға оҙаҡ ҡул болғап торҙо. Торналарҙан бигерәк иренән күҙен алмаған ҡәҙерле е: "Ярай, хәҙер үҙ ирем, ниндәй генә ғәрип бул а ла ек енмәм, бауырыма баҫырмын... Йүгер ен, торналар артынан да сап ын әйҙә, арғымағым минең ", — тип ҡуйғайны.

***

Ә торналар Мәргәнгә тоғро ҡалдылар. Килә е йәй башына — ысынлап та малай, ә уңғараҡ, тағы ла бер улдары булып, әкренләп ике е лә ҡул аҫтына инә башлағас, Мәргәнгә аяҡтар ҙа алып ҡайтты торналар.

...Ат арба ында икәү е яй ғына келтер-келтер әлеге шул Ҡушҡайын яланына бесәнгә китеп барыуҙары. Баш бухгалтер булып эшләгән сатан Мәргәнгә колхоз хан заманынан ҡалған ҡарт бейәне бөтөнләйгә биреп ҡуйғайны. Ул осорҙа хужалыҡта шәберәге булмағандыр ҙа инде. Хрущев, ил дилбегә ен үҙ ҡулына алғас, быуаттарҙан-быуаттарға ил генә түгел, донъя йөгөн өйрәп килгән йылҡы малына әллә ниңә ҡаныҡты бит, ауыл кеше енең ҡулынан дилбегә ен тартып алды. Йәнә е, бөтә ен дә техника атҡара, ат — тәүтормош ҡалдығы ул. Атҡара атҡармай ни, атаң башы. Түлле тупраҡ өҫтөндә ат дағаı ы эҙен күрмә ә, ергә береккән әҙәмдең ашлығы уңмаҫ та уңышы булмаҫ, ыбай йә арба-санала бер елеп үтмә ә, дәрте ҡуҙғалып, күңеле лә елкенмәҫ. Ат ыҙ башҡорт сатан да, арҡа ыҙ ҙа.

Бер аҙым баҫҡансы икенсе тояғын эт ашар ялҡау бейәгә ихлас өйөндө Мәргән. Йәйен дә, ҡышын да йыбанманы, егеп сығып китер ине. Ҡыуыуға ла, әүрәтеүгә лә бармаған, сыбыртҡы телен дә аңламаған мәхлүкте әр саҡ үҙ яйына ҡуйып, барыбер барыр еренә етеп, эшләр эшен атҡарып өлгөрә үҙе. Йөрөп ҡайтҡас, сыбыртҡы абы менән протезына уғып, бейәм булма а, был ағас саптар менән нисек өлгөрмәк кәрәк, тип ярҙамсы ына оло алырға ла онотмай. Ауыл кеше е бейә ен йомош-фәләнгә ора а, ихлас биреп торор ине. "Ипләңкерәп тотон инде, артыҡ шәп сап а, осоп ҡала күрмә", — тип "инструкция" ла бирергә онотмай. Бейә е ҡуҙғалып киткәс, шөкөр, башҡаларға ла кәрәге булғас, кәре бөтмәгән, көнө бөтмәгән әле, тип йылмайып ҡуя Мәргән.

Эйе, келтер-келтер бесәнгә китеп барыуҙары.

— Барыуҙары яй бул а ла, баҫыуҙары яғымлы бейәмдең, шулай бит, Фәйрүзә, — ойоп барған ҡатын иренең тауышына уянып китте.

— Әйтә е лә түгел, артыҡ яғымлы, барып еткәнсе ҡояш байып ҡуйма а ярар ине, — Фәйрүзә иренеңме, әллә бейәнеңме баҡса ына таш ташламай булдыра алманы. Ни ти әң дә, йәйге сыуаҡ көндөң әр сәғәте ҡәҙерле. — Шәп бар а, ана, малайҙарың ултырып алған булыр ине.

Ысынлап та, бере е уны, икенсе е игеҙе менән барған ике улдары алдан оло юлдың саңын борхотоп юртып бара. Бейә тиҙлеге уларҙың күңелендә яткан эйәрле-йүгәнле аҡбуҙаттыҡы менән бер түгел шул. Ҡаҡ арбала эсәк-бауырҙы елкетеп барғансы, табанда ер йылы ын тойоп, саң борхотоп барыуы шәберәк тә.

"Тпру" тигән тауышҡа Фәйрүзә тағы иҫкәнеп китте. Мәргән ҡапыл атын туҡтатты. Арбанан төштө лә оло юлға тубыҡланып ултырҙы:

— Фәйрүзәм, ҡара, Фәйрүзәм, — тип юлға күр әтте. Бер ни аңламаған ҡатын аяҡтарын яҙып алды ла иренә баҡты. Саңды услап алып, шашып-шашып башына ҡойған, битен ыуған Мәргән аман өйләнеүен белде:

— Ана, ана, китеп бара... баралар...

— Нимә китеп бара? Нимә булды инә, Мәргән?— Фәйрүзә хәүефләнә төштө.

— Китеп бара, минең аяҡтарым китеп бара... Ике е лә иҫән, ике е лә теүәлдәр!..

Юлға баҡҡайны, Фәйрүзә лә тып туҡтап ҡалды. Оло юлдың саңында улдары-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 29



ның йәтеш кенә аяҡ эҙҙәре ырланып, йылылыҡ, камиллыҡ бөркөп ята ине.

Саңға ятып тулаған, аҡылдан яҙырлыҡ хәлгә еткән Мәргәндең керпектәре, бите ап-аҡ ине. Ә күҙҙәре яратҡан уйынсығын тапҡан сабыйҙыҡы кеүек шундай нурлы, өймәлекле. Шул саҡта Фәйрүзә саңдың аҡ төҫтә икәнен белде. Бығаса ул ер-тупраҡ, саң-мәтене ҡара йә оро төҫтә генә тип күрә ине. Саң ыу менән ҡауыш а ғына ҡара төҫкә инә икән. Ана бит, Мәргәндең битенән ике ҡара бормалы уҡмаҡ төшкән. Шатлыҡтан ул. Ҡояшҡа нисек ялтырайҙар! Нурҙан ҡойолғандармы ни?!

Уңарсы булмай, малайҙар, ни булды, күсәр ындымы әллә, тип арба янына йүгереп килделәр. Аталары уларҙы ҡосаҡлап алды:

— Арба күсәре нимә, ер күсәре ныҡ бул ын, балаҡайҙарым.

Ҡуҙғалып киткәс тә, тулышҡан хистәренән оҙаҡ тынысланa алманы Мәргән:

— Ой, Фәйрүзә, ҡалай антый мин, үҙемде сатан, ғәрип тип йөрөйөм тағы, мин бит аяҡлы ғына түгел, ҡанатлы ла хәҙер. Әйҙә, Катерина, елдәй еләйек әле, — тип ныҡ итеп дилбегә ен тартты.

— Күңелең зәғиф түгел, күңелең бөтөн бит инең, иҫәрем, — тип Фәйрүзә иренә ыйынып ултырғайны шул саҡ.

***

Малын ҡарағас, Мәргән ҡоро ғына имән утындарҙы айлап алды. Уларҙы ҡул сана ына алып, бау менән нығытып бәйләне лә, көрт яра-яра, бәрәңге баҡса ының артҡы ыҙанында урынлашҡан мунса ына килде. Айҙан ашыу яғылғаны юҡ инде. Бисә е балниста саҡта яңғыҙының мәшәҡәтләнге е килмәне, күршеләренең яҡҡан мунса ының тантырында йыуынып йөрөнө. Ишек алдын ярай ы уҡ көрт баҫҡайны, шуны күрәне. Мунса эргә ендәге ҡоҙоғона юл ярҙы. Күп йүткереүҙән хәле бөттө, ғүмерҙә булмағанса, ултырып-ултырып хәл алғыланы. Тирләп-беш ә лә, эшенән туҡтап, кейемемде алыштырайым, сәй эсәйем бер юлы тип, өйөнә ыңғайламаны. Тышауын ысҡындырыу дәртеме, мунса ин ә бисә е элекке хәленә ҡайтыр, тигән ышанысмы уға, кире енсә, көс бирҙе. Шулай ҙа мунса ын тоҡандырып ебәреп, соландағы ширлеккә тәмәке тартырға ултырғанда аяҡ быуындарының ҡалтыраныуын тойҙо. Күңелендә, ҡартаям, ахыры, кәрем кәмей бара, тигән шик тыуҙы.

Ултыра биргәс, ҡапыл ғына мунсаны өйөнән йыраҡыраҡ ултыртҡанына үкенде. Элек йола ы шулай ине. Мунса башҡа йорт-ҡуранан айырылып торҙо. Ҡояш байығас, ул шайтан-пәрейҙәр оя ына әйләнә, өйгә яҡын булмауы хәйерле тип, ата-олатайҙар ситкәрәк күтәреп ҡуйҙылар. Хәҙер халыҡ, ундай им-томдарға ышанмағас, өйөнә терәтеп үк ҡуя. Мәргән дә ышанмай, ләкин ул мунсаға артыҡ нескә ҡарашлы булды. Уны таҙарыныу, керҙән, арығанлыҡтан арыныу урыны ғына тип түгел, ә бөлгәндең күҙен астырыр, бөгөлгәнде аяҡҡа баҫтырыр йорт тип ҡабул итте. Унан тағы мөхәббәт уйыны өсөн аулаҡ төйәк тә бит ул. Көндәлек мәшәҡәт дөрләгән ерҙән мунса ситтәрәк бул а йәтеш ине уға әр саҡ. Тормоштан арыныу, тормоштан ял итеү, тормоштоң үҙе менән ҡалыу утрауы булырға тейеш мунса. ин мунсала саҡта бер кем дә ҡамасау итмә ен.

Был урынды үҙе айланы ир кеше. Ыҙанда ултырған зәғиф кенә бер имән дә үҙенә тартҡандыр, бәлки. Йыл да өрөлөп килгән баҡса ы артын бер нисә йыл ял иттереп, үлән сәстереп, сиҙәм ер эшләтте. Ошо урынға килтереп күтәрә башлағас, йыраҡ булмаҫмы, тип Фәйрүзә шик белдереп ҡуйғас, Мәргән:

— Мунса ғына түгел, был беҙҙең мөхәббәт йортобоҙ ҙа. Сит күҙҙәрҙән йыраҡ булғаны әйбәт, — тигәйне, мут йылмайып.

— Кит, иҫәр, мунсамы уң мөхәббәт йорто? Ен-пәрейҙәрҙең туй урыны, ти әң бер хәл.

— өйөү ҡайнар бул а, шайтандар түҙмәй ҡасып бөтәсәк, — тип ҡысҡырып

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 30



көлдө Мәргән ул саҡ.

Мунсаның эргә енә сиртмәле ҡоҙоҡ та йүнләп ҡуйғас, — йәйге көндәрҙә бигерәк тә — сәхрәлә йөрөгән кеүек була торғайны. Ҡоҙоҡтоң ыуы тутланма ын тип, тәүҙә мунсаны йышыраҡ яҡтылар.

— Ҡоҙоҡтан ыуҙы ни тиклем йыш ал аң, ул шул тиклем таҙараҡ була. ыуға ихтыяж кәме ә, ул ҡорой, яйлап үлә, ҡоҙоҡ мүкләнә, — тип аңлата ла Мәргән Фәйрүзәгә, тағы мунса яғырға тотона. Бисә е, бөгөнгә кәрәкмәҫме әллә, тип ҡаршы төшә башла а, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып өҫтәп тә ҡуя:

— Кеше лә шулай... Мөхәббәтте әйтәм... Ихтыяж кәме ә, ҡорой...

Аҙаҡтан шул тирәлә йәшелсә-емеш тә үҫтерә башлағас, ыу менән бигерәк кинәнделәр. Бара-бара мунса тирә е ныҡлап ял урынына әүерелде лә ҡуйҙы шулай. Зәғиф имән дә, донъя ҡотон тойоп, тармаҡланып-йәйелеп үҫте лә китте.

Ваҡытында әр шәмбе, ауыл халҡын аптыратып, улар мөхәббәт көнөн дә үткәрҙеләр инде. Өс-дүрт сәғәт инәләр ине мунсаны, рәхәте, кинәнесе ни генә! Ауылдаштары көлөп, шунда ыйыр быҙаулата ығыҙмы әллә, тип мәрәкәләй ҙә торғайнылар. Хәҙер улай уҡ шашып булмай, йәш менән бергә самаға ла өйрәнелә. Башың әйләнерләк тә, әллә ниҙәрең елкенерлек әле иҫлә әң. Дәртле лә, дарманлы ла ине Мәргән. "Донъя рәхәте икәү инде: мунсала ла, эхе-ем, ике бот ара ында," — тигән ҡанатлы үҙҙәр уның ауыҙынан ел ыңғайына ғына осоп килеп төшмәгән инде ул. Белгән кеше әйткән уны.

Әле килеп, Мәргән мунса ының өйөнән йыраҡыраҡ урынлашҡанына үкенде. Тирләп-бешеп сыҡҡандан уң, ҡар кисә-кисә, ауырыу бисә е нисек ҡайтыр? Хәлдәре бөтөнләй мөшкөлләнеп кит ә, үҙен өйгә ҡәҙәр күтәреп барғансы йәнең сығыр. Сыҡмаҫ! Шулай тине лә Мәргән насар уйҙарын ҡыуҙы. Алда татлы мөхәббәт уйыны көтә әле. Бигерәк ағынды ул бисә ен. "Әйҙә мунсаға... Бер юлы йыуынып та сығырбыҙ", — тип шаяртҡан булыр.

Артыҡ эҫе алмай, эләүкәлә оҙаҡ ҡына ултырҙылар тәүҙә. Бисә е бер ҡат керен йыуып төшөргәс, әҙерәк ишекте асып торҙо. Тик Мәргәнде иҙәнгә төшөрмәне, ыуыҡ ныҡ тейгән, эләүкәнән төшмә, тип иҫкәртте. Миндекте, эҫе ташта тоҡҡас, еҫкәп, үҙҙәрен урман-сәхрәлә кеүек хис иттеләр.

Бәлки, ашҡаҙаның бөтөнләй ауыртмайҙыр, ә бары эсең генә төшкәндер тип, Мәргән миндек менән бисә енең бү ерен имләне. Уны ы, үҙ артынса, иренең арҡаларын, түштәрен бал менән ыуып ултырҙы. "Бал ыуыҡтарыңды тир менән ығып- ығып сығар ын", — тип миндеген дә елпене. Рәхәт ине уларға. Хатта Мәргән "тышау”ын да онотто. Бер-бере енә нимә кәрәк, нисек яйлы — улар ымдан, хәрәкәттән белә шул. Бисә е башын йыуған арала Мәргән, ташҡа шыжлатып эҫе ала- ала, ныҡлап сабынып алды. Бер-бере енең арҡаларын йыуыштылар. Артыҡ керле булыуына унай ыҙланған Фәйрүзә, арҡа ын ышҡытҡанда:

— Әллә бар балнистың керен йыйып алып ҡайтҡанмын инде,— тигәс, Мәргән, ыу ибә- ибә:

— Күңелдә кер булма ын, тән кере нимә инде, ыу менән аға ла китә, иң глаунайы, әбекәй, тәнең таралып төшмә ен дә йәнең ташлап китмә ен,— тип шаяртҡайны, Фәйрүзә тағы ауыр уйға ҡалды: "Әллә ул да минең әжәлемде иҙенә микән? Ғүмерҙә әйтмәгәнсә, әбекәй тип ебәрҙе тағы".

Өйгә табан етәкләшеп атланы ир менән ҡатын. Көрт-бурандарҙы бергә тотоношоп барғанда ғына еңеп була. Былай күпкә еңелерәк тә. Усында ҡатынының ҡул йылы ын тойоп килгән ир, нишләптер, үҙҙәрен ҡамауҙан сығып килгән, ниндәй генә хәлдә ҡал алар ҙа бер-бере ен ташламаған яугир менән санитарка итеп күрҙе. Тик малай-яугир — сатан, ҡыҙ-санитарка ауырыу ине.

***

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 31



Дауахананан сыҡҡанын белгәс, Фәйрүзәнең хәлен белергә тип әхирәттәре килгеләне, күрше-күлән инеп сыҡты. “Йөҙөң генә бер аҙ тартылғандай, алай ҙа күҙеңдән нур китмәгән әле”, — тип өйләнеүселәр ҙә, “Әсәйең артынан ҡыума аң тағы, ул да ашҡаҙан сире менән ҡуҙғалғайны түгелме?” — тип сама белмәй хәлгә инеүселәр ҙә, яраға тоҙ алыусылар ҙа табылды. Зөләйха күрше е генә унын йөрәгенә май булып ятырҙай үҙен таба белде:

— Урамыбыҙҙың бер күрке ең инде, апай. Үҙең булмағас, үнгәндәй булды шаугөр килгән төбәгебеҙ. Бына хәҙер тағы йәм ҡайтты.

әр килгән әхирәте менән ихлас өйләшеп ултырған иренә ҡарап: “Үҙем үлмәҫ борон уға берәй ен табырға кәрәк, яңғыҙы харап буласаҡ”, — тип бер туҡтау ыҙ уйланды Фәйрүзә. Килгән әр кемде, әр бисә-сәсәне тигәндәй күҙҙән үткәреп, күңел иләгенән елгәреп ултырҙы ауырыу. Ниңәлер ирле ен дә, ир еҙен дә Мәргәне янына ҡуйып ҡараны. Бере е лә унын иренән баш тартмаҫ ине, моғайын. "Эсмәгән, үҙен ҡарай алған бабайҙар урамда тәгәрәп ятмай хәҙер. Булғаны ла, булыр-булмаҫтайы ла бармаҡ менән генә анарлыҡ былай ҙа. уғыштан уңғы йылдарҙан да яман. Йәбешеп киләсәктәр, биттәрен яулыҡ осо менән ҡапларға ла онотоп йүгереп киләсәктәр. Тик хәләле генә уларҙы тиң күрер ине микән уң? Йәш саҡтағылай мәүешлеге уҙҙы инде былай, тиң күр ә, арата алырҙай батырлығы бар хәҙер. Ә ҡеүәт тигән аты тимер ҡапҡаларҙы емереп сығырҙай ҙа... Емермәгәйе лә, тик әҙәп тигәне туп а ын да аша атлап сыға алмаҫ шул. Шуға үҙем иҫән саҡта фатиха биреп, үҙемә йүнләңкерәп ҡуйырға кәрәк. Мин еҙ йә әбей ҙә ала алмай йөрөр".

Фәйрүзәнең үҙ уйҙарынан үҙенең көлкө ө килеп китте. "Көлкө ти әң дә, Мәргәне унын үҙенә ысынлап та шул тиклем ныҡ өйрәнгән бит ул, алышҡан инде прәме, ыңар быйма ын да киптерергә үҙе мейес башына алмаҫ, еңенә йә кеҫә енә ҡулъяулыҡ тыҡма аң, танауын да өртмәҫ. Ә йорт-хужалыҡ эштәренә бисә енең ҡулын тығылдырмаҫ зат инде. Әле, ана, ҡалай кинәнеп китеп ултырған була, өйөм, донъям ҡәҙимге хәленә ҡайтты, тип өйөнөүе инде сатанымдың. Ә минең баш осомда ғына әжәл өйөрөлгәнен күрмәй, юҫыҡ ҡына ғүмерем ҡалғанын аңламай ҙа, иҙмәй ҙә".

Килгән-киткән, күңеле менән шөйлә таныған әхирәттәре ара ынан ҡапыл ғына Мәргәнгә барырҙай, дөрөҫөрәге, уны аңларҙай, кәрәк кенә саҡта алпы яғына алам ҡыҫтырырҙай йылы үҙен таба, артыҡ сама ыҙлыҡ йә сабыр ыҙлыҡ күр әтә башлаа, ҡәтғи генә тыйырҙай зирәклек күр әтә белгәндәр юҡ кеүек тойолдо. Ҡарасәле, элек иғтибар бирмәйерәк йөрөгән дә, әр бере е күкрәк киреп йөрөгән күркәме ни? Мәргән, тыныс-тымыҡ ҡына бул а ла, күркәләрҙе яратмай. Уға тауыҡтар оҡшай, себештәрен дә ҡараған, күрше ихаталарҙың бар икәнен дә белмәгән. Ә үҙ ихата ын яратҡан тауыҡ, ни генә тимә, тоғро ла, моңло ла була — үҙ ба а ын белгән аҡыллы әтәс ундайҙарҙың да ҡәҙерен белә. "Ҡалай ҡыҙыҡ, бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белеп, ипләп кенә ул да, мин дә ба абыҙҙы күтәреп йәшәгәнбеҙ түгелме? Шуға араға әсе ғәйбәт елдәре үтә алмағандыр ҙа әле. Мәргәнгә ипле өй тауығы кәрәк". Фәйрүзә, Хоҙайҙан хәбәр-хәтер килеү-килмәүен ныҡлап тоймайса тороп, бөгөнгө хәл-торошо, яҙмышы менән килеште лә ҡуйҙы, шикелле.

Ә Зөләй уң? Зөләйха уң? Мәргән менән бер урам балалары. Йәш айырма ы ла бик ҙур түгел — ҡул бармаҡтары анына ла етмәй. Ҡартайған көндә ул сама айырма, төкөрәйем, ҡулында эш уйнап, тамағына аш бара икән, бөтөнләй пүстәк, юҡ ара ул. Ғүмер буйы эскән ир менән бәхет күрмәне. уңлап бул а ла ир бәхете татыр ине, исма ам, Мәргән нисек бәхетле итергә белер ине. Эш-фәләнгә әр еҙ бисә, ире ҡаралған да булыр ине.

Фәйрүзә байрамға ғына кейә торған кейемдәрен кейеп алды. Балалары алтмыш йәшенә бүләк иткән ҡупшы күлдәк өҫтөнә уҡытыусы булып эшләгәндә бирелгән миҙал-билдәләре тағылған пинжәген дә иңенә алды. Күптән был кейемен ҡулы-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 32



на ла алғаны юҡ ине. Бөгөн затлыраҡ, күркәмерәк күренгеһе килде, унан бигерәк ниәте ышанысһыҙ икәнен, уйнап йөрөмәгәнлеген белдерергә теләйем, шуға эшләһә тейешле өҫтөндәге кейеме.

— Ҡайҙа юлланды икән минең әбекәй? Кейәүгә сығырға йыйынмайҙыр бит, мине йәтим ҡалдырып, — тип шаяртып ҡалды Мәргәне. Был һүҙҙәрҙән ҡапыл ғына албырғап ҡалған хужабикә, ишекте асҡан еренән артына боролоп, ниҙер әйтергә кәрәк тип тапты:

— Күрше Зөләйхаға инеп сығам, үтә оло йомошом бар. Һин үҙеңә әүрәмә, күмер төшкәндә күмер һүндереп ҡал. Йәйен самауыр ҡайнатырға йәтеш була торған.

Күк тәңреһе күҙен ҡыҫып аҡ ҡына аҫҡа баҡһа, ҡәҙимге башҡорт ауылы урамынан, ябай йорттар араһынан аҡ шәл ябынған ябай ғына ауыл ҡатынының әкрен генә атлап барыуын күрер ине. Уның күңел урамына ингәс, оло йөрәкле зат икәнен аңлар ине Тәңре. Тере килеш үҙенә көндәш, үҙ хәләленә, ғүмер кисергән иң яҡын кешеһенә, яратҡан иренә, (ул теләһә) уға тупраҡ булырға ла риза булған йәндәшенә үҙ өҫтөнән әбей әйттерергә китеп бара лаһа... Тәңре фатихаһын еткергән булыр — ҡапыл яуырға тотонған эре-эре ҡар бөртөктәре аҡ инәйҙе аҡҡа төрөргә тотондо: тәүҙә аҡ шәлгә һыйынып ятты, бишмәткә һырыны, битте, керпектәрҙе үбеп бер булды. Ҡар яуыуын изгегә юраны Фәйрүзә, болот яумай, бойороҡ яуа — юлым уңыр, иншалла, тип эстән үҙе белгән доғаларын уҡыны.

— Алла Тәғәлә тирмәнен эшкә екте, бәрәкәт яуҙыра ғына, — тип өйләнеп килеп инде өйгә.

— Уның эш башҡа, аллаларса, әбеҙҙеке аман да балаларса. Әйҙә үт, апай, — Зөләйха күршеһен әйҙүкләп ҡаршы алды. Кейемен сисешергә булышҡас, ҡарын ҡағып төшөрҙө. Ишек төбөндәге һикегә ултырып, амин тотоп алдылар. Хужабикә самауырына йәбешкән булды. Өҫтәленә ни ҡуйырға белмәне. Күрше ененең кейгән кейеменә иғтибар иткәс тә һиҙенде ҡатын: ниҙер булған йә буласаҡ. Юҡҡа ғына уҡытыусы Фәйрүзә улай ҡупшыланып килеп ултырмаҫ.

— Сәйеңде ҡуйып тор, Зөләйха, ғүмер ҡасмаһа, ул ҡасмаҫ. Эсергә өлгөрөрбеҙ, — тип яғымлы ғына өндәште Фәйрүзә. — Оло йомош менән килеүем. Балағым юҡ, бөкләп ингән булыр инем.

Нимә тураһында һүҙ булырын аңланы Зөләйха. Димләргә килгән. Тик кемгә? Иренең үлеүенә ни ғүмер, димләү түгел, был турала ике һүҙҙе ҡушып әйткәне юҡ ине лә әле Фәйрүзәнең. Балниста берәйһен тап итте микән? Юҡ инде, яңғыҙым — тыныс йөрәгем. Эсеп ҡайтыр ҙа туҡмар, тип кемделер көтөп ултырыр көнөм үтте инде. Йүнле ир бармы урамда? Эленә-һеленә тиреләр тоҙлап эленгән инде.

— Бер тырмаға ике тапҡыр баҫа һым юҡ. Ул тарафтарға көл һипкәнмен инде. Һуңланың, апаҡайым.

— Ҡабаланма, аслан. Ҡарт көнөңдә яңғыҙ барыуҙары ҡыйын ул. Арҡа терәйем тиһәң дә, йылы тән кәрәк.

— Төңөлгәнмен мин уларҙан. Көндөҙ сыраҡ яҡтыртып эҙләһәң дә, йүнле ир табылмаҫ хәҙер.

— Улай тимә. Әле Мәргән ағайың һуң?

— Мәргән ағай башҡараҡ. Бойҙайҙы арыш менән бутама инде.

Был һүҙҙәрҙән Фәйрүзәнең күңеленә йылы инеп китте.

— Мәргәнде һиңә димләргә тип килдем.

— Алтынды буҡҡа буяп ултырма әле, апай, — Зөләйха оторо асыуланып китте.— Шул да булдымы шаярыу.

— Шаяртмайым.

— Шаяртмайым? Улай һа, толдар яҙмышынан әсе көлә еңһә икән.

Фәйрүзә дилбегәне үҙ ҡулына алырға булды. Телендә лә, йөҙөндә лә наҙлылыҡ юҡҡа сыҡты:

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 33



– Көлмәйем дә, шаярмайым да. Бындай мәсьәләлә уйнап эш итмәйҙәр. ин дә, Мәргән дә миңә юҡ кеше түгел, быны әйбәт аңлай ың. Тик икенсе нәмәне аңламай ың: кеше ғүмере сик еҙ түгел.

Зөләйха тертләп китте:

– Нимә әйтмәксе ең?

– үнеп барғанымды күрмәй еңме ни әҙерәк? Әжәл килеп, сана ына ултыртып алып китмәксе мине.

– Юҡты өйләмәле, апай. Кем әйтте, кире енсә, дауахананан яҡтырып, таҙарып ҡайттың әле.

– Врачтар белмәй әйтмәç, – өйләгәне дәлиллерәк бул ын өсөн алдап та ебәрҙе Фәйрүзә. – Яман шеш, тиҙәр. Ҡоро ергә аяҡ баçып буламы, юҡмы? Мәргәнем яңғыҙ ҡал а бөлөр, тим. Ышанысла ҡулдарға ҡалдырғым килә. ине тиң итеп күрҙем уға. Бәхет тәмен татыр инең...

– Туҡтап тор әле, башҡа ыймаç әллә нәмәләр өйләп бөттөң. Сәйнәп йотайым, исма ам, туҡтап тор, зин ар, – Зөләйха тышта бурап-бурап яуған ҡарға тәҙрәнән тауыш-тын ыҙ ғына ҡарап торҙо. Оҙаҡ торҙо. Шунан ҡарашын тәҙрәнән алмай ғына үҙ башланы:

– Өләсәйем өйләп ултырыр ине. Кеше яҙмыштары ете ҡат ғаләмдә, күк өçтөндә хәл ителә, тип. Тәңре үҙе әр йән эйә енең ғүмерен танып, яҙмыш мө өрөн ала икән. Бер бәхетлегә – бер бәхет еҙ, бер бәхет еҙгә – бер бәхетле тип. Ауыҙына өрөк ҡапҡан сағындамы, бер бәхетлегә – бер бәхетле, йә, бер бәхет еҙгә – бер бәхет еҙ, тип яңылышып та китә, ти. Бына Мәргән ағай менән инең яҙмышыңды мө өрләгәндә, апай, бәхетлегә бәхетле тура кил ен, тип дөрөç яңылышҡандыр. Кеше нуры күктән килә бит ул. Үҙеңә тейешле бәхетте бүләк итеп тә, мираç итеп тә ҡалдырып булмай. Минең бәхет еҙ яҙмышымды инең әжәлең дә, инең Мәргәнең дә бәхетле итә алмаç. Маңлайыңа шундай мө өр уғылғас... – Тыныс ҡына тыңлап ултырған Фәйрүзәгә ҡараны. – Димләмә миңә Мәргән ағайҙы.

Фәйрүзә ни әйтергә белмәне.

– Үҙ яҙмышыңды, үҙ бәхетеңде, алығыҙ, тип кеше туп а ына ҡалдырып китеүе лә еңел түгел ул, Зөләйха. Изге теләктәр, аҡ уйҙар менән йөрөүем ине. Аңлар ың, хәлемә инер ең, тип йыуанып ултырыр йәштән уҙғанмын, шуға тура ын әйттем, ине лә, үҙемде лә ҡыҙғанманым.

– Онотайыҡ был турала, йәшәргә лә йәшәргә әле беҙгә, – тип йәп еҙ итеп йылмайған булды Зөләйха.

– Шулай ҙа бер нәмәне йөрәгеңә алып ҡуй әле, Зөләйха. Минең менән ул-был хәл бул а, Мәргән ағайыңдың аяҡтан йығылғанын көтөп ултырма, мин иңә генә фатихамды бирәм. Башҡалар буталып, ҡан боҙоп йөрөмә ен ине.

Зөләйха бер ни өндәшмәне.

Өçтәл артында ултырғанда иçкәртеүҙе кәрәк тип тапты килеп тә йомошон йомошлай алмаған күрше е:

– өйләшеү үҙ-ара ҡал ын. Ошо арала баш ҡалаға барып балаларымдың хәлен белеп киләйем тим. Тағы ла әллә барып була, әллә юҡ. Йорт- арай тирә енә күҙ-ҡолаҡ булып торор оң әле. Мәргән бик ҡаты йүткереп, сырхап торғандай, – тине. Бәлки, шунда үҙҙәре берегер, ни ти әң дә, күңеленә орлоҡ алынды инде. Ҡайтҡас Мәргәнде лә ҡытыҡлап ҡуяйым, тип уйланы үҙе.

Юлға ҡапыл ғына сығып китә алманы әле Фәйрүзә. Тоҡсайҙарҙы төйнәгәнсе, күңеле менән әҙерләнгәнсе бер-ике аҙна үтеп китте, аҙаҡ аҡман-тоҡмандар башланып, юлдар ҡапланды. Ул осорҙа үҙе аулығына бик зарланманы ла, табиптар ҡушҡан күр әтмәләрҙе еренә еткереп үтәне, урындағы фельдшер аҙна ына ике тапҡыр үтә ауырттырғыс укол ҡаҙап киткеләне. Тик бына Мәргән генә ҡапыл бирешеп китте, быуып-быуып йүткереүе үткәйне, тыны ҡыçа башланы. Мал-фәлән

ҡарап ингәнсе ҡара тиргә бата. Үҙе аман түшен ышҡып-ышҡып бул а ла тәмәке тартыуын белә. Бисә енең, инең йәштәге ҡарттар өнәреме күккә тәтөн осороп ултырыу, тип шелтәләүенә:

– Дуҫым да, дошманым да – ошо бармаҡ буйлы тәмәке, мин – уға, ул миңә тоғро, унан ҡотола ы юҡ, – тип мейес алдында, көлдөксәгә тәтөн өрөп, ғыжылдап, үҙгә әүрәтеп ултырыуында булды. Үпкәңә төшмә ен сирең, духтырға барып күрен, тигәнгә ҡул ғына елтәне, ә фельдшер ҡалдырып киткән төймәләргә әйләнеп тә ҡараманы. Көндәр асылып, ҡояш ҡыҙҙыра башлағас, тыны асылғандай булды. Ай, ыуыҡ ныҡ тейгән булған, үтте, буғай, тип тынысланды Фәйрүзә. Бер ниәтләгәс, балаларына барып ҡайтыуҙы башҡа кисектермәне. Иртәгә юлға тигәндә тағы Зөләйхаға инеп, йорт тирә ен ҡараштырғылап торор оң инде, тип о-раны. Уны ы риза булды булыр: "Ҡараштырырмын, тик күрше хаҡына ғына..."

Киске ен Мәргәненең ҡолағына ла, мин юҡта Зөләйха ингеләп үҙенде, донъяны ҡараштырғылап торор, юҡҡа мыйығыңды тырпайтып, ҡырыҫ ҡараш ташлап ултырма, йәме, тип тишеп тә ҡуйғайны, тегене енең әле үк йөнө ҡабарҙы ла китте:

– Юҡ, кәрәкмәй, ин балниста саҡта үҙ йүнемде үҙем күрҙем, берәүгә лә ауырлыҡ та булманым. Халыҡ әллә ни өйләр тағы...

– Ай, гона шомлоғо, шуға йүткереп, бөтөрөнөп киткән ең дә. Зөләйха ят көйәнтә түгел, елкәңә сей яра алмаҫ.

Баш ҡалала аҙнанан ашыу ятты Фәйрүзә. Балаларының яҡты йөҙөн, бөхтә, затлы донъяларын күреп, әсә кеше, былдай бәхет кемгә эләгә әле, тип өйөндө. Үҙенең зарын да белдермәне, ниндәй уй-тойғолар менән йәшәүен дә иҙҙертмәне. Ауылда тип ә тимер өҙөрҙәй ирем көтә, нимә тип үлеп ятмаҡ кәрәк, тип уйланды. Әгәр ҙә... үлмә әм. Мәргән... Зөләйха... тип шикләнде. Врачтар өҙә генә әйтмәне лә ә. Ашҡаҙаны ауыртмай башланы, ауыҙы тәм тоя, ингәне ҡыйынлыҡ күр әткәне юҡ – сығыр юлын яҡшы белә. Хәл бөтөп бармай хәҙер. Әгәр ҙә үлмә әм... Тегеләр бер-бере енә эҫенешеп кит әләр? Ир бирмәк – йән бирмәк бит әле.

Йөрөй торғас, ҡапыл күңел тыныслығын юғалтты ҡатын. Йоҡолары боҙолдо, юҡ-бар төштәр былай ҙа эстә имеҙ ҡортҡа әйләнә барған шикте көсәйтте генә. Тәүҙә баҡса артындағы мунсала яланғас Мәргәнде шәрә ҡыҙҙар, ихахайлап-ихахайлап, тасҡа ыу алалар ҙа ҡойондоралар икән тип күрҙе. Килеп тороп ыуҙары болғансыҡ. Бысраҡ ыу, яланғас кеше ауырыуға, тиҙәр, сирем ҡотолғо оҙҙор, Тәңре шулай иҫкәртә торғандыр, тип үҙен йәлләп, тынысландырырға тырышып ятты уянғас Фәйрүзә. Шәрә ҡыҙҙар шулай ҙа күңел төбөндә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына ятҡан икеләнеүҙе ҡуҙғатҡылап-ҡуҙғатҡылап ҡуйҙы. Бәлки, теге икәү уртаҡ тел тап а... Икенсе ендә Мәргән менән бейек тауға менәләр ҙә менәләр. Хәлдәре бөтөп, бер ағас төбөнә ултырғайнылар, ире ниндәйҙер шөкәт еҙ ҡоштарға эйәреп күккә осто ла китте. Фәйрүзә, эй, тегеләр артынан йүгерә лә йүгерә. Үҙенең шундай йәш сағы, арымай ҙа. Мәргән аҫҡа ҡарай, уға ынтылғандай ҙа була, үҙе шундай ҡарт. Йәм еҙ ҡоштар бер мәл ат булып болоттар ара ынан сабырға тотондолар. Ҡапыл йәш саҡтарындағы теге бейәләре – Катерина килеп сыҡты. Мәргән ҡапыл уға атланды ла, ике е лә юҡ булдылар ҙа ҡуйҙылар...

Баҫлығып уянып китте ҡатын. Ҡайта алайым, ысынлап та Мәргәнемде бөтөнләй юғалтып ҡуй ам, тип уйланы, йөрәге өшөп китте. Ул Катерина нимә тип төшкә килеп инде тағы. Үлеүенә генә утыҙҙан ашыу йыл бар ҙа а. Өндә ике аҙымын үлсәп баҫҡан мәхлүк төштә ҡалай шәп саба. Мәргән бигерәк үҙ күрҙе инде үҙен. Күрмәҫлек тә түгел ине шул. Ошо көнгәсә ат тотоуҙары ана уға бәйләнгән. арайҙа торған ҡола бейә Катеринаның нисәнселер быуыны инде. Бик егеп барма а ла, ат – мал ҡото, кәртә эсендә тороуы ғына бер ҡот-ырыҫ бит, тип Мәргән ихлас ҡарай үҙен. Башҡаларға бер ыйырҙан артыҡ эре мал тоторға рөхсәт булма-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 35



ғанда, совет власы аяҡ ыҙ Мәргәнгә ат ҡото менән йәшәргә ирек ҡуйҙы. Әрменән аяҡ ыҙ ҡайтыуының берҙән-бер файҙа ы шул булды бахырының.

Ҡайтырға кәрәк. Мәргәнен дә ағынды, ауыл ауа ын, унан бигерәк самауыр сәйен ағынды. Балалары нисек кенә әсәй тип өҙөлөп торма ын, барыбер ҙә үҙ йортоң, үҙ мөйөшөң, әйтә е лә түгел, хатта үҙ түшәгең үҙеңә тан ыҡ икән ул. Түшәк тигәс, күҙ алдына тағы Мәргән менән Зөләйха килеп баҫты. “Артыҡ ирек биреп китмәнем микән? Ҡайтыуыма "кети-кети" уйнап ултырма ындар тағы”.

Түҙмәне Фәйрүзә, таң менән юлға сыҡты. Автобусҡа ултырғас, күңелендә әсе бушлыҡ тойҙо, әллә үҙенде артыҡ бәхетле тойоу, әллә шул бәхетте юғалтыуҙан ҡурҡыу хасил иттеме ул вакуумды – аңламаны. Шул бушлыҡтан ауыҙына хатта әсе тәм килде. Ниңәлер ҡапыл Мәргәненә ышанысы юғалып киткәндәй тойолдо. Фәйрүзә үҙе ҡорған ауға эләгеп, яңылыш... эйе, уға хыянат итеп ҡуй а. Былай бит бөтә йәшәлгән ғүмерҙе юҡҡа сығарырға мөмкин. Фәйрүзә сәп иткәнсе яҫы устары менән биттәренә уғып алды. Уян, насар уйҙарыңдан уян! Түшәк кенә түгел, ҡабыр ҡабымын да инең менән бүлешкән кеше тура ында нисек боҙоҡ уйҙар уйлай ала ың, ғүмерҙә булмағанса, тип әрләне. Тик шик ҡурҡыныс ҡортҡа әйләнгәйне инде.

Ауылға, үҙе самалап, ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтып төштө. Көн битендә ҡайт а, берәй е юлда осрар ҙа, Мәргән менән Зөләйха бергә донъя көтәләр, ин ҡайҙа аҙашып йөрөй өң, тигән ҡурҡыныс хәбәр алыр кеүек ине уға. Ә былай шул хәбәрҙең дөрөҫмө-юҡмы икәнен үҙ күҙе менән күрге е килде. Ҡапҡа сылбырын аҡ ҡына асып инде. Ихатала мал күренмәй, тимәк, арайға ябылған. Тәртип. Залда ут тоҡандырылмаған, тәҙрәнән унда күҙ алды, бер ниндәй хәрәкәт тә шәйләнмәгәс, бәләкәй баҡса яғына күҙ ташланы. Кухняла яҡтылыҡ бар. Тимәк, шундалар, сөкөрҙәшеп сәй эсәләр. Бәләкәй баҡсаның ҡыштан бирле кеше ҡулы теймәгән ҡапҡа ын көскә күтәреп асты ҡатын, тәҙрәгә барып еткәнсе көҙөн ҡаҙып ҡалдырылған түтәлдәрҙә батҡаҡҡа батып бөттө. Шулай ҙа тәҙрәгә килеп етте, аҡ ҡына эскә күҙ алды. Мейескә ут яғып йөрөгән Зөләйханы күреп быуындары йомшарҙы. Ҡарасәле, бөтөнләй хужабикә булып алған. Эңерҙә Мәргән әр саҡ үҙе генә өй йылытыр өсөн көлдөксәгә ут яға торғайны. Фәйрүзә тотон а, ҡояш байығас ыуға барма ла ут менән шаярма, тип әрләшер ине. Был шаталағы егәрлелек, хәстәрлек күр әтте булды инде?.. Ут менән шаярҙым, уйындан мөгөҙ сығарҙым, былай булғас. Юҡ үҙ донъям, Мәргәнем, тип яр ыны. Ҡара батҡаҡ менән нисек өйгә йүгереп ингәнен дә иҙмәй ҡалды Фәйрүзә. Ингәс тә, ирен күрге е килде, нисек күҙенә бағыр икән?

– Мәргән, Мәргән! – Тауышҡа кухнянан килеп сыҡҡан Зөләйха, төҫө ҡасҡан, батҡаҡҡа бысранып бөткән Фәйрүзәне күреп, албырғап ҡалды. – Ҡайҙа Мәргән?

– Ишеттеңме ни?

– Ишеттем, ишеттем. Уйнаш ҡылып ята ығыҙ икән бында. Минең үлгәнемде көт әгеҙ ни була?

Бер ни аңламаған Зөләйха лып ултыра төштө:

– Нимә өйләй ең ин, Фәйрүзә апай? – Йәшле күҙҙәрен яулығы менән ҡапланы.

– Мәргән! Мәргән, тим, – яуап ишетмәгәс, тағы Зөләйхаға төбәлде. – Мәргән ҡайҙа?

– Мәргән ағайҙы ат типте... бесән алғанда...

Был үҙҙәрҙән ҡапыл башы әйләнеп киткән Фәйрүзә дөбөр-шатыр иҙәнгә ауҙы. Зөләйха тиҙ генә ыуыҡ ыу килтерә алып, апа ының битен, ирендәрен сылатты, ыулы усы менән еңелсә генә сәстәрен ыйпаны.

– Төшөмә юҡҡа инмәгән икән Катерина, ҡоро-оғо-р. – Ҡаҡ иҙәнгә башын ороп-ороп иланы иҫенә килгән ҡатын.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 36



– Ныҡ бөтөрөнмә, апай, скорый машина ына үҙ аяғы менән сығып атты. Район үҙәгенә алып киттеләр. Балнистан шылтыратҡандар, хәле бик ҡурҡыныс түгел. Тик, ыуыҡ ныҡ үткән үҙенә, тигәндәр, – Зөләйха, Фәйрүзәне арҡа ынан ҡосаҡлап, унын янына сүгәләне. Мәргән ағаһының, тыны ныҡ ҡыҫылғас, унан ярты сынаяҡ ҡына сәмәй орап эскәнен, бесән алғанда, әллә шул ят еҫте үҙ енмәй, бейәнең тибеп ебәргәнен, арайҙан Мәргән үҙе атлап сыҡҡанын, уға килеп табип саҡыртырға ораууын өйләне. Үҙе уларға ыйыр ауырға ғына йөрөгәнен, өйҙәренә ул юкта инеп тә ҡарамағанын өҫтәне. Әле өйгә балнисҡа китер алдынан Мәргәндең, өйҙө ҡарап тор, тигән үҙен йыҡмаҫтан ғына инеүен әйтте.

Шәле менән битен, күҙҙәрен өртә- өртә, Фәйрүзә ҡалҡынып ултырҙы. Ултыра биргәс, Зөләйхаға боролоп ҡараны ла, уны ҡосаҡлап, тағы үк еп ебәрҙе.

– Ай, Аллам, ғәфү ит гона лы ҡолондо-о. Ҡарт көнөмдә әллә ниңә насар уйҙар инде бит башыма-а. Мөхәббәт менән көнсөллөк ҡултыҡлашып йөрөй, тигәндәре дөрөҫ икән. А-ай, Зөләйха-а-а...

Зөләйха үҙен тиҙ үк ҡулға алды. Кешене йәлләр, йыуатыр урынға, тәбиғи ҡырыҫлығы өҫкә ҡалҡып сыҡты:

– Этем ҡуштымы ни Өфө тип артың ҡысып йөрөргә, улай бик көнләшкәс.

Шунан тороп шәп-шәп кейенә башланы, аңғармаҫтан ҡара батҡаҡҡа баҫты. Бысранған нәскиен сисеп кеҫә енә алды ла итеген кейҙе.

– Ҡара уйынды тышҡа ҡалдырып инер инең, исма ам. Батҡаҡтарың менән бергә! – тине лә ишекте шап итеп ябып сығып китте.

***

Машина яллап, таң ары ынан тигәндәй барып етте дауаханаға Фәйрүзә. Үҙенең был ике ҡатлы аҡ йорттан сығыуына ай ярым ғына ваҡыт үткән. Ул саҡта, сирсырхау белмәгән Мәргән янына килермен, тип ис тә уйламағандыр әле бына.

"Сирләйем, үләм тип йөрөй инең, Мәргәнеңә ауыр саҡта үл бына хәҙер, үлмәй ни!? Юҡ инде, Әжәл бабаҡай, өркөтә алмаҫ ың, үҙ бабайымды аяҡҡа баҫтырмай тороп, инең арбаңа ултырып, инең йырынды йырлай ым юҡ. Ирем хаҡына йәшәйәсәкмен әле," – тип уйланып, ныҡ торорға кәрәк, бирешергә ярамай, тип үҙенә үҙ биреп килеп инде палатаға.

Уяу ятҡан ире, Фәйрүзә ишектән күренеү менән, урынынан тормай ғына ҡулын болғаны, мин бында, йәнә е. “Көткән, тимәк”, – тип уйлап өлгөрҙө хәләле.

– Шунан, хәлдәрең? – Бер ҡулы менән үҙенең күҙ йәштәрен өртә- өртә, икенсе ҡулы менән иренең битен ыйпаны Фәйрүзә. – Ҡайҙан ғына шул Өфө тип сығып киттем дә...

– Түҙерлек. Ат мөгөҙө үгеҙҙекеләй түгел, бейәм үҙемдеке, үҙ күреп кенә ыйпаны. Балалар нисек? – Мәргән, уң яҡ ҡабырғаларын тотоп, аҡ ҡына йүткереп маташты.

– Балаларға хәбәр итмәгәнмен әле. Кисә эңерҙә генә ҡайттым.

– Хәбәр итмәй тор, эштәренән айырып. Бер-ике көндән аяҡҡа баҫам мин. Бейә үҙемдеке, минән ҡотолам тип түгел, ҡотороп ҡына елтәнде. Сәмәй еҫенә башы әйләнеп кенә. – Ғыж-ғыж көлгән булды ҡарт. Нисек кенә була ла бейә енә үҙ тейеүҙән ҡурҡты ул. Бисә е, асыуы ҡайнап, бысаҡлатып ҡуйма ын тип, изге малының рәнйешенән, тормош иптәшенең гона алыуынан ҡурҡты. – Бейәгә асыу тотма, йөрө өн ҡурала. Ҡолон алыр мәле етә, шуға наҙлы ҡылана.

– Бейә өйләй, әле ҡай ы ерең ауырта?

– Уң яҡтан үпкә ҡыҫҡандай, йүткереүе ҡыйын...

"Ике ҡабырға ы ғына ынған, үпкә ен ҡыҫа биргән, шикелле, – тыныс ҡына яуап биргән табипҡа асыуы ҡабарҙы Фәйрүзәнең. Әйтер ең, бер ни булмағандай ҡылана. – Уны ы ғына туйға ҡәҙәр йүнәлер. Ә бына үпкә ен ныҡлап тикшерергә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 37



кәрәк".

— Ниндәй туй?— Фәйрүзә аңламай ҡалды тәүҙә.

— До свадьбы заживет, тиҙәр бит урыҫтар.

— Ә-ә-ә, — тигән булды ҡарсыҡ уңай ыҙланып, кисәге хәлдәрен дә иҫкә төшөрөп.

Ике көндән дә, ике аҙнанан да хәле бик яҡшырманы әле Мәргәндең. Айҙан ашып китте бында килгәненә, бар донъя йәшеллеккә күмелде. Донъяның иң гүзәл мәлендә ят инде балнис саңын эсеп. Биргән анализдары табиптарҙа шик уятты, улар төплө генә фекергә килә алмай бер булды. Шуға уны сығарырға ашыҡманылар, кире енсә, йүнәлтмә менән Өфөгә ебәрҙеләр.

Аҙна айын ире янына барып йөрөгән, хәҙер бар донъяны яңғыҙы үҙ иңендә алып барған, аман иренең шәбәйеп китә алмауында урындағы табиптарҙан гәйеп табыр сиккә еткән Фәйрүзә, баш ҡала ни ти әң дә баш ҡала булыр әле, тип өйөнөп ҡабул иткәйне лә был яңылыҡты. Эш күп бул а ла, үҙе бик арыманы, ауырыраҡ эштәр Зөләйха елкә енә төштө. Теге хәлдән уң ике ҡатын бер-бере енә тағы ла яҡынайып киткәндәй булды. Фәйрүзә эш ара ында үҙенең ауырыуҙарын да онотто. Укол алырға килгән фельдшерҙы, әйбәтләндем инде, тип кире борҙо.

Тик... Мәргәнде ҡотҡарыусы фәрештә Өфөлә лә булмай сыҡты. Кире енсә, заманса сит ил ҡорамалдары ҡот осҡос мө өр сығарҙы: үпкәләге яман шеш ҡыҙыл үңәскә йәбешкән. Улдары анализ ҡағыҙҙарын ҙур-ҙур табиптарға ла күр әтеп ҡараны, сара ҡалмағас, ҡай ы берҙәренә аҡса ла тәҡдим иттеләр, тик ... "Исма ам, бер йыл алданыраҡ килтер әгеҙ, ниҙер эшләргә булыр ине лә, уңланылған". — Бар яуап ошо ине. Өлкән генә бер табип хатта:

— Атайығыҙҙың ике-өс ай ғына ғүмере ҡалған, табиптарға йөрөтөп ыҙалатмағыҙ, ҡалған ғүмерен үҙ өйөндә, әсәйегеҙ янында кешесә үткәр ен, — тип ауылға ҡайтарырға тәҡдим итте. Улдары был әсе хәҡиҡәтте ҡабул итмәне, Хоҙай ебәргән тәҡдирҙең хаҡлығына шик белдерҙе. Табиптар бер нисә айға бул а ла ғүмерен оҙайтыр өсөн химиотерапия, унан үңәс урынына ашҡаҙанға тура көпшә ҡуйырға тәҡдим итте. Тик ул саҡта телдән яҙыу ихтималлығын да әйтеп үттеләр. Улдары, хәлде аңғартып, әсәләре менән кәңәшләшергә булды: дауалауҙы дауам итергәме, әллә өйгә алып ҡайтырғамы, ни ти әң дә, иң уңынан өмөт үлә. Ә бәлки?..

Был уңғы ай эсендә килендәре аша эштең айышына, хәлдең ҡайҙа барғанына бер аҙ төшөнә башлағайны Фәйрүзә. Улдары ҡайтып, ҡурҡа-ҡурҡа ғына үҙ башлағанда уҡ әйтеп ҡуйҙы:

— Әйтер хәбәрегеҙҙе булмышым менән ҡабул итмә әм дә, йөрәгем, күңелем менән аңлайым бары ын да. Тик ул улай уҡ тиҙ булырға тейеш түгел ине. Бер нәмә лә йәшермәгеҙ, дөрөҫөн әйтегеҙ, — тине.

Улдарының үҙен тыңлағас, йөрәгенән ығып бер генә үҙ сығарҙы:

— Әжәлде алдамағыҙ, атағыҙҙы апҡайтығыҙ...

Ә ауырыу үҙ хәлен үҙе белмәй ине. Балнистан сығарғанда ла әле:

— Әжәл урап үтте, шикелле, башҡаса тәмәкене ауыҙыма ла аласағым юҡ, ой, ғүмер менән шаярырға ярамай, — тип өйләнде.

Ауылына ҡайтыуына сабыйҙарса өйөндө. Урамдан инмәй, оҙаҡ-оҙаҡ саф ауала ултырҙы, ишек алдына ыҡсым ғына яңы эскәмйә эшләп ҡуйҙы. Эргә ендә ҡолоно уйнап йөрөгән бейә енә ҡарап туя алманы, күҙем генә тейеп ҡуйма ын инде, тип төкөрөнөргә лә онотманы. Тәүге аҙна үҙе яйлап йөрөп мунса ла яғып ебәрҙе. Иртәгә-бөгөн төҙәлеп китәм, кисәге Мәргән хәленә ҡайтам, тигән уйы дәрт кенә өҫтәне. Тик көндән-көн әҙерәк ашаны. Ҡатыраҡ ризыҡтарҙы бөтөнләй йота алмай башланы. ыйырҙың ағынан айырма ын инде, тигән булып табын артында ултырҙы. Аҙна айын ҡайтҡан балаларына ҡарап, бик йышланылар, артыҡ иғтибарлы була башланылар, юҡҡа түгелдер, тип уйланып киткән саҡтары ла йышайҙы.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 38



Унан бигерәк, нимәлер иҫләп ауыҙ асып өлгөрмәйенең, Фәйрүзә енең күҙен өртөргә тотоноуы аптырата.

— Ауырыйыңмы әллә тағы, Фәйрүзәм? Күҙеңдән йәш китмәй ҙә ә, — тип бер өндәшкәйне, әбейе үк еп үк илап ебәрҙе. Бер ни аңламаған Мәргән ҡурҡа төштө. — Ауыр уйҙарың бул а, ҡотол, миңә өйлә, эсең бүҫкәрер.

Нимә тип әйт ен инде Фәйрүзә?

— инең менән үткән бәхетле көндәремде ағынып илайым, — тигән булды.

— ағынып иларлыҡтары булғас әйбәт, әләйгәс, — тип йылмайҙы ҡарт.

Йәй аҙаҡтарында ныҡлы түшәккә яткас ҡына аңланы хәлен Мәргән.

— Көҙҙән алып йәнде ашай был йүткереү. Тамаҡ төбөнә бер нәмә килеп тығылды ла, үтмәй ҙә, сыҡмай ҙа. Юҡҡа булмаған икә-ән.

"Юҡ шул, Мәргән, төйөр түгел ул, әжәл шулай үҙенең орлоғон алып киткән, үҙең дә белмәгән ең, беҙ ҙә, исма ам, иҙмәгәнбеҙ. Миңә тигән орлоҡто яҙмыш инең тамағыңа килтереп тыҡҡан бит, ҡә әрең", — тип уйланы Фәйрүзә.

***

Үлеренә бер аҙна тигәндә, иҙенгәндәй, Мәргән Фәйрүзә енә оло йомош ҡушты.

— Фәйрүзә, бер кешене күргем килә, үкенескә ҡалмаын, күрше ауылдан Сәбилә исемле ҡатынды ғына саҡырт әле.

— Имсе-фәлән түгелдер?

— Ҡасандыр күңелде имләр зат ине лә, хәҙер белмәйем, ситтә йөрөнө, ҡайтҡан, тиҙәр, — шулай тине лә Мәргән, күҙен йомдо. Шулай ята торғас, ойоп та китте, шикелле. Янында Фәйрүзә, ыҙланыуҙарынан аҙға ғына бул а ла арынып серемгә киткән иренә ҡарап, нишләргә белмәй шым ғына ултырҙы ла Зөләйхаға юлланды. Унан да уңай йомошсо табылмаҫ.

— Туңйылға ауылынан Сәбиләне беләеңме? — тип ораны тәүҙә. Зөләйха иҫләй алманы, бәләкәй генә ауылдың әр өйөн тигәндәй бармағын бөкләп барлап ултырҙы. Тик иҫләй алманы.

— Юҡ ул ундай ҡатын. Нимәгә кәрәк шулай, имсе-фәлән түгелдер?

— Юҡ, шикелле. Буталды микән ни? Мәргән саҡырттыра, күргем килә, тей ҙә.

— Мәргән ағай саҡырта-а? Сәбилә-ә...не? — Зөләйха асҡан ауыҙын яба алмай торҙо. — Беләм, беләм. Ҡалай иҫкә төшмәй торған. Биш йыл элекме Ҡаҙағстандан ҡайтты.

— Туған-ҡәрҙәшеме әллә? Әллә... тиңдәштәрме?

— Сыбыҡ осо ла туған түгел, — киҫкен әйтте быны Зөләйха. — Үә-әт, Мәргән ағай му-ут, онотмаған тегене, онотмаған тәки.

— Кем уң ул? Нимә күңелемә шул тиклем шом ала ың? Былай ҙа бөткән йөрәгемде теткеләп... — Фәйрүзә, ер тетрәү көткәндәй, Зөләйхаға ҡараны.

— Иреңдең йәшлек мөхәббәте! Ташлап киткән Сәбилә, аяҡ ыҙ Мәргәнде тиң күрмәгән казашка, бер килмешәк.

Иҫләне Фәйрүзә лә. Килен булып төшкән мәлдәрәк, ире тура ында, йәнен берерҙәй булып яратҡан ҡыҙы ташлағас, шуны онота алмай өйләнмәй йөрөнө, тип ҡолағына тишеп ҡуйғайнылар шул. Ә Мәргән уң? Ҡалай сабыр, бер ҙә генә теленә лә алманы бит әле, ауыҙын күтәреп, исма ам, бер тапҡыр исемен ата асы.

— Шуны саҡырып килә алмаҫ ың микән? — Тауышы зәғиф кенә сыҡты Фәйрүзәнең.

Бер аҙ тынып ултырғас, Зөләйха:

— Юҡ, бармайым. Бармайым да, саҡырмайым да. Кәрәк бул а, ирең үҙе тор он да бар ын, — тип киреләнеп алды ла китте. Фәйрүзә әкрен генә ҡалҡынды:

— Улай а, үҙем барам инде.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 39



– Аҡылыңа кил, еңгә, – еңгәнән алдырып, хужабикә ишеккә арҡыры торҙо. – Шул хыянатсыға бәхил үҙен әйттермәксе еңме ни? Ғорурлыҡ бармы ул индә, юҡмы?

Яңынан баяғы урындарына барып ултырҙылар.

– Үә-әт, әй, үҙе – үлем түшәгендә, ә уйында – мөхәббәт. Ирҙәрҙән дә аҙғын мал бармы ни ул донъяла? Ит изгелек – көт яуызлыҡ. – Зөләйха яр ыны. Аҡайып Фәйрүзәгә ҡараны. – Ә ин, үлеп-фәлән кит әм, Мәргәнем нишләр, нисек кенә донъя көтөр, тип өҙгөләнеп йөрөгән булдың. Зөләйха, йәтим итмәç ең инде ирем-де, имеш. Төкөрҙө ул иңә, тиҙ үк табыр ине үҙенә кәрәк йәрен.

Туҡтатманы уны Фәйрүзә. Зөләйханы ла аңлай ул, Мәргәнде лә. Эскесе ире арҡа ында мәңге бәхет күрмәгән берәү е бөтә ирҙәрҙе күрә алма а, ҡатыны янында үҙен әр саҡ бәхетле тойған икенсе е үлер алдынан бул а ла яратҡан кеше енең күҙенә баҡҡы ы киләләр. Ғәҙәттә, үҙен бәхетле тойған кеше әм фани донъя менән осто-осҡа ялғар әҙәм, үҙенә бары ы ла мөмкин, тип уйлай бит. Мәргән дә шулай уйлай ала икән, тимәк насар түгел. уңғы тапҡыр йәне теләгән кеше менән ос-рашҡы ы килеүе гона мы ни? Ярай, ғүмер буйы ине көттөм, ине яраттым, тип тә әйт ен, ти, уға... Ә уйла аң, ул бит миңә ғүмер эсендә бер тапҡыр ҙа яратам тип әйткәне булманы. Тик үҙенең яратмағанын да белдермәне, ҡул күтәрмәне, йөрәк ҡыйғыс үҙ әйтмәне. Күрә ең, "яраттым", "көттөм" үҙҙәре телгә йөрәк ҡушыуы, күңел саҡырыуы менән киләләр. Тик ошо мәлдә нимә эшләргә уң Фәйрүзәгә?

Тынып ҡалған Зөләйханың ике ҡулын Фәйрүзә киң устары менән ҡапланы ла тыныс ҡына үҙен әйтте, аңлайышлы итеп, ҡәтғи әйтте:

– Барып ҡайт Туңйылғаға. Мәргән үлем түшәгендә ята, ине күрге е килә, тип кенә әйт. Килеү-килмәүе уның ихтыярында. Зин ар, яр ып артыҡ бер нәмә лә ысҡындырма. Саҡырма аҡ, Мәргән мәңге бәхиллеген бирмәç. Бирмәç, – урыны-нан ҡалҡынды ла: – Сит кеше түгел бит, бергә ғүмер кисергән кеше-е... – тип өçтәне.

Ишектән килеп ингәс тә ул икәнен таныны Фәйрүзә. Күҙ алдына килтереүе буйынса, шулай сибәр булырға тейеш ине ул. Сөм-ҡара күҙ, килешле йөҙ. ис тә шаталаҡҡа оҡшамаған. Уйсан ҡараш, тыйнаҡ йылмайыу. Тормош эшкәрткәнме, тыумыштан шулаймы? Уны күргәс, нисә көн түҙеп йөрөгән Фәйрүзәнең ҡапыл илағы ы килде. Бына ул ғына Мәргәнде әжәл тырнағынан тартып алыр, тигән өмөтмө, мин үҙем быны булдыра алмайым, тигән көс өҙлөкмө, әллә шундайын сибәрлек алдында ҡаушап ҡалыуымы – бары ы бергә тамағына төйөр булып ки-леп тығылды. Үҙен тиҙерәк ҡулға алырға тырышты хужабикә.

– Сисенеп үтегеҙ, алғы яҡта Мәргән. Әйтер үҙе бармы, еҙҙе күрге е килде, – тип өйләнде. Йоҡа бишмәтен алғас, ҡунаҡ оҙон ҡуйы сәстәрен тағатып, бер урынға төйнәп йыйып ҡуйҙы ла яулығын рәтләп бәйләне. Юл ыңғайы стеналағы көҙгөгә күҙ ташлап, маңлайын, битен ыпырып ҡуйҙы. Ипле ҡыланып, әлмәк кенә баçып алғы бүлмәгә уҙҙы.

– Мәргән, ин саҡырған, – "ҡунағың" тип әйтергә уҡталғайны ла, тик теле улай әйләнмәне ҡатынының, – кешең килде.

Үҙе иренең арҡа ын рәтләп япты, мендәрен ҡалҡыта биреп ҡуйҙы. " өймәлекле, хәстәрлекле икән ҡатыны. Тауышы ҡалай яғымлы, – тип уйланы Сәбилә. – Донъялары иркен, таҙа. Бәхетле булғандыр Мәргән. Күңелендә нур-именлек бул-ма а, былай шағараҡ ҡороп донъя көтөп буламы ни!"

Мәргән күҙен асмай ята бирҙе:

– Фәйрүзәм, ултырғысты яҡынныраҡ ҡуй әле, Сәбилә ултыр ын.

"Тауышы шул килеш. Ҡәтғи ҙә, моңло ла, ис үҙгәрмәгән. Ошо тауышты бер тапҡыр ғына бул а ла ишетергә ине, тип күпме зар-интизар булып йәшәлде. Ҡа-лай ҡатынына йомшаҡ өндәшә".

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 40



Ҡунаҡ ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына Мәргән янына килде.

— аумы, Мәргән.

"Үҙгәргән. Ҡартайған ҡалай. Мө абәтлеге бөт ә лә, йөҙөндәге ила илығы бөтмәгән. Күҙҙәре аман зәңгәр микән?"

Мәргән күҙен асмай яуап ыҙ ята бирҙе. Аптырап, тынлыҡты Фәйрүзә боҙорға мәжбүр булды:

— Ат типкәйне. Үпкә ендә электән үк сире булған, шуны ҡуҙғатҡан теге бейә тояғы, — тип аңлайыш ыҙ үҙ өйләне.

Шул саҡ Мәргән юрған аҫтынан аҡ ҡына уң ҡулын сығарҙы ла, күҙен асмай ғына әрмәнеп, Сәбиләнең ҡулын эҙләп тапты. аҡ ҡына ыйпаны.

— Эйе, Сәбиләнең ҡулдары... — Өҙөк-өҙөк кенә сыҡҡан тауышта тиҫтә йылдар аҙашып йөрөгән моң да, хәҡиҡәт тә, әрнеш тә, зар ҙа бар ине. — Аяҡ өҫтө ҡаршы алып булманы, ғәфү ит.

Ҡулды оҙаҡ ыйпаны Мәргән. Сәбиләнең тып-тып тамған күҙ йәштәренә лә иғтибар итмәй, ыйпаны ла ыйпаны. Был тетрәндергес мөхәббәт тамаша ын ситтән күҙәтеүсе, ул тамашала үҙенә урын юҡ икәнен бөтә йөрәге, булмышы менән тойған Фәйрүзәнең күңелен иңрәткес тойғо биләне: "Ни ғүмер йәшәп, минең ҡулды шулай наҙлы ғына итеп ыйпағаны юҡ бит, юҡ бит".

Мәргән күҙен асты. Сәбиләнең йәшле күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап торҙо.

— ин сати булманың! — Ҡырыҫ тауыш ҡапыл ауаны ярҙы. Тынын тигеҙләгәс, өҫтәп ҡуйҙы. — Килгәнең өсөн рәхмәт, Сәбилә. Башҡа үҙем юҡ, бәхил бул. — Ир кеше күҙен йомоп, башын ситкә борҙо. Ҡулын үҙенә тартты, ләкин ике ҡулы менән йәбешеп өлгөргән ҡатын уны ебәрмәне.

— ине уйлап, ине ағынып, ине юҡ ынып, мең янып, мең терелдем мин, Мәргән. Ҡаты бәғерле булма, ҡаты хөкөм сығарма улай.

Мәргән өндәшмәне. Фәйрүзә табын әҙерләргә тотондо. Ҡатҡан әйкәл төҫлө Сәбилә бер ни өндәшмәй оҙаҡ ҡына ултырҙы.

"Бик ҡартаймаған, шулай ҙа аҡылды юйырҙай матурлығы ҡалмаған, уҡа ы ҡойола башлаған. Яҙмыш йөгө ныҡ баҫҡан микән, күҙҙәре бигерәк эскә батҡан. Тик ирене ситенән генә шул тиклем ым индырғыс итеп йылмайыуы, шунан хасил булған ым индырғыс серлелеге китмәгән. Бөгөн йылмайып баҡманы ла түгелме уң? Ҡайҙан сағылды ул йылмайыу? — Мәргән ҡапыл Сәбиләгә боролоп ҡарап алды. Уны ы ҡымшанмайса ултырыуында булды.— Ә ирендәре янындағы соҡорҙары бит ҡалай аман да, йәш саҡтағыса, нур сәсеп тора. Шул йылмайыуы заманында әсир итте. Тыйнаҡ ҡына йоҡаҡ иреңенән урып үпке е килә торғайны бит. Тик егетлеге генә бығаулы, тәүәккәллеге кисеп сығырҙай ай ине шул. Был татлы иренде башҡа берәү үпкән, был ым индырғыс иренгә башҡа берәүҙең генә буйы еткән. Ни тиклем ғүмер үткән, ә ым индырғыс серлелек үтмәгән, — тип уйлап ятты Мәргән. Эскә батҡан күҙҙәрен күҙ алдына килтергәс, йәл булып китте Сәбилә уға. — Ҡатыраҡ ҡағылдым, буғай. Үҙемдең уны уйламаған көнөм, юҡ ынмаған төнөм әҙ булдымы ни? Ҡыҙғанырға кәрәк булғандыр, бәлки. Улайға кит ә, ҡасан да бул а ҡылғандар өсөн яуап бирергә кәрәк тә ә. Мөхәббәт ул — татлы хис, өйөш кенә түгел, бер-береің яҙмышы алдында яуаплылыҡ та, бер-береңә тоғролоҡ та шул. Шул яуаплылыҡты тойма аҡ, тоғролоҡ булма а, Фәйрүзә менән ошо көнгәсә ҡулға-ҡул тотоношоп етә алыр инекме?.. " Ҡатыны иҫенә төшкәс, Мәргән:

— Фәйрүзәм, сәй ҡайнатып, ҡунаҡты ыйла аңсы, — тип көскә тауыш бирҙе. Был ваҡытта Сәбилә ҡуҙғалғайны инде.

Мәргәндең ауырыуы көсәйгәндән-көсәйҙе. Тамағына бөтөнләй бер нәмә лә барманы. Көслө уколдар ваҡытлыса ыҙланыуын баҫ а, ҡан тамырҙарына ҡуйылған система туҡландырҙы ла, бер аҙ хәл дә алып инде. Башын мендәренә генә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 41



ҡалҡытып алырға булашҡанда ла көсөргәнешлектән Мәргәндең хәле бөтә ине. Ярау итеүҙән бөтөнләй туҡтаны. Тик хәтере лә, аңы ла яңылышманы, бының менән ул үҙе лә, аңлы тормошонда әр саҡ янында килгән ҡатыны ла бик бәхетле ине. Фәйрүзә уның янынан китмәне, ирендәрен ыулы мамыҡ менән сылатып ҡына торҙо.

унғы сәфәренә ҡуҙғалыр төндә бахырың фанилыҡта унғы балҡыш кисерҙе. Әжәлен тойомлауы булдымы, ыҙланыуҙарынан ҡотолорон иҙемләнеме – был көндә ул мыжыманы, хас та тормоштан ҡәнәғәт йылмайып торған кеше кеүек күренде.

– Ни гона тарым өсөн язалай икән мине Хоҙай, Фәйрүзәм? – тип өндәште тәүҙә. Әйткәндәре аңлайыш ыҙыраҡ ишетел ә лә, аңлай ине унын телен ҡатыны.

– Ни гона тарың бул ын, ти, инең. Сабый сафлығы менән йәшәнең, шул сауаптарың менән китер ең дә инде. – Фәйрүзә күҙ йәшен өрттө. – Минең әжәлемде үҙеңә алдың бит, Мәргән. Мин үлергә тейеш инем. Был инең әжәлең түгел... Түгел...

– Кем әйтте?

– Әйтмәне, күңелем шулай тине.

– Ҡабаланма! Үлергә. инең өсөн мин... – Әйтеп бөтә алмай, йылмайырға тырышты Мәргән.

– Иҫәр ин, үҙенде генә уйлай ың. Мин ин еҙ нишләргә тейеш?

– Бәхетем бар, үҙ ҡулдарым менән ине ер ҡуйынына алмайым. ин дә бәхетле, – ауырыуҙың тағы хәле бөттө.

– Нисек?

– Мине ер ҡуйынына ала алыуың менән... Мин ныҒыраҡ бәхетлерәк.

Фәйрүзә иренең әйткәндәрен аңламаны:

– Хәлең бөтә, тыныслан,– тип унын маңлайындағы тирен өрттө. Иртәгә уң булыр, тип уйланымы, Сәбилә килеп ҡайтҡандан бирле борсоған ораун бирмәй түҙмәне үҙе:

– ин мине әҙ генә бул а ла яраттың микән, Мәргән?

Был үҙҙәрҙән Мәргәндең илағы ы килде. "Мин бер тапҡыр бул а ла уға "яратам, үлеп яратам" тип әйттем микән, – тип уйлай алды. – Исма ам, иларлыҡ та хәлем юҡ бит. Ә ул үҙҙе әйтерҙәй көсөм бармы?" Бөтөнләй тынып ҡала алмағанын да аңлай ине үлеп барған аҡыл:

– Мин яңынан тыу ам, тик инең менән генә йәшәр инем, Фәйрү-үзә-әм!

Таңда Мәргән хәләленең ҡулында йән бирҙе.

***

Мәргәнде ҡәбергә генә төшөргәйнеләр, донъя яңғыратып, ҡапыл "Тор-ройыҡ, тор-ройыҡ" тигән асыҡ ҡына тауыш ишетелде. Былай ҙа ярылыр сиккә еткән йөрәк өҙөләр әм өҙләгәрҙәй булып ыҙылып- ыҙылып типте. Мәрхүм менән хушлашырға килгән бөтә ауыл, үҙе лә иҙмәҫтән, күккә баҡты. Ҡанаттарын талғын ғына ҡаға-ҡаға, хушлаша-хушлаша, сылбыр булып торналар китә ине. Ҡәбергә төшөп, изге әм ҡәҙерле кеше енең кәүҙә ен ләхеткә алып торған оло улы түҙмәне, торналар сылбырына йәбешеп атай ҙа ҡуҙғалды, тип ауыр итеп күр өнөп ҡуйҙы.

Ә Фәйрүзә бөтөнләй хәл еҙләнеп ергә сүкте. ығылып илағы ы килде. Ҡысҡырғы ы, үкерге е килде. Тамаҡ төбөндәге төйөр генә быуаға йырылып китергә ирек бирмәне. Берсә башын ергә эйҙе. Ҡәбер тупрағын усына ныҡ итеп ҡыҫып, ҡатып ҡалды. Ҡара тупраҡ, әсе ҡайғыға түҙмәй, бармаҡ араларынан ығылып килеп сыҡты. Берсә ҡалҡынып күккә баҡты. Йәш аша күренгән торналар йыраҡлашҡандан-йыраҡлашты. "Мәргәнемде ҡалдырығыҙ, уны алып китмәгеҙ минән, тор-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 42



налар..." — Йөрәк төбөнән килгән ауаз тышҡа сығып етмәне, бары хәл еҙләнгән ирендәр генә ҡалтыранып елкенеп ҡуйҙы.

***

Мәргәнде уңғы сәфәренә оҙатҡас, Фәйрүзә көн менән төндө, ҡайнар менән ыуыҡты бутап бер булды. Тәүге айҙарҙа, балалары янда булған саҡта, тормош йылғаһы ҡәҙимге улағынан аҡҡан кеүек ине лә. Уларға ла шөкөр, эш тип донъя тирмәненә баш-аяҡ инә алып китмәнеләр. Яйын табып, ваҡытты тышаулап, әсәләренең хәлдәренә инделәр, аталарының рухтарына ихтирам күр әттеләр. Мәргәндең ҡырҡына хәтлем ата йортоноң мөрйә енән төтөн сығарҙылар, аҙға ғына бул а ла әсәнең күңелен йылыттылар. Балалар янында үҙен ныҡ тоторға тырышты әсә кеше, Мәргәнен нисек кенә юҡ ын а ла, көндөҙҙәрен балауыҙ ығып ултырманы, ваҡ-төйәк эш менән алданы ла, алданды ла. Ул-ейәндәре изге кешеләрен ағынып үҙ ҡат алар, артыҡ хистәргә бирелмәй, йә әйткәндәренә аран ғына ҡушылды, йә бөтөнләй өндәшмәүҙе хуп күрҙе. Китер саҡта балалары үҙҙәре менән барырға бик димлә әләр ҙә, күнмәне, Мәргән йылы ын, ире йәнен аҡлаған өйөн ҡалдырып китеү хыянатҡа тиң кеүек ине уға.

Бына өй бушағас инде... башланды. Баяғы төйөр әсе ағышҡа түҙмәне, ирене лә быуаны йырып ебәрҙе. Фәйрүзә, балаларын автобусҡа ултыртып, ҡайтып ҡапҡа бауына ғына үрелгәйне, быуындары ҡалтырап, сүкәйә төштө. Унда мине берәү ҙә көтмәй, тигән үҙәккә үткес хәҡиҡәт алҡымынан алды. Ҡапҡа бағана ына өйәлеп, битен яулығы менән ҡаплап оҙаҡ торҙо ул. Ғүмере эсендә беренсе тапҡыр ихата - ына үтке е килмәне. Шар асыҡ ҡапҡа уны етем әм буш донъя ына саҡырҙы. Ҡапҡаны эстән аҡ ҡына япҡас, башын, сикәләрен тотоп, Мәргәненең йөҙөн күҙ алдына баҫтырып ҡараны. ултанлай- ултанлай йүгереп килеп сығыр ирен ҡапыл ғына хыялында ла терелтә алманы бисара. Тормош ҡайнағанын аңлатҡан ауыл урамының шауы ихатаға үтеп инә алманы, тын ҡурырлыҡ тынлыҡ көслө булып сыҡты. Быны бар булмышы, бар йөрәге менән тойған ҡатын ҡапыл болдор күтәрмә енә йүгереп менде лә, нишләргә белмәй, икереп- икереп бейергә тотонды. Башынан яулығы ыпырылып төшкән бисара сәстәрен туҙҙырып, шашып-шашып бейене, тыны ҡыҫылды. Үҙенең әҙәп еҙ шашыуынан башы әйләнде. Ҡарлыҡҡан тауышы менән ниндәйҙер таҡмаҡ та көйләп маташты:

*Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр,*
*Мөхәббәткә бар микән?..*

Быуындары ҡамырға әйләнеп, бөтөнләй хәлдән тайғас, солан туп а ына арҡыры уҙылып ятты. Йыш-йыш тын алып, әжәлгә лә юҡ, мөхәббәткә лә — шиш, дарыу юҡ, чуртым да, тип күҙен йомоп ята бирҙе. Тынлыҡты ара-тирә берсә үк егән, берсә үкергән тауыш ҡына боҙҙо. Бахырҡайҙың сикә е буйлап, туҙған сәс бөртөктәрен еүешләтеп, бормалы ике улаҡ туҡтамай аҡты ла аҡты. Айҙар буйы ирекка сыға алмай ятҡан түҙге еҙ ҡайғы кисерештәре лә, аңлата алмаҫлыҡ яңғыҙлыҡ хәсрәте лә иҙәнгә тоҙло күҙ йәштәре булып йәйелеп китеп, байып барған ҡояш нурҙарында ялтырай ине.

***

Тамағына аш барманы, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Хәлен белергә ингәндәргә лә ихласлыҡ күр әтмәне. Өҫтәленән төшмәгән, әр саҡ тереклек белдереп боҫон болғап, йырлап ултырған самауыры мейес янында, кеше ҡулы теймәгәс, саңланып, арғайып, түңкәрелгән килеш тынып ҡалды. Унын урынын өҫтәлдә, етемлек төҫөн биреп, электр сәйнүге алды. Уны ы ла, хужабикә енең бөтөнләй тамаҡтан яҙмағанын иҫбатлап, онотҡанда бер генә тауыш биреп торҙо.

Сәйнүгенә ыу алып торғанда, келт кенә мунса янындағы ҡоҙоҡ иҫенә килеп

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 43



төштө. Донъяның йәмен юғалтҡан Фәйрүзә, үҙенә бер сер асҡандай, тиҙ генә кейенде лә баҡса артына йүгерҙе. Шәп йүгерҙе, әйтер ең, уны берәй е көтә. Ҡабаланып, ҡоҙоҡтоң ҡапҡасын аса алмай бер булды. Асҡас, тутыҡ ултырған сылбырлы биҙрәне, алабарманланып, шаптыр-шоптор түбәнгә – ҡоҙоҡ төбөнә төшөрөп ебәрҙе. Күнәге артынан эйелгәнсе яулығы башынан ыпырылып төшөп китте. Ҡолғаға беркетелгән сылбырҙы тартҡан айын, тыны ҡыҫылып: " ыу ғына ҡорома ын, әтеү мөхәббәт тә улый, ҡоҙоҡ ҡына мүкләнмә ен, әтеү кеше лә мүкләнә", – тип аңлайыш ыҙ үҙҙәрҙе тәкрарланы. Биҙрә өҫкә килеп сыҡҡас, уны аҡ ҡына ергә ҡуйҙы. Берауыҡ биҙрәне ҡосаҡлап ултырҙы. Ундағы ыуҙы бер усы менән генә алып, биттәрен, тағатылған сәстәрен ыпырҙы: "Ҡоромаған! Мәргәнем ҡоҙоғо ҡоромаған", – тине, аран ғына йылмайып. Биҙрәне үҙенә табан ҡыйшайтып, уға иренен терәне: "Фу, аҙ тәме ингән түгелме? Әллә ауыҙым тағы тәм тоймаймы?" – Ҡапыл ауыттан ауыҙын тартып алды. Яңынан тәмләне. Тороп, ҡоҙоҡ ауыҙынан эйелеп эскә ҡараны. Алған ыуын имән төбөнә алып барып түкте лә биҙрә ен шаптыр-шоптор тағы ҡоҙоҡ төбөнә төшөрҙө. "Юҡ, юҡ! Мүкләнергә ирек бирмәйем. Мин тере әле..." – Хәлдән тайғансы ыу ташыны имән төбөнә.

Ошонан алып бәрәңге баҡса ының ыҙанындағы, мунса янындағы ҡоҙоҡтан сәйлек кенә ыу алыу Фәйрүзәгә көндәлек бер татлы хәстәргә әйләнде.

Тик бауырға ятҡан юҡ ыныуҙы Мәргән ҡоҙоғо ыуы ғына баҫа алманы. Кире - енсә, тотонған әр әйбер, күҙгә ташланған әр нәмә, Мәргән тура ындағы хәтирәне яңыртып, үҙәккә үтте. Мәргәне тура ында, уның изге кеше булыуы хаҡында, күңелендәге ен уртаға алып, кем менәндер өйләшке е килде. Тик ул кеше юҡ – бына иң ҡыйыны шул ине Фәйрүзәгә. Бер нисә тапҡыр Зөләйхаға инеп тә ҡараны. Ғүмер буйы иренән туҡмалып, кәм енеп йәшәгән күрше е менән был турала үҙ суйырғытыу бөтөнләй мәғәнә еҙ ҙә кеүек тойолдо. Шуға үҙҙәре ауыл хәбәрҙәренән ары китмәне лә.

Күңеле болоҡ оғас, йөрәге ағышҡа түҙмәгәс, ул Тунйылғаға юлланды. Иренең йәшлек мөхәббәте менән осраш а, бәлки, әҙерәк бул а ла йөрәге тынысланыр. Ике е бер ир ҡуйынында ятма алар ҙа, йәндәре бер күңелгә тартылған бит. Мәргәндең йөрәгендә ике енә лә урын да табылған, шикелле. Тик кемдеке түрҙәрәк булды икән? Мөхәббәттең әллә бизмәне юҡ микән? Улай ти әң, Фәйрүзә урыны түбәндәрәк бул а ла үкенмәҫ ине, ни ти әң дә, Мәргәндең мөхәббәтен ғүмере уҙымында уята ла, аҡлай ҙа алды. Ә Сәбиләнең урыны? Ул бит Фәйрүзәнән күпкә, бик күпкә сибәрерәк, ым ындырғысыраҡ. Мәргән ғүмере буйы Сәбиләне юҡ ынып, ағынып йәшәгәндер, тик миңә генә белдермәгәндер, Мәжнүн бахыр. Ҡулын тотоп Сәбиләгә, сати түгел ең, тине. Уны ы ни тигәне булды икән? Ә бер йөрәккә ике мөхәббәт ыямы уң? Тилертә бит был ағыш, ай, тилертә...

Ошондай уйҙар менән килеп инде Сәбилә йортона Фәйрүзә. Хужабикә ултырған урынынан тороп ҡаршы ал а ла, йөҙөнә борсолоу ҙа, шатланыу ҙа ишараты сығарманы. Бөтөнләй көтөлмәгән кеше килде, тип хәүефкә лә батманы, шикелле, артыҡ ихласлыҡ та күр әтмәне. Амин тотҡас, өҫтәлгә ҡайнап торған самауырын ҡуйҙы, саҡырылмаған ҡунағын табынға саҡырҙы:

– Маҡтап йөрөй өң, самауырым ҡайнап ҡына тора.

– Маҡтарлыҡ та, маҡтанырлыҡ та хәлем юҡ, ҡайғыға батып йөрөүем.

– Ишеттем. Урыны йәннәттә бул ын. – Башҡа йыуатыр үҙ тапманы Сәбилә.

Өндәшмәй генә сәй эстеләр. Өйҙә тынлыҡ урынлашты. Тағы йәнде өтөп барған тынлыҡ. Бер себен безелдәп-безелдәй. Үрмәксе ауына эләккәндер мәхлүгең. Фәйрүзә үҙен шул себенгә оҡшатты. Ней уйҙарынан ҡотола алмай, ней донъянан йәм тапмай. Осоп кит әң ине ул берәй яҡҡа. Ирекле булып. Ултыра торғас, ул Сәбиләнең йөҙөнә баҡты. Күҙҙәре бигерәк бойоҡ, уға ла еңел түгелдер.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 44



— ағына торғайныңмы Мәргәнде? — тип тыныс ҡына орап ҡуйҙы Фәйрүзә.

— ағындым, — тип ҡырыҫыраҡ яуап бирҙе хужабикә. Өйҙә тағы тынлыҡ хөкөм өрә башланы. Баяғы себен тауышына самауыр йыры ҡушылды. Уғаса булмай, сәғәттең тек-тек килеүе ҡолаҡты ярырға тотондо. "Ҡасан шулай Фәйрүзәнең сәғәт тауышына ҡолағы тонғайны әле? Эйе шул, тәүге никах төнөндә бит. Беҙҙең уртаҡ ваҡытыбыҙ башланды, тип сәғәт сылбырын тартҡайны. Ә хәҙер... уртаҡ ваҡыт туҡтаны микән?"

— уңынан оноттом. — Тынлыҡты Сәбиләнең бойоҡ ҡына әйтелгән үҙе боҙҙо.

— Ғәрип тип оноҡкан ындыр, — Фәйрүзә асыуланмай ғына әйтте.

— Ю-у-уҡ, — тип уҙҙы Сәбилә. Бер аҙ үҙ еҙ ултырғас, өҫтәп ҡуйҙы: — әр саҡ тиң күрҙем... Яҙмышыма буй оноуым булғандыр.

...Их, мөхәббәттәре уң! Бигерәк оҡланғыс ине лә. Мәргән менән ике ен инд кино ы геройҙарына оҡшатыуҙары юҡҡа ла булмағандыр. Шул ваҡытта Сәбилә иҙә-тоя йөрөнө бит, кинолағы мөхәббәт тарихтары әр саҡ тиерлек бәхет еҙ тамамлана, беҙҙең менән дә бер-бер хәл булып ҡуймағайы, тип әр саҡ ниҙәндер ҡурҡты, уңынан, Мәргәндең әрменән килгән хаттарын ҡулына алған айын, насар хәбәр булмағайы, тип ҡалтыранып төштө.

Әрмегә оҙатҡан саҡта барса халыҡ алдында оҙаҡ бер-бере енең ҡулдарын тотошоп торғайнылар.

— Артыҡ ҡыҙыл да тиҙ уңа, тиҙәр. ин шуға ышана ыңмы, Мәргән? — тигәйне Сәбилә.

— Мин уңдырмам, ин генә көт, йәме, — тип ышандырғайны ауылдың беренсе егете.

— Янырмын, туңырмын, көйөрмөн, тик барыбер көтөрмөн, — тип шыбырҙағайны өйгәне. — Тик ин генә ау килеш әйләнеп ҡайт.

— уғыш ваҡыты түгел дә ә... — Ҡайҙан килгән ул уй тиер ең, ҡапыл шул саҡ Мәргән әйтеп алма ынмы: — Ә мин үл әм, ин сати булыр ыңмы, Сәбилә?

Ул заман кешеләре инд кино ы аша "сати"ҙың ни аңлатҡанын беләләр ине. Тоғро, артыҡ тоғро ҡатындарҙы шулай атайҙар. Ирҙәре үл ә, мөхәббәттәренә тоғролоҡ билдә е итеп, өйгән йәрҙәре үҙҙәрен-үҙҙәре яндыра икән. Мәргәненең ни әйтергә теләгәнен әйбәт төшөн ә лә, Сәбилә тәүҙә ни әйтергә белмәне.

— Мин сати булырмын да ул, тик ин иҫән ҡайт, йәме, — күҙенән йәштәр тамды ҡыҙҙың.

өйгәне уны күкрәгенә ҡыҫты.

— Илама, ин утта янма ын өсөн, мин үлмәйәсәкмен, ҡәҙерлем. — уңғы үҙе шул булды Мәргәндең.

Ә тормоштоң үҙ ҡанундары, үҙ дарыуҙары, үҙ ағыуҙары. Сәбилә Мәргәнде көтә алманы, көтә торған юлын да табалманы. Мәргәндең ҡазаланыу хәбәрен ишеткәс, аҡылдан яҙа яҙҙы ҡыҙ бала. Ашын, эшен онотто. Мин уның янына барам, ул үл ә, мин дә үләм, тип тәгәрәп илаған бала ын күреп, ниндәй ата-әсәнең йөрәге түҙ ен. Ни ҙә бул а ҡылырға кәрәк. уғышты, утты күргән ата ы, ҡыҙына бәхет теләүе булдымы, уны, ай-вайына ҡарамай, ситтә йәшәгән еңлеләренә оҙатты. Яҙмышына күнмәйсә булдыра алманы ҡыҙ бала, ниҙер ҡылырға тәүәккәллеге лә етмәне, ҡайғынан аңлы тормошто аңламаған, ҡайҙа барырға белмәгән аҙашҡан болан бала ы хәлендә ине. Юлдары уны ҡаҙаҡ далаларына алды ла китте. Алып ҡына китмәне, юлын да, яҙмышын да шунда аҙаштырҙы... Тыуған ерҙәренә әйләнеп ҡайтыуына ла бына нисә йыл ғына әле.

Үткәндәре иҫкә төшөп киткән Сәбилә, тағы бер аҙ ултырғас:

— Бик онотмағанмын да икән, — тип ҡуйҙы.

— Нисек инде?

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 45



– Теге көн Мәргәндән йомошсо килеп киткәс, быуындарым йомшарҙы, юҡҡа-барға хәлем бөттө. Бармайым микән, күпме йылдар үткән, күпме ыуҙар аҡкан, тип икеләнеү ҙә булғайны. Тик күргем килде. – Ҡатын яр ып китте: – Күргем килде. Бик күргем килде. Мәңге күрмә әм дә риза кеүек төңөлөп бара инем инде бер мәл. Ә ул көн күргем килде. Үлеп китер ҙә, йәндәй яҡын кешемде мәңге күрмәм, тигән тойғо алҡымымдан алды. уңғы тапҡыр йәнемде усыма ҡыҫып, уның янына йүгерҙем...

Бүлдермәне уны Фәйрүзә. Тынған арала үҙ ҙә ҡыҫтырманы. "Беҙҙең ваҡыт туҡтанымы икән?" – тигән ораү төйөр булып тамағына түгел, бауырына ятты уның. Шуға яуап эҙләне.

Сәбилә тағы бер аҙ ултырғас, үҙ-үҙенә өйләгән кеүек, хистәрен бушата торҙо:

– Онотмағанмын икән, ҡулының йылы ы шул килеш кенә ине. Бармаҡ оста-рымдан йөрәк ҡылдарына тиклем йылы нур кеүек үтте. Әле лә тоям шул йылы-лыҡты...

Был үҙҙәрҙән уң Фәйрүзәнең ҡапыл йәне ҡабарҙы:

– Ҡулы йылы, имеш. Мин йылыттым, мин аҡланым уны. Йылы ҡулды тойғоң кил ә, сати булырға ине иңә. – Был үҙҙең ни аңлатҡанын белмә ә лә, үҙенсә Сәбиләнең ауыртҡан еренә тейге е килде. Сәбиләнең дә шеше ытылды булыр, сымылдыҡҡа инер төндә ултырған оялсан ҡыҙҙар кеүек, ҡарашын иҙәндән алма-ған баҫалҡы ҡатын ҡапыл Фәйрүзәгә тишерҙәй итеп ҡараны:

– иңә бында нимә кәрәк уң ул?

– Бер нәмә лә кәрәкмәй! Мәргәнде ағындым, үлеп ағындым... Шул! – Фәйрүзә әкрен генә ҡалҡынды ла, яулыҡ осо менән күҙҙәрен өртә- өртә, ишеккә йүнәлде. Сәбилә, устары менән битен ҡаплап, башын эйеп, ҡымшанмайса ултырып ҡал-ды.

***

Ике аҙнанан Фәйрүзә лә мәрхүмә булды. Юҡ, ашҡаҙан сиренән түгел ине үле-ме. ары ағышҡа батҡан ҡатындың ҡапыл йөрәге туҡтаған, тинеләр. Эстән янып, эстән дөрләгән икән бахырҡай. Са-ти...

Ул йылы ҡыш хәтәр килде. Яҙын баҡса артындағы, етем ерәп ҡалған мунса янындағы имән ниңәлер япраҡ ярырға ашыҡманы. Тамырына ыуыҡ теймә ә ярар ине... Ә йәй урта ында, бары ын аптыратып, унда-бында ҡытыршы йәшел япраҡ-тары күренә башланы.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 46





**Сәлимйән**
**БӘҘРЕТДИНОВ**

# АҠҠОШ АУАЗЫ

**хикәйә**

Әхтәм бик иртә тора. Ҡоштар ҙа, һыу тереклеге лә таң менән уяна. Уяна ла үҙ хәстәре менән йәшәй башлай. әр йән эйәһе ҡыбырлай, ҡыймылдай, тәғәм эҙләй, таба, ташый, ашай. Әҙәм нәҫеле Әхтәмдең шөғөлө иһә — балыҡ тотоу. Әлбиттә, ҡураһында һыйыры, һарығы, ҡаҙы, тауығы ла бар. Мәгәр мал-тыуарҙы үҫтерергә, көрәйтергә ваҡыт кәрәк, һуйып, гелән баҙарға илтеп булмай. Ә балыҡтың ғиләһе башҡа. Ул — тәбиғәт бушлай биргән байлыҡ, яҙын, йәйен, көҙөн көн һайын тигәндәй ҡулаҡса килтерә. Ялҡауың ғына килмәһен.

Әхтәм Ҡайынкүлгә йәшертен генә ау һала, ауға табан, ҡарабалыҡ, ваҡ суртан, шүрәт эләгә. Суртанды ялтырға ла ҡаптыра. Табышын яҡындағы ҡаланан ял итергә килеүселәргә һата. Улар йәйен күл буйында мыжғып тора. Бәғзеләре палатка ҡороп, һыу инеп, музыка уйнатып, йырлап, бейеп аҙналар буйына ята. Инде байтағы Әхтәмгә таныш-белеш. Уның ярға сығыуын көтөп торалар, тотҡан балығы барыһына ла етмәй ҡала. Тағы килтереүен, күберәк килтереүен үтенәләр. Вася тигәндәре бигерәк әрһеҙ, хәмер эсереп, балығының хаҡын төшөртә, өйөнән һөтҡаймағын, хатта ҡоро утынын да килтертә. Гипноз хәлендәге кеше һымаҡ, Әхтәм уның әйткәнен үтәй. Тегенеһе һалпы яғына һалам ҡыҫтыра, маҡтап-хуплап рюмка тоттора. Был ныҡ ҡына арыған-талған, еүешләнгән балыҡсының тәненә еңеллек килтерә, кәйефен күтәреп ебәрә.

Әхтәм балыҡсылау әмәлдәрен бала саҡтан һәйбәт белә. Ул ауылдан ситтә, күл башында үҫте. Иҙелбаштағы комбинат етәкселәре көсөргәнешлектән, йәнде ҡаҡшатҡан ығы-зығынан бушаныу өсөн бында, хозур тәбиғәт ҡосағында, ҙур ғына йорт һалдырғайны. Инәһе килеүселәргә табын әҙерләй, мунса яға, түшәк кәрәкярағы йыуа, үтекләй, атаһы балыҡсылай, ау ҡорорға, шапылдатҡыс менән балыҡ ҡурҡытырға улын да алып сыға ине. Балыҡ һурпа бешерергә лә, ҡурырға ла, мул итеп күстәнәскә лә кәрәк. Ә ҡунаҡтар йыш килә. Баштарына кейеҙ ҡалпаҡ, ҡулдарына бөз бейәләй кейеп, ҡыҙыу мунса ташына ҡайнар һыу ҡойоп, ҡып-ҡыҙыл булғансы сабыналар ҙа ах та ух күлгә сумалар. Әхтәм дә улар тирәһендә уранғылай, юҡ-бар йомоштарын үтәргә йүгергеләй.

*Сәлимйән Бәҙретдинов — Яҙыусылар союзы ағза ы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шә ит Хоҙайбирҙин, Муса Мортазин исемендәге премиялар лауреаты.*
*“Ватандаш” журналының баш мөхәррир урынбаҫары.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 47



Түрәләр ҡәнәғәт: «Малайка молодец!» — тип һумлыҡтар ҙа һонғолайҙар. Атаһы: «Улар аҡсаны күрәп ала, металлург булһаң, һин дә алырһың», — ти. Гел шулай тигәс, мәктәпте тамамлағандан һуң Әхтәм металлургия техникумына уҡырға инде, шунан комбинатта сым һуҙа башланы, арыу ғына бол алды. Әммә бәхет оҙаҡҡа барманы. Донъяны пыран-заран иткән ҡойон һымаҡ, күнегелгән йәшәйеште үҙгәртеп ҡороуҙар Әхтәмгә лә ен-пәрей һымаҡ ҡағылды. Йөҙәрләгән иптәштәре менән уны ла эштән ебәрҙеләр. Әүәлге таныш түрәләр ҙә алмашынғайны. Шуның замирынан бер килке ҡаңғырып йөрөнө-йөрөнө лә ауылға ҡайтты Әхтәм. Йәшәр әле балыҡ аулап, бирешмәҫ.

***

Мәғрур тауҙар, һомғол ҡайындар ҡуйынына һыйынған Ҡайынкүл иҫ киткес матур. Тирә-йүнгә еләҫлек бөркөп, һауаны сафландырып йәйрәп ята ул. Баш яғында тау һырттары һыу ситенә үк килеп етә, ҡая таштары ҡалҡып тора. Көнсығыш, көнбайыш тарафтары һөҙәк, йәм-йәшел сиҙәм, ҡомло, ташлы түбәлек. Йәнәштәге һырттарында ҡарағай, ҡарағас, дунала күренгеләй, таш еләге, ер еләге, әберсә, сейә тамылйып бешә. Үҙәндәрендә Көсөкбай, Тәкәлек, аҡйылға, арғамыш һыуҙары сылтырай. Күк ынйылай Ҡайынкүлдең дә һыуы таҙа, ғәйәт йомшаҡ, йыуһаң — сәсең ебәк һымаҡ. Йәйен — өҫтө йылы, аҫты — һалҡынсараҡ. Бит уға һалҡын һыулы Ҡарабиҙәү, Ташъяр кеүек күп шишмәләр ҡоя. Йәннәттәй йәмле Ҡайынкүл! Өҫтөндә аҡсарлаҡтар оса. Килеүселәр хозурлыҡҡа хайран ҡалып, саф һауаһын һулап, ләззәтләнеп ял итә, рәхәтләнеп һыу инә, кәмәлә йөҙә.

Балыҡсылыҡ шөғөлө Әхтәмдең булмышын бөтөнләй биләп алды. Тик хозур Ҡайынкүл буйында бала саҡтағы һиллек, именлек бөтөүе генә күңелһеҙләндерҙе. Тәү мәлдә йәнтөйәгенең йәмен, ҡәҙерен белмәүселәргә, бәҫен ебәреүселәргә ныҡ борсолдо. «Фу, миһырбанһыҙҙар, йәннәттәй ерҙе бысраталар», — тип көйөндө. Яр буйы тулы һыу һауыттары, һыра, араҡы шешәләре, быяла ярсыҡтары, аш ҡалдыҡтары... Моторлы кәмәләр геүелдәй, мылтыҡтар дөмпөлдәй. иңкелдәп ятҡан һаҙлыҡтарҙа сыңрау торналарҙың йөрәк тетрәткес тауыштары уның йән әрнеүен көсәйтә, рәнйетелгән тереклек донъяһы сеңләй кеүек тойола. Хәҙер кеше тәбиғәт менән аһәңле йәшәмәй шул, йәшәмәй! Тора-бара быңдай хәлгә, мөнәсәбәткә Әхтәм үҙе лә күнекте, ҡотһоҙлоҡҡа бөтөнләй иғтибар итмәй башланы.

Ҡамыш, тал баҫҡан күтерҙәрҙә ҡыр өйрәктәре быйыл да оя ҡорҙо, бала сығарҙы. Көҙөн һунарсылар атһа ла, яҙын ҡабат әйләнеп киләләр. Әллә бында уларға хәүеф-хәтәр янағанын оноталар инде. Ҡасандыр Ҡайынкүлдә, кешеләрҙе һоҡландырып, аҡҡоштар ҙа йөҙөп йөрөгән. Мәгәр яман әҙәмдәрҙән биҙеп, байтаҡ йылдар инде күренмәйҙәр, төлөк урындарға ғына төшәләр.

Сентябрҙең сыуаҡ мәле ине. Йыш ҡына сыбарланып, тулҡындарын ҡағып ятҡан күл әле тып-тын. Ҡамыш, тал ышығында ниміәләрҙер суп та суп килә. Әхтәм, һиҫкәнеп, кәмәһен шул тирәгә борҙо. Супырлау асығыраҡ ишетелде. Ҡаҙҙар ҡойона, буғай. Был яҡҡа килеп етмәй торғайнылар ҙа. Балыҡсы яҡыная бирҙе һәм, яп-яҡтыла мөғжизә күргәндәй, иҫе китте: уның ҡаршыһында — аҡҡоштар, һомғол һынлы аҡҡоштар!

Үлеп ғашиҡ булып, һылыу ҡыҙ янына ашыҡҡан егеттәй, Әхтәм икенсе, өсөнсө көндө лә аҡҡоштар янына алҡынды. Тәүҙә тегеләр унан ситләште, бик яҡын юллатманы. Әхтәм балыҡ тотоуын да онотоп, сәғәттәр буйына һомғолҡайҙарға бағып, ғәжәп ҡылып ултырҙы. Шундай гүзәл, нәфис йән эйәләре! Наҙлылар, иркәләр, һөйкөмлөләр. Юҡҡа ғына һылыу ҡыҙҙарға «аҡҡошом!» тимәйҙәр икән.

Мәктәптә уҡығанда уҡытыусыһының аҡкош тыуы тураһында һөйләгәне шул саҡ йәнә хәтеренә төштө. «Ҡанбабабыҙ Уралдың ҡатыны омай — ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡыҙы, бәхет ҡошо. Урал мәрхүм булғас, ул ҡош тунын башҡа һалмаған, ситтәр күҙен алырлыҡ ҡабат һылыу булмаған, ҡош көйө ҡалған һәм

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 48



осоп киткән. Байтаҡ йылдар уҙғандан һуң, омай нык һағынып, Уралға килеп, уны уйлап моң сәскән, аҡҡош булып түл йәйеп, аҡҡош тыуын үрсеткән. Урал батырҙың саф уйындай, аҡҡош төҫө аҡ булған. Ҡәрҙәштәр быны яҡшы белгән, бер туғандай күрешеп, ау аулауҙан тыйышып, аҡҡош тотоп ейməҫкә һәр кемгә әйтешкән. Урал батыр нәҫеле әүбән дә омайғоштоң тыуы булған аҡҡоштарҙы атмаҫҡа ҡушҡан. Аманаттың ғилләһе шул: кешегә аҡҡош ите харам».

Уҡытыусы ағай хикәйәтен дәфтәргә яҙҙырып, уҡытып, һәр баланан ҡабат-ҡабат һөйләтте. омай нәҫеле аҡҡоштарҙың Урал заты ла икәнен, йәнә лә яратып, иркәләп балаларға «аҡҡошом» тиеүҙе лә төшөндөрҙө. Шуға ла аҡҡош тураһындағы ҡарһүҙ Әхтәмдең хәтеренә нык уйылды.

омайғош тыуының асылы нәҫелдән нәҫелгә күсәлер, күрәһең. Алыҫҡа, бик алыҫҡа юлланып, әммә моңланып, һағынып, аҡҡоштар Уралдың күк ынйыһылай Ҡайынкүленә көс-ҡөҙрәт, ғәйрәт алырға төшкәндер, моғайын. Шүлгән һымаҡ яуыздарҙың яһиллығын бер килке оноткандарҙыр. Шундай уйҙар кисерҙе Әхтәм омай ҡоштарына һоҡланып. Тора-бара һомғолкайҙар уға күнекте, Әхтәм кәмәһендә уларҙың араларында йөҙөп йөрөй башланы, йәнәштәрендә генә балыҡ ҡаптырҙы.

***

Көҙ көҙ инде, көндәр һалҡыная төштө. Өшөттө, етәр бөгөнгә. Ниңәлер эсе лә боша. Аңлашылмаған хис-тойғо, кисереш күңелендә. Әхтәм ярҙа Васяның таныш «Нива»һын күреп, шул яҡка ыңғайланы. Бәлки, йылытырҙар ҙа.

Урыҫтар яр ышығындағы йәшел сирәмгә ҡорам ҡорған. Йыйылма өҫтәлдә — араҡы, тоҙло ҡыяр, шашлык... Ымһындырғыс аш-һыуҙы күргәс, Әхтәмдең күҙҙәре янды, тамағы ҡылҡылданы. Быны Вася ла тойҙо.

— Ахтямка, әйҙә беҙҙең менән, — тип пластмасса һауытҡа араҡы ҡойҙо. Берәүҙе тотҡас, икәү, өсәү иттеләр. Әхтәм йомшарҙы, урыҫтарҙың ғәм белмәй ял итеүенә көнләшеп тә ҡуйҙы. Беҙ ошонда йәшәһәк тә, күл буйына сығып, табын ҡороп ултырмайбыҙ, донъя мәшәҡәтенән бушамай йөрөп тик ятабыҙ. Бушаған саҡта ла ниңәлер тәбиғәт ҡосағына сыҡмайбыҙ. Ә бит һыуға ҡарап, усаҡҡа бағып, гәп һатып, ҡымыҙ эсеп йырлашып ултырыуы үҙе бер ғүмер.

— Ҡорҙаш, тим, ҡорҙаш! — Вася Әхтәмде уйынан бүлде. — Күлдең анау төшөнә аҡҡоштар төшкән. ин дә шунда балыҡсылайһың. Исмаһам, береһен генә атып алып кил, беҙҙең мылтыҡ юҡ.

Ах, нисек күреп ҡалған һуң был ен һуҡҡыр аҡҡоштарҙы? Нисек? Күл бит күҙ күреме етмәҫ ҙур, оҙон. Кәмәлә йөрөгәндәрендә шәйләнеләрме икән? Әллә осҡандарындамы? Балыҡсы борсолдо, мәгәр һыр бирмәне.

— Беҙҙә, башҡортта, аҡҡош изге ҡош һанала. Уға һунар итеү борон-борондан тыйылған. Юҡ, атмайым! — Әхтәм ҡәтғи рәүештә баш тартты.

— Әкиәт! — тине ҡыҙмаса булып алған Вася. — Ҡаҙ итен бик яратып ашайһығыҙ, бер ҙә яҙыҡ һанамайһығыҙ, хатта ҡаҡлайһығыҙ.

— Ҡаҙ ҡаҙ инде, аҡҡош түгел.

— Нисек... түгел? Наҙан һин, Ахтямка! Улар икеһе лә – оҙон муйынлы һыу ҡошо, икеһе лә — ашамлыҡ.

Әхтәм бирешергә теләмәне, үҙ һүҙен һөйләне:

— Вася, һин үҙең аңламайһың. Аҡҡошҡа теймәү — беҙҙең изге йола, ғөрөф-ғәҙәт.

— Ғөрөф-ғәҙәт, имеш. Ғәҙәт түгел, хөрәфәт. Шул хөрәфәткә ышанып, был үҙенде сикләү, тәмле тәғәмдән мәхрүм итеү. Бына беҙ өйрәген дә, оҙанын да, һуйырын да атып алып рәхәтләнеп ашайбыҙ. Аҡҡош ите иш-шеү ҙә затлыраҡ.

— Беҙҙең күлдең табаны, шүрәте, ҡарабалығы ла теленде йоторлоҡ. Бына, әле генә сығарҙым, һаман да ҡыймылдашып яталар. Өс килограмм булыр. Ал. Йөҙ илле һумға ғына бирәм.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 49



— О-о-о! Беҙ балыҡты ла яратабыҙ. Суртандың ухаһы айырыуса шифалы. Ахтямка, молодец, шәп кеше һин! — Урыҫ балыҡты ла, балыҡсыны ла маҡтай-маҡтай аҡсаһын сығарып һалды. — Әйҙә, балыҡты йыуып ҡуяйыҡ.

Ҡара кеше һүрәтле шешәнән ҡойоп, балыҡты йыуҙылар, әсе ҡыяр ҡаптылар. Әхтәмдең зиһене нығыраҡ томаланды. Вася урай-урай тағы ла аҡҡош тураһында һүҙ сурытты:

— еҙ ни, ауылда йәшәгәс, ишле ҡаҙ аҫрайһығыҙ, һуйып, өмә үткәреп, байрам итәһегеҙ. уғанлап, һарымһаҡлап итен һоғонған, ҡоротлап һурпаһын эскән бар. Бер башҡорт танышым ҡаҙ ботон майлы ҡоймаҡҡа урап, ҡаймаҡҡа манып ашатты. Тәмле! — Урыҫ ирендәрен ялап алды. — Беҙгә, ҡала бахырҙарына, ҡаҙ ите онотҡанда бер эләгә. Хәҙер, көҙөн, бынау аҡҡоштар һимеҙ инде. Ахтямка, мин һинә әйтәм: әкиәткә ышанма, ҡурҡма, хәҙер шундай заман, иң тәүҙә үҙеңде уйла. Бына һиңә мең һум — аҡҡошто атып алып кил! Деликатес өсөн мең һум йәл түгел. Минең өсөн иң мөһиме — затлы ашамлыҡ!

Күңелде иретерлек һәм әүрәтерлек һүҙе менән тәьҫир итеп, аҡсаһы менән арбап, хәмерҙән йомшарған балыҡсыны үҙ ихтыярына буйһондорғандан-буйһондорҙо Вася. Әхтәмдең буталған башында төрлө уйҙар уралды. Был аҡсаны табыу өсөн әллә нисә көн иртә таңдан торорға кәрәк. Ә аҡҡошто атыу йәһәт, мылтығыңды бер дөпөлдәттең — бөттөң. Аҡҡош ите кешегә харам, тиеү, ысынлап та, әкиәттер ул. Ҡоштоң кеше менән ниндәй уртаҡлығы булһын? Аҡҡоштоң ҡатын-ҡыҙға, ҡатын-ҡыҙҙың аҡҡошҡа әүерелгәнен кем күргәне бар? Әхтәмдең дә күргәне юҡ. Вася әйтмешләй, ҡош ҡош инде, әҙәм затына ризыҡ өсөн яратылған. Аҡса аяҡ аҫтында ятмай, урыҫ иһә инәлеп, ҡулыңа һоноп тора.

— Ал, ал, — тип ҡотортто күҙгә күренмәҫ нәфсе. — Биргән саҡта — ал! Гел биреп тормаҫтар...

— Ярар, бер аҡҡошто атҡандан донъя кителмәҫ әле. — Әхтәм әллә урыҫҡа, әллә нәфсегә һырт бирҙе.

— Бына был, исмаһам, беҙҙеңсә! — Вася шап иттереп уның иңбашынан ҡаҡты.

***

Әхтәм күп эсеүҙән зиһенен, аҡылын юйып өйөнә ҡайтты һәм һунар мылтығын алды. Шул килеш кәмәһенә ултырып, аҡҡоштар яғына йөҙҙө. Улар күлдең ҡайын, ерек, муйыл, тал ҡаплаған һаҙамыҡ шары тирәһендәге ҡамышлы ышығында ҡойона. Кәмә яҡынайғас, хәүефләнгәндәй, һомғол муйындарын тағы ла нығыраҡ һуҙҙылар. Таныш әҙәми затты күргәс, тынысландылар, томшоҡтары менән ҡауырйҙарын рәтләргә керештеләр.

Мөртәт мылтығын бер алды, бер һалды. Ниңәлер күңеле шомланды. Аҡҡоштар уны үҙ итә, уға ышана. Ул иһә, ышаныстан файҙаланып, изге ҡоштоң ғүмерен ҡыймаҡсы. Ата һүҙен тотмай, ҡабырсаҡтан ҡан һемергән, ҡанлы йәшен түгеп, ебәреүҙәрен ялбарған омай аҡҡошто ашарға тырышҡан яуыз Шүлгән затынан микән әллә мин? Ҡанбабалар йолаһын боҙоп, ҡан көҫәйем бит. Аҡҡош ҡанын! Аҡҡош ите кешегә харам, тигән сың телеп үтте мейеһен. Бәлки, харамдыр? Ләкин уны үҙе ашамай ҙа, урыҫ ашай. Харам кафырға төртөр. Мәгәр атыу тыйылған ҡошто кем ата уң! Башыма ҡәһәре төшһә?.. Төшһә төшә инде. уң инде, һуң! Хәмерҙәрен — эскә, мең тәңкәһен кеҫәмә һалдым...

Тымыҡ күл өҫтөндә ҡолаҡ тондорғос шартлау яңғыраны. Хәүеф, шом һалған ҡыйғаҡ тауыш менән аҡҡоштар күккә күтәрелде. Берәүһе ҡанһырап, һомғол муйыны һәлберәп, күл өҫтөндә ятып ҡалды. Уны йәһәт кенә эләктереп, Әхтәм кәмәһенә һалды һәм, тетрәткес шауға һиҫкәнеп, юғарыға баҡты. Күл өҫтөндә өйөрөлгән ҡош тубынан берәүһе айырылып, бейегерәк күтәрелде. Пары һәләк булғанын, яңғыҙ ҡалғанын тойған, рухы һынған ата аҡҡош! Уның хәсрәтле әсе тауышы һауаны ярып, йөрәккә үтте. Нәҡ Әхтәмдең өҫтөндә осоуҙан туҡтаны ла, таш һымаҡ аҫҡа йомолдо ғәййәр ҡош һәм, кәмәнең ҡырыйына килеп төшөп, шундуҡ йән бирҙе, алһыу ҡаны битенә сәсрәне. Әхтәм шаҡ ҡатты: пар аҡҡоштар береһе

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 50



өсөн береһе үлде! Ҡоштарҙың да мөхәббәте шул ҡәҙәре көслө була икән! Йә Хоҙа, нишләнем мин, нишләнем?..

Ата аҡҡоштоң хәсрәтле һуңғы ауазы башҡаларына яһилдан ҡон алырға саҡырған оран һымаҡ та яңғыраны, буғай. Аҡҡош тубы берҙәм рәүештә йән ҡыйыусыға ябырылды. Башы осонан осоп, битен, сикәләрен суҡыштары менән суҡыйҙар, ҡанаттары менән һуғалар. ыу өҫтө ҡош ҡауырһыны, йөнө менән тулды. Хәҙер үлтерәләр, хәҙер бөтөрәләр! Мылтығы төшөп китеп, күл төбөнә батты. Ҡулдары менән генә һелтәнеп ҡаршы торорлоҡ, ҡотолорлоҡ түгел. Аҡҡоштар ҡыйылып осоп, ҡайтанан һөжүмгә ынтылған арала, яһил йәнтәслимгә ярға табан йөҙҙө. Ниһайәт, һыу өҫтөнә хәтле эйелгән ҡайындың ботаҡтары аҫтына кереп боҫто. Ҡоштар иһә һауаға күтәрелеп, мәрхүм ҡәрҙәштәре менән хушлашҡандай, күл өҫтөндә өйөрөлдө-өйөрөлдө лә күкһеллеккә инеп юғалды.

Әхтәм дә боҫҡан урынынан сыҡты. Бите ҡып-ҡыҙыл сей яра. Утҡа бешкәндәй янып барғас, башын һыуға тыҡты, ҡанлы ҡулдарын йыуҙы. «Дуңғыҙҙар»ҙың һүҙен тыңлап, кәрәгенде алдыңмы, йолҡош, тип, был яманлыҡҡа ҡотортоусыларҙы ла, үҙен дә һүкте.

Ҡултыҡтан йөҙөп сыҡҡанда, урыҫтар уны ярҙа көтөп тора ине. Ҡулы, бите суҡылып, кейеме теткеләнеп бөткән Әхтәмде күреп, улар телһеҙ ҡалды. Ниһайәт, Вася:

— Ни булды? — тип һораны.

— Ни булһын, бәлә булды. Мин — әҙәм аҡтығы, — башҡаса ауыҙ ҙа асманы Әхтәм.

Ҡанаттарынан тотоп, ҡорбандарын урыҫтарҙың аяҡ аҫтына ырғытты. Шул саҡ башы тағы ла нығыраҡ зыңҡып ауыртыуын тойҙо. Ҡулдары ҡалтырай, йәне-тәне өшөй, болоҡһой. Әйтерһең, үле аҡҡоштарҙың йәне һымаҡ, уны ла ҡото ташлап китмәксе. Урыҫтар иһә, Әхтәмдең бер юлы ике аҡҡош килтереүенә ҡыуанышып, сатырҙарына ҡарай атланы. Вася, боролоп, ҡаҙ мамығындай йомшаҡ сирәмгә ҡара кеше һүрәтле шешә бырағытты:

— Стресыңды сығар...

***

Оҙаҡ, бик оҙаҡ ятты Әхтәм күл буйында имәнес төштәр күреп. Йәнәһе, ул ҡара кеше һүрәтле шешәнән араҡы түгел, ғорғолдатып ҡан эсә. Аяҡтары бәйләнгән аҡҡоштар, бысаҡ тотоп, муйындарын ҡырҡырға теләгән яуызға: «Ебәр, зинһар өсөн ебәр, беҙ изге йәндәр!» — тип инәлә. Ҡотолорға талпына торғас, аҡҡоштарҙың ҡанаттары ҡайырылып сыҡты, Әхтәмдең өҫтө-башы ҡанға мансылды. Әллә ҡайҙан мәрхүм уҡытыусыһы пәйҙә булып, уға тишерҙәй, йәнен өтөрҙәй итеп ҡарай: «Бәдбәхет, рухыма ҡара яҡтың, ҡәбәхәт!» — тип аяғынан тотоп һөйрәй...

Әхтәм яман итеп аҡырып уянды. Тәне дер ҡалтырай, бите әсетеп һыҙлай, йөрәге һулҡылдай. Күҙҙәрем томаландымы икән тиһә, ҡараңғы төшкән икән. Ярылып килгән башын тотоп, ауа-түнә ауыл яғына ыңғайланы. Тәнтрәкләп бара торғас, алды яҡтырып киткәндәй тойолдо. Лаяҡыл иҫерек Әхтәм арттан машина яҡынайыуын да тойманы.

Аҡҡош итен ҡыҙҙырып ашап, туйып, кикереп, Вася ла ҡорҙаштары менән ҡайтырға ҡуҙғалғайны. Көн буйы эсеүҙән мейеләре һыйыҡланған, күҙҙәре томаланған урыҫтар төн ҡараҫҡыһын күреү түгел, шәйләмәне лә. Машина уны тапап үтеп, ҡапыл ситкә тайпылып, йыуан ҡайынға барып бәрелде. Күҙҙәргә уттар күренде. Ошо минутта ниндәйҙер хикмәт менән күктән таш һымаҡ атылған аҡҡоштоң шомло ауазы Әхтәмдең ҡолағында йәнә бер сеңләне һәм күбәләктәй йәне, яманға тарыған тәненән айырылып, Ҡош юлына ҡарай осто.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 51



# “АҠ ЮЛ!” тиеп бышылданы остазым...

“Автограф” исемле икенсе йыйынтығым Яҙыусылар союзының шиғриәт секция ында тикшерелә (1989 йыл). Танылған шағир, тәүге китабыма ла фатиха биргән Хәсән Назар ыңғай  үҙ әйтте, ижадында үҫеш тенденция ы бар, тип ҡанат ҡуйҙы. Әнисә Та ирова менән Тамара Ғәниева ла ҡулъяҙмамды нәшриәткә тәҡдим иттеләр. Әхирәтем Зарема Әхмәтйәнова и ә үҙ итеп, күтәреп маҡтап ҡуйҙы. Ни айәт, олпат әҙип Муса Ғәли  үҙ алды. Маңлайыма  алҡын тир бәреп сыҡты: уф, нисек ба алар икән? Хәлемде  иҙгәндер инде, Тамара тер әге менән нығ ҡына итеп ҡабырғама төрттө: “Ҡурҡма, Муса ағай шәп кеше ул!” Ҡурҡам шул, әлегә мин уны шәп шағир итеп кенә беләм, бер нисә йыл ғына Өфөлә йәшәүемә, ҡәләмдәштәр менән яҡындан аралаша башлауыма.

Ҡыҫҡа ы, Муса ағай, рәхмәт төшкөрө, хупланы китабымды. Уның ҡулъяҙмамды баштан-аяҡ уҡып сығып, тәфсирләп анализлауына ғәжәп иттем. Был бит йәш яҙыусыға ҡарата иғтибар ғына түгел, ә уның шәхесенә ихтирам да – артабан да ошо мөнәсәбәткә лайыҡ булғым, ҡомарланып ижад иткем килде шул минутта.

“Автограф”ымдың яҙмышы матур хәл ителде. Ҡәләмдәштәремде өйөмә сәй эсергә өндәштем. Бөтә е лә бер ыңғай Муса ағайға күҙ төбәне: ул ни әйтер?

– Беҙ күптән түгел фатир алдыҡ, иптәшем унда көтөп ултыра, – тип ҡыҫтырҙым, ысынлап та шулай ҙа а.

– Бәй, яңы өйгә барып аят уҡымай ярамай, улай а, – тине Муса ағай, йылмайып. Шундай ҙа нурлы йөҙ була икән, тип уйлап ҡуйҙым.

Мин бөгөн дә шул фатирҙа йәшәйем. Муса ағайҙың ап-аҡ тулҡынлы сәстәре, изгелек бөркөләп торған күркәм йөҙө  әм моңло тауыш менән аят уҡыуы хәтеремдә генә – бик йыш күҙ алдыма килә, ҡолағымда сағыла, йөрәгемдә йәшәй ошо күренеш.

***

Олуғ шағир Муса Ғәлиҙең күҙ уңынан артабан да төшөп ҡалманым, шөкөр. Яҙыусылар союзына тәҡдим итәсәкмен, көнө еткәс, тигәйне ул баяғы  өйләшеүҙә. Ә ул көн, ҡағиҙә булараҡ, ике китабың донъя күргәс етә. Рекомендация  орайым тип өйҙәренә шылтырат ам: “Ағайың Мәскәүҙә ине бит әле, Переделкинола, яҙыусыларҙың ижад йортонда”, – ти ҡатыны Рәйлә апай.  Ни сәбәп менән эҙләүемде аңлатҡас, ул ихлас борсолоп китте минең өсөн, ағайҙың адресын бирҙе. Бул а ла булыр икән ике е лә берҙәй яғымлы кешеләр, тип  оҡландым.

Муса ағайға хат яҙҙым, бер шәлкем яңы шиғырҙарымды ла  алдым  (1992 йыл). Ярабби, күп тә үтмәй, ҡалын ғына конвертта яуап килеп төштө. Тулҡынланып астым да хайран ҡалдым: бер ыңғай өс мә шүр шағир миңә хат яҙған – Мостай Кәрим, Рәсүл Ғамзатов  әм, әлбиттә, Муса Ғәли. Өнөммө был,

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 52





*Муса Ғәли, Шакир Янбаев, Ирек Кинйәбулатов, Феликс Чуев, Михаил Брагин, Мостай Кәрим, Муса Сиражи, Рафаэль Сафин. 1988 йыл.*

төшөммө?! Бергә тура килгәндәр икән ижад йортонда. Мостай ағай ҙа, теге шәлкемемде уҡып сығып, рекомендация яҙған. Ә Рәсүл Ғамзатовтың белмәгән-күрмәгән берәүгә сәләм күндереүе — теләктәшлек белдереүелер инде...

“... үҙемде ослап, “Аҡ юл!” тип бышылдап ҡалам”. Муса ағайҙың ҡәләмдәштәр ҡорона тәҡдиме ошолай тамамлана. Рухташым, остазым, атай ымаҡ күргән ҡәҙерле кешем миңә үҙе инселәгән ижад юлын аҡ күңеле, аҡ теләктәре менән бөгөн дә яҡтырта — иманым камил быға.

***

“Йөрәк хаты” исемле шиғыр китабым донъя күргәс, Муса Ғәли ағай “Башҡортостан” гәзитенә мәҡәлә яҙып сыҡты (1998 йыл). Уның ба а ында мин шәкертенең хеҙмәтенән ҡәнәғәт остаздың тын алышын тойҙом әм, күңелем нескәреп, илап та алдым.

Бир ә бирә бит Алла бер кешегә: шағирлыҡ таланты, изге күңел, пәйғәмбәрҙекеләй нурлы, матур йөҙ — Муса ағай хаҡында гелән шулай уйлайым.

***

Остазым сирләй... Тамара Ғәниева менән хәлен белергә барҙыҡ. Үҙебеҙ шөрләйбеҙ: Муса ағайҙы аянкыслы халәттә күреп, ебеп төшмә әк ярар ине? Уны ныҡ яратыуыбыҙ, ауырып киткәс әрнеүебеҙ, хафаланыуыбыҙ хаҡ та а. Ишекте Рәйлә апай асты, йөҙөндә көсөргәнеш бар, әммә беҙҙе өйөнөп ҡаршыланы: “Ағайығыҙ яңы шиғырҙар яҙған, әлдә килдегеҙ,” — тине Рәйлә апай.

Муса ағай ябыҡҡан, бәләкәсәйеп ҡалған кеүек, — күҙгә йәш төйөлдө, тышҡа сығармаҫҡа саҡ көс етте. Ағай, беҙҙе күреп, ике ҡулын уҙҙы, гүйә, ҡанаттары яҙылып китте. Ап-аҡ күлдәк, ап-аҡ йөҙ, ап-аҡ сәстәр әм ҡап-ҡара ҡаштар — торғаны изгенең портреты. Ул беҙгә шиғырҙар уҡыны, ап-аҡ ҡулдарын үҙ ритмына болғай-болғай. “Муса ағай, ҡулдарыңды улай киҫкен болғамасы, хәлеңде бөтөрмәсе,” — тип әйтерҙәй булдым да, әйтмәнем — ҡағыныр кәре әле бар ҙа а ҡанаттарының, ҡағын ын!

***

Гүйә, ҡояш тотолдо — Муса ағай фани донъянан үтте. Минең күңелемдә тотолған икән ҡояш... Ҡанундарға ни дәүүә? Муса ағай кеүектәрҙе лә юғалтырға, шуға күнергә тура килә — ә нишләмәк?! Хәтер менән йәшәргә, рәхмәтле хистәрҙе уның рухына еткерергә тип күккә өндәшергә ҡала.

Муса ағай, хөрмәтлем! ин аят уҡыған өйҙә, ин ишек асҡан ижад донъя ында мин бар әле әлегә... әм минең хәтеремдә — ин бар, олуғ шағир, шәп кеше, матур кеше Муса Ғәли!

**Гөлнур ЯҠУПОВА.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 53



# АҠ ШИШМӘНЕҢ ТЫНМАҪ ТАУЫШЫ

*Был фани донъяла көтмәгәндә ниҙәр генә ишетергә, ниҙәр генә кисерергә тура килмәне. Өлкән ҡәләмдәшем, изгеләрҙән-изге йән эйә е, күренекле шағир Муса Ғәлиҙең йөрәге туҡтағанын ишеткәс, миңә ауыр саҡтарҙа барып өйәлә торған иң ышаныслы имәндәремдең бере е дарҫлап ауғандай тойолдо. Бер миңә генә микән уң әле? Тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә кешеләр — йәшерәк быуын ҡәләмдәштәре, меңдәрсә төрлө быуын уҡыусылары, уны белгән күп замандаштары, ирәгәйә барған яуҙаштары — барса ы шундай ауыр юғалтыу тойғо о кисергәндер. әм әле алда оҙаҡ ваҡыттар кисерәсәк. Унының булмауын, унының етмәүен беҙ әр саҡ тоясаҡбыҙ. Ул башҡорт шиғриәтенең, тотош башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, донъяның бер ҡабатланмаҫ биҙәге, сағыу матурлығы ине.*

Быйылғы йылы ҡышта ирәк- аяҡ яуған, йортобоҙ ҡаршы ында теҙелеп ултырған шыршы ботаҡтарында өйөм-өйөм булып ҡабарып ятҡан ҡарҙар ҙа унының күпереп торған ап-аҡ сәстәрен, сафтан-саф күңелен, тик изгелектән торған ап-аҡ хыялдарын хәтерләтеп ятҡандай. Сәстәре ымаҡ аҡ күңелле, аҡ хыяллы, аҡ өмөтлө, аҡ әм пак тормошҡа әйҙәүсе өлгө булып ҡаласаҡ ул замандашыбыҙ, ватандашыбыҙ хәтерендә.

Күптәнге остазымдың оло ижадына мөнәсәбәтемде, дөрөҫөрәге, мөхәббәт-ихтирамымды әр төрлө әҙәби осрашыуҙарҙа, төрлө өйләшеү-бәхәстәрҙә әйтә-белдереп кил әм дә, унының бөтә шиғриәтенә тулы ба а бирә алыуымды күҙ алдына ла килтерә алмайым. Шағирҙың нигеҙҙә тәбиғәткә, иң мө име, кеше тәбиғәтенә, тормош-булмышына бағышланған ижады тәбиғәттең, тормоштоң үҙе ымаҡ бер ҡарауҙа ябай ҙа әм мәңге төшөнөп бөтмәҫлек серле лә, ҡатмарлы ла.

Бөгөн Шишмә районының иң матур төбәктәренең бере е Иҫке Муса ауылында, уға 70 йәш тулған саҡтағы юбилей тантаналарында булған хәтирәләр иҫкә төшә. Тик бейек тауҙар башында эҫе йәйҙә лә ятҡан аҡ ҡар ымаҡ, Муса Ғәлиҙең күркәм аҡ сәстәре әм ошо ауылдағы Аҡ шишмә күҙ алдыма килеп баҫа. Хозур тәбиғәттең урта ында атылып ағып ятҡан Аҡ шишмәнең эргә ендәге аҡ ҙур ташҡа Муса Ғәлиҙең:

*Аҡ шишмә мин, уйлан, кешем,*
*Ҡарап минең ағышыма.*
*Ҡеүәт бир ен иңә ыуым,*
*Паклыҡ бир ен намыҫыңа, —*

тигән юлдары мәңге торорлоҡ итеп уйып яҙылған. Шағирға бынан да тәбиғи, бынан да ҙур ба аны, хөрмәтте тағы нисек уйлап табырға мөмкин?!

Әлбиттә, мин Салауат төйәгендә Йүрүҙән шишмә енән дә, Миәкәлә Аҡмулла шишмә енән дә, Еҙем-Ҡаранда Ғафури шишмә енән дә, Келәштә Мостай Кәрим ҡоҙоғонан да әм башҡа исемдәр йөрөткән сығанаҡтарҙан ятып шифалы ыуҙар эскәнем бар. Улар хаҡында ла ләззәтләнеп хәтерләйем. Бына хәҙер нисәмә тиҫтәләрсә йылдар Муса Ғәлиҙең шиғриәт шишмә енең телдән китмәҫ ләззәтен татып йәшәүем шатлығын уртаҡлашҡым килә минең.

Шағир үҙенең мулла ҡушҡан Ғабдрахман тигән исемен ошо Аҡ шишмәләре

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 54





*Ирек Кинйәбулатов менән Муса Ғәли.*

булған тыуған ауылы исеменә алмаштырыуы ла ис осраҡлы түгел. Был – үҙе генә лә ҙур бәхет. Тыуған төбәккә яҡынлыҡты тағы ниндәй сара менән иҫбат итеп була икән?

үҙ ынғайы шуны ла әйтке килә: унғы ваҡытта әле Яҙыусылар берлеге ағза ы ла булмаған шиғыр яҙыусылар фамилия ының ҡойроғон ҡырҡып, матбуғатта ҡойроҡ оҙ исемдәр менән йыш күренә башланы. Ҡай берҙәре, “донъя иркенлегенән” файҙаланып, псевдонимдарын аҙна айын, ай айын алмаштыра. Ләкин уларҙың ҡойроҡ оҙ шиғриәте лә, ҡойроҡ оҙ исеме лә күңел уҡшытыу тойғо о ғына тыуҙыра.

Ә бына үҙенә тыуған ауылының исемен алған шағир исеме тәбиғи ҙә, йөрәккә лә яҡын. Әле шағир Муса Ғәлиҙең тәүге исемен дә, уның биография ын да йүнләп белмәгән саҡта мин, урта мәктәпте тамамлап хәрби хеҙмәткә киткәндә, өс китап – тәүге башҡорт поэзия ы антология ын, Мостай Кәримдең “ айланма әҫәрҙәр”ен, Муса Ғәлиҙең “Тыуған яҡтарым” поэма әм шиғырҙар китабын тоҡсайыма төрөп алып алып киттем. Севастополдә ауыл кейемен хәрби-диңгеҙ флоты форма ына алмаштырғанда бер старшина был китаптарҙы мунсала уҡ ҡалдырып китергә ҡушҡайны. Тыңламаным. Улар, иң ҡәҙерле бетеү булып, минең менән дүрт йыл төрлө диңгеҙҙәрҙе, океандарҙы йөҙөп йөрөп ҡайтты.

Муса Ғәли исеменең миңә яҡынлығы әле мәктәптә етенсе синыфта уҡып йөрөгәндә үк башланғайны. Иң тәүҙә өс шиғырымдың бере ен ул 1953 йылда “Пионер” журналының февраль анында баҫтырып сығырғайны. Ул саҡта Муса Ғәли журналдың әҙәбиәт әм сәнғәт бүлеге мөдире булып эшләй ине. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа көн дә тигәндәй шиғыр яҙып редакцияға ебәреп ҡаңғыртҡаным өсөн әле лә уңай ыҙланам. Ә Муса ағай уларҙың әр бере ен яуап ыҙ ҡалдырмай торғайны. Уның кешегә иғтибарлылығы шул саҡта уҡ яҡынайтҡайны инде. Флоттан туп-тура Башҡорт дәүләт университетына килеп ингәс, шағир менән яҡынданыраҡ таныштым. Ул тәүге китабымдың ҡулъяҙма ын тикшереүҙә лә ҡатнашып, фатиха бирҙе.

Артабан Муса Ғәлиҙең тормош биография ын да, рухи биография ын да ныҡлабыраҡ белдем, киңерәк төшөндөм. Муса Ғәлиҙең тәүге шиғырҙары Дәүләкән педагогия училище ында уҡығанда, 1940 йылдан башлап баҫыла. Уҙған ярты быуаттан артыҡ ваҡыт эсендә шағир төрлө телдә 50-нән ашыу китап баҫтыра. Улар ара ында балалар өсөн китаптар ҙа, проза әҫәрҙәре лә бар. Әммә уның төп жанры – юғары поэзия. Уның шиғриәтенә нескә лирик моң менән юғары гражданлыҡ рухының органик берлеге хас. Тәбиғәт әм кеше аша тормош асылын асыу – шиғриәтенең төп сифаты.

Муса Ғәлиҙең “Ағиҙел йыры”, “Диңгеҙҙәр аша өйләшеү”, “Тауҙар саҡыра”, “Ҡояш еле”, “Ҡыҙыл үләндәр”, “Атылған йондоҙҙар”, “Ғүмер ауазы” поэмалары – башҡорт шиғриәтенә биҙәк-нур өҫтәүсе әҫәрҙәр. Уларҙың әр бере енең художество ҡиммәте әм поэтик үҙенсәлектәре хаҡында байтаҡ яҙылды әм яҙыласаҡ әле. Бында тик академик Ғайса Хөсәйеновтың: “Романтик күтәренкелек әм киң ҡоласлылыҡ – шағирҙың поэмаларына айырата хас сифат” , – тигән ба а ы менән сикләнеү ҙә етер. “Шундай сағым була, гүйә, мин Етегәндәргә йәнәш еләмен, шарға баҫып килгән айыу ымаҡ, йы ан буйлап бөйөк Ер шарымды тәгәрәтеп

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 55



алып киләмен!” — ти шағир “Ер ысҡынмаҫ минең ҡулымдан” шиғырында.

Ана шулай йы андарға атылыр кеше ыны, бейеклек әм бөйөклөк, романтик күтәренкелек “Ҡояш еле” поэма ына айырыуса хас. “Был поэманың төрлө серҙәр менән тулы космосы ла, кешенең тәбиғәт, йы ан стихия ы менән алышына бәйле драматик хәлдәре лә, ут ҡанатлы әм ут йөрәкле космонавт-ҡа арман характеры ла, символик образдары әм поэтика ы ла шау романтик рухта”, — тигән фекерен еткерге килә уҡыусыға.

Муса Ғәлиҙең йәнә үҙенә генә хас сифаты — ул донъяны, илде, тыуған ерҙе күп гиҙгән шағир.

Ул сит илгә киткәндә лә, ил эсендә сәфәргә сыҡҡанда ла, Башҡортостан буйлап йөрөгәнендә лә — мин әр саҡ ҡыуанып ҡала инем. Ҡайҙа йөрө ә лә, Башҡортостаным исеменә, милләтем исеменә оят килтермәҫлек, кире енсә, унын данын күтәрерлек “илсе” сыға, тип өйөнөп ҡала инем. Уға ҡарап башҡорт шиғриәтенең дәрәжә ен күрәләрҙер, тип ихлас ҡыуана торғайным.

Юлда Муса Ғәли менән бергә йөрөү — үҙе бер ҡыуаныс. Мин дә унын менән бергә республиканың төрлө яҡтарында байтаҡ булғаным бар. Ул сәфәрҙең күбе е хәтерҙә аҡлана. Ә бына Бөрйәндәге осрашыуҙар айырыуса күңелдә ҡалған. Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Динис Бүләков, Муса Ғәли әм башҡа ҡәләмдәштәрем менән беҙ Шүлгән мәмерйә енә лә ингәйнек. Ҡайтҡас байтағыбыҙ шиғырҙар яҙҙы. Муса Ғәли ҙә “Шүлгән хәтирәләре” тигән шиғыр алып ҡайтҡайны унан. Был ҙур ғына әҫәр шулай тамамлана:

*Ирек атлай иркенлеккә ыу ап,*
*Мәмерйәлә ыуыҡ, ҡараңғы...*
*Әй, яҡтылыҡ! Ерем яҡтылығы,*
*инән тәнгә йылы таралды.*
*Ерем, индә, индә генә бит ул*
*Был йәшәүҙең барлыҡ сере лә,*
*Азат йәндең күргән байрамы ла,*
*Беҙ ҡалғанға хисап көнө лә.*
*Мәмерйә ни?.. Унда керҙек, сыҡтыҡ...*
*Ағай-эне бергә йыйынып:*
*Ҡайт аҡ икән теге донъянан да,*
*Бер-беребеҙгә шулай ыйынып!..*

Шиғырҙарында әр саҡ кеше бөйөклөгөн, унын тәбиғәт менән берҙәмлегенең мәңгелеген раҫлаусы шағир ошо юлдарҙа ла кешеләрҙең бер-бере енә, тәбиғәткә ыйынып йәшәргә теләүен әм уны ҙурлауын күр әтә. Ҙур тормоштоң бөтә бөйөк гармония ы — донъяға, тәбиғәткә бәйлелек, уға ынтылыу моңо. Моң тигәндәй, Муса Ғәлиҙең шиғриәте үҙенә генә хас эске моңо менән арбай белә. Шуға ла:

*Ҙур еремә ҙур өмөттәр сәстем,*
*Шытыуҙарын, яҙым, инән көтәм:*
*Нисәнсе ҡат йылы ҡулым менән*
*Йәшел бөрөләрҙе ыйпап үтәм, —*

тип уҡығанда мин үҙемдә аңлап бөтмәгән сихри моң тоям, шағир ынын күҙ алдыма килтерәм.

Донъя ҡатмарлашып-ауырлашып, кирегә тәгәрәгәндә Муса Ғәлиҙең Аҡ шишмәнең пак ыуҙары ымаҡ шиғриәте ыҙланыулы күңелдәргә шифа булып, йөрәк яраларын еңеләйтә килә. Йәшә ен шундай шиғриәт, аҡ шишмәләрең атылып аға бир ен ғәҙеллеккә, матурлыҡҡа сарсаған донъяла.

Мин был бәләкәй хәтер-мәҡәләмде Муса Ғәли арабыҙҙа саҡта уға бағышлап яҙылған шиғыр менән тамамлағым килә. Уны әр саҡ янымда тоям. Шулай тойол он да.

*Ерҙә аман ҡаты уғыш бара,*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 56



*Уйы ла юҡ әле туҡтарға.*
*Күкрәгебеҙ аман телгеләнә*
*Төрлө уттар, төрлө уҡтарҙан,*
*Уйы ла юҡ әле туҡтарға.*

*уғыш бара кешелеклек өсөн,*
*Кеше итеү өсөн кешене.*
*Шуға ҡайтып ҡал ын өсөн бөгөн*
*Бар асылы бөтә эшенең,*
*Кеше итеү өсөн кешене.*

*Бара уғыш, атыш, шартлау менән,*
*Йышаялар йөрәк шартлауҙар.*
*Шатлыҡлы ла, хәүефле лә инде*
*Ал ыҙыҡта еҙҙең атлауҙар,*
*Тик йышая йөрәк шартлауҙар.*

*Әллә ниңә донъя сәйерләнә,*
*Әллә ниңә кеше ваҡлана:*
*аҡланмаҫтай саҡта аҡлана ла*
*Аҡланмаҫтай саҡта аҡлана,*
*Әллә ниңә кеше ваҡлана.*

*Тауға ҡарап тау булырҙай булып,*
*Көндән-көнгә арта көнсөллөк.*
*Бары менән байрам итә белмәй,*
*Был йәшәү, тип, гүйә, өс көнлөк,*
*Көндән-көнгә арта көнсөллөк.*

*Йән дуҫ булғандар ҙа хөкөмләшә,*
*Бүленәме намыҫ урталай.*
*Инә – ҡыҙҙы, ата улды белмәй,*
*Аҡ аҡалдың битен йырталар,*
*Бүленәме намыҫ урталай?*

*Әле күптәр ҡабынып та бармай,*
*еҙ уттарҙа нисек яндығыҙ?!*
*Яуҙа юҡҡа ятып ҡалдығыҙмы,*
*Бушҡа түгелдеме ҡанығыҙ?*
*Уттарҙа еҙ нисек яндығыҙ?*

*Төрлө уғыш яланынан ял ыҙ*
*Уттар, уҡтар аман яуалар;*
*Күптәр уғыш яра ынан түгел,*
*Тормош яра ынан ауалар,*
*Уттар, уҡтар аман яуалар.*

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ,**
**Салауат Юлаев исемендәге**
**дәүләт премия ы лауреаты.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 57



# "БЫЛ ДОНЪЯЛА ТАУҘАР БАР САҒЫНДА..."

Муса Ғәли менән беҙ тәү тапҡыр эш буйынса осрашҡайныҡ. Ул саҡта мин "Вечерняя Уфа" гәзитенең әҙәбиәт бүлеге мөдире инем әм уға яңы шиғырҙарын орап мөрәжәғәт иттем. Ул редакцияға ҡыйыу ыҙ ғына килеп инде лә шиғырҙарын ондо: "Уҡып сығығыҙ әле башта... йә оҡшатмаҫ ығыҙ..." Оҡшатмай була тиме?! Уның ижадындағы лирик а әң күңелдәргә ятышлы шул. уңғараҡ, минең уға ҡарата мөнәсәбәтемдең ихтирамлы булыуын аңлапмы, ул үҙе лә асылып өйләшә барҙы, әм беҙ уның менән дуҫтарса мөнәсәбәттә булдыҡ.

Хәтеремдә, шәлкемдәренең бере ендә уғыш хаҡындағы шиғырҙары ла бар ине. Ҡайҙа уғышыуы хаҡында ораным, әм уның Курск дуға ындағы ҡаты алыштарҙа ҡатнашыуы, Днепрҙы кисеүе асыҡланды. Наградалары хаҡында өйләмәне. Ә бит ул II дәрәжә Ватан уғышы ордены әм миҙалдар менән ҡайта. Уларын миңә уңынан шағирҙың ҡатыны Рәйлә ханым күр әтте. Рәйлә Ғиниәт ҡыҙы шағирҙың иҫтәлеген ҡәҙерләп аҡлай. Днепрҙы кискәндән уң бирелгән "За отвагу" миҙалы ла мендәргә беркетелгән.

*Төнгө Днепр... Ярҙан ярына*
*Сират күперен систе алдаттар.*
*Янып торҙо ҡулда байраҡтар,*
*Тураҡланды дошман арьяҡта.*
*Томан бөтөп, туғай йәйрәгәс,*
*Ялды белмәй, белмәй ҡурҡыуҙы,*
*Уҡсы частар тағы ынтылды.*
*Гүйә, туфан ҡалҡып тулҡынды.*
*Ер әйләнде мәллә кирегә,*
*Үткәндәрҙе кире саҡырып.*
*Баҫты мәллә унан ҡалҡынып,*
*Меңәр янар тауҙар атылып!*

Рәйлә Ғиниәт ҡыҙының өйләүе буйынса, шағир уғышта ҡаты яралана, госпиталдә яралыларҙы Өфөгә оҙатасаҡтары хаҡында ишетеп, ҙур шатлыҡ кисерә. Шулай булмай ни, тыуған яҡтарын, туғандарын, тыуған ауылын — Шишмә районындағы Иҫке Мусаны күрәсәк бит! Фронттан ҡайтҡас, ул уғыш хаҡында лирик шиғырҙар ҙа, поэмалар ҙа, повесть та яҙа.

Муса Ғәлиҙең бала сағы еңел генә булмай. Әсә енең буйында саҡта уҡ ата ы әләк була. Тол ҡалған әсә е уға күптән күҙ алып йөрөгән ауыл егетенә тормошҡа сыға. Мусаны олата ы менән өләсә е тәрбиәгә ала, ә әсә енең яңы ғаилә ендә йәнә ете бала донъяға килә.

Атай бурысын үҙ өҫтөнә алған олата ы уғышта танышҡан дуҫы хөрмәтенә Ғабдрахман тип исем ҡуштыра. Романтик рухлы, лирик кисерешле малай бәләкәйҙән ижадҡа тартыла әм шиғырҙарын, тыуған ауылы исеме менән, Муса Ғәлиев тип баҫтыра башлай.

Муса Ғәлиҙең холҡон формалаштырған ауылдаштарының егәрле, ихлас, тәбиғәт яратыусан сифаттары ғүмер буйы уның ижадын уғарҙы. Шиғырҙар, проза, мәҡәләләр яҙ ынмы, Муса Ғәли намыҫына, әҙәп-әхлаҡ нормаларына тоғро булды. Уҡыусыларына ул ҡырҡтан ашыу китап бүләк итте. "Ағиҙел йырҙары", "Диңгеҙҙәр аша өйләшеү", "Июнь кистәре", "Ҡояш еле", "Тауҙар саҡыра" поэмаларында ул үҙен тормошҡа

фәлсәфәүи ҡарашлы, образлы фекерле, романтик хис-тойғоло шағир итеп танытты. Донъяның сер тулы космосы кешенең тәбиғәт, йы ан стихия ы менән алышына бәйле драматик кисерештәре, ҡа арманлыҡ әм кешелеклелек бар уларҙа.

*Мин хушлашам бөгөн ерем менән,*
*Тауҙар тыны, ямғыр еле менән,*
*Ямғыр ҡылдарының көйө менән хушлашам!..*
*Бар булмышым менән мин — ерҙеке,*
*Ерҙәй тиң еҙ хыял-хистәрем.*
*Мин, бөркөттәй, алыҫтарҙан күрәм*
*Тау таштарын, күктең зәңгәрлеген,*
*Тупраҡ төҫтәрен.*

Унын шиғырҙарын мин рус телендә уҡыным. Уларҙы Елена Николаевская, Ирина Снегова, Людмила Татьяничева, Борис Романов тәржемә иткән. Бәлки, улар шағир мөкиббән яратҡан башҡорт теленең нескәлектәрен биреп тә еткермәйҙер, әммә уларҙағы шиғри образлылыҡ барыбер күңелде арбай.

Ул йәшәгән фатирҙа "сәйәхәтсе таяғы" аҡлана. Үҙе юнған. Таяҡҡа үҙе күргән илдәр исемдәре ырып ҡуйылған.

Йәш саҡта Муса Ғәли художество училище ына инергә лә ниәтләнә, ләкин әҙәбиәт юлын айлай. Әммә тәбиғәттең матурлығына оҡланыу тойғо о уны ағас скульптуралар я ау юлына этәрә. Ҡарт ағастарҙың ботағынан ул лирик-философик образдар алынған әйберҙәр юныу менән мауыға. Унын "Бөтәбеҙ ҙә бер тамырҙан" тип исемләнгән бер поэтик композиция ы ла ана шундайҙарҙан.

*Ғүмер бында — тылсым. Юлдарымдың*
*Йыл үтә ен бында көн үтәм.*
*Ерем ҡәҙерен күкрәгемдә аҡлап,*
*Изге бер ант итеп йөрөтәм.*
*Мин әкиәт кеүек күреп бағам*
*Үҙ еремдең зәңгәр төҫөнә.*
*Париждарҙан урап ҡайт ам да мин,*
*Иҫерермен арыш еҫенә.*

Алсаҡ холоҡло Муса Ғәли дуҫлыҡтың ҡәҙерен белә ине. Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Шәриф Биҡколдарҙың шәхесен әм ижадын хөрмәт итте. Оҙаҡ йылдар Мостай Кәрим менән дуҫтарса аралашып йәшәне, унын менән тығыҙ бәйләнештә булды. Словак шағиры Ладислов Беньо, үзбәк яҙыусы ы Хәсән Мөхтәр, аварҙың атаҡлы Рәсүл Ғамзатовы менән дә ғүмеренең аҙағына саҡлым бәйләнеш тотто.

Үкенескә ҡаршы, шағир бәләкәйҙән, боҙо йоҡа йылғаға сумғандан бирле, үпкә сиренән яфалана. Ауырыуын фронт яландары ла аҙҙырғайны. Әммә ул быны белдермәҫкә тырышып, үҙен егеттәрсә тотоп ғүмер итте. Әммә уңғы йылдарҙа үпкә тамырҙары ҡыҫылыуҙан ҡаты сирләне әм яҡты донъя менән хушлашты.

Үҙе әйтмешләй:

*Был донъяла тауҙар бар сағында,*
*Тырышма ин башың эйергә.*
*Ҡанаттарың бул а, талпын, янып,*
*Йәшлегеңдең зәңгәр елендә.*

Үкенәм, ғүмеренең уңғы көндәрендә унын янына бара алманым. Телефондан өйләшеп торҙоҡ, хәле шәп түгел икәне беленә ине, борсормон, тип уңай ыҙландым. Ә ул, баҡ аң, көткән. Ҡатынына минең хаҡта йылы үҙҙәр өйләгән.

Муса Ғәлиҙең вафатына ҡырҡ көн тигәндә 4 йәшлек ейәнсәре унын портреттағы йөҙөн ыйпап, шулай тип ҡуйҙы: "Мин ҡартатайҙың оҙаҡ йәшәүен теләгәйнем. Килеп сыҡманы... "

Тау кеүек кеше ине Муса Ғәли. Ә ижады халыҡ хазина ына әүерелде.

**Алла ДОКУЧАЕВА**.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 59



# ОФОКТАРҒА АҠ ТҮБӘЛӘР ТОРА...

*(Әхмәт Сөләймәновҡа 70 йәш)*

Республикабыҙҙа әм ил эсендә генә түгел, уларҙан тышта ер аяғы-ер башында яшаған мәмләкәттәрҙә лә халыҡ ижады менән ҡыҙыҡ ыныусылар, уны ғилми яҡтан өйрәнеүселәр өсөн Әхмәт Сөләймәновтың исеме күптән таныш. Берәүҙәр уны халыҡ ижадын халыҡҡа еткереүсе, икенселәр әр саҡ эҙләнеүсән баҫалҡы ғалим, Башҡорт дәүләт университеты, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, За ир Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия ы талиптары уны кешелекле уҡытыусы итеп, мәктәп уҡыусылары и ә туған әҙәбиәт, Башҡортостан мәҙәниәте буйынса дәреслектәр авторы тип белә. Әҙиптәр даирә ендә ул Башҡортостан әм Рәсәй Федерация ы Яҙыусылар союздары ағза ы булараҡ мәғлүм. Кем генә тип ҡабул итмә ендәр, кем генә итеп ба алама ындар, Әхмәтте белгән кеше иң тәүҙә унын итәғәтлелеге әм ихласлығы өсөн хөрмәт, ихтирам итәлер, тип уйлайым.

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы – башҡорт әм, ғөмүмән, төрки донъя ы фольклористика ында күренекле урын яулаған филология фәндәре докторы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры, Рәсәй Гуманитар фәндәр академия ы академигы. Өлкән уҡытыусы, доцент сифатында Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте әм фольклоры кафедра ында ун туғыҙ йыл эшләп өлгөргән Әхмәтте Рәсәй Фәндәр академия ының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел әм әҙәбиәт институты етәкселеге 1990 йылда фольклор әм сәнғәт бүлегенә мөдирлеккә конкурста ҡатнашырға саҡыра. Был имтиханды ул уңышлы үтә. БДУ-ла эшләгән йылдарында уҡ ошо бүлек менән хеҙмәттәшлек итеүе өҙөмтә ендә ун игеҙ томдан торған "Башҡорт халыҡ ижады" туплама ының дүрт томын әҙерләгән Әхмәт Сөләймәновты ТТӘИ-ның ғилми советы ағзалары бер тауыштан шул бүлек менән етәкселек итергә лайыҡ тип таба. Тик ун бер йыл уңышлы ғына шул вазифа ында эшләп йөрөгән сағында уны 2002 йылдың йәйендә үткән II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы и ә ошо халыҡ-ара йәмәғәт ойошма ының башҡарма комитеты рәйесе итеп раҫлай. Бына шулай, халыҡ ихтыяры менән, уға яратҡан фәненән айырылып торорға тура килә. Насибы булғас, дүрт йылдан уң уға был эште М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-лағы башҡорт әҙәбиәте әм мәҙәниәте кафедра ы профессоры, Фольклор үҙәге етәксе е рәүешендә өр-яңынан башларға форсат тыуа.

...1961 йылдың онотолмаҫ авгусы. БДУ-ла ҡабул итеү имтихандары бара. Оло корпустың тарих-филология факультеты (хәҙерге филология, башҡорт филология ы әм журналистика, тарих факультеттары ул ваҡытта бергә булып, шулай тип атала ине) урынлашҡан дүртенсе ҡаты айырыуса шаулы. Ни өсөн тигәндә, әҙәбиәтте, телде, тарихты яратыусылар бөхет ынарға йыйына бында.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 60



Ҡабул итеү имтихандарында Әхмәт — алдат форма ында, мин моряк кейемендә йөрөнөк. Хәрби кейемгә ынау алыусылар ҙа икенсерәк ҡарар ымаҡ тойолғандыр, бәлки. Хәйер, алдат менән моряктың бүтән ниндәй кейеме бул ын инде. Йылдар үтте. Әммә Әхмәт гимнастерка ын әле лә сисмәгән ымаҡ миңә. Сөнки ундағы хәрби ыҫпайлыҡ, йөрөш-хәрәкәтендәге еңеллек, эш- үҙендәге теүәллек а- ман шул көйөнсә аҡлана. Студенттары уға арнап:

*Коридорҙан берәү килә:*
*Баҫа командир ымаҡ,*
*Үҙе йыйған әкиәттән*
*Төшкән ба адир ымаҡ, –*

тип юҡҡа ғына таҡмаҡ сығарған ти еңме!

Әхмәт Сөләймәнов 1939 йылда Башҡортостандың матур төйәгендә – Бөрйән районының Нәби ауылында Хәйрулла улы Мөхәмәтвәли уҙаман менән Лотфулла ҡыҙы Нурикамал тигән уңған колхозсылар ғаилә ендә тыуған. Тиндәштәре кеүек үк, унын да бала сағы ауыр уғыш йылдарына тура килә. Уҙған быуат ил эсендә илаш- ыҡташлы әм ҡан ҡойошло 30-сы йылдарҙың буҫағаына аяҡ баҫҡан сағында ғына сәйәси золом ҡорбаны исемлегенә теркәлгәс-икәс, Себер концлагерын үҙе теләп Аҡ диңгеҙ – Балтик каналы төҙөлөшөнә китеү мөмкинлегенә алмаштырып, удар хеҙмәт күр әтеүе арҡа ында ғына ирекҡә сығарыл а ла, шул тырышлығына “бүләк”кә алған сире ата ын 1942 йылда тамам аяҡтан йыға әм ҡайтмаҫ ергә алып та китә. Өс кенә йәшендә атайҙан етем ҡалып, балалығы уғыш дәүеренә тура килгән Әхмәттең тормошо нисек башланып киткәнен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгелдер, моғайын. 1946 йылда ул ауылындағы башланғыс мәктәпкә уҡырға бара. Тәүге уҡыу йылы уҡ хәтерҙә оҙаҡ аҡланырлыҡ тормош класы була — шул уҡыу йылының яҙына халыҡ, уғыш осоронда күрмәгәнсә, аслыҡ кисерә.

1958 йылда, ВЛКСМ-дың Бөрйән райкомы юллама ы буйынса, райондан дүрт комсомолецты, шул иҫәптән бер йыл алда ғына Байназар урта мәктәбен тамамлап, тыуған колхозында эшләп йөрөгән Әхмәтте, Башҡортостан ауыл хужалығы институтында тәүгә асылған әҙерлек курсына ебәрәләр. Әммә, бер осраҡлылыҡ, дөрөҫөрәге, ҡабул итеү комиссия ының яуаплы сәркәтибенең яуап ыҙлығы арҡа- ында, ул кире ҡайтып китергә мәжбүр була. Хәҙер, алға китеп, Әхмәттең унда инмәй ҡайтыуына ҡыуанырға ғына ҡала, сөнки республикала ауыл хужалығы белгестәре бихисап, ә фольклор өлкә ендә белгестәр, бигерәк тә уларҙың Әхмәт ымаҡтары, бармаҡ менән генә анарлыҡ бит. Шулай уҡ юғары уҡыу йортонда уҡытырлыҡ ысын уҡытыусылар ҙа әлегә тулып ятмай.

...Беҙ йәш саҡта алдатта булып ҡайтмаған ир затын ҡыҙҙар хуш ынмай торғайны. Шуға ла алдат урпа ын татымау – егетмен тигән кеше өсөн хурлыҡ иҫәпләнә ине. Мәктәптә уҡыған сағында бер саҡ Әхмәттең ауылына «Тракторсылар» тигән кинофильм килә. Шул фильмда Климдың (артист Николай Крючков) танк тура- ында өйләгәне йоғонто онда унда тик танкист булыу теләге уяна. Теләгәне алдына килеп, Әхмәт Сөләймәнов танк часына юлыға. Өс йыл буйы – тәүҙә курсант сифатында, унан танк экипажы командиры булараҡ – ул Урта Азияла Ҡара Ҡом сүллеген ярып, тәрән ырҙар ала.

Әхмәттә хәрби хеҙмәт осоронда журналист булыу теләге уяна. Дивизияның “Танкист”, Төркөстан хәрби округының “Фрунзевец” гәзиттәренә яҙышып тора. Часть командирының политик эш буйынса урынбаҫары майор Макаров әләтле егетте Львовҡа юғары хәрби-политик училищеға барырға димләй башлай. Хәрби журналист булыр ың, тип дәртләндерә. Шул мәлдә генә уға ауылда уҡытып

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 61



йөрөгән Мөхәмәтзәки ағаынан хат-кәңәш килеп төшә. “Үзебеззең Башҡорт дәүләт университетында ғына имтихан тот. Телә әң — журналист, телә әң уҡытыусы булыр ың”, — тип яҙа тәжрибәле педагог. Хәҙер инде беҙ Мөхәмәтзәки ағай биргән кәңәштең бик тә килешле әм киләсәкле булыуын яҡшы беләбеҙ.

Университеттың филология факультетының башҡорт-рус бүлегендә өс курс уҡығас, ни ғиллә булғандыр (бәлки, тормошҡа яҡыныраҡ булырға теләгәнбеҙҙер, филологтар булараҡ, “Хеҙмәт кенәгә е” астырырға, стаж эшләй торороға хыялланыуыбыҙ ҙа үҙенекен итеүе ихтимал), егеттәребеҙҙең бер өлөшө — Юныс Латипов, Файыл Мөхәмәтов, Рәжәп Шәрипов, ошо юлдарҙың авторы әм Әхмәт Сөләймәнов — көтмәгәндә академотпуск алырға ҡарар итте. Төрлөбөҙ төрлө ергә таралыштыҡ: Юныс менән мин — радиоға, башҡалар — башҡа тарафҡа. Әхмәт и ә үҙенең Бөрйәнендәге Иҫке Монасип игеҙ йыллыҡ мәктәбенә китте. Аҙаҡ шуны белдек: ул унда уҡытыу күнекмә е алыу менән генә шөғөлләнмәгән, вузыбыҙ программа ы буйынса алдағы курстарҙа үтелә торған әҫәрҙәрҙе лә өйрәнеп ятҡан.

Мәктәптә бер йыл эшләп килгәс, Әхмәт уға ғына хас ныҡышмалылыҡ менән йәнә йәбешеп ятып уҡырға тотондо. Ул уҡыған элекке группала яҙышҡандарҙан, минән тыш, Вафа Әхмәҙиев, Юныс Латипов, Сафуан Әлибаев, Миндияр Дилмөхәмәтов, Флүрә Юламанова, Фирғәт Зәйнуллин, Файыл Мөхәмәтов ымаҡ әм яңы группала Тимерғәле Килмөхәмәтов, Тимербай Йосопов, Риф Мифтахов, Данис Тикеев кеүек ҡәләм тибрәтеүселәр булды. Был да Әхмәттә сәм уятҡандыр. Жәлил Кейекбаев, Әнүр Вахитов, Марат Мин ажетдинов, Кирәй Мәргән, Лев Бараг ымаҡ уҡытыусыларыбыҙ йоғонто онда ул фольклор менән етди ҡыҙыҡ ына башланы. “Етди” тигәс, аңлашыла торғандыр: тимәк, халыҡ ижады менән әүәлдән ҡыҙыҡ ына килгән. Ошо хаҡта үҙ сыҡ а, ул бала саҡ хәтирә енә төшөп китеүсән.

“Ниндәй эшкә тәүләп тотонма ын, әсәйем иң элек:

*Бисмилла ир рахманир рахим!*
*Эшем башы – эш ҡары,*
*Дошман башы – тыш ҡары!*
*Күргәндәр күреп ҡал ын,*
*Күрмәгәндәр тороп ҡал ын!*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатималарҙың ҡулы, –*

тип теләк теләп алыр ине.

Тәпәнгә май ал а, көбөгә иген йә он бушат а, йәнә бисмилла ын әйтер ҙә:

*Ашып сыҡ, тулып сыҡ,*
*Ҡайҙан сыҡ аң, шунан сыҡ! –*

тип амаҡлаған булыр ине.

Инде лә кейем- алымыбыҙҙың тишек-тошоғон яма а (ә беҙ үҙ заманыбыҙҙың джинсыларында ғына, йәғни киндерҙән генә кейенеп йөрөнөк): “Мә, улым, атлы кеше төшөп ҡарамалы, йәйәү кеше ятып ҡарамалы булды”, – тигән булып, үҙ эшенә үҙе ба а бирер ине, минең күңелемде күтәрергә тырышҡан булыр ине.

Көн тип тормай, төн тип тормай, киндер иләй торған машина ын дырылдатып, беҙгә күлдәк-ыштанлыҡ хәстәрләгәндә лә, ҡаҙан, ҡашығаяҡ тирә ендә ураланғанда ла, әсәйем гел йырлап йөрөй торғайны. Оҙон көйгә алып тороп йырлар-йырлар ине лә дәрт уҡырға тотоноп китер ине:

*— Хан ҡыҙы, ас ишегеңде, бән керәйем,*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 62



*Сәнең йөҙөң нурлы, тиҙәр, бән күрәйем...*

Бер көндө әсәйем, ғәҙәтенсә, шулай берсә дәрт уҡып, берсә йырлай-йырлай ҡаҙан тирә ендә ураланды ла былай тип ҡуйҙы: “Китапта әйтелгән: “Берәү көнө-төнө намаҙ уҡыр, берәү саҙаҡа артынан саҙаҡа бирер, берәү зар-интизар булып йырлар. Намаҙ уҡыған менән саҙаҡа биргәндең теләгенән алда зарланып йырлағандың теләге ҡабул булыр». Был — уның аҡланыуы түгел ине. Зарланырға ла, иларға ла сәбәптәре етә е булған уның. “Репрессияланған ир ҡатыны” тигән исем күтәреүе етмәгән, атайым тотҡондан ҡотолоп ҡайтып, инде рәхәтләнеп йәшәй башлайбыҙ, тигәндә генә — уғыш сығып китә. Концлагерҙан киңгәп ҡайтҡан атайҙы, үлеренән бер-ике көн генә элек, симулянт тип, түшәктән алып, носилка менән сығарып санаға тейәп, егерме биш саҡрымда ятҡан район үҙәгенә комиссияға йөрөткәндәр... Ул кинәт кенә үлеп киткәс, әсәйем оҙата ла сыға алмаған. «Атайыңдың кәүҙә ен зыяратҡа алып барырға ҡапҡанан сығарып килгәндә генә, Дәүләтбикә инәңдәрҙә Гәү әрем донъяға килеп, яр алып ебәрҙе... Етем булып донъяға килеүен иҙенәме ни! Ә мин башымды ҡалҡытып, атайыңды алып киткәнде ҡарап та ҡала алманым», — тигәйне әсәйем. Сүп өҫтөнә сүмәлә: әле генә ун ете е тулып килгән өлкән улын, Мөхәмәткилде ағайымды, уғышҡа ебәрәләр. Уны оҙата барғанында әсәйем иҫ еҙ булып йығыла. Бына шуларҙың бары ы ла әсәйемде моңланырға, Хоҙайға зарланырға мәжбүр иткәндер, моғайын».

Шулай тип хәтерләй Әхмәт үҙенең әсә ен. Ә минең ишетеп белеүемсә, апай гел зарлы йырҙар ғына йырламаған. Кәрәк саҡта әсе-әсе таҡмаҡтар ҙа сығарған.


*Әхмәт Сөләймәнов аға ы Мөхәмәтзәки менән.*

Был ғаиләлә шулай йыр, таҡмаҡ, шиғыр сығарыу ғәҙәти хәл иҫәпләнгән. Әхмәттең ата ы ла әр нәмәнән ҡыҙыҡ табып, төртмә таҡмаҡ сығарырға ма ир була. Бөгөн дә уларҙы хәтерләүселәр бар. у-ғыштан уң район гәзитендә Мөхәмәткилде ағайҙың шиғырҙары йыш баҫылып тора. Аҙаҡ был традицияны Мөхәмәтзәки ағай дауам итә. Бибикамал апайҙың да бәйет, таҡмаҡтары Бөрйәндә күптәргә мәғлүм. Әхмәттең әйтеүенсә, уның әр хаты таҡмаҡ менән бөтөр булыр. Әйткәс әйтәйем, ижад ене Бибикамал апайҙың Сәриә, Миңнур тигән ҡыҙҙарына ла ҡағылған.

«Ғөмүмән, беҙ бәләкәй саҡта ауылда сәсәнлек башланғысы көслө ине, — ти Әхмәт. — Туҡай әйтмешләй, бер нәмә шылт иттеме — таҡмаҡ йә бәйет. Мәсет-клубта кистәрен йәштәр уйын ҡора. Уҡытыусылар беҙҙе, бала-сағаны, ҡыуа. Ә беҙгә ҡыҙыҡ. Йәшенеп бул а ла ҡалырға тырышабыҙ. Бер тигәс тә, кемдең апайы кемдең ағайы менән бейегәнен, кемдең ағайы кемдең апайы тирә ендә уралғанын күҙәткебеҙ килә. Шуға өлгәш әк, кемдең тиҙҙән еңгәй, кемдең еҙнәй булырын юрайбыҙ. Еңгәйлеккә кандидаттар күп, ә бына егеттәрҙең күбе е яу ҡырында ятып ҡалыуы сәбәпле, еҙнәйлеккә тигәненең дефицит икәнен белгәнгә шулай итәбеҙ инде.

Клуб тирә енән ҡайтмауыбыҙҙың икенсе сәбәбе лә бар: кемгә кем ниндәй төртмә таҡмаҡ сығарыр икән? Ишетеп ҡалыуыбыҙ ғына бурыс — уны ололарҙан алда ауыл буйлап таратасаҡбыҙ.

Теге көндө лә уҡытыусылар ҡыуа — беҙ йәшенеп бул а ла ҡалырға тырышабыҙ. Бер ваҡыт Байҡаш яғынан (Иҙел аръяғын беҙ шулай тип йөрөтәбеҙ) Зәйтүн тигән

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 63



йылғыр малай (ауыр тупрағы еңел бул ын) мейес башына менеп йәшенмәк булған. Аңғармай ҙа ҡалған — бер кирбес ярсығын төртөп төшөр ҙә ебәр был. Уйынсылар сыр-сыу килгәнгә ҡара аҡ, Хоҙайым, мейескә арҡа ын терәп ултырған Хәҙисә өләсәйҙең башы ҡанға туҙған. Әбейҙе тиҙ генә алып сығып киттеләр. Халыҡ тынысланғас, уйын яңынан башланды. әм... ни ишетәбеҙ? Көткәнебеҙҙе, әлбиттә. Бер апай таҡмаҡ башланы, ик әнгә артылып барған әлеге өләсәй хаҡында ине ул:

*«Комсомолка» Хәҙисә*
*Килгән йәштәр ҡашына...*

Шулай тип бер әйләндеме-юҡмы, икенсе е таҡмаҡты еренә еткереп тә ҡуйҙы:

*«Комсомолка» Хәҙисәнең*
*Кирбес төшкән башына.*

Икенсе класта ғына уҡыған мәле икән Әхмәттең. Ҡайҙан башына килгәндер: ишеткән йырҙарҙы дәфтәргә теркәй бара башлай малай. Әхмәттең шулай башланған йыр дәфтәренә стенаға йәбештерелгән гәзиттән мөхәббәт таҡмаҡтары ла инеп ултыра. Бына бер мәлде ул үҙенең яҙмалары менән иптәштәрен таныштырмаҡсы була. «Минең йәрем армияла...» тип уҡып та ебәрә — әлеге яҙмалар ҡуҙы баҙлап ятҡан мейес төбөнә оса. «Иртәрәк әле иңә ундай нәмәләрҙе уҡырға!» Екергән тауыш уның йөрәген телеп үткәндәй була... Аңғармай ҡалған икән — класҡа уҡытыусы апай килеп кергән булған...

Тәүге фольклор дәфтәренең утка осоуы халыҡ ижадына булған иғтибарын үндермәй Әхмәттең. Кире енсә, сәм генә уята. Уның халыҡ ижадына ылығыуына Мөхәмәткилде аға ының фольклор менән мауығыуының да йоғонто о ҙур була. “Бер мәлде йәй көнө шул оло ағайыма, – тип хәтерләй Әхмәт, – ике ят егет килде: бере е ҡулбашы аша фотоаппарат тағып алған, сәсе күбәләй булып ҡабарғанының костюмы кеҫә енән ҙур ғына блокнот ерәйеп тора. Шул бөҙрәкәй:

— Мөхәмәткилде ағай, беҙ туралап еҙгә осраҡлы рәүештә килмәнек. еҙҙе яҡшы белгән кешеләр өйрәтеп ебәрҙе, – тигәс, ағайым ағая биреп кенә:

— Булыр, булыр, – тигән булды.

— еҙ бындағы фольклорҙы йыйыу менән шөғөлләнә егеҙ икән. Ошо Байназар ауылындағы хәтерле ҡарттар менән таныштыр ағыҙ ине...

Бөҙрәкәйҙең шул үҙҙәренән уң былар өсәүләшеп ауыл буйлап сығып киттеләр ҙә кисләтеп кенә ҡайтып инделәр. Сәй эсеп алғас, урындағы фольклор хаҡында оҙаҡ ҡына гәпләшеп ултырҙылар. Иртәгә енә ағайым:

– Ҡустым, бына был ағайҙарыңды үҙебеҙҙең ауылға алып бар, – тине. Миңә ни нимә, ике ҡанат, бер ҡойроҡ: ағай үҙе – минең өсөн закон. Теге ят ағайҙарҙы ауылыма алып килдем.

Аҙаҡ шуны белдем: был ағайҙарҙың фотоаппаратлы ы йылдар үткәс 17 нәфис фильм, 15 документаль фильм төшөргән мәш үр кинооператор, Ҡаҙағстандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре булып танылған яҡташыбыҙ Әсғәт Әшрәпов, “бөҙрәкәй” тигәнем хәҙер беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры тип белгән Рәми Ғарипов булған. Ике е лә Мәскәүҙән килгән икән. Әсғәт ағай Бөтә Союз дәүләт кинематография институтында – кинооператорлыҡҡа, Рәми ағай М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡыған саҡтары булған.” Ошо осрашыу ҙа Әхмәт өсөн эҙ еҙ үтмәгәндер, моғайын.

Әхмәтте бәләкәй сағында фольклорсы булыуҙың, бәлки, тик романтик яғы ғына ҡыҙыҡ ындырғандыр. Әммә талип йылдарында уҡ был яуаплы эштең романтиканан башҡа яҡтары ла булыуына ныҡ төшөнә.

— Ғүмерҙә аяҡ баҫмаған ергә барып, күрмәгән-нитмәгән кеше менән уртаҡ тел

табыуы, ай- ай, еңел түгел икән ул. Беренсе курста “Башҡорт халыҡ ижады” буйынса лекция уҡыған остазыбыҙ Әнүр Вахитов, хәтерендәлер, фольклор йыйыу хаҡында: “Был эш – дәүләт ә әмиәтендәге мө им эш” тип аңлата йөрөгөҙ», – тигәйне. Шул аҡыллы кәңәште бер ваҡытта ла онотҡан юҡ та ул... Ярай ҙа, инең изге эш башҡарыуынды аңлаған кеше осра а. Ә ундайҙар, бәхеткә күрә, күптәр, — тип өйләгәне булыр Әхмәттең.

Әхмәт Сөләймәнов БДУ-ла уҡыған сағында уҡ Тарих, тел әм әҙәбиәт институтына йыш барып йөрөй торғайны. Яҡташы Мөхтәр Сәғитов, уҡытыусыбыҙ Әнүр Вахитовтар (ә ул беҙҙе бер йыл ғына уҡытҡандан уң шул институтта асылған аспирантурала уҡып, фән кандидатлығына диссертация яҡлап, шунда уҡ эшкә ҡалғайны) менән гел осрашып, уларҙан кәңәштәр ала йөрөр ине. Ә инде 1972 йылдың көҙөндә БДУ-ның башҡорт әҙәбиәте кафедра ына өлкән уҡытыусы итеп саҡырылғандан уң был ғилем усағында ул бөтөнләй үҙ кешегә әүрелде. Тап шул дәүерҙә институт ғалимдары мәж килеп ун игеҙ томлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады” туплама ын әҙерләй башлағайны. Бер осрағанында ошо хаҡта ла үҙ ҡуйыртып тора ла Ә. Вахитов, уны етди өйләшеүгә саҡыра.

— Марат Мин ажетдинов үлгәс, уға тәғәйен тормош-көнкүреш әкиәттәре менән көләмәстәр томын миңә йөкмәттеләр. Ә минең елкәлә ун ыҙ ҙа эш күп: докторлыҡ диссертация ын тамамлап ҡуйырға ине... Әхмәт, әллә ин тотона ыңмы шуға? Бына Марат туплай башлаған көләмәстәр, — тип ике йөҙләп көләмәс тупланған йоҡа ғына папка тоттора. — Бер том килеп сығырмы-юҡмы...

Бындай өйләшеү Тарих, тел әм әҙәбиәт институты директорының урынбаçары Әхнәф Харисов кабинетында ла ҡабатлана. Әнүр ағайҙың икеләнеүен ишеткән кеүек, ул да:

— Нисек уйлай ың, Әхмәт? Көләмәс менән тормош-көнкүреш әкиәттәренән берәй том төҙөп булырмы? — ти, унының ризалығын алғандан уң.

орау бик урынлы була. Сөнки әлегә көләмәстәрҙе ихласлап яҙып алыу, яҙылғанын рәткә килтереп, йыйынтыҡ төҙөү менән республикала берәү ҙә махсус шөғөлләнмәгәс, уларҙың әҙме, күпме икәне лә мәғлүм булмай. Ә тормош-көнкүреш әкиәттәре хаҡында «улар беҙҙә әҙселекте тәшкил итә» тигән фекер нығынған ине. Был фекер хатта Ким Әхмәтйәновтың “Әҙәбиәт теория ы” тигән китабында теоретик яҡтан нигеҙләнгәйне. Эске интуиция ы ыңғай яуап бирергә мәжбүр итә Әхмәтте:

—Булыр ул...

Интуицияға ғына нигеҙләнеп ыңғай яуап биреүен бирә лә ул, әйткән үҙеңде бойомға ашырырға ла кәрәк бит әле. әм Әхмәт архивтарҙа аҡтарына-соҡона башлай. Халыҡ ара ына сыға. Был эҙләнеү эшенә талиптарын да йәлеп итә. өҙөмтәлә тормош-көнкүреш әкиәттәре ике китапҡа ыйғы ыҙ булып китә. Көләмәстәр ҙә ике томлыҡ туплана.

Йәнә арттҡараҡ сигенеп алайыҡ әле. Университетты тамамлағас та, аспирантура булыр, тип өмөтләндереп килделәр Әхмәтте. Ләкин мәсьәлә хәл ителер ваҡыт еткәс кенә, вәғәҙә биреп килеүселәр:

– И-и, Сөләймәнов ауылда ятып та диссертация яҙа ала ул.

– Әлбиттә, әлбиттә. Ул да булдырмағас! — тип ҡоптап, йүкә шына ҡағып, Мәғариф министрлығы ҡарамағына ҡалдырып, Әхмәттән ҡотолоу юлын ҡаранылар. Был өйләшеүгә мин дә ша ит булғайным, сөнки ул беҙҙе эшкә тәғәйенләү мәлендә ректор бүлмә ендә барҙы.

Әхмәт Өфөлә ҡалып торманы. Кәләшен – абаҡташыбыҙ Флүрәне эйәртте лә, ун айлыҡ Ләйсәнен күтәреп, тыуған ауылына ҡайтты ла китте. Бәхетенән, ауыл-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 65



даштарының талабы буйынса, шул йылды ғына Нәби башланғыс мәктәбен игеҙ йыллыҡҡа әүерелдереү тура ында Бөрйән районы халыҡ депутаттары Советы ҡарар сығарғайны.

БДУ дипломы менән ҡайтып төшкән ике белгес муйындан эшкә сума. Эште бишенсе, алтынсы класс ойоштороуҙан башлайҙар. Тиҙҙән йәш уҡытыусылар өҫтәлә, кластар үҫә бара. Колхозсылар менән бергәләп өр-яңы мәктәп бина ын күтәрәләр. Әхмәткә ҙур портфеленең бер бүлкәтенә — китап, дәфтәр, икенсе енә йышҡы, бысҡы, сүкеш, балта тейәп мәктәпкә йөрөү ғәҙәти хәлгә әүерелә. Төҙөүселәргә лә булышырға кәрәк, стендтар ҙа я ап элергә, хеҙмәт дәрестәрен дә алып барырға кәрәк. Уҡыусыларын эйәртеп, тырма, әнәк күтәреп колхоз баҫыуҙарына хеҙмәт десанты төшөрөргә лә, ағас мылтыҡтар менән ҡоралланып «Зарница» уйындары ойошторорға ла тура килә уға. Сәхнәгә артист булып сығыу ҙа ситтә ҡалмай. Биш йыл буйы партия уҡыуҙары мәктәбендә пропагандислыҡ эшен дә алып бара. Уҡыусылар менән туристик походтарға барғанда, ял көндәрендә Әхмәт, күрше-тирәләге ауылдарҙы ҡыҙырып, ундағы халыҡ ижадын йыя. Талип йылдарының тәжрибә е бында ла ярап ҡала.

Әйткәндәй, беренсе курсты бөткәс, уҡыу планы талап иткән фольклор практика ына барып ҡайтыу менән генә сикләнмәне ул. Икенсене бөткәс, башҡорт әҙәбиәте кафедра ы (мөдире доцент Хәнифә Зиннәтуллина ине) ҡарары буйынса, унын етәкселегендә Вафа Әхмәҙиев, Нәфиҡ Хәмитов, Биктимер Шәриповтарҙан торған төркөм айға яҡын Әбйәлил төбәген ҡыҙырып ҡайтҡайны. Әҙәбиәт кафедра ында уның отчетын тыңлап бөтөүгә, доцент Әмир Чанышев:

— Алдағы уҡыу йылында быларҙың төркөмө әҙәбиәт буйынса курс эше яҙасаҡ. Әйҙәгеҙ, Сөләймәновтың был сығышын, шул тәүге ғилми эшен, ул көн элгәре асыҡ яҡлауға сығарҙы тип, юғары ба а менән ба алайыҡ, — тигән.

— Дөрөҫ!

— Әлбиттә, әлбиттә!

Шулай тиешеп, Әмир Иҙрис улының тәҡдимен Марат Мин ажетдинов менән Бә иә Мәғәсүмова ла күтәреп ала.

Дүртенсе курстан уң әм мәктәптә эшләгәндә, йәйге ялы ваҡытында Әхмәт беренсе курсты тамамлаусыларҙы Ейәнсураға, Миәкәгә экспедицияға алып барҙы. Талип йылдарында үҙе яҙып алған фольклор өлгөләре генә лә диплом эше яҙырға етерлек ине. Әммә, көтмәгәндә, уға икенсе темаға, мин әйтер инем, тотош яҙмышын хәл итмәле темаға тотонорға тура килде. Эш былай булды. Ул дүртенсе курста уҡығанда, әҙәбиәт кафедра ы “Башҡорт халыҡ ижады” тигән дәреслек әҙерләүҙе планлаштырғайны. Авторҙар коллективына профессор Кирәй Мәргән, фән кандидаттары Марат Мин ажетдинов, Салауат Галин менән бергә Әхмәт Сөләймәнов әм бишенсе курс талибы Биктимер Шәрипов индерелгәйне. Ни сәбәптәндер, ул дәреслеккә донъя күреү насип булманы. Уның ҡарауы, доцент Марат Мин ажетдинов етәкселегендә легенда әм риүәйәттәр буйынса Әхмәт яҙған бүлек, диплом эше рәүешендә, курсташы Тимерғәле Килмөхәмәтовтың Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ижадын байҡаған шундай уҡ тәүге ғилми хеҙмәте менән бергә Куйбышев ҡала ында ойошторолған талиптарҙың ғилми әм техник ижады күргәҙмә ендә хуплау тапҡандан уң, махсус курс буйынса уҡыу ҡулланма ы рәүешендә 1969 йылда БДУ нәшриәтендә “Башҡорт легендалары” исеме аҫтында ташҡа баҫтырылды. Китап ғилми етәксе е менән авторҙаш рәүешендә бирелгән теоретик хеҙмәттән генә тормай. Уға башҡорт әҙәбиәте әм башҡорт теле кафедраларында тырым-тырағай ятҡан ҡулъяҙмаларҙан (ә уларҙы төрлө йылдарҙа уҡыған талиптар диалектология әм фольклор буйынса туплаған ине) әм талип йылдарында Әхмәт Сөләймәнов үҙе йыйған материалдарҙан ул айлап алған, системаға

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 66



алған 131 легенда әм риүәйәт индерелгән. Башҡорт фольклоры буйынса иң тәүге уҡыу ҡулланма ы бына шулай тыуҙы. Ана шул эшенә таянып Әхмәт артабан кандидатлыҡ диссертация ы яҙҙы. Былар бөтә е лә үҙәктән ситтә, мәктәптәге мәшәҡәтле эштәр ара ында эшләнде.

1972 йылда Башҡорт дәүләт университетына эшкә килгәне бирле Әхмәт Сөләймәнов педагогик әм ғилми эш йөгөн бергә әм тиң тартты. Филолог-талиптар өсөн дүрт уҡыу әсбабы баҫтырып сығарҙы. Башҡорт мәктәптәренең V - VI синыфтары өсөн «Туған әҙәбиәт» дәреслек-хрестоматия ының, I - II, III - IV кластар өсөн рус әм татар телдәрендә “Тере шишмәләр” тигән уҡыу әсбаптарының, талиптар өсөн башҡорт әҙәбиәте тарихы программа ының авторҙашы, махсус курстар буйынса өс программаның, өс методик эшкәртмәнең авторы. БДУ-ның башҡорт бүлегенә уҡырға инеүселәр өсөн «”Башҡорт теле әм әҙәбиәте” тигән тәүге ҡулланма баҫтырҙы (авторҙашы – профессор Мөхтәр Әхтәмов). Әле генә, иш янына ҡуш булып, халыҡ ижады өлгөләрен йыйыусылар өсөн ярҙам йөҙөнән әҙерләнгән “Башҡорт фольклоры” тигән методик ҡулланма ы донъя күрҙе.

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов шулай уҡ республиканың ижтимағи вә мәҙәни тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Радио, телевидение аша, матбуғатта сәнғәт, әҙәбиәт, халыҡ ижады, башҡарыусылар, үҙ сәнғәте оҫталары тура ында сығыштар я ай. “Совет Башҡортостаны” гәзитендә “Улым, иңә әйтәм, киленем, ин тыңла” рубрика ын алып барҙы. Өфөгә килгәндән алып ул Башҡортостан Республика ының Мәҙәниәт министрлығы әм уның ҡарамағындағы Республика халыҡ ижады үҙәге, Хор йәмғиәте, Башҡортостан радио ы әм телевидение ы менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Башҡортостандың халыҡ артистка ы Флүрә Ноғоманова менән Хор йәмғиәте директоры Зәйтүнә Ғөбәйҙуллина ойошторған “Йырҙарың күп инең, моңдарың күп” тигән концерт-лекцияны ул алып барҙы. Башҡортостан халыҡтарының мәҙәниәтен үҫтереү тура ындағы программаны әҙерләүҙә ҡатнашты. Музыка училищеларының фольклор коллективтары фестиваленең (Учалы), “Оҙон көй” (Туймазы), “Моңло гармун” (Яңауыл), ҡурайсыларҙың, халыҡ бейеүен башҡарыусыларҙың “Байыҡ” телевизион конкурсының (Октябрский) жюри ағза ы, «Ирәндек моңдары» (Сибай), “Салауат йыйыны” (тәүге дүртәү ендә), “Урал батыр” эпик ҡобайырын башҡарыусы йәш сәсәндәр бәйге е кеүек сараларҙың жюри рәйесе булды. Ун йыллап «Башҡортостан» дәүләт телерадиокомпания ындағы «Хазина» ижад берекмә е тапшырыуҙарында (етәксе е Юлай Ғәйнетдинов) «Сәсән» рубрика ын алып барҙы. Әхмәт Сөләймәнов — әҙәбиәт әм сәнғәт өлкәләре буйынса Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы, фән әм техника өлкә е буйынса (әлегә исем еҙ) дәүләт премия ы комиссияларының, филология, педагогика, этнография, этнология әм археология буйынса диссертация советтарының, “Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия”ның мөхәрририәт ағза ы булды. Бөгөнгө көндә ул “Ватандаш”, “Башҡортостан уҡытыусы ы”, “Бельские просторы” тигән журналдарҙың мөхәрририәт ағза ы, “Башҡортостан энциклопедия ы”ның ғилми-редакцион ҡоро ағза ы, Төркиәлә сығып килгән “Милли фольклор” журналының Башҡортостан буйынса академик вәкиле, 35 томлыҡ “Төрки донъя ының дөйөм әҙәбиәте” тигән тупламаның координаторҙарының бере е, башҡорт фольклоры әм әҙәбиәтенә бирелгән өлөшөнөң авторҙашы. Бынан тыш академик Ғайса Хөсәйеновтың ғилми етәкселегендә Әхмәт Сөләймәнов БДУ доценты Ғәйнислам Ибра имов менән бергәләп Төркиәлә баҫтырыу өсөн өс томда “Башҡорт әҙәбиәте антология ы”н әҙерләне. Төрөк дуҫтар уны башҡорт әм төрөк телдәрендә ҡалын-ҡалын ике том итеп баҫтырып сығарҙы.

1995 йыл ЮНЕСКО-ның ҡарары менән ҡырғыҙ халҡының күләме буйынса

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 67



донъяла тиңе булмаған “Манас” дастаны йылы тип иғлан ителгәйне. Шул мәш үр эпостың 1000 йыллығына бағышланған халыҡ-ара оло байрамда халыҡ шағиры Рауил Бикбаев етәкселегендәге Башҡортостандың рәсми делегация ы составында Әхмәт Сөләймәнов та ҡатнашты. 1999 йылдың 24-25 ноябрендә и ә ЮНЕСКО ҡурсауында әм унын ул саҡтағы Генераль сәркәтибе Майор әфәнде ҡатнашлығында шул уҡ илдең баш ҡала ы Бишкектә “Ерҙәге барлыҡ халыҡтарҙың эпосы именлек әм кешелекте берләштереү өсөн” тигән халыҡ-ара конференция уҙғарыла. Шул форумда “Донъя халыҡтары эпосы” тигән Халыҡ-ара ассоциация төҙөлә. Уның ойошторолоуын раҫлап, Әрмәнстан, Германия, Иран, Ҡарағалпаҡстан, Ҡытай Халыҡ Республика ы, Ҡырғыҙстан, Монголия, Санкт-Петербург, Саха (Яҡутстан), Тажиҡстан, Татарстан, Төркиә, Хакасия вәкилдәре менән бер рәттән, Башҡортостан исеменән ҡул ҡуйыу Әхмәт Мөхәмәтвәли улына насип булa.

Әхмәт Сөләймәнов яңы быуат башындағы дүрт йыл ғүмерен тәгәрмәс өҫтөндә үткәрҙе, тип әйтергә була. Сөнки Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе сағында (2002 – 2006) уны кабинетында ирәк осратырға мөмкин ине: әле Ырымбурға юл тотҡан, әле Силәбегә, әле Ҡорғанға, әле Пермь өлкә енә, әле Ҡазан – Чебоксар – Түбәнге Новгородҡа, әле амар – арытау яғына йәки республикабыҙ районларына сығып киткән сағы була. Шул арала өсәр тапҡыр Төркиәлә, Әзербайжанда халыҡ-ара ғилми форумдарҙа ҡатнашырға өлгөрҙө. 2001 йылда уға саха, ҡырғыҙ, тыва, алтай ғалимдары менән бергә Саха-Яҡутстандағы “Лена-Евразия” фирма ы ойошторған бер айлыҡ Трансгималай экспедиция ында ҡатнашыу насип була. Унда алған тәьҫораттары айырым өйләшеүгә лайыҡ. Ҡайҙа юл алма ын, кемдәр менән осрашма ын, Әхмәт үҙенең төп өнәрен онотманы. Йыш ҡына: “Ғайса Батыргәрәй улы, ептең осон юғалтмаҫҡа кәрәк, тип өйрәтте”, – ти торғайны. әм, ысынлап та, фекер ебенең осон юғалтмаҫҡа, фольклор тигән цехын туҡтатмаҫҡа тырышты. Шуға ла, әле телгә алынған бөтә эшмәкәрлеге лә уға яңынан-яңы халыҡ таланттарына, яңынан-яңы фольклор әҫәрҙәренә юлығыуға, сит-ят ерҙәрҙә башҡорт фольклорын танытыуға, Башҡортостан әм сит илдәр менән фән өлкә ендә бәйләнештәрҙе нығытыуға үҙ өлөшөн индереүгә булышты, тип әйтә алабыҙ.

БДУ-да эшләгән дәүерендә ул үҙенең талиптары менән “Йәнгүзәл” фольклор ансамблен ойошторҙо. Был ансамбль республиканы урап сыҡты. Уның сығышын Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә лә, Татарстанда ла яратып ҡаршылар булдылар. Әхмәттең мәҙәниәт өлкә ендәге хеҙмәтен дәүләтебеҙ юғары ба аланы: 1991 йылда уға “Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре” тигән маҡтаулы исем бирелде. Союз, Рәсәй күләмендә әм сит илдәрҙә (Төркиәлә, Үзбәкстанда, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда) уҙғарылған халыҡ-ара ғилми конференцияларҙа, конгрестарҙа, симпозиумдарҙа Әхмәт Сөләймәнов әүҙем ҡатнаша килә.

БДУ-ла уҡытҡан сағында, төп эшенән айырылмайынса, ТТӘИ ғалимдары менән берлектә ун игеҙ томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығын төҙөүҙә лә абаҡташым ең ыҙғанып эшләне. Тупламаны әҙерләүҙә әүҙем ҡатнашҡан бүтән ғалимдар (Мөхтәр Сәғитов, Нур Зарипов, Фәнүзә Нәҙершина, Лев Бараг) менән бергә уға ла ошо ғилми-ижади эшмәкәрлеге өсөн 1987 йылда Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы бирелде.

Башҡортостан Республика ы Президенты Мортаза Рәхимов 1998 йылдың 23 ғинуарында ҡул ҡуйған “Башҡортостан халыҡтарын милли-мәҙәни үҫтереү программалары хаҡында” тигән Указын ғәмәлгә ашырыу маҡсатында, шул уҡ йылдың 27 майында республикабыҙҙың Министрҙар Кабинеты сығарған бойороҡҡа ярашлы, ТТӘИ директоры академик З.Ғ. Ураҡсин етәкселегендә Ф.А. Нәҙерши-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 68



на, Х.С. Ихтисамов, Р.С. Сөләймәнов ҡатнашлығында, вуз фольклорсыларының кәңәш әм теләктәрен иҫәпкә алып, Әхмәт Сөләймәнов әҙерләгән “Башҡортостан Республика ы халыҡтарының фольклорын өйрәнеү, тергеҙеү әм үҫтереү буйынса программа” проекты, төрлө инстанцияларҙа тикшерелгәндән уң, 2002 йылдың 23 декабрендә Хөкүмәтебеҙҙең махсус ҡарары менән раҫланғайны. Уны ғәмәлгә ашырыу эше лә Ә.М. Сөләймәнов етәкселегендә башланғайны. Әммә, төрлө объектив әм субъектив сәбәптәр әм ылтауҙар арҡа ында, дәүләт ә әмиәтендәге был эш әле аман бер урында тапана, шығырлап ҡына ҡуҙғала. Рус фольклоры буйынса эш Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академия ы профессоры И.Е. Карпухиндың энтузиазмына ғына ҡайтып ҡалыуын, башҡорт халыҡ ижады буйынса планлаштырылған илле биш томдың ун ике е генә сығыуын иҫәпкә алмағанда, республикабыҙҙа йәшәгән бүтән этник төркөмдәрҙең фольклоры аман күтәрелмәгән сиҙәм хәлендә. Башҡорт фольклоры буйынса донъя күрергә өлгөргән әлеге томдарҙың ҡап ярты ын (шуларҙың өсәү ен йә Р.Ә. Солтангәрәева, йә З.Я. Шәрипова, йә Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Нәҙерғоловтар менән ҡулдаш булып) Ә. М. Сөләймәнов әҙерләне. Иҫәп хисапҡа тура кил ен. Шуны ын да телгә алайым: “Башҡорт халыҡ ижады” туплама ының, әле үҙ барғанынан тыш, быға тиклем туған телебеҙҙә сыҡҡан ун игеҙ томлығын, рус телендә сығып ятҡанын әҙерләүҙә ҡатнашҡанын иҫәпкә алғанда, Әхмәт Сөләймәнов ун өс томдың автор-төҙөүсе е йә авторҙаш-төҙөүсе е булып сыға. Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә әле ике томы сират көтөп ята. Бөгөнгө көндә ғалим Программа буйынса үҙ өҫтөнә алған башҡа томдарҙы туплау мәшәҡәте менән мәшғүл.

Әхмәт Сөләймәнов — «Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре» (Өфө, 1990), «Башкирские народные бытовые сказки: Сюжетный репертуар и поэтика» (М.: Наука, 1994), «Әкиәттә — хәҡиҡәт» (Өфө, 1997), “Устарымда ерем йылъяҙма ы” (Өфө, 1998), «Халыҡтың юмористик сәсмәүере» (Өфө, 1999), «Мөғжизә инештәре» (Өфө, 2000), “Башкирская народная новелла” (Уфа, 2005), “Бала-сағаның уйын фольклоры”, “Эпик мираҫыбыҙ”, “Мөхәббәт дастандары”, “Беҙҙең илдең йәме” (Өфө, 2007), “Башҡорт балаларының ҡар үҙе: 1-се китап”, “Фән иленең уҙаманы”, “Йырын йырлар, ялыҡмаҫ”, “Аҡмулланы биргән Мең ҡәүеме фольклоры: 1 — 3-сө томдар” (Өфө, 2008), “Башҡорт балаларының ҡар-үҙе: 2-се китап” (Өфө, 2009) ише егерменән ашыу эреле-ваҡлы могнографик китаптарҙың авторы. Ун бер ырыуҙан торған Мең ҡәүеме фольклоры буйынса кесе тупламаны Әхмәт Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуҙы билдәләү, йылда ла Башҡортостанда Халыҡ-ара Аҡмулла көндәрен үткәреү хаҡында Республикабыҙ Президенты М.Ғ. Рәхимов ҡул ҡуйған Указдарға яуап итеп әҙерләгәйне. Әле и ә, Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Р.С. Сарбаевтың күренекле ғалим Мөхтәр Сәғитовтың тыуыуына 75 йыл тулыуҙы билдәләү тура ындағы бойроғона ярашлы, уның “Башҡорт эпосының мифологик әм тарихи нигеҙҙәре” тигән монография ын әҙерләне, ошо күренекле фольклорсыбыҙҙың ижади портретын яҡтыртҡан “Фән иленең уҙаманы” тигән китап яҙҙы. Был китаптар М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның Фольклор үҙәге исменән донъя күр ә лә, асылда, башҡа бик күп эштәре кеүек үк, пландан тыш, Әхмәт Мөхәмәтвәли улының үҙ инициатива ы менән бойомға ашты.

Әхмәт Сөләймәновтың хеҙмәттәре башҡорт, татар, рус, төрөк, үзбәк, ҡарағалпаҡ, инглиз телдәрендә баҫылғаны бар. “Урал батыр” эпосының яңы баҫма ын әҙерләгәндә, уның китаптан китапҡа күсә килгән әм бер ни тиклем әҙәбиләштерелгән тексын йәш текстолог Шәүрә Шәкүрова, ғилми архивтағы нөсхә е менән сағыштырып, уға байтаҡ ҡына мө им төҙәтмәләр индергәйне. Әле сығып ятҡан “Башҡорт халыҡ ижады” туплама ының Әхмәт Сөләймәнов төҙөгән 3-сө томына

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 69



“Урал батыр” шул яңы редакция ында инеп китте. Әҫәрҙе үҙенең баш үҙе, аңлатмалары менән өс телдә айырым китап итеп баҫтырыу ихтыяжы килеп тыуғас, ғалим уның мәғәнә енә хилафлыҡ килмәүен хәстәрләй. Уның үтенесе буйынса, Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Әхиәр Хәким – рус теленә, Зө рә Рәхимова инлиз теленә эпостың юлын-юлға тәржемә итә. Бынан бары эпосыбыҙ ота ғына. “Урал батыр”ҙың әм уның тәржемәләренең тап ошо варианты, Ғәйнислам Ибраимов әйтеүенсә, Башҡортостандың ЮНЕСКО-ла үткән презентация ы мәлендә (2008) БМО-ның мәҙәниәт буйынса халыҡ-ара абруйлы шул ойошма ының ғалимдарында ҙур ҡыҙыҡ ыныу тыуҙырған.

Фән өлкә ендәге уңыштарын иҫәпкә алып, 1997 йылда Республика Президенты М.Ғ. Рәхимовтың Указы менән Әхмәт Сөләймәновҡа – Башҡортостандың, 2006 йылда Рәсәй Президенты В.В. Путиндың Указы менән Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән маҡтаулы исемдәр бирелде.

Үҙенең ҡаҙаныштары менән маҡтанмай Әхмәт Мөхәмәтвәли улы, кире енсә, әлегә мөмкинлектәренән түбәнерәк эшләүенә зарлана. Ә инде ҡаҙаныштары хаҡында үҙ сыҡҡанда: “Мин бының менән Жәлил Кейекбаев, Кирәй Мәргән, Ғәли Сәйетбатталов, Марат Мин ажетдинов, Лев Бараг, Миҙхәт Ғәйнуллин, Марат Зәйнуллин ише уҡытыусыларыма бурыслымын, кафедралаштарым Ким Әхмәтйәнов, Роберт Байымов, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Ғиниәт Ҡунафин, Мирас Иҙелбаевтарға, өнәрҙәштәрем Мөхтәр Сәғитов, Барый Әхмәтшин, Морат Рәхимҡолов, Нур Зариповтарға әм, әлбиттә, ата-әсәмә, туғандарыма, ғаиләмә, тыуған еремә бурыслымын әм оло рәхмәтлемен, – ти әм былай тип өҫтәп ҡуя: – Мин ил эсендә дан алған, ил тышында ан алған Х.Г.Кор-Оғлы, В.П. Аникин, В.М. Гацак, А.И. Алиева, В.В. Илларионов, К.М. Миңнуллин, Н.Ш. Хисамов, Ф.И. Урмансы кеүек эскер еҙ ярҙамсыл алыҫ коллегаларымды яҡын күрәм, ил тышындағыларҙан Түрә Мирзаевты (Үзбәкстан), Садиҡ Турал, Фиҡрәт Төркмән, Имран бей, Мәтин Әргүн, Иҫәнбикә ханым Вәлиди (Төркиә), Исмаил Гусейнов, Али-Шамил (Әзербайжан) ише сит ил ғалимдарын, Төркиәләге вәкилебеҙ Канчал бей Мизеевты йылы хистәр менән иҫләйем”.

— Улар бары ы ла иңә ярҙам итеп торҙоламы? – тип ораным унан, ошо үҙҙәрҙе ишеткәс.

— Эйе, – тине абаҡташым әм үҙенә хас тапҡырлыҡ менән: – Кемдәрҙер ҡамасау ҡылма а, уны ла мин эшемә ярҙам итеү тип таныйым; кемдәрҙер аяҡ сал а ла – уларына ла шундай уҡ ба а бирәм: сөнки ундайҙары сәмемде генә уята, сәм тигәнең и ә мине тағы ла нығыраҡ егелеп эшләргә мәжбүр итә, – тип өҫтәне.

1991 йылда Тарих, тел әм әҙәбиәт институтына эшкә күс ә лә, Әхмәт Мөхәмәтвәли улы БДУ менән араны өҙмәне. Байтаҡ йылдар башҡорт филология ы әм сит ил әҙәбиәте буйынса диссертация советы ағза ы булып тороуҙан тыш, талиптарға башҡорт халыҡ ижады серҙәрен өйрәтте. Бөгөнгө көндә и ә, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте әм мәҙәниәте кафедра ы профессоры булараҡ, Фольклор үҙәге ойоштороу менән мәшғүл, бер үк ваҡытта За ир Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия ында ла башҡорт фольклоры буйынса дәрестәр бирә.

Ҡатыны, абаҡташыбыҙ, Өфөләге Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназия ының башланғыс кластарында Давыдов-Эльконен система ы буйынса уңышлы эшләп абруй ҡаҙанған Рәсәй мәғарифы алдынғы ы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусы ы Флүрә Ғөбәйҙулла ҡыҙы менән Әхмәт ике ҡыҙ, бер ул үҫтерҙеләр. Инәнән күргән – тун бесер, атанан күргән – уҡ юныр, тигәндәй, балалары ла юғалып ҡалманы. Ләйсәндәре — философия фәндәре кандидаты (БДУ-ла уҡыта), Нәркәстәре — филология фәндәре кандидаты ( ул ТТӘИ-ның

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 70



өлкән ғилми хеҙмәткәре), Жәлилдәре — күренекле рәссам, республикабыҙҙың Ш. Бабич исемендәге премия ы лауреаты. Үткән йылдың аҙағындараҡ Силәбе ҡала - ында үткән “Оло Урал” күргәҙмә е лауреаты: Жәлил унан алтын миҙал алып ҡайтты. Үкенескә ҡаршы, Флүрәгә генә балаларының был ҡаҙаныштарын күреп ҡыуанырға насип булманы – мәкерле сир 1995 йылда уның ғүмерен өҙҙө. Әммә уның рухы Әхмәттең ғаилә ендә йәшәй. Бында уның яңы никахының да роле ҙур, әлбиттә. Бөгөнгө көндә Әхмәт дуҫым билдәле йырсы, республикабыҙҙың халыҡ артистка ы, танылған радиожурналист, халыҡ ижадын ихлас пропагандалаусы Фәниә Байгилде ҡыҙы менән донъя көтә. Уның йөҙөндә Әхмәттең балалары – икенсе әсәй, алты ейән-ейәнсәре яңы өләсәй тапты. Фәниәнең улы Айрат Әхмәтте үҙ ата ылай күрә, ун өс ейән-ейәнсәре олатай тип өҙөлөп тора. Бөгөн улар бары ы ла уртаҡ хистәр, уртаҡ хәстәр менән йәшәй.

Ошо көндәрҙә Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновҡа 70 йәш тулды. Әммә, йөрөшөнә-торошона, ын-ҡиәфәтенә ҡарап, уға ис тә ул тиклем йәш бирерлек түгел ымаҡ. Тик сәстәренә иртәрәк ҡунған сасҡау ғына, «бул а булыр ҙа» тигәндәй, алыҫтан ялтлап тора. Ә йөҙөндәге эскер еҙ еңелсә йылмайыу күңел йылы ы бөркә кеүек. Улар унда мин белә-белгәндән үҙгәрмәне.

*Офоҡтарҙа аҡ түбәләр тора,*
*инең сәсең ымаҡ ҡабарып.*
*Ерҙә, гүйә, ҡара көндәр бик аҙ,*
*Ҡара уйҙар ҡуя ағарып.*
*Далаларға сыҡ ам — күҙ алдында*
*Башын сайҡай өн өҙ ҡылғандар.*
*Меңйыллыҡтар ағышынан улар*
*инең сәсең ымаҡ булғандар.*
*Тауҙарыма сыҡ ам, миңә табан*
*Тауҙар ынап ҡарай бар яҡтан.*
*Тауҙарҙың да бейегенә генә*
*инең сәсең ымаҡ ҡар ятҡан.*
*Башым түбән эй әм — абаҡ алам*
*Ҡара ерҙә аҡ ыл таштан да.*
*Ағарғандыр улар сал быуатта*
*Ҙур даръялар хаттин ашҡанда.*
*Бөтә ғаләм раҫлай ымаҡ бөгөн*
*Минең уйҙарымдың хаҡлығын;*
*Күпме йылдар рухыбыҙға күсә*
*инең күңелеңдең паклығы,*
*инең сәстәреңдең аҡлығы.*

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 71



# «КИНЙӘ» хаҡында уйланыуҙар

*(Ғәли Ибра имов көндәлектәренән)*

**7/I – 1967 й.**

*уңғы ваҡытта Кинйә Арыҫланов хаҡында бик ныҡ уйландыра башланы. Ә. Усманов мәҡәлә ен уҡып-уҡып алдым. Лимонов, Мавродиндарҙың китабында ла уға ҙур ба а бирелә.*

*Ҙур кеше булған. Уның абыҙ булыуы шул замандың уҡымышлы кеше образын тыуҙырыуға мөмкинлек бирә. Кинйә үҙенең тап шул яғы менән абруй ҡаҙанып, Пугачев заманында бөтә халыҡты артынан эйәртә алған булырға тейеш. Былна ошо яғын кәүҙәләндерергә кәрәк уның.*

**2/II – 1967 й.**

*Был тарихи тема буйынса ике-өс йыл эсендә байтаҡ ҡына уҡылды. Уҡылғандарҙан сәйер бер нәмә тойола. Бөгөнгө тарихсылар аман революцияға саҡлығы буржуаз тарихсылар йоғонто онан сыға алмай. Ваҡыты-ваҡыты менән уларға ҡарағанда ла царизмды йомшағыраҡ фашлайҙар. Әллә нисек...*

*Игнатьев, Юматов, Ремезов кеүектәр башҡорттарҙың иҙелеүен асығыраҡ күр әтә. Ә беҙҙең тарихсылар нимә бул а – шуларҙы цитировать итеү менән генә сикләнә. Шул ҡарашта ҡала, ә ҡараштарына ни бары шуларҙан ғына нигеҙләү эҙләйҙәр. Йәнә е, башҡорттар – дикий булған, наҙан булған. Ә тормошта икенсе төрлө.*

*Ә былай ҡарағанда, Салауат бик грамоталы, белемле булған кеүек. «Салават каким-то образом получил хорошее образование» тип яҙылған бит. Ә уның ата ы?.. Кинйә?.. Уларҙың өндәмә хаттары бик төплө бит.*

*Иҫке ҡарашҡа яңы ы килергә тейеш түгелме?*

*Гумилев печенегтар хаҡында яҙып, тап ошо фекерҙе нығыта. «Невольно думается, что печенегам справедливее посочувствовать, а не ненавидеть их.*



*Фотола – 1773 –1775 йылдарҙағы ихтилал етәкселәренең бере е, башҡорт халҡының милли геройы, Кинйәбыҙ ауылын нигеҙләүсе Кинйә Арыҫлановҡа әйкәл. әйкәл 2007 йылдың 13 июлендә Икенсе Кинйәбыҙҙа тантаналы асылды. Скульпторы – Рафаэль Зиннуров, портрет рәссамы – Наталья Куликова, меценаты әм проект авторы – Марс Юлбарисов.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 72



*И сколько еще есть в истории средних веков вопросов, которые мы должны пересмотреть и продумать заново, потому что новый накопленный материал уж не лезет в рамки старых, дореволюционных концепций...»*

*Ул гундар хаҡында яҙғанда ла шундай фекерҙә.*

*«Нет ничего более неверного, чем обывательское, весьма распространенное мнение, что хунны были диким племенем, жившим за счет ограбления мирных, трудолюбивых окрестных народов. Как всякий народ, прошедший сквозь века, хунны пережили сложную эволюцию, в течение которой были и периоды мирного расцвета культуры и эпохи войн, чаще оборонительных, а иногда и наступательных. Самыми тяжелыми были войны с империей Хань, стремившейся распространить свое господство над всей Азией. Соотношение сил было не в пользу хуннов, но они 300 лет отбивали натиск противника (Л. Гумилев. «Открытие Хазарии»).*

*Башҡорттарҙың XVII—XVIII быуаттарҙағы хәле хаҡында уйланғанда ла бындай ҡарашты иҫтә тотоу кәрәктер.*

**16/II – 1967 й.**

*Ваҡиғалар бик ҡатмарлы. әр ҡай ы ын Октябрь күҙлегенән үлсәргә, шунан сығып нигеҙләргә тырышам. Күҙ алдында Октябрь революция ы.*

*Нимә бирҙе Октябрь? Халыҡтарға азатлыҡ. Элекке яуҙар ҙа азатлыҡ өсөн бит. Әгәр ҙә Крәҫтиәндәр  уғышы тәжрибә е булма а, улар самодержавиены ҡаҡшатма а, Октябрь ҙа еңмәҫ ине. Ә Крәҫтиәндәр  уғышында Салауат, Кинйә роле?.. Уларҙың көрәше лә — элекке башҡорт яуҙарының дауамы, шул тәжрибәнән сығып я алған, элекке хаталарҙы ҡабатламай яңы юл тапҡан эш бит. Башҡорттар Пугачевҡа ҡушылыу юлын ана шул яуҙар аша тапҡандар.*

*Шунан... Октябрь халыҡтар дуҫлығына нигеҙләнде, уны нығытты. Был — дуҫлыҡтың тамыры. Пугачев — Кинйә дуҫлығында, унан да элекке дәүерҙә ята бит.*

*Был хәл асыҡ күр әтелергә тейеш.*

**14/IV – 1967 й.**

*«Абай»ҙы уҡып сыҡтым. Яҡшы китап. Этнография. Шағир образы. Көрәш. Ә беҙгә шундай китаптар кәрәкмәйме ни?*

*Әллә көс етмәйме? Ҙур полотнолы «ҡалын» китаптар яҙырға ваҡыт та, белем дә күп кәрәк шул. Ә бит беҙҙең халыҡтың тарихында ниндәй шаулы ваҡиғалар бар! әр ҡай ы ы роман.*

**3/IX – 1967 й.**

*әй, Злобин! Салауатты бик шаяртҡан ың.*

*Салауат өс йыл буйы Хлопуша менән ҡасып йөрөймө ни?*

*Кинйә уның ауылдашымы? Юҡ бит! Йәштәше лә түгел. Етмә ә уның денщигы ымаҡ итеп бирелә.*

*Ә Юлай?!*

*Юлай меҫкен генә, пассив образ. Яуға теләр-теләмәҫ кенә ҡушыла, ти. Төрөк шымсы ы менән осраштыра. Юҡ, былар  ис тә Юлайға оҡшамаған.*

*Салауатты Салауат итеп иң беренселәй ата ы тәрбиәләгән бит әле, ул йүнәлеш биргән, яуға ла ул рухландырған.*

*Злобин уны яҙып бик ҙур эш башҡарҙы, әммә гона тары ла күп. Салауатты белеп бөтмәгәндер инде.*

**11/I – 1968 й.**

*Кинйәнең ата ы — беренсе томдағы Арыҫлан Аҡҡулов түгелме икән?*

*Уның әсә е, ҡатыны ҡай тирәнән? Былар хаҡында бер төрлө ишара ла табып булмай.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 73



**4/V – 1968 й.**

*Пугачевтың яҡын ярҙамсы ы булған Кинйә – дөйөм Рәсәй кҮләмендәге шәхес.*

*Шулай булғас, уның үҫеү юлы Башҡортостан эсендә генә бармаҫ. Ул замандарҙағы ҙур тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан кешенең мөхите лә киң булыр, ул шундай шарттарҙа үҫкән, белем алған кеше булырға тейеш. Уға Ҡырым, Бохара яҡтары таныштыр. Яйыҡ, Дон казактарын да белер.*

*Әгәр ҙә Кинйә образын шундай шәхес образы итеп яҙғанда, ул ана шундай мөхитле кеше булырға тейеш. Шун ыҙ уның абруйы булмаҫ. Шун ыҙ ул киң кҮләмдә фекер йөрөтөп, Пугачев менән аҙаҡҡаса йөрөргә сығып китмәҫ ине.*

*Ә ул заманда шулай ил гиҙеү, йөрөү, донъя менән танышыу булған бит.*

*Мәҫәлән, Утыҙ Имәни (1754 йылда тыуа). Ул былай яҙа:*

*«Йәштән етем булып үҫтем, ҙурайғас та ярлы булдым. Ләкин, быға ҡарамаҫтан, күп илдәрҙе гиҙҙем. Күп ғалимдар менән осраштыҡ. Харәзи ҡалаларында булдым, Бохара, Сәмәрҡәнд, Бәлех, ират, Ҡабул әм уларға оҡшаш бик күп ҡалаларҙа булдым».*

*Ул ярлы. Ә Кинйә бай бала ы бит. Уның мөмкинлеге ҙур. Ул юғары ҡатлам вәкиле. Шулай булғас, Кинйә лә ил гиҙ ен, белем ал ын, уны бит «каким-то образом получил хорошее образование» тип кенә яҙып сикләнеп булмай. Уны ғына түгел, Салауаттың уҡыу урындарын да самаларға кәрәк.*

**30/X – 1968 й.**

*Минең сюжетта ике төп урын барлыҡҡа килә. Бере е – Кинйәнең тыуған төйәге, икенсе е – Стәрлетамаҡ.*

*Стәрлетамаҡ – восстаниеның географик үҙәге. Бөтә юлдар шунда киҫешә.*

*1) Ул тирәләге ҡала, сауҙа үҙәге.*

*2) Грязнов, Туманов шуның аша үтә.*

*3) Эргәлә Табын, Воскресенск.*

*4) Әлибай шундараҡ йәшәй. Ә был – Кинйәнең дуҫы. әр ваҡыт осрашыу.*

*5) Хлопуша Әүҙәнгә шуның аша үтә.*

*6) Зарубин да шунан үтә.*

*6) Ҡәнзәфәр Усаев – Боҙаяҙға яҡын.*

*7) Ырымбур юлы өҫтөндә. Кирилов, Тәвкилев шуның аша үтә.*

*...Был минең тыуған ҡалам бит әле...*

*Шулай итеп, әҫәрҙәге был ике сюжеттың ике төп тамыры йәки ике бағана ы булып тора. Ә икенсе китапта Салауат Юлаев төйәге өсөнсө бағана булыр. Ҡалғандары – шуларға өйәлгән ваҡ янтауҙар.*

*Ә былай, географик урындар, ҡатнашыусылар ҙа күп. Нишләйем уң? Эпоха ҙур, ваҡиғалар киң бит.*

**5/III–1969 й.**

*Әҫәрҙе ер атыу, Твердышевҡа ер биреүҙән башларға итәм. Шулай көйләнәм. Сөнки уның хаҡында тәү тапҡыр иҫкә алынған 1754 й. документ – шул купчий ҡағыҙы.*

*Был документ күп нәмәләр хаҡында өйләй. Ер атыу эше 1748 йылда уҡ башлана. Унда ҡатнашҡан кешеләрҙең күбе е – Кинйәнең туғандары йәки ырыу эсендәге дошмандары.*

*Ырыу эсендәге тартыш – мө им нәмә, төп фактор.*

*Ер атыу, ерҙәрҙең алыныуы, таланыу – төп асыу, бөтә ҡаршылыҡтың, яуҙарҙың сәбәбе. Шуның өсөн был әҫәрҙең буйынаса иҙелә- иҙелә барыр. Әтү Пугачев ни өсөн, еҙгә ер- ыуҙарҙы, урманды кире ҡайтарып бирәм, ти. Халыҡтың көткәне был. Шуға күрә ерҙәрҙең алыныу хәлдәре йыш осрар.*

*Ул әле Октябрь революция ына саҡлы килгән конфликт.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 74



**21/III – 1969 й.**

*әй, беҙҙең халыҡтың тарихы! Бик бай. Ниндәй генә ваҡиғалар юҡ?! Ләкин бере е хаҡында ла йүнләп яҙылмаған.*

*Тарихты, халыҡтың үткән юлын анға уҡмайбыҙ, күрә ең.*

*Ә бит был хаҡта Пушкин нимә ти? «Үткәндәргә илтифат — мәҙәнилектең вәхшәттән айырып тороусы бер сифат ул», — ти. Шулай булғас, яҙырға кәрәк. Бөтә ен дә беҙгә Степан Злобин кеүектәр яҙып бирмәҫтәр бит.*

*Башҡа халыҡтар үҙ тарихтары буйынса бик күп әҫәрҙәр тыуҙырҙы. Беҙҙең халыҡ та, революциянан уң культура ы үҫкәс, үткәне менән ҡыҙыҡ ына бит.*

**25/III – 1969 й.**

*М. Әүәзов бик ҡыҙыҡ бит әле. Ул тарихи әҫәр яҙыусыны уңға ҡалған юлсы менән тиңләй. Каруан үтеп китә, артта ҡалған юлсы каруан туҡтап киткән ерҙә ҡалған усаҡта үнер- үнмәҫ ятҡан күмер генә таба. Ул шуны өрөп, ләүкетеп ебәрергә тейеш. Йән өрөргә.*

*Кинйә хаҡында мәғлүмәттәр бик аҙ, шуның өсөн дә уның тормошо онотолоп бөткән. Шуның өсөн ижади фантазия менән уға йән өрөргә кәрәк.*

**2/IV – 1969 й.**

*Был айҙарҙа уҡыу туҡталып торҙо. Юбилей тигән нәмәләре менән байтаҡ ваҡыт үтте. Унан «Ай битен йыуғанда»ның да эше бөтмәй бит әле. Шунан ысҡын а ине ҡулдар...*

*Быйыл йәй тағы тау араларына китәеме әллә? 1962 йыл Ағиҙел буйында кәмәлә йөрөгәндә бик күп нәмә күренгәйне. Ни саҡлы үҙҙәр, ни саҡлы картиналар... Унан уң да Ағиҙелдән тағы бер үттем, Инйәрҙән дә, Йүрүҙәндән дә үттем. Файҙалы булды бит. Тағы барып ҡайт аң ине.*

**14/XI – 1969 й.**

*А. Толстойҙың “Петр I”- ен уҡыйым. Яҙмай бит башҡорттар хаҡында шайтаның.*

*...Петр Азов походына, Швеция походына бара. Унда башҡорттар ҙа күп ҡайнаша. Вильяминов китабынан күренеүенсә генә лә, күпме тарханлыҡ бирелә, ә был бер үҙ ҙә! Швед походында ғына бер эпизодта тиҫкәре яҡтан ғына әйтелә.*

*Елен Катериндың Петр I ҡулына нисек эләгеүе хаҡында өйләгәндә былай ти: «Он (рус. солдат) отбил меня от страшных людей в лисьих шапках с кривыми саблями. Они тащили меня из горящего дома, рвали платье, били плеткой, чтоб я не царапалась, хотели посадить на седло. Он кинулся, толкнул одного, толкнул другого, да так сильно: «Ах, вы, — говорит, — кумысники!..»*

*Башҡорт хаҡында бер үҙ ҙә юҡ. әр халыҡта яҙыусылар үҙ кешеләре хаҡында яҙа, нишләй ең.*

**28/V – 1970 й.**

*Бөгөн тағы Чебоксар ҡала ына килдем. К. Иванов көнө. Мин бында бынан өс йыл элек, 1967 йылдың апрелендә, булғайным. Бикчәнтәев менән бик оҙаҡ Кинйә хаҡында өйләшеп йөрөгәйнек. Бик матур кәңәштәр бирҙе.*

*Әле шуларҙы хәтерләйем. Дөрөҫ, ул сағында минең фекерҙәрем бик ярлы ине. Шулай ҙа, өйләп биргәс, Әнүәр аҙыевич бик ҡыҙыҡ ынғайны.*

*Быйыл мин үҙем генә килдем.*

*Сыуаш яҙыусылары менән өйләшеп ултырҙыҡ. Әлбиттә, мин үҙҙе тарих яғына ҡайырам. Үҙ тарихтарын яҡшы беләләр. Беҙҙең яҙыусылар ымаҡ түгел.*

*Миңә «крепость», «самозванец» үҙе оҡшаны. Сыуашса «пуляр» (крепость),*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 75



*«суя патша» (самозванец) була икән. Беҙҙеңсә ниндәй батша уң? Халыҡ телендә был үҙ йөрөгән бит, халыҡса йөрөгән. Алдаҡ батша, ялған батша, тимәгәндәрҙер.*

**20/IX – 1970 й.**

*Сюжет ҡоролоп бөттө. Бөттө тигәндә, оҡшамай башланы. Ер атыу ваҡиға ынан (1754) башлағайным, күп нәмә томанлы ҡала, сигенеп яҙыуҙар әллә ни бирмәй.*

*Берҙән, ата ы кем уң? Арыҫлан Аҡҡулов икәнен асыҡланым. Аҡҡу – Аҡҡош – ике е бер икән. Уның хеҙмәте лә кәрәк.*

*Ә ырыу эсендәге дошмандары, ҡаршылыҡ.*

*Икенсенән, Кинйәнең уҡыу мәсьәлә е. Килмәк, Ҡарғалы мәҙрәсә енә ныҡыраҡ туҡталыу кәрәктер.*

*Унан уң ни, Кинйәнең көндәренә саҡлы яҙғас, бик оҙонға китер бит әле, бер генә китапҡа ыйыр микән? Ә ике китап бул а? әй, бул а ни бул ын, мөмкин саҡлы тулыраҡ яҙыу файҙалы булыр.*

**21/IX – 1970 й.**

*Кинйәнең өйләнеүен тулыраҡ бирергә булдым.*

*Айымдың яҙмышы бик ауыр булып сыҡты. Үҙе иҙмәҫтән иренә ҡаршы, аталары үҙен тыңлап, уға яманлыҡ эшләтә.*

*Нишләй ең, заманы шундай. Айым ике ут ара ында. Ҡатын-ҡыҙҙың кәм етелеүен, шул замандың ҡоло булыуын, ҡорбаны булыуын күр әтеү өсөн кәрәк, шулай кәрәк.*

## Атайым мираҫы хаҡында

1960 йылдың ҡышы. Мин – 12 йәшлек ҡыҙ бала. Кисен атайым (ә ул – яҙыусы Ғәли Ибра имов) менән урам буйына ауа алмаштырырға сыҡҡылайбыҙ. Шулай яйлап атлап барабыҙ, ә атайым ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ нәмәләр өйләй торғайны. Уның яратҡан темалары тарих, тел, әҙәбиәт булыр ине.

үҙ ара ында атайым әйтә ҡуйҙы: «Яҙыусы үлгәс, ҡай берәүҙәрҙең эшләнеп бөтмәгән әҫәре ҡала, – тине лә миҫал итеп М. Шолоховтың «Они сражались за Родину» романын килтерҙе. – Яҙыусының ана шундай әҫәрен кемдер тамамлап ҡуйырға тейеш. Ғәҙәттә, ул кеше әҙип ғаилә енән була. Мин донъя ҡуй ам, ин, ҡыҙым, минең эшләнеп бөтмәгән китабым бул а, шуны тамамлап ҡуйыр ыңмы?» Минең атайға кире өндәшә торған ғәҙәтем юҡ ине. Оҙаҡ уйлап тормай, төпсөнөп, аңлап еткермә әм дә: «Ярай, эшләрмен!» – тинем дә ҡуйҙым.

Ғүмер үткәс, йылдар бер-бер артлы теҙелгәс, мин өҫтөмә ниндәй оло йөктө алғанымды аңланым. Әйтеү еңел дә ул, ә бына вәғәҙәне үтәү, ай- ай, ауыр икән!

1989 йылдың ап-аҡ ҡарлы ноябрендә атайым вафат булып, мәңгелек йоҡо она талды. Бәхилләшеү алдынан түшәктә ятҡан атаҡайым өҫтәлендәге бер өйөм папкаларына башы менән ымланы: « аҡла шуларҙы, кәрәге тейер», – тине моңайған әкрен тауыш менән. Хәйер, килгеләп торған врач апайҙар ғаиләгә әйтеп өлгөрҙөләр инде атайымда яман шеш булыуын, ғүмеренең оҙаҡҡа бармаҫын. Атай үҙе лә иҙенеп торҙо хәленең мөшкөл икәнен.

Ул папкаларҙа, беләм, «Кинйә» романының өсөнсө китабының ҡулъяҙмалары ята. Атайҙың ҡағыҙҙарына бала-сағаның яҡын килергә лә хоҡуғы юҡ ине электән үк. Уны яҡшы белә инек. Ә миңә... аҡлау, үҙемә алыу рөхсәтен бирҙе. Атайға биргән вәғәҙәм гелән иҫтә ине.

«Бар әле Яҙыусылар союзына, өйләш Динис Бүләков менән, секретарь ҡыҙыҡ-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 76



ай бир ә, унын ярҙамы менән биш айҙа романымды теүәлләп ҡуйыр инем», — тине ул бер саҡ миңә. Әммә Яҙыусылар союзында ундай мөмкинселек булманы.

Ҡәләмдәш дуҫ-иптәштәре килеп-киткеләне. «Кинйә»не урыҫсаға тәржемә иткән Рим Әхмәдовҡа атайым әйткән: «Романдың скелеты бар, ит үрҙерергә кәрәк. Шуны эшләп бөтөр инде, Рим, ин бит әҫәрҙе яҡшы беләһең, тояһың».

Атайым вафат булғас, Яҙыусылар союзында ижад мираҫы комиссияһы төҙөнөләр. Рәйесе — Рим Әхмәдов, секретары — өйөкләһе Ибраһимова.

Ҡырҡын уҡытҡандан һуң, Рим Билалович миңә эш ҡушты. «Ҡулъяҙманы үҙең руссаға юлдан-юл тәржемә ит. Сөнки мин рус телендә фекерләйем. Уҡып ҡарармын, бәлки, алырмын да».

Йәнемә йылы керҙе, уны-быны уйламайынса, тотондом эшкә. Өфөлә башҡорт интернатын тамамлағайным, атайымдың китаптарын башҡортса уҡып бара инем, өйҙә лә өйләшеү-аралашыу башҡортса булды, бигерәк тә әсәйем балаларҙың туған телендә өйләшеүҙәрен талап итте. Ә рус телен ярайһы беләбеҙ инде.

Беләмме-белмәйемме, тәржемә итә барҙым, машинкаға баҫтырырға бирҙем. Эштән һуң, кистәрен, отпускыла — эшләнем дә эшләнем.

Иң ауыры булды әллә ниндәй үҙҙәрҙең осрауы. Ул үҙҙәрҙе башҡорт, татар үҙлегенән дә ҡараған булам — юҡ, төрөк, ғәрәп теле үҙлектәрендә лә юҡ. Яҙыусыларҙан орап ҡарайым — белмәйҙәр. Аптырап бөттөм. Атайымдың папкаларын йәнә аҡтарып ҡарайым, килеп сыҡты дәфтәрҙәр. Баҡаң, үҙе үҙлек эшләп алған икән! Бөтә ораўҙарыма яуап табылды. Иҫемә төштө шунда. Бала саҡта сәфәргә алып сыға ине беҙҙе еңлем менән. Йә Ағиҙелдән ал менән төшәбеҙ, йә Эҫемдән, йә Еҙемдән, йә Инйәрҙән .б. Ауыл тәңгәлендә туҡтап, атай ҡайҙалыр барып килә ине. Оҙаҡ ҡына көтә инек. Йылмайып килеп сыға ине. Ҡулында блокнот, ҡәләм. Ул блокноттарҙы тулған үҙҙәр менән архивҡа тапшырҙым.

Атайымдың яҙмаларын уҡығанда хатта татлы тойғоларға бирелә. Әйтерһең, өйөкләһе атайым янымда тора, йылы ҡулдары менән арҡамдан һыйпап ала.

872 битлек ҡағыҙҙарҙы папкаға алып, Рим Әхмәдовҡа илтеп бирҙем. Уҡып сыҡҡас, ул Яҙыусылар союзына кире илткән ҡулъяҙманы, йәшем дә бара, сәләмәтлек тә насар, эшләй алмайым, тип. Романдың өсөнсө китабын баҫтырыу эше туҡталды һымаҡ...

1997 йылда «Китап» нәшриәте директоры Ҡәҙим Аралбаев саҡыртып алды. «Ҡулъяҙмалар ҡайҙа?» — тине. Шундай үҙ булырын иҙеп тороп, «Кинйә» әҫәренең буласаҡ өсөнсө китабынан бер аҙ ҡағыҙҙарын алып барғайным. Миндә, тинем дә күр эттем ҡараламаларҙы. «ин быны, өйөкләһе ыһыу, машинкала баҫтырып ал да беҙгә килтер, беҙ, бәлки, китап сығарыу яғын ҡарарбыҙ», — тине. Гөлфиә Рөстәева исемле корректор ыһыу, үҙегеҙҙең ҡул күсермәһен баҫырмын, тип ризалашты. Атайымдың ҡарамаларын ҡулым менән күсереп бирҙем, машинкала баҫылғанды уҡып, туплап барҙым.

Шул арала башҡорт яҙыусылары менән кәңәш ҡорҙом, китапҡа «ит үрҙереү» мәсьәлә ендә. Мирас Иҙелбаев, Роберт Байымов, Ғайса Хөсәйенов, Ноғман Мусин, Рәшит Солтангәрәев, Аҫылғужа Баһуманов... Яҙыусылар союзы идараһы етәкселәре менән дә өйләшә торҙом. Берее лә тотонорға баҙнат итмәй. Төрлө сәбәп килтерәләр.

Ноғман Мусин ағай, бер аҙ уйлап торғас, Марсель Искәндәр исемле йәш яҙыусыны тәҡдим итте. Талантлы ла, йәш тә, инвалид булыу сәбәпле, өйҙә ултырып ҡына яҙа, ваҡыты булыр, тине. Был фекерҙе Сабир ағай Шәрипов та хупланы.

Ул йәш яҙыусы минең ирем Байрас Айытбаевтың ауылдашы булып сыҡты. Өйөнә барғас, ҡағыҙҙарҙы күреү менән, алам, тине. Был 1999 йылдың аҙағы ине.

Әйткәндәй, мәрхүм ирем Байрас был китап эшендә миңә ҙур ярҙам күрһәтте. Матди яҡтан да, илһамландырҙы ла. Яҙыусылар союзы етәкселәре лә ыңғай

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 77



йөрөргә тырыштылар, ярҙамдары күп булды.

Марсель Искәндәр ең ыҙғанып эш башланы. Бүлектәрен эшкәрткән айын уҡырға бирҙе. Унын «махсус мөхәррирлеге» минә оҡшаны.

Ҡулъяҙмаларҙың башы (беренсе әм икенсе бүлектәре) автор тарафынан икенсе ҡатҡа еренә еткерелеп тә ҡуйылғайны. Марсель Искәндәрҙең соавтор булыуына ла ризалашҡайныҡ.

Күренекле башҡорт яҙыусы ы Ибра им Абдуллин иҫтәлегендә Ғәли Ибра имовтың түбәндәге үкенесен килтерә: «Их, Ибра им, өсөнсө китапты ослай алмам инде... Материалым шул саҡлым тупланған... Берәй енә өйләп, магнитофонға яҙҙыр ам, үҙен авторҙаш итеп сығартырға ла риза булыр инем... Әрәм ҡала, әрәм...»

Ләкин М. Искәндәр, ҡаты ауырыу сәбәпле, эштән туҡталып-туҡталып та алды. Ә ваҡыт үтә бирҙе. М. Искәндәрҙең «Кинйә» романының өсөнсө китабы әҙәби яҙма ы буйынса «Ағиҙел» журналында 2003 йылдың 4—8-се андарында донъя күрҙе. 2004 йылдың июль айының эҫе көндәрендә яҙыусы Марсель Искәндәр ваҡыт ыҙ гүргә инде. Рәхмәт инде ул кешегә ярҙамы өсөн, йәне йәннәттә бул ын!

Ләкин минә атайым алдындағы бурысым тынғы бирмәне. Ни айәт, башҡорт яҙыусы ы Ғәлим Хисамов менән танышырға насип итте Хоҙай. Кемдең ҡыҙы икәнемде белгәс, Ғәлим ағай «Кинйә» тура ында орашты. А -зарымды ишеткәс, ҡулъяҙманы ҡарап сығайым әле, тине. уңыраҡ икәү өйләшеп-кәңәшләшеп тә алдыҡ. Китапты нисек бар — шулай сығарырға кәрәк, ул бит — мәш үр яҙыусының әҙәби мираҫы, тип уртаҡ ҡарарға килдек. Быны еңлем — медицина фәндәре докторы, профессор Гүзәл Корнилаева ла хупланы.

Тарихи әҫәр ғалимдар яғынан тәнҡитләнергә тейеш, тиҙәр.

Мине мәктәптә тарихтан уҡытҡан ятраҡан уҡытыусым, әлеге ваҡытта БДУ профессоры Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров «Кинйә» романының өсөнсө китабының баҫмаға әҙерләнгән вариантын ентекләп уҡып, рецензия яҙып бирҙе.

Тарихи персонаждарға, үҙҙәргә аңлатмалар (сноска) биргәндә мин ауыр ғына хәлгә тороп та ҡалғаным булды. Әнүәр ағай ҙур түҙемлек менән башҡортса фамилияларға, исемдәргә әм үҙҙәргә йөҙгә яҡын тәҡдимдәр, төҙәтмәләр ҡуйып сыҡты.

өҙөмтәлә был әҫәргә шундай ба а бирелде: «Тарихи Башҡортостандың үткәне китаптың ҡулъяҙма ында үтә лә нигеҙле итеп күр әтелгән. ...Китаптың нигеҙендә тарихи ысынбарлыҡ ята, тип әйтә алабыҙ. Шулай итеп, китаптың нигеҙен тарихи факттар, шәхестәр тәшкил итә».

Уҡытыусы ағайыма рәхмәт! Мине, ҡараңғыла аҙашып йөрөгәндә, етәкләп яҡты юлға сығарған кеүек булды. Был әҙәби мираҫ — тарихи роман «Кинйә»не эшкәртеп донъя күр әтеүгә Ә. З. Әсфәндиәров ағай үҙенең өлөшөн индерҙе.

Шулай итеп, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминевтың фатиха- ы менән, редакцияның проза бүлеге мөхәррире Сабир Шәриповтың редакторлауында «Кинйә» романының өсөнсө китабы менән таныша ала ығыҙ.

Уҡыусыларыбыҙға тәҡдим ителгән «Кинйә» романының өсөнсө (тамамлау) китабы авторҙың үҙе еренә еткереп, ҡат-ҡат эшкәртелгән, телен камиллаштырған романдың беренсе, икенсе китаптарынан әҙәби яҡтан отошло булмауы ла мөмкин, сөнки аҙаҡҡы нөктәне Ғәли Ибра имов үҙе ҡуйырға өлгөрмәне.

Талапсан уҡыусыбыҙ ҡай ы бер урындарҙа ҡытыршыраҡ текстҡа рәхимлерәк бул ын ине.

Минеңсә, ошо әҫәр халҡыбыҙ тарихына, башҡорт романистика ына аҫыл йәдкәр булып өҫтәләсәк. Нисәмә йылдар уҙғас...

**өйөклө ИБРА ИМОВА.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 78





**Ғәли**
**ИБРА ИМОВ**

# КИНЙӘ

**ТАРИХИ РОМАН**

**III китап**

# БҮГӘСӘҮ БАТША АНАТЫ

**Беренсе бүлек**

## Яу ата ы

*«Бер Хоҙайҙан нимәләр ора ағыҙ, мин шуларҙың*
*бөтә ен дә бирәм, сөнки мин — еҙҙең батша.*
*Был турала яҡшы белегеҙ: мин еҙгә ер, ыу,*
*урман, бесәнлектәр, икмәк, дин әм үҙегеҙ теләгән*
*йола, жалование, ҡурғаш, дары — ҡыҫҡа ы, үҙ*
*ғүмерегеҙгә нимәләр теләй егеҙ, шуларҙың*
*бөтә ен дә бүләк итәм...»*

**(Е. И. Пугачевтың башҡорттарға**
**ебәргән Указынан.**
**1 октябрь, 1773 йыл).**

1

Бөйөк тауҙың үре бейек. Уның түбә енә менгәнсе оҙон-оҙон юлдар үтәләр, ярлауҙарын-ҡыҫылдарын аша сығалар, ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар аша атлайҙар, әммә тырышҡан кешеләр үҙ маҡсатына өлгәшә, батырҙар әллә ниндәй бейек түбәләргә лә менеп аяҡ баҫа...

Емельян да... Үҙ яурындарыма бөйөк Рәсәй иленең батша ы исемен күтәрәм, халыҡ саруа ына[1] ирек бирәм, тип шул ауыр юлға сыҡҡан Емельян казак Пугачев та шулай уйлай. Бөтә ҡыйынлыҡты еңергә, түҙергә әҙер икәнлеге уның тәүәккәл йөрәкле, ҡыйыу ҡылыҡлы булыуында уҡ күренеп тора. Иҫ-аҡыл етмәҫлек бик ҙур эшкә тотондо шул ул. Күтәреләе тау, ай- ай, ниндәй!.. Бығаса форпостар,

---

*Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Ғәли Ғизетдин улы Ибра имов (1919–1989) Стәрлетамаҡта тыуып үҫкән. Бөйөк Ватан уғышында ҡатнашҡандан уң педагогия институтын, Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. Оҙаҡ йылдар “Ағиҙел” журналының яуаплы сәркәтибе вазифа ын башҡара.*

*Хәҙер еҙ уҡыясаҡ тарихи-биографик “Кинйә” трилогия ының өсөнсө китабына тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров юғары ба алама бирҙе: “Башҡортостандың үткәне... ҡулъяҙмала ифрат нигеҙле күр әтелгән. Киң ҡоласлы әҫәрҙә ифрат күп конкрет факттарҙы, ихтилал етәкселәренең әм карателдәрҙең исем-шәрифтәрен (бер нисә йөҙ), ер- ыу атамаларын ҡулланыу хайран ҡалырлыҡ! Автор сығанаҡтарға таяна, фактик мәғлүмәттәрҙе раҫлай. Ошоларҙан сығып, китаптың нигеҙендә тарихи ысынбарлыҡ ята, тип әйтә алабыҙ”.*

*Роман-эпопеяның уңғы өлөшө күренекле башҡорт романисы Ғәли Ибра имовтың тыуыуына 90 йыл тулыу уңайынан баҫыла.*

---

[1] *Саруа — ябай халыҡ (автор үҙлегенән).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 79



ҡәлғәләр ала-ала үтелгәне – шул тауҙың итәгенә аҙмы-күпме яҡынлашыу ғына. Әлегә бөтә е алда. Шуны байҡап, яҡшылап күрергә теләгәндәй, ул юрттырып килде лә, атын аҡмар ҡаласығы[1] ситендәге бер тауға туҡтатып, алыҫ-алыҫтарға баҡты. Ҡаршыла – Ырымбур. Сиркәү көмбәҙҙәре ҡояш нурҙарына ялтырап күренә. Яйыҡ ыуы аръяғында – ҡыр-ҡаҙаҡ[2] далалары, унда – Мәскәү юлы, Рәсәй үрҙәре. Бындағылар был яҡты « амар яғы» тиҙәр, ә Яйыҡты сыҡтыңмы – Азия, уны ын «Бохар яғы» тип кенә әйтәләр.

Пугачевтың ул яҡта ғәме юҡ. Далаға ҡасырға йыйынмай. Уның тауы – Мәскәү яғында, Санкт-Петербургка барып, тәхет яуларға, батша булырға сыҡты ул. Тик... Россия ҙур, ик еҙ-сик еҙ күк йөҙө кеүек. Шундағы йондоҙҙар саҡлы күпме ауыл, күпме ҡала бар. Шулар аша үтергә, императрица Екатерина Икенсенең армия ына ҡаршы ҡуҙғалып, халыҡты әйҙәргә йөрьәт итеү торғаны бер алабарманлыҡ төҫлө.

«Мин – ни бары ябай казак, меҫкен хорунжий, – тип үҙенән-үҙе көлдө Пугачев[3]. Әле яңы ғына ашар ашы, ҡуныр ере, аты-туны булмаған, ҡасып-боҫоп йөрөгән, Ҡазан төрмә енән ҡасҡан хоҙай ҡоло. Бөтә е томан эсендә. Ә мин бер яңғыҙым ғынамы, – тип үҙен-үҙе аҡланы ул. – Ана ни саҡлы халыҡ, ярлы-ялпы».

Былтыр Ырғыҙ буйында саҡта уға кәңәш итеп, уны ошо юлға төшөрөүсе, изге фатиха биреүсе игумен Филарет:

– Халыҡ телә ә, үҙенә оҡшағанын баш итер, уға эйәреп, Россияны үҙенеке итер, – тигәйне.

Хаҡ булып сыҡты юрауы.

Еңеү булды булыуын, бик тиҙ арала ҡалҡынып сыҡты ла тантаналы марш менән күпме килде. Әллә ни саҡлы казак, әллә күпме алдат уның янында, уға башҡорттар, татарҙар, ҡалмыҡтар ҡушылды, Илек, Татищев, Чернореченский ҡәлғәләре[4] уға ҡапҡа асты. Крәҫтиәндәр азат ителде, баш эймәгән офицерҙар, дворяндар ҡырылды. Батша юлы ҡан ыҙ булмай. Дар ағастары әр ҡәлғәлә ҡалды. Тик был форпостар, ҡәлғәләр, бөтә Россиялағы ы менән сағыштыр аң... бер остоғо ғына. Ә бит күкрәк ҡағырлыҡ урын юҡ – Яйыҡ ҡала ын да алып булманы, уның коменданты Симонов ирәйеп тороп ҡалды. Ә быны ы, әле Ырымбурҙа ултырғаны, Симонов кеүек подполковник ҡына түгел, губернатор, генерал-поручик, ҙур ордендар кавалеры... Әммә баш ҡалҡытырға ҡурҡып, үҙенең өңөндә ултыра.

Пугачев шулай тип үҙен тынысландыра. Уның көсө лә шунда. Ана ни саҡлы таяныстары бар уның! Шуларға йән өрөп, бер йоҙроҡҡа уҡмаштырып тоторға ғына кәрәк.

Әле уның таяныстары губернаторҙы зил-зибәр килтерер өсөн маршҡа әҙерләнә. аҡмар аръяғына сығалар, полк-полк булып теҙеләләр. Оҙаҡламай ҡуҙғалырҙар. Шул ынтылышҡа маяҡ булып тор он, яҡты нур сәс ен өсөн, Пугачевтың ҡушыуы буйынса, ошо ҡалҡыуға ут яғырға әҙерләнеләр. Дүрткел бура итеп ағастар өйөлгән. Бына үрт алынды, ут ләүкеп китте.

Хәҙер быndай изге эште изге батюшка атҡарыр.

Поп Михайлов[5] тәүҙә Емельян Пугачев алдына баҫты, уның ҡуңыр йөҙөнә, ҡара аҡалына, сая күҙҙәренә ҡарап алды ла ғибәҙәт ғәҙәте буйынса уның алдында дүрт урында бармаҡтарын йөрөттө, унан, халыҡҡа табан боролоп, кадило -

---

*[1] Ҡаласыҡ – бәләкәй ҡала, русса – городок.*
*[2] Ҡыр-ҡаҙаҡ, ҡыр-ҡайсаҡ – ул заманда хәҙерге ҡаҙаҡ халҡын шулай тип йөрөткәндәр (автор үҙлегенән).*
*[3] Пугачев Емельян Иванович – самозваный «император Петр III Федорович».*
*[4] Ҡәлғә – крепость.*
*[5] Михайлов Иван – аҡмар ҡаласығы священнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 80



ын[1] уң ҡулына күсерҙе әм бер артҡа, бер алға йөрөттө. Ҡуҙҙар нығыраҡ көйрәне.

— Боже царя храни...

Өс көн элек үк үҙенә батша указы итеп яҙылған ҡағыҙҙы биреп, шуны халыҡ алдында уҡыр ың, тигәс, ҡаршылашып маташҡайны батюшка. Государь түгел, тигәндер. Максим Шоғаев менән Иван Зарубин ныҡлап ҡыҫмаҡҡа алғас ҡына... Күнмәй сара ы буламы? Ана бит, иконалар күтәреп сығарҙы, үҙе ҙур тәре тотто, кадило ын алды. ин дә мин өгөтләп маташа. Мөғжизә менән ҡотолған Петр Федорович тағы беҙҙең алдыбыҙҙа, ти... Уға баш эйегеҙ, тәбиғ булығыҙ.

— Будь послушаше яко агнец...

Пугачев уға күҙ ирпене. Шул саҡ ул ҡашы тартып алды. Әйтә бит үҙе лә... Яко агнец перед стригущими его безгласен... Йөнөн ҡырҡҡанда тауыш-тын ыҙ ятҡан ҡуҙы ымаҡ... Изге Исаак та шулай ҡуҙы-бәрән кеүек үҙенең ата ы Авраамды тыңлап, уның үткер бысағы аҫтына ятҡан... Алла уға ярҙамға килә... Ғәжәп түгел бындай үҙҙәр, поптар уны йыш ҡабатлай. Батшаны тыңлағыҙ, ти бит. Әйт ен. Пугачевтың үҙенә лә, Литва яғынан оҙатҡан саҡта, староверҙар шулай тигәндәр ине. Ул, тыңларға ант иткән кеүек, башын эйҙе... Эйе, тап яко агнец... Волганы үтеп, Ырғыҙ буйына еткәс, игумен Филарет та шуны әйтте. Уға ла Пугачев баш эйеп, вәғәҙә итте. Тыңларға, әллә кемде түгел, Филаретты. Хәҙер бына шулай үҙен тыңларға өгөтләй поп. Дөрөҫ, бик дөрөҫ, тап шулай кәрәк, тыңла ындар уны, Петр Өсөнсө батша итеп таны ындар, уға тәхет, башына таж, ҡулына дәүләт скипетры[2] яулау өсөн йәндәрен аяма ындар. Библия (инжил) риүәйәттәрендәге бындай егеттәр казактарға ла, крәҫтиәндәргә лә яҡын. Мосолман яугирҙары ла уны Ибра им пәйғәмбәр менән улы Исхаҡ хаҡында тип үҙҙәренсә аңланылар.

«Будь послушаше...»

Шундай изге үҙҙәрҙе әйттереп торорлоҡ ҡиәфәте лә, мәғрур төҫө лә бар Пугачевтың. Ҡуңыр йөҙө батшаларға тейешенсә бик етди. Күҙ ҡараштарында үҙ ярандарына мәрхәмәт, дошмандарына уҫаллыҡ сағыла төҫлө. Киң яурынлы, нескәрәк билле буй- ыны килешеп тора... Өҫтө-башы ла затлы. Кейендереп өлгөргәйнеләр инде уны. Нағышлы зәңгәр кафтанды уға Нуралы[3] хан бүләк итеп ебәрҙе, ары сәхтиән итекте Яйыҡтыҡылар килтерҙе, башындағы яңы бүректе Иҙеркәй Баймәков[4] кейҙерҙе. Ҡарғалы байҙары биргән матур камзул, Кинйә Арыҫланов[5] бүләк иткән тимер күлдәк... Иң мө име — билдәге ҡиммәтле ҡәмәр, тағылған ҡылыс. Батшаның билге е — уның төп шан-шө рәте итеп, уң яурыны өҫтөнән ул яҡҡа ҡыялатып төшөрөлгән яҫы зәңгәр таҫма...

Бөтә е бар, бөтә е килешкән. Үҙендә лә, атында, эйәр-өпсөндәрендә лә. әммә е уға олпатлыҡ, дәү абруй биреп тора. Государь-батюшка, падиша ғәли йәнәптәре, Петр Федорович...

Ул ҡаршы ындағы ғәскәрен байҡап, бөтә ен күргәндәй ҡарап торҙо. Батша исемен күтәргәс, шулай булырға тейеш тә. Тәрән ыу төбөндәге бөтә нәмәне күргән төҫлө ҡара ын...

Маяҡ уты яна, дөрләп яна... Ян ын, бөтә е күр ен, Ырымбурҙа ла күрәләр уны. Күр ендәр, ҡалтыран ындар...

---

*[1] Кадило — сиркәүҙә ғибәҙәт ҡылғанда ҡулланыла, ладан үләнен төтәтеп торған ауыт.*

*[2] Скипетр — батшаның почетлы билге е.*

*[3] Нуралы — хан, Кесе Ҡаҙаҡ жузының хакимы.*

*[4] Иҙеркәй Баймәков — Яйыҡ казагы, баш күтәреүселәренең атаманы.*

*[5] Кинйә Арыҫланов — Нуғай даруға ы Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшина ы, баш күтәреүселәренең баш полковнигы; даруға (монг.) — административ-территориаль бүлем; өлкә.*

*Иҫкәрмә: артабан “ баш күтәреүселәр” ҡыҫҡаса б.к. тип бирелә.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 81



Шул ут янында поп батшаның манифесын уҡыны. Шунан Пугачев үҙе алғараҡ сығып, ҡаршы ындағы ғәскәрен тағы байҡап алды.

– Бөтәгеҙгә лә ирек бирәм! – тине ул көр тауыш менән. Халыҡ геү килде, бүректәр ауаға сөйөлдө.

– Бөтәгеҙгә лә ер, ыу, жалунья...

Бөтә е, бөтә е вәғәҙә ителә. Рәхмәт әйтеү йөҙөнән уға яҡын киләләр, унын ҡулын үбергә, ис юғы кафтаны итәген, ең осон ғына тотоп ҡалырға бул а ла тырышалар. Ерән сәсле, аҡалы-мыйығы етеүле бере е, сиҡылдауыҡ тауыш сығарып, унын янынан китмәй бөгөлөп- ығылды.

– Осударь, осударь...

Пугачев унын яурынына ҡулын алды.

– Кем була ың?

– Мин... Емеля...

Пугачев бер ауыҡ ағайып ҡалды. Был ни тигән үҙ? Емеля, имеш, Емельян батша тиме? Эйе, аҙашы тип тә әйтерҙәр. Тик был уйын иҙҙермәне ул. Батша серле булырға тейеш.

– Будь послушаше, – тине ул, поптың үҙҙәрен ҡабатлап. әм икенсе берәү енең эйәген күтәрҙе.

– ине туҡмағандары булдымы?!

– Күгәрмәгән ер ҡалманы.

– Эйе... Бар улар минең государствомда. Мине тәхеттән төшөргәс бигерәк шаштылар. Уларҙа саҡ ҡына ла христианлыҡ юҡ. Хәҙер ин уларҙың үҙҙәренә шуны ҡайтар. Беҙгә ҡаршы килгән дворяндарҙы ҡыр. Помещиктарҙы, офицерҙарҙы, генералдарҙы...

Пугачев бөтә ғәскәренә өндәште:

– Ишеттегеҙме?

– Ишеттек, ишеттек!

– Ҡырығыҙ яуыздарҙы. Тотоғоҙ. Үҙҙәре йәлләмәне. Кем буй онмай, генералмы, баярмы – барыбер. Майор, капитан тип тормағыҙ. Улар еҙҙе күп таланы, еҙҙе ҡол итеп тотто. Хәҙер еҙҙең көн килде. Мин бирәм ул көндө! Мин еҙҙең өсөн тыуғанмын, еҙҙең өсөн яңынан йәмәғәткә күрендем. Яҡты йондоҙ ымаҡ, яңы тыуған ай кеүек. еҙҙе бер кем дә баҫмалап тота алмаҫ. еҙ иреклe, үҙегеҙ ҙә, улдарығыҙ, ейәндәрегеҙ ҙә.

Шунда уҡ орауҙар яуа башланы:

– Ерҙәрен нишләтергә бойора ығыҙ, государь?

– Бүлеп алығыҙ!

– Малдарын?

– Алығыҙ... Шуны белегеҙ: тигеҙ бул ын. Ғәҙеллек кәрәк. Алдауға, харам эшкә юл ҡуймам. Ғәҙел алығыҙ.

Ә маяҡ уты яна, дөрләп яна.

Халыҡ тын да алмай, тағы, тағы әйт ен, тип көтә. Ғүмер-ғүмергә көтөлгән үҙҙәр, ыу ап-сарсап көтөлгән... Пугачев бик аҙға ғына туҡталып торҙо. Шул арала ла утты яңынан ләүкетеп ебәрергә теләгән төҫлө, бер ҡарт үҙҙе тағы ҡужғытты:

– Әле шулай ти ең дә, государь... Ә уңынан уң, уңынан крепостнойҙар булырмы?

Пугачевтың яуабы әҙер. Күкрәк киреп, яҡ-яҡҡа бороддо, ҡулын үҙ ҡаршы ында өйөрөлттө:

– Юҡ! әммә донъя казактарса... Бына бындағыса. Бөтә Россияла шулай. Быны еҙгә мин әйтәм, анпиратор. Петр Өсөнсө!..

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 82



– алдатҡа алырҙармы?

– Нәүбәт менән. Берәү ҡайта, икенсе е бара.

үҙҙең шулай шыма барыуына «батша» бик шат ине, әлбиттә. Халыҡ ҡәнәғәт, халыҡ шат. Күптәнге хыял. Элек-электән казак булырға тип өмөт иткәндәр. Залимлыҡҡа түҙә алмайынса, далала, урманда ҡасып йөрөп, бер ергә төпләнеп йәшәр өсөн элеккеге казактар ара ына ыйынырға тырышҡандар, шунын өсөн йоломдар бирелгән, ҡапыл-ҡара түҙербеҙ тип, берәй енә ялсы булып та торорға риза булғандар... ә хәҙер ни батша үҙе саҡырып тора. Башҡа көршәк кейҙереп, сәсте ҡырҡтыра ың да казакка әүерелә ең.

әр кем теләй!

Пугачев алдына туҙған сәкмән кейгән Емеля ла эйелеп бүркен алды, ерән сәстәре туҙғып китте.

– Осударь! Мине лә ал! – Ул Пугачевтың итек йөҙөн ыйпаны, көрән кафтанының салғыйын тотто.

Сыйылдыҡ тауышына көлөштөләр.

– Казак булғың киләме? Ҡыҙыҡ күрә еңме? Ә казак тормошонон ауыр икәнен белә еңме? Ана, походҡа барабыҙ, көрәшкә.

– Ал, осударь, ал...

– Ярай, будь послушаше яко...

– Слушаше яко агнец...

...Пугачев ҡул ишара ы менән ым я аны. Ярандары үҙ полктарына әмер бирҙе, әм яугир казактар, яугир башҡорттар, яугир татарҙар, яугир крәҫтиәндәр полк-полктары менән ҡуҙғалдылар. Ырымбурға! Губернатор төйәгенә.

Беренсе көндәрҙә, Яйыҡ ҡала ына килгәндә үк әле, ул Мәскәүгә, Руськә барабыҙ, тип ысҡындырғайны. Унын уйынса, юл ыңғай күптәр, бик күптәр ҡушылыр ымаҡ ине. Ә яуҙың өсөнсө көнөндә, Яйыҡ ҡала ын үткәс, Аҡ ярҙар туғайында казактар йола ы буйынса уҙғарылған кругта унын бөтә яугирҙары:

– Тәүҙә Ырымбурҙы алабыҙ! – тип шау-гөр итте.

– Ырымбурға, Ырымбурға!

«Яңы батша» ундай яр ыу менән килешмәй булдыра алманы. Бындағы казактар ғөләмә е өсөн Яйыҡ та, Ырымбур ҙа – тәнгә ҡаҙалған ике шырау. Подполковник Симоновты[1] ҡалдырып киттеләр, ә быны ы – иң яуызы. Шул шырауҙы тәндән тартып алырға кәрәк.

Бына ҡуҙғалдылар. Ысынлап та, Ырымбурҙан йөҙәгәндәр. Унда – ҡан ыҙ губернатор. Шул төйәкте имен-аман көйө артта ҡалдырып китеп булмай. Пугачев үҙе лә быны белә, элегерәк бер заманда унын яҡташы, шул уҡ Зимовейский станица ында йәшәп, яу күтәргән Степан Разин, хәрәкәт башланғас, артында старшина Корнейҙы ҡалдырған әм шунын яуызлығынан әләк булған. Емельян Пугачев шундағы Кондрат Булавинды ла белә, уны ы Дон атаманының көсөн бөтөрөү өсөн Черкасск ҡала ын, Азов ҡәлғә ен алырға тырышҡан... Ә бындағы губернатор Рейнсдорптың[2] оя ы Ырымбур тегеләр ише генәме? Юҡ, тәүҙә быны ҡырып үтергә кәрәк.

Ә көсө етерме? Быны ына Емельян Пугачев икеләнмәй. Ана, ни саҡлы! Казактарҙан тыш – башҡорттар. Улар полковник Кинйә Арыҫланов тыуы[3] аҫтында бара. Ҡарғалы полковниктары Муса Алиев[1] менән Садыҡ Сәйетов[2] күпме сиреү туплаған. Ни саҡлы ҡалмыҡтар бар. Тағы килерҙәр, ә Ырымбурҙағы казактарҙы,

*[1] Симонов Иван Данилович – подполковник, гарнизон командиры, Яйыҡ ҡаласығының коменданты.*

*[2] Рейнсдорп Иван Андреевич – Ырымбур губерния ы губернаторы, генерал-поручик.*

*[3] Тыу-байраҡ – ғәскәри билге, ат ҡойроҡтары менән биҙәлгән ағас (автор үҙлегенән).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 83



алдаттарҙы үҙ яҡтарына сығарырҙар. Полковник Максим Шоғаев[3], быға шик тә юҡ, ти. Уның кәңәше буйынса аҡмар казактарына баш итеп Михайлов попты ҡуйҙылар, ә атаман Донской[4] байтаҡ ҡына казактарҙы алып, Ырымбурға кереп бикләнгән икән. Максим, рәтен табып, шул Донскойҙы ҡайтарыу сара ын күрә. Уға хаттар яҙылған, йәшерен кешеләр ебәрелгән. Ул ғынамы, октябрҙең тәүге көнөндә үк ҡалаға ике илсе ебәргәйнеләр. Бере енең ҡулында губернаторға атап яҙылған өндәү хаты — батша указы. Ә икенсе илсе подполковник Могутовҡа[5] махсус яҙылғанды алып китте. Могутов та ҙур түрә — Ырымбур казактарының атаманы. Ике енә лә государь тарафынан, ис ҡаршылыҡ күр әтмәйенсә, ҡала ҡапҡаларын асып, баш алырға әмер бирелгән. Илселәр китте. Сая казактар улар. Барып етерҙәр, аманатты[6] тапшырырҙар. Ҡыйын булыр, әлбиттә. Уларҙы, ихтимал, үлем дә көтә торғандыр, ләкин ҡурҡып, туҡтала торған түгел былар.

Яуап юҡ. Барып ингәндәрме-юҡмы, имен-амандармы — әлегә билгеле түгел. Их, уйлағанса ғына булып, Иләк ҡала ындағыса сиркәү калакулдары ҡағып, ҡапҡалар асып тор аларсы...

Пугачевтың түҙеме етерлек. Үҙе бара бит, яуап бирмәй булмаҫтар... Юғи ә... Уттар аҡмар маяғында ғына янмаҫ, Илектә, Татищевта ҡалған дар ағастары бында ла я алыр. Батша эше шун ыҙ бармай.

Ул — батша. Килештерә лә белергә тейеш. Бына бит, ғәскәр сафтарының башында бара. Эргә ендә ординарецы бар. Уны ы ла кәрәк уға. Ә бит ҡасан ғына әле, Пруссия уғышында, Дон казактары полковнигы Илья Денисовтың ординарецы ине үҙе. Бер бәрелештә буталыш киткәйне, шунда Емелька полковниктың атын юғалтты. Еңел генә үтмәне, әлбиттә. Ай, ярҙы уң Денисов... Ҡамсы ын күңеле туйғансы уйнатты.

Бына хәҙер күр ен ине Емельян Пугачевты! Ул шунда уҡ әллә ҡасанғы сит уйҙарҙан арынып, яңынан мө абәт төҫкә керҙе.

Ул — император... Ана, уның ғәскәрҙәре... Үҙенең полковниктары бар хәҙер. Ана, Иван Творогов[7] бара, уның артынса Максим Шоғаев... Артиллерияға Федор Чумаков баш. Витошнов[8], Овчинников[9]... Башҡорттар ғәскәренә — Кинйә Арыҫланов, татарҙарға — Муса Алиев, Садыҡ Сәйетов. Армияла хәҙер хатта Ырымбур казактары ла бар. Уларҙы Пугачевҡа ҡаршы уғышырға тип сотник Тимофей Подуров[10] команда ы менән ебәргәйнеләр. Татищев крепосына еткәс, уларҙы шул уҡ сотник боласылар армия ы яғына алып сыҡты. Ғәжәп тә, ғорурлыҡ та ине был. Подуров — императрицаның үҙе ойошторған яңы закондар комиссия ының депутаты.

Депутат та бар.

Барлыҡ армияға баш атаман итеп Яйыҡ ҡала ы янында саҡта уҡ ана шул Аҡ ярҙар туғайында уҙғарылған круг-йыйында казактар тәртибе буйынса Андрей Ов-

---

*[1] Муса Алиев — б. к. полковнигы, Ҡарғалы (Сәйет биҫтә е) татарҙарының старшина ы.*

*[2] Садыҡ Сәйетов — Ҡарғалы сауҙа татары, Пугачевтың «Йәшерен Советы» ағза ы.*

*[3] Максим Григорьевич Шоғаев — б. к. полковнигы. Баш судья, аҙыҡ-түлек начальнигы, казначей.*

*[4] Донской (Донсков) Данила Дмитриевич — аҡмар ҡаласығы казактарының атаманы.*

*[5] Могутов Василий Иванович — подполковник, Ырымбур казак ғәскәрҙәренең атаманы.*

*[6] Аманат — аҡларға ҡушып бирелгән нәмә. Икенсе мәғәнәлә — заложник.*

*[7] Иван Александрович Творогов — Илек казактарының атаманы, б. к. Хәрби коллегия ының төп хакимдары, полковник.*

*[8] Витошнов Андрей Иванович — Яйыҡ казактарының старшина ы, б. к. Хәрби коллегия ының баш хөкөм итеүсе е, полковник.*

*[9] Овчинников Андрей Афанасьевич — Яйыҡ казагы, походтағы дөйөм атаман, бөтә Пугачев ғәскәренә баш. Генерал-фельдмаршал.*

*[10] Подуров Тимофей Иванович — Ырымбур казактары сотнигы, императрицаның үҙе ойошторған Уложенная комиссия ының депутаты, б. к. полковнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 84



чинниковты айларға булғайнылар. Пугачев иректе уларҙың үҙ теләктәренә ҡуйҙы.

– Йә, нисек, казактар? Любомы? – тип ораны ул.

– Любо! Любо!

Әле ана шул Овчинников үҙе бөтә полктарҙы Ырымбурға йүнәлтеп, уларҙың юлдарын билдәләй, әмерҙәр бирә. Төрлө юлдарға төшөп таралып баралар. Күп көс күрен ен. Казактар өжүм иткәндә лава булып, яр ыу ташҡын кеүек баралар.

Ысынлап та, ҙур ябырылыу ине был.

2

Башҡорт алайҙары[1] ла яр ып атлай.

Күңел елгә генә елкенмәй. Ырымбурға етергә яҫҡыйҙар.

Сафтар алдында Бошман-Ҡыпсаҡ старшина ы Кинйә атаман бара. Тик ул, старшинанан бигерәк, Пруссия уғышы ҡа арманын хәтерләтә. Ҡалмыҡтар походына барғанда кейгән кейеме, ҡыҙыл лампаслы салбары йәшел буҫтауҙан, зәңгәр кафтанын кейгән. Башында тиренән тегелгән осло түбәле аҡ бүрек... Уның йәнәшендә ҡошсо о Алпар[2]. Уларҙың аттары бер-бере енән айырып алғы ыҙ тиерлек. Сысҡан ыртлы был бүртә аттар ике е лә бер үк тарпан бейә енең ҡолондары ине. Алпар уларҙы өйрәтте, ҡарап үҫтерҙе. Әле бына бер үк яу юлдарынан атларға тура килде ул малҡайҙарға. Бер-бере енән айырылмай, томшоҡто томшоҡҡа тейҙереп, йәнәшләп кенә барырға яраталар.

аҡмар күперен сығып күп тә барманылар – бер уҙаман яугир атаманды ҡыуып етеп, атын тиңләштерҙе.

– Кинйә абыҙ, – тине ул, үҙ башлай алмайынса, – үҙем бар. Әйтсе...

– Йә, өйлә, ҡарнә, – Кинйә уның өлкәнлеген ихтирам итеп, китапсалап өндәште. – Ни бар?

– ин, тим, батша хәҙрәттәренә әйт... был Яман ҡаланы ал ын. Мотлаҡ ал ын. Беҙҙең иләү йәмғиәте шулай әйтә.

– Алырбыҙ, алырбыҙ, уҙаман.

– Алғас... Унда, тибеҙ, гөбөрнатор булма ын. Беҙгә ундай ялмауыҙ түрә кәрәкмәй. Беҙгә батша ғына баш. Әйт, ныҡ әйт. Тайшанып торма. Кире китерҙәр, тиң.

– Ярай.

Уҙаман китергә тип теҙгенен тартҡайны – туҡталды.

– Бүртә атың... тим... Күҙ теймә ен, елгер аяҡлы күренә. ырты тигеҙ, ултырыу еңел. Оҙаҡ юл өсөн шәп... Бында тарпан ҡаны барҙыр...

– Бар.

– Имен-аман йөрөт өн үҙенде, етер ереңә, мораҙыңа еткер ен.

– Изге теләктә булыуыңа рәхмәт.

– Үҙебеҙ өсөн ул... Батшаға әйтергә, тим, онотма.

Уҙаман Кинйәгә боролоп ҡарай-ҡарай үҙ алайына китте.

– Ярай, әйтермен, – Кинйә был ҡарнәнең шулай ябай ғына аңлауында ла ҙур мәғәнә күреп йылмайҙы. Бер ул ғына түгел, башҡалары ла – ҡарты-йәше, Ҡалғай ҡаланы алабыҙмы, гөбөрнаторҙы тотҡас, ни эшләтәбеҙ, тип орай. Яратмайҙар Ырымбурҙы, бөтә йәбер-золомдоң, яуызлыҡтың башы шунда ғына тип беләләр. Үҙ күңелдәренә хас килгән батшаның Пукрау[1] көнөндә яҙылған манифесын тәғзим ҡылып алғандан бирле, уның әрме енә ҡушылып, казактарға иш бу-

---

*[1] Алай – полк (автор үҙлегенән)*

*[2] Алпар – сотник, Кинйәнең ҡошсо о; ҡошсо – стремянный, ординарец, посыльный (автор үҙлегенән).*

лып, ата-баба күрмәгән иректе яуларға яр ыйҙар, таныш-тоноштарын яуға саҡыралар. Шул көндән бирле Кинйә Арыҫланов үҙе лә күпме хаттар яҙҙы, Пугачев исеменән указдар таратты.

Өндәүҙе хуп күрҙе халыҡ ялпы ы.

— Олуғ император хәҙрәттәренә баш орамыҙ, — тип киләләр, уға тәбиғ булалар.[2] Ябай саруаға эйәреп, иләү ағалары ла ҡуҙғала. Көрәш башланғас, ирек яуларға кәрәк. Ҡай ы берҙәре, дөрөҫ, бик үк атлыҡма а ла, килеп ҡушыла. Улары йә яңғыҙ тороп ҡалыуҙан, йә ҡойроҡта өйрәлеү хурлығынан ҡурҡа, әлбиттә. Сиреү еҙ ҡалғансы, сафтар башына баҫырға мәжбүр.

Шулай итеп, Екатерина Саниянының[3] дворяндары күр әткән яфанан нарази булған халайыҡтар әр йәйләүҙә, әр иләүҙә, әр төбәктә яуға күтәрелде.

Ҡарғалы юлы менән ҡушылғанда Муса Алиев полкы яғынан Кинйәнең күптәнге дуҫы Усман Арыҫланов килеп сыҡты. Ҡайсаҡ серҙәш, ҡайсаҡ абаҡташ. Үҙҙәре генә түгел, атайҙары ла дуҫтар ине уларҙың. Шулай ҙа Усман үҙе губернатор алдында ҡойроҡ болғарға яратты. Уның канцелярия ында тылмас булып эшләй, күберәк ваҡытын ҡалалағы өйҙәрендә тора. Ҡарғалыла йорттары бар. Әле шуларға алданып тороп ҡалғанмы, берәй хәл бармы: төҫө ҡасҡан, кәйефе юҡ. Ҡасталап йөрөй бул а кәрәк.

— Изге юлға сыҡҡан ығыҙ, дағалы бул ын.

Кинйә уның өҫ-башына күҙ ирпене. Ҡорал-маҙар ҙа алмаған.

— Ә ин бармай ыңмы ни?

— Эй, Кинйә дуҫ... Барырлыҡ бул ам... Бына инең ымаҡ мылтыҡ аҫыр, ҡылыс тағыр инем. — Усман, көнләшкән кеүек, Кинйәнең ҡорал-яраҡтарына бер ыпыра ҡарап алды. Бөтә кәрәк-ярағы бар шул. Арҡа ында ян- аҙағы, ул ғына етмәй — мылтығы бар. Ҡылысы бар өҫтөнә өңгө ө лә эйәр ҡашына беркетелгән. Билдәге ҡорманға патрон ауыты, дары янсығы тағылған... Хәнйәре, суҡмары бар. Баштан-аяҡ ҡоралланған.

— Бөгөнгө көн мин изге теләк кенә теләй алам.

Ысынлап та, Усмандың хәле мөшкөл ымаҡ ине.

— Ниңә ҡотоң осҡан инең? — тип ораны Кинйә, аптырап.

— Минең улым... Әмирем тегендә бит... бүленеп ҡалды.

Шунда булыуы ихтимал шул. Әмир[4] ҙә, ата ы, олата ы юлын ҡыуып, губернатор тирә ендә тылмас булып йөрөй, төркисә яҙыу- ыҙыу эштәре менән шөғөлләнә ине. Шунда ҡалғандыр. Ул ғына түгел, күптәр унда...Яу килеүен ишетеү менән үк губернатор Ҡарғалы халҡына Ырымбурға күсеп торорға бойороҡ биргәйне. Бөтә е күсмәне, әлбиттә. Шулай ҙа байҙарҙың, канцелярияларҙа эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең бер аҙын йә әт кенә Ырымбурға саҡыртып килтертә алғайны. Байтаҡ ҡына сауҙагәрҙәр, көҙгө йәрминкәгә килеүселәр ҙә ҡала эсендә ҡалды. ис кемде ҡайтарманылар, ҡасып сығырға уҡталыусыларҙы тотоп, үлтерә яҙып туҡманылар, ҡамсылап баструкка ябып ҡуйҙылар. Ә инде губернатор яны — йылғаның икенсе яры. Ундағылар уғыш-алышта ҡатнашмай ҡалмаҫ. Усман тылмас ҡурҡҡанса, былдай ҙур яуҙың ығы-зығы ында имен ҡалмаусылар ҙа күп булыр. Әмир тылмасты шул ҡиәмәттән ҡотҡарырға килгән ата ы, ялынып-ялбарып Хоҙайға ығынған төҫлө ине. Үҙен бер заман элекке губернатор Неплюевтың ҡотҡо он таратып йөрөгән еренән ҡыр-ҡаҙаҡтар асыуынан ҡотҡарып алып ҡал-

---

[1] *Пукрау көнө — Покров. Ҡыштың беренсе көнө. 14 октябргә тура килә. Ерҙе ап-аҡ ҡар ҡаплай.*
[2] *Тәбиғ булыу — буй оноу, ҡушылыу (автор үҙлегенән).*
[3] *Екатерина Икенсе — батшабикә, Рәсәй императрица ы, Ангальт-Цербстский ғаилә енән.*
[4] *Әмир Усманов — б. к. писары.*

ғайны Кинйә. Ә хәҙер уң улын нисек ҡотҡарырға? Рейнсдорп янында бит ул. Шуның өсөн дә Усманға үҙенең ерҙәштәре Муса Алиев менән Садыҡ Сәйетов йылы үҙ ысҡындырмағандарҙыр, моғайын.

Кинйә киреләнмәне.

— Үҙебеҙҙең яҡҡа сығартыу юлын ҡарарбыҙ. Уға бер кәлимә үҙ яҙ. Батшаға бағын, тип фатиха бир.

— Бағыныр, иншалла... Хоҙай ҡушып, ауыҡ ам, үҙем дә итәғәт итеп килермен... Минең дә файҙам тейер.

Кинйә юлдан ситкәрәк сыҡты. Усман тиҙ-тиҙ генә ҡыҫҡа мәктүб[1] яҙҙы. Шул арала Кинйәнең аты Аҡъял кешнәп алды, ә сафтар башында ҡошсо о — сотник Алпар атланған Тумаҡ айғылдап яуап ҡайтарҙы. Кинйә хатты алып, теҙгенде бушатыу менән үк, аты алай башына табан елдерҙе.

Был аттар ҙа бик алыҫ юлға сыҡҡайнылар шул.

***

Ырымбур ҡаршы ына байраҡтар күтәреп килделәр. Тирә-яҡты янғыратып борғолар уйнаны, йөрәктәр елкетеп барабандар ҡағылды, әйтер ен, ҡара яу ҡаланың үҙен тапалап үтергә килә.

Ҡамышлы күлде үткәс, Казачий болононда туҡталдылар. Унда — Ырымбур, улда — Берда[2] биҫтә е. Барып етә-етеү менән үк ундағы казактар Пугачевҡа ҡушылды.

Пугачевтың бында өс мендән ашыу яугиры. 22 тубы[3] бар. Атам ти ә, йәҙрәләре әҙ түгел.

Бер-бере енә яҡын ғына итеп айырым-айырым күрәндәр[4] ҡоролдо, аттар утлауға ебәрелде, ылауҙар түнәрәкләп теҙелде. Үҙенә күрә бер ҡәлғә ул. Ҡаршыға туптар ҡуйылды.

Бөтә ен дә беләләр казактар, бөтә ен ойошторалар. аҡсылар, дозорҙар, күҙәтселәр ебәрелгән. Туҡталдыңмы — усаҡтар яғыла, тағандарға ҡаҙандар аҫыла, бутҡа бешергә, сәй ҡайнарға тейеш.

— Утты күп яғырға! — тип әмер бирҙе Пугачев. Күп яғыл ын, яу ҙур күрен ен, уттарға ҡарау менән үк ҡала түрәләренең ҡото алын ын...

Ул төндә ҡала диуарҙары артында ла, Казачий болононда ла йоҡламанылар. Тегендә ағайҙылар, ҡурҡтылар, күҙәттеләр, ә усаҡтар янында дәрт ташты, яр ыу үҙҙәр өҙөлмәне. Усаҡтан-усаҡҡа Пугачев йөрөнө. Үҙенә лә ҡыҙыҡ, башҡаларҙың күңелен күтәрергә лә кәрәк. Туҡталып өйләшеп ала, өйләүселәрҙе тыңлай. Бер урында туҙған сәсле ерән әҙәм онтолоп китеп, башҡаларҙы үҙ ауыҙына ҡаратып ниҙер өйләй

— Әй, йүгерәм, әй, елдерәм... Ҡуян күпер аҫтына керҙе, мин — уның артынан! Тәки тоттом. Ана, анау күпер аҫтында.

Пугачев таныны уны.

— Ә, ин икән ең!.. Мели, Емеля, хәҙер инең неделя, — тип күҙ ҡыҫты. Ерән Емеля уны күреп ырғып торҙо. Башҡалар ҙа ҡалҡынды. — Осударь, батюшка... — тине ул сиҡылдауыҡ тауыш менән. — Шулай булды шул, ҡуян тотҡайным...

Пугачев китеп барҙы, әйҙә, тел менән тирмәнен тарт ын. Шулай ҙа шикләнеп

---

*[1] Мәктүб (ғәр.) — хат.*
*[2] Берда — Бәрҙе (хариус балығы) үҙенән.*
*[3] Туп — пушка.*
*[4] Күрән — ғәскәр ваҡытлыса туҡтап ятҡан урын; лагерь.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 87



тә ҡуйҙы. Көтмәгәндә, бер иш еҙ-иптәш еҙ килеп ҡушылған берәҙәк[1] бит. Шымсы-маҙар түгелме... Шулай бул а ни... ундай әҙәмгә бығауҙар, сынйырҙар бар. Уның үҙенең дә ундай ауыр тимер бығау менән йөрөгәне, ауыр түмәргә бәйләнгәне, сынйырын зың-зың килтереп өйрәп йөрөткәне булды. Ундайы аҙ бул а, дар я арға ла өйрәнделәр бит.

...Иртән борғолар тауышы бөтә яусыларҙы аяҡҡа баҫтырҙы.

Яҡтырған. Ялҡауланып ҡына ҡояш сығып килә. Уның тәүге нурҙары ҡала сиркәүҙәренең көмбәҙҙәрендә сағыла. Унда ла халыҡты туплау өсөн калакул ҡағалар. Көс-кәр күр әтеп күкрәк ҡаҡҡан шикелле, бер-ике тапҡыр туп аттылар. Атҡан саҡта гөр өлдәп-гөр өлдәп алды, шартлағанда ер тетрәгән төҫлө булды. Туптар туҡтаны, ә ҡәлғә эсендә ҡупҡан ығы-зығы баҫылманы.

Бына ул Ор йылға ынан күсә-күсә килгән Оренбург, бына ул Торғай ҡала, Яман ҡала. Бөтә ғазаптың, бөтә ыҙаның ҡә әрле төйәге. Шунда губернатор, шунда тау контора ы, тоҙ контора ы. Ерҙәрҙе алған да, тоҙ юлын япҡан да шул. Ошонда төрмә, ошонда армайҙар[2]. Ундайҙарҙың көллө ө әле лә шунда, улар бергә-бергә мәкер төйнәп, берсә ҡалтыранып, берсә ҡөҙрәтләнеп ҡәлғә диуарҙары артынан күҙәтеп торалар.

Шуларҙың әммә ен пыран-зыран килтерергә тип килделәр яр ыу йөрәкле иразаматтары, ил арыҫландары. Шулар хәҙер бер тыу аҫтына тупланды... Әмер генә көтәләр кеүек.

Бөтә енән элек бик тиҙ арала бөтә ҡаланы ҡамап алыу сара ы күрелде. Бөтә тирә-йүн таныш. Себер яғына Оло тау ырты уҙыла, төньяҡҡа – Арғын тауы, көньяҡта – Майтүбә, шунда Моғауаза, йәғни Меновой двор. әр тарафҡа йөрөр өсөн ҡала ҡапҡалары бар. Уларҙың әр ҡай ы ынан сыҡҡан да, ингән дә булды. Хәҙер бөтә е лә бикле. Бер аҙна инде. Ул тимер ҡапҡалар асыла ла ябыла. Йомошо булмаған ис кемде сығармайҙар, ин әң – ин, әммә сыҡма...

Бына шул тауҙарға, ҡалҡыу урындарға, ана шул ҡапҡалар ҡаршы ына айырым-айырым полктар урынлашты.

Бөтә е баш атаман Овчинников ишара ы менән йүнәлә.

– Атаман Арыҫланов! – тип саҡырҙы Пугачев. – Полктарыңды Маяҡ тауына тупла!

***

Кинйә үҙ ҡарамағындағы сиреүҙе шунда алып китте. Аҡтүбәгә... Башҡорттар шулай тип атағандар ул тауҙы. Бик яуаплы урын. Эргәлә Яйыҡ ыуы. Уның урманлы туғайын да, аҡмар тамағын да ҡарап торорға кәрәк. Шунда уҡ күҙәтселәр, шәйләктәр китте, бағауылдар ҡарауылға баҫты.

...Кинйә атын тау түбә енә атлатты. Уның артынса улы eләү ен, туҙыҡа ы[3] Ҡотлогилде,[4] ыуын-ҡыпсаҡтар старшина ы Яман ары Яппаров[5] эйәрҙе. Тау, ысынлап та, аҡ ыл тупраҡ менән ҡапланған. Ҡасандыр бында торлаҡ йорттар булған. Нигеҙ урындары әле лә билгеле. Ҡала алыныр алдынан ғына ла бында иҫкереп бөткән мәсет, зыяраттағы ҡәбер таштары бар ине. Тәүге губернатор Неплюев шуларҙы емертеп, урынына бейек маяҡ эшләтте. Ул да емерелгән хәҙер.

– Бына ошонда Бошман бей урҙуға ы торған! – тине Кинйә, алыҫ-алыҫтарҙы

---

*[1] Берәҙәк – (рус.) – бродяга.*

*[2] Армай – палач.*

*[3] Туҙыҡа – бер туғандарҙың балалары (двоюродный) (автор үҙлегенән).*

*[4] Ҡотлогилде Абдрахманов – Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо башҡорто, б. к. отряд командиры.*

*[5] Яман ары Яппаров – ыуын-Ҡыпсаҡ олоҫо старшина ы, б. к. полковнигы, Яман ары ауылынан (хәҙерге Көйөргәҙе районы).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 88



байҡап. – Уның түбә е, уның төйәге...

Улы уның үҙен ҡеүәтләне:

– Беҙҙең ырыу башы, данлы бабабыҙ.

Кинйә яҡ-яғына ҡаранды.

– Ҡайҙа тыусылар?

Яу ваҡытында тыусылар ил аға ынан алыҫ булмай. Шунда уҡ Бошман-Ҡыпсаҡ ырыуының тыуын, бер йәшел байраҡты алып килеп, ҡулына ондолар. Кинйә уларҙы үҙҙәре баҫып торған урынға текәне.

Хәҙер бына шунда уларҙың урыны! Борон замандарҙа ла Бошман бейҙең шанлы тыуы шунда елберҙәгәндер, ихтимал. Ошонда уның төп ҡарғуы[1] торған. Башҡорт ҡыпсаҡтарының туғыҙ обанан торған илендә ҡыуаныслы хәлдәр булғанда ла, хәүеф-хәтәр килгәндә лә ошондағы бейек ҡарғу башында ут ләүкетеп, төрлө тарафтағы йәйләүҙәргә ебәргәндәр. алынған хәбәр ҡараңғы төндә яҡты ут рәүешендә, көндөҙҙәрен төтөн бағана ы булып алыҫ-алыҫтарҙа күренгән. Бошман бейҙең ораны шулай ҡарғуҙарҙан-ҡарғуҙарға киткән: “Туҡсоба![2] Туҡсоба!”

Хәбәрҙәрҙең яҡшы ынан яманы күберәк булған, әлбиттә.Тик әр оранға ил азаматтары атҡа атланған, индәренә ҡорал-яраҡтарын аҫып, Яйыҡ буйҙарында оло сиреүгә тупланған. Бошман бейҙең ҡа арман яугирҙары, ошонда уҡмашып, монголдар яуына ҡаршы Ҡалҡа уғышына киткәндәр, шунда урыҫ кенәздәренең дружиналарына яурынға-яурын тороп, ил баҫҡынсылары менән ал-ял белмәй алышҡандар.

Еңелгәндәр, ләкин ҡыйралмағандар, Бошман бей Яйыҡ, аҡмар буйҙарында яңы ғәскәр туплап, ун дүрт йыл буйы монголдарҙы артабан үткәрмәй тотҡан. Шунан уң ғына Оло Иҙел буйына китергә мәжбүр булғандар... Шунда Бошман бей тамам ҡыйралып, әсир ителгән. әм... Ул замандар күптән үткән, алыҫта, бик алыҫта хәҙер. Ҡыпсаҡтар иленә килгән башҡа сабауылдар[3] ҙа, үҙҙәренең дошман өҫтөнә ябырылыуҙары ла, яу сапҡан ваҡыттар ҙа онотолған. Ләкин бына тағы ҡыпсаҡтар ҡорал-яраҡтарын алды, көслө башҡорттар, бөтә халыҡтар менән берегеп, ирек яуларға сыҡты. Тәҡдир яҙмышы буйынсамы, әллә Бүгәсәү батша ҡушҡанынсамы, нисектер – Бошман бей төйәгенә – Аҡтүбәгә килеп тыу текәнеләр.

Бошман-Ҡыпсаҡтың төйәге – хәҙер ил аға ы Кинйә ҡа армандың урҙуға ы. Кәрәк бул а, ул да яугирҙарына «Туҡсоба!» тип оран алыр.

...Башҡорттар билдәле бер күрән булып урынлашты. Ундай күрәндәр ҡоролошоноң борон-борондан аҡланып килгән тәртибе бар. Ғәҙәттә, ул шундай түбәлә ҡорола. Иң юғарыла ғәскәр башлығының урыны була. Уртала торған өсөн дә ул урҙуға тиелә. Уны айырым алайҙар уратып ала. Бында и ә Ырымбур яғына ҡарап бошман-ҡыпсаҡтар урынлашты. ул ҡулда – Ҡотлогилде Абдрахмановтың сәңкем-ҡыпсаҡтары, Яман ары Яппаровтың ыуын-ҡыпсаҡтары, Кинйәнең туҙыҡа ы ыртландың сарыш-ҡыпсаҡтары, ә уң яҡтараҡ – Яйыҡҡа табан үҫәргәндәр, юрматылар, түңгәүерҙәр, Тоҡ[4] буйынан килгәндәр. әр алай үҙ тыуын ҡаҙаны. Шулай итеп, олуғ тыуҙы тирәләп, ҙур ҡулса алған ымаҡ бер урам түңәрәк барлыҡҡа килде, ә уның тышында – икенсе, унан – өсөнсө, дүртенсе урам.

Хәйер, далала күл тирәләй тирмәләр ҡороп йәйләү я ағанда ла, ҡәлғә төҙөп ҡала ҡорғанда ла шундай уҡ түңәрәк урам – юлдар барлыҡҡа килә. Шулай күҙәтергә лә, сиреү менән етәкселек итергә лә уңайлы. Ләкин күрән тәртибе шунда уҡ Яман ары күҙенә салынды.

---

[1] *Ҡарғу – башына ут яғып, ут хәбәре, төтөн ишара ы ала торған ҡоролма (автор үҙлегенән).*

[2] *Туҡсоба – туғыҙ оба, ырыу (автор үҙлегенән).*

[3] *Сабауыл – өжүм, баҫып алыу (автор үҙлегенән).*

[4] *Туҡ (хәҙерге яҙылышы).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 89



— Беҙҙең Кинйəбеҙ хан урынын алды, — тине ул, табаҡ кеүек тулы битендə көнлəшеү төҫө күр əтеп.

Ə Кинйəнең уйы бүтəн.

Урынлашҡан урындар, төнəр төйəктəр арттараҡ, ағас ышығында, йырындарҙа, аттарҙы утлатырлыҡ утлауҙарҙа ине. Унда еңел-елпегə тирмəлəр ҡоролдо, ундай рəте булмағаны — йə əт-йə əт кенə ҡыуыштар я аны. Яуға ҡубынып сыҡҡас инде, ырланып торорға түгел. Төнө ҡуналҡалар — буҙ ялан, ятыр яҫтыҡ бүтəгə үлəн була.

Бер урында Буранбикə[1] менəн Аҡҡалпаҡ[2] та Кинйə өсөн тирмə ҡуйҙылар, саңырағы,[3] усаҡ урыны бар. Инер ишеге лə юҡ түгел. Ул, боронғо төркиҙəр ғəҙəтенсə, ҡояш сығыр яҡҡа асыла торған итеп ҡуйылған. Килене лə, Алпарҙың йəн өйгəне лə, ирҙəре ҡубынғас, йорт-иле ҡалмай, эйəрҙелəр бит яуға. Əйтеп, аңлатып ҡаранылар, Кинйə лə өгөтлəне — ни күр əк тə бергə күрəбеҙ, тип сат йəбештелəр. Əле, ана, үҙҙəре янында ҡалдырылған бер нисə кеше менəн тирмəлəрен ҡорғандар, алып килгəн аҙыҡ-түлекте урынлаштырғандар. Алпар уларға аҫҡаҡ я - ап бирҙе, усаҡ яғып, ҡаҙан аҫтылар. Бер ағай кеше арыҡ салған, тунап бөтөп тə бара.

Юл йөрөгəндə лə, быңдай яу ваҡытында ла яугирҙар аптырап тормай. Əле лə бер төрлөлəре сиреү хеҙмəтенə — бағауылға, ағауылға баҫты. əр төркөмдəн бүлеп ҡалдырылғандар ҡуналҡа эшлəп, аш яраштырыу яғын ҡарай. Йорт-илдəн əҙерлəп килгəн ризыҡтары байтаҡ əле. Ҡурған ҡурҙаҡтар, тултырылған ҡаҙылар, ыҫланған ҡорот йомарлаҡтары, ҡыҙҙырылған эремсек... Яуға китер алдынан əр йортта тана-торпа уйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып ҡорот əҙерлəгəйнелəр. Етəктəге аттарҙың эйəр өҫтө буш килмəне. Ҡанъяғалар бəйлəүле, тур ыҡтар, муртайҙар[4] тулы ине. Əле лə буш түгел улар. əр кемдең ҡуржыны аҙыҡ менəн тулы тиерлек. Тик əле уларға теймəйҙəр, эйəр өҫтөндə терелəтəй алып килгəн арыҡ-ҡуйҙарҙы уйыу хəйерле. Ҡаҙандар тулы ит бешə, ҡулалар тултырып ҡайнатырға сəй ҡуйылған...

Буранбикə сəй əҙерлəп бөткəйне. Унығ ашъяулыҡ йəйеп, сеүəтəлəр, тəгəстəр таратып ҡуйыуын күргəс тə, елəү ен[5] ҡатынын киҫəтеп алды:

— əй, Буранай ҡарағым,[6] йəйлəүгə сыҡтым тип белеүеңме?

Эйе, семəрле тəгəстəргə ҡойоп торор өсөн бында аба- аба ҡымыҙ килтереп булмай. ыйланыр урынмы ни...

— Ə уң?.. Сеүəтə еҙ сəй эсеп буламы?

— Артыҡ туҙҙырмаң. Ҡуҙғалып китергə əр ваҡыт əҙер тор он. Əле бында, əле — айт!

— Төшөндөм. Күҙ нурым əйткəнде төшөнмəй буламмы?..

Аҡҡалпаҡ менəн Буранбикə йүгергелəп кенə йөрөй. Уларҙы ир-егеттəрҙəн айырырлыҡ та түгел. Ауылда саҡта кейеп йөрөгəн еҙ дағалы сəхтиəн итектəр урынына — аяҡта еңел сарыҡ. Үҙе еңел, үҙе йылы. Киндер ҡуныстарын тубыҡтан түбəн таҫма менəн ҡыҫып бəйлəгəндəр. Ə өҫтəрендə — ирҙəрсə ҡыҫҡа бишмəт, башта — ҡолаҡсын. Сəс үрместəрен урап шунығ аҫтына йəшергəндəр. Ҡайҙа ул ҡашмау кейеү ҙə ҡайҙа ул тəңкəлəре сылтыр-сылтыр килеп торған нескə билле, киң күкрəкле елəн бөркəнеү... Юлға сыҡҡандан бирле гел асыҡ ауала йөрөй-

---

*[1] Буранбикə — Кинйəнең килене, улы елəү ендең ҡатыны.*
*[2] Аҡҡалпаҡ — Алпарҙың йəн өйгəне, ҡатыны.*
*[3] Саңыраҡ — тирмəнең көмбəҙе (автор үҙлегенəн).*
*[4] Муртай — тиренəн эшлəнгəн ат өҫтөндə ҡымыҙ йөрөтə торған ауыт (автор үҙлегенəн).*
*[5] елəү ен Кинйин — Кинйə Арыҫлановтың улы, сотник, мулла, б. к. полковнигы.*
*[6] Ҡарағым (ҡаҙаҡса) — өйөклөм, күҙ нурым.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 90



йөрөй бит алмалары ҡыҙарып бөткән, ирендәре ярылған... Шул ғынамы, усаҡ янында булашҡанда ҡором өрөмөнә лә буялалар.

— Буранбикә, өрмә тарттыңмы? — тип көлдө Аҡҡалпаҡ.

— Ә ин?

Бер-бере енә ҡараштылар ҙа көлөштөләр.

— Ә ин, Аппаҡҡай, ырғаларыңды тағырға оноткан ың, — тип үсекләй Буранбикә.

Йоҡлар урындары ла иркен тирмә түгел. Ҡайҙа ул йомшаҡ мендәр, йылы яҫтыҡ. Бында шул да татлы йоҡо, әлбиттә.

Яу шарттарына тамам күнегеп киләләр. Бында, нисек кенә бул а ла, иркәктәре янында, күңелдәре тыныс, исма ам.

...Тәғәм-ризыҡ ейеп алғас, Кинйә-ҡайны берсә Буранбикәгә, берсә Аҡҡалпаҡҡа ҡарап торҙо.

— Бик ҡыйын бит еҙгә.

Аҡҡалпаҡ күҙ ҡараштарын ергә төбәне. Ул тартына, үҙ ҡушмаҫҡа тырыша. Ә Буранбикәнең ҡаҙаҡ әсә енән килгән ябайлыҡ тәрбиә е әр ваҡыт ҡыйыулыҡ бирә.

— И, ҡайным, үҙ иркәгең янында йөрөү ҡыйын буламы? — Яуабын да шул ҡаҙаҡ әйелдәре[1] кеүек орау менән ҡайтарыр инде ул.

— Ауырыраҡ саҡтар ҙа булыр.

— Иркәктәр күргән ауырлыҡҡа ҡатындары күнмәйме? Бер кеше яңғыҙы ғына көлә лә алмай. Үҙ-үҙеңә өйләшеп, йылмайып булмай. Бында өйләшеп, гөрләшеп йөрөйбөҙ ҙә ба а.

Күнәләр, түҙәләр. Быны ын инде Аҡҡалпаҡ та белдермәй ҡалманы.

— Өйрәндек инде, абыҙ ағай.

Электән үк күндәмдәр. Аҡҡалпаҡ та донъя менән танышып үҫкән. Иркәсел бала бул а ла, бик йәштән үк ат өҫтөндә йөрөргә өйрәнгәйне, эйәргә уғылыуҙан да йонсорлоҡ түгел. Ә инде, бәхет еҙлеге менән, анау Тайбулат ҡарт ҡулына көң кәләш булып ҡалғас, үҙе теләп донъяның әсе енә-сөсө өнә күнергә тырышты, ә инде унан баш йырып китеп, Алпар менән ҡауышҡас, донъя үҙе үк тиҙ генә бөтә сатаҡлыҡтарына, ауырлыктарына өйрәтеп алды. Быны ы нимә генә... ҡасҡындар төйәгендә булырға ла тура килгеләне бит. Шунда уҫаллашыу кәрәген тойҙо. Был донъяла ҡыйыулыҡ та кәрәк икән шул. Бына бит, ирәк- аяҡ бул а ла, оялсанлыҡты баҫып, Кинйә абыҙға ла текләп ҡарарға тура килә. Унан уң ни, тыныс йәйләүҙә ҡала алмай ине ул. Уларҙың йәйләүе урынлашҡан Ҡор яланынан теге мөртәт Тайбулат ҡарттың ауылы алыҫ түгел. Кешеләрен ебәртеп, барыбер үҙенә кире алып ҡайтартыр.

«Шулай инде, яу юлдары ауыр булыр, оҙон булыр. Әммә бергә бит, — тип уйланы Кинйә. — Үҙҙәренсә был да бер көйсә бәхет шул».

Бигерәк тә Алпары өсөн тотош бер ғүмер кеүек тойола Аҡҡалпаҡ. Ғүмерҙән дә ҡиммәт. Шулай булмаҫлыҡмы?.. Бер ваҡыт был Аҡҡалпаҡҡа ҡыҙ булып етеп килгән саҡта Кинйә үҙе лә йән атҡайны бит. Уның сөм-ҡара күҙҙәре, балҡып торған ҡоңғорт йөҙө ис тынғы бирмәгән көндәре булды. Йән атты, йөрәге елкенде, уның яғымлы тауышы ҡолаҡ төбөнән китмәгән саҡтары булды. Быны, моғайын, ҡыҙ бала үҙе иҙмәгәндер, уның ҡаршы ынан ҡоралай бәрәсе кеүек үтеп киткәне булды. Кинйә уның йән иретеп йырлағанын да ишетте. Ярай әле, ундай тинтәк яр ыуҙарҙы үҙе үк үндерә алды. Үҙ хистәрен үҙе тыя алма а, яусы ебәреп ҡуйыуы ла ихтимал ине. Ә уңынан, Алпар менән ҡауышҡас, уның йәйләүендә йәшәргә

---

[1] *Әйел (ҡаҙаҡса) — ҡатын.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 91



яҙған икән Аҡҡалпаҡҡа. Ә бына хәҙер Кинйәгә лә уның ҡулынан тәғәм-ризыҡ ейергә тура килде.

3

уҡ тимерҙе ҡыҙыуында, тиергә ярата Пугачев.

Былай ҙа тик ятманы казактары. Килә-килеү менән үк улар ваҡ-ваҡ төркөмдәр булып ҡала диуарҙарына табан барып-барып килделәр. Ҡай ылары яп-яҡын ғына ҡалды. Ҡаланан сығып ал ындар тип, таяҡ осона хаттар элеп киттеләр, губернаторға төбәп йоҙроҡ төйнәй-төйнәй ҡысҡырындылар, үгенеп тә алдылар. Тоҫкап ата башла алар, үҙҙәре лә аталар әм сигенәләр.

— Казак казакка атмай ул! — тиҙәр.

Таныштары, күҙ күргәндәре бар. Әллә ҡайҙан алыҫтан түгел, ошо Яйыҡ буйынан ғына килгәндәр, Ырымбурҙан ғына сығыусылар ҙа бар.

Бере е Неплюев бастионында майор Наумовты күреп ҡалған. Икенселәренең күҙенә атаман Бородин салынып ҡала. Ҡай ылыр бер урында йәшеренеп, губернатор Рейнсдорп үҙе лә ҡалтырана-ҡалтырана күҙәткәндер әле.

Ара-тирә ике яҡтан да туптар атышып ҡаранылар. Ике яҡта ла йәҙрәләр ярылды.

Ҡаланың бөтә тирә-яғында күҙ сама ы алынды, атаман Овчинников бойороғо буйынса күҙәтселәр ебәрелде. Ләкин былай үҙ-ара ҡытыҡлашҡан ымаҡ ҡына. Бынан мәғәнә юҡлығын бик асыҡ аңлай Пугачев. Ҡаланың ҡай ы урыны ниндәй икәнен белеү өсөн үҙең ҡапшап, үҙең сиртеп ҡарамай булмай. Бер генә батыр ҙа, көс ынашмай тороп, уҙағының билен ығырға тотонмай. Ябырылып, ныҡлап елкетеп ҡарарға кәрәк.

Ниңә көтөп ятырға?!

Көтөр өң дә, ти... Ә губернаторға бына әлеме, иртә таңдамы тағы ярҙам килеүе бар. Әле бында етер алдынан ғына премьер-майор Наумов яу колонналарының танау алдынан ғына тиерлек ҡалаға үтеп киткән. Яйыҡ ҡала ындағы алдаттарҙан, үҙҙәре ышанған казактарҙан ҙур ғына бер төркөм алып сыҡҡан да Пугачев артынан ҡыуа төшкән. Яйыҡ ыуының Бохара яғынан килеп, арттан ябырыла, йәнә е. Йылғаны кисеп, Илек ҡәлғә енә килгән, Татищевола булған. уңлаған, әлбиттә. әм бына бында иҙҙермәй генә килеп етеп, дүрт туп, алты йөҙ ҙә утыҙ кеше менән ҡала эсенә инеп киткән. Бик көйөндө Пугачев бының өсөн, сәмләнде, яр ыны. уң шул. Хәҙер уның ауыҙы бешкән. Бик аҡ, бик абай булырға тырыша. Хөкүмәт ғәскәрҙәре әр тарафта бар. Йә тағы килеп инерҙәр, йә иҫләмәҫтән генә арттан килтереп бәрерҙәр. Унан... алып ҡара ин Ырымбурҙы!..

Юҡ, хәҙер улай ғәм еҙ булырға ярамай.

әм Емельян Пугачев үҙенең полковниктарына сапҡындар ебәртте. Кил ендәр, кәңәшергә кәрәк, бойороҡтар ал ындар.

Урынлашҡан дүм әйенә ҡуйылған сатыр алдына шунда уҡ баш атаман Андрей Овчинников килеп етте. Булдыҡлы, етеҙ әҙәм. Өҙә баҫып атлауынан, киҫә-киҫә өйләүенән үк сымыры икәнлеге сағылып тора.

— Иртәгә штурм я ап алайыҡ! — тине Пугачев уға, аңлатып.

Бер яҡтан Максим Шоғаев, икенсе яҡтан Тимофей Подуров килеп етте, улар артынса, айыу ымаҡ алпан-толпан атлап, Иван Творогов менән Федор Чумаков[1] күренде. Шулар алдынан ғына күҙәтселәр төркөмө ҡайтты. Ҡәлғәнең Орск ҡапҡа ында булғандар икән. Бер башҡорт яугирын да эйәрткәндәр.

— Йә, ни бар? — тип алғараҡ сыҡты Пугачев. — Форштадтка яҡын барып буламы?

— Фордҡамы? Алдыҡ уны! — тип яуапланы дозор башлығы.

---

[1] *Чумаков Федор Федотович — Яйыҡ казагы, Пугачевтың артиллерия ына баш.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 92



— Алдығыҙ? Биш кенә казак менәнме?
— Алдыҡ. Беҙгә унда ике йөҙләп башҡорт ҡушылды.
Был хәбәрҙе ишетеп, Творогов мығырлап алды:
— Беҙҙе башҡорт баҫа башланы түгелме?
Башҡорттарҙы араға ебәрергә бик үк риза булмауҙары күренеп тора ине. Овчинников уларҙы шунда уҡ киҫәтеп ҡуйҙы:
— Улар — беҙҙең иң яҡын ярҙамсылар.
— Ярҙамсылар?.. Хе-хе... Ирек кенә алайыҡ әле, беҙ айырым йәшәрбеҙ, тип әйтәсәктәр. Күр ҙә тор. Башҡорт баш бирмәй ул. Бер батшаны ла тыңламағандар бит. Боларҙылар ҙа боларҙылар. Яу саптылар.
Максим да уның үҙҙәрен оҡшатманы.
— Яугир булыуҙары кәрәк тә беҙгә...
Бер Творогов ҡына түгел, Дмитрий Лысов[1] менән Федор Чумаков та уны йөпләп, көләшеп тора. Ундай ялған ҡылыҡ элек тә иҙелгеләй ине.
— Бушты өйләй егеҙ! — тип туҡтатты Пугачев. — Башҡорттарҙы элек генералдар бутап бөткән. Ә хәҙер, беҙ Россияныҡы, тиҙәр. Миңә хеҙмәт итергә килгәндәр.
Федор Чумаков туҡтарҙан түгел төҫлө.
— Әллә шул әле...
— Етер!.. Көтөүҙә төрлө мал була. Ә көтөүсе — берәү. Мин дә, шуның шикелле, бөтәгеҙгә бер батша. әммәгеҙгә ирек бирәм!
Башҡаса үҙ оҙайманы. Кинйә атаман килеүен шәйләп ҡалдылар, күрә ең. Ул атынан ырғып төштө лә мө абәт ынын ғорур тотоп атамандарға яҡынайҙы, улар менән баш эйеп иҫәнләште лә, шәреҡ яҡтарындағы тәртип буйынса батша алдында бил бөгөп, тәғзимлек күр әтте.
— Бадишам хәҙрәттәре, мине саҡырған ығыҙ, ҡаршығыҙға килдем.
Уның тауышы көр. Буйы- ыны килешеп тора. Йөҙөндә етдилек, сая күҙҙәрендә ышаныс нурҙары балҡый.
«Бындайҙарға таянып була, ә Твороговтар юкты лығырҙай, — тигән уй үтте Пугачев башынан. — Бергәлек кәрәк беҙгә, бергәлек. Степан Разин бына ошоноң сара ын күрмәгән».
Шулай тип өйләйҙәр ине Донда. Ә бына ул үҙе шул абаҡты аңлай. Берҙәмлек...
— Молодец, — тип хупланы ул Кинйәнең рапортын. — Бына иңә яңы көс. Тегендә күптәр, ти. Яныңа ал.
Бында килгән башҡорт яугирынан орашҡас, Кинйә уларҙың улы еләү ен өндәүенә ҡолаҡ алып, бергә ойошоп килеүҙәрен аңланы әм әле бөтә енә лә шуның ҡаршы ына — Аҡтүбәгә барырға ҡушты.
...Иртәгә буласаҡ ябырылыу хаҡында уйлаша, кәңәшләшә башланылар. Тәүҙә баш атаман Овчинников ҡала тирә енән йыйылған мәғлүмәттәр менән таныштырҙы. Бөтә е лә штурм я арға әҙерҙәр. Тик ҡайҙан?..
— Форштадтты алғандар бит. Шунан ынтылып керер кәрәк, — тип кәңәш итте Шоғаев.
— Юҡ, унан булмай.
Форштадт[2] тигәс тә... уның урыны ғына ҡалған инде хәҙер. Яу яҡынлашыр алдынан яугирҙарға ышыҡланыр ҡаралты ҡалдырмаҫҡа тип, губернатор бөтә йорттарҙы, аҙбарҙарҙы үттереп алдырған да сүп-сарына саҡлы яндыртҡан. Ни бары таштан алынған Егорий сиркәүе генә ерәйеп тора. Уны ын емерергә нисектер

*[1]Лысов Дмитрий Сергеевич — Яйыҡ казагы, б. к. полковнигы.*
*[2] Форштадт (нем.) — ҡәлғә алдындағы нығытылған урын.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 93



ҡулдары күтәрелмәгән, күрә ең... Был төркөм уға яҡын барған барыуын, тик шул тәңгәлгә ҡала эсенән көс тә туплап өлгөргәндәр икән.

Үҙенә күрә бер ялған атака булып сыҡҡан был, шулай итеп, икенсе урындағы көстәр ҡуҙғатылған. Шул яҡҡа ябырылырғамы хәҙер?!.

Юҡ, Емельян Пугачевтың уйы ҙурыраҡтан ине.

— Беҙ крепосҡа төрлө яҡтан ташланабыҙ! — тине ул. — Ҙур штурм була!

Төрлө яҡтан... Иртә таңда, ҡараңғылы-яҡтылы. Пугачев әр полкка урын билдәләне, унда кемдәр барасағын әйтте, әр бере енә күр әтмәләр бирҙе.

— индә төп штурм, Кинзей, — тип текләне ул Кинйәгә. — Максим иңә ярҙам алып барыр. Артиллерия... Ул барғансы, ин яҡты күҙҙә бөтә күҙ самаларын алып ҡуй. Яйыҡ яҡлап дозорҙар ебәр. Засада ҡуй. Тегенән сыҡҡан эттәр булыр. Йөрөтмә.

Былар бөтә е эшләнгән, сара ы күрелгән. әм тағы ҡараласаҡ.

Атамандар әҙерләнергә, иртәнге сигналды көтөргә тип таралышты. Кинйә лә Аҡтүбәгә ҡарай елдерҙе.

Пугачев, яңғыҙы ҡалып, берауыҡ уларға ҡарап торҙо. Әле уның беренсе тапҡыр шундай киң ҡоласлы эшкә әҙерләнеп, бойороҡтар биреүе ине. Былай, килештергән кеүек тойолдо үҙенсә. Шулай ҙа... ана теге туң түмәр атамандар кеүек, үҙе лә шартына килтереп еткерә алмай. Ни әйт ә лә, ябай казак, хорунжий ғына шул. Былай, беренсе генә көн түгел түгелен, форпостар, ҡәлғәләр алды, халыҡ алдына күпме тапҡыр сығып баҫты, үҙ өйләне, фармандар бирҙе. Барыбер үҙен кәрәгенсә олпат тота алмай төҫлө. Государь бит ул хәҙер!.. Былай ебегәндән түгел, эште ойоштора, хәл-әхүәлгә тиҙ төшөнә, кәрәгенсә тапҡыр яуабын таба. ын алыу өсөн тегеләй-былай соҡсоноп, ауыр хәлдә ҡалдырырға теләүселәр бул а ла, ҡойроғон тоторлоҡ түгел. Шамбы ымаҡ шыйығып, сығыу әмәлен таба. Тик улай гел генә хәйләләп, мөғжизә менән ҡотолдом, тәхетемде ҡатыным... Катя алды, тип килештерә-килештерә, арлы-бирле әкиәт өйләү генә етмәй. Күкрәк ҡағыуҙан файҙа юҡ. Казактар былай ҙа аңлай хәҙер. Ә башҡалар? Төрлө кеше килә бит. Арала донъя күргәндәр күп. Хатта офицерҙар, дворяндар ҙа ҡушыла. Шулар иҙмә ен. Көлөрҙәр, ышанмаҫтар.

«Батша булырға өйрәнергә кәрәк, — тип уйланы ул. — Ана бит, Овчинников ҡалай тота үҙен. Максим Шоғаев, Тимофей Подуров... Бына был башҡорт атаманы Кинзей... Улар юғары даирәләрҙә йөрөгән, ә мин...»

Шулай мө абәтлеккә күҙ ала башлағайны Пугачев.

***

Максим Шоғаев Аҡтүбәгә кистән, күҙ бәйләнер мәлдә үк килеп урынлашты. Алып килгән туптар Кинйә менән уйлашып урынлаштырылды, ҡайҙа, нисек атырға кәрәклеге билдәләнде. Бындағы ғәскәрҙең ниндәй урында, нисек урынлашыуын ҡарап-тикшереп алдылар. Максим үҙе кире китмәйенсә, шунда төн үткәреп, таң ҡаршыларға ҡалды.

Ҡурғау хәле менән ҡәнәғәт ине ул.

— аҡлыҡ сара ы күргән ең, әйбәт булған.

Ауған ағастар, бүрәнәләр юлға алынған, соҡорҙар ҡаҙылған, төндә килеп өҫкә баҫырлыҡ түгел.

— Эйе, хәлгә ҡарап ҡәлғә уктыҡ... Ял ит, Максим...

Таңға саҡлы ял итеп алырға була. Кинйәнең тирмә енә инеп, бер туғандар ымаҡ арҡаға-арҡа терәп яттылар. Йоҡо тиерлеге лә юҡ, әлбиттә. Иртәгә йән алмаҡ-йән бирмәк уғышырға тура килер. Башта төрлө уйҙар сыуала. Ара-тирә берберe енә өндәшеп тә алғыланылар. Бер аҙҙан үҙҙәре лә иҙмәне — күҙҙәр йомолдо.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 94



Уларҙы ҡала эсендәге тауыш уятты. Набат калакулы уғалар ине.

Был яҡта ла борғолар уйнаны. Вестовой туптан атып ебәрҙе. Пугачев ҡушҡандыр.

Максим менән Кинйә тороп сыҡҡанда таң атмағайны әле. Көҙгө әсе ел иҫә, ара-тирә ямғыр тамсылары биткә бәрелә.

Ләкин яугирҙар тик ятмай. Тороп, аяҡтарына баҫтылар, аттарын алып килделәр. Күршелә тояҡтар тупырҙаны. Ниндәйҙер төркөмдәр ҡала стена ына табан киттеләр. Казактар икән. Оҙаҡламай стена буйындағы бесән кәбәндәре яна башланы. Пугачев үҙе яндырырға ебәргән. Барыбер уларҙы тейәп алып китеп булмай, көл итеү хәйерле.

Казактар түҙмәне, бишәр-алтышар булып та, күмәгерәк уҡмашып та ҡала янына барып-барып әйләнделәр. Башҡорт яугирҙары ла, Ҡарғалы кешеләре лә тик ятманы. Уларға, бәлки, элекке таныштарын күреп ҡайтыу ҡыҙыҡтыр.

...Баралар, хаттар ҡалдыралар. Тегенән ат алар, йә әт кенә ырт бирә алалар. Улай-былай буталана ҡал алар, дуҫты дошмандан айырыу өсөн ул беләктәренә зәңгәр сепрәк бәйләгәндәр. Бүректәренә тегеп ҡуйғандары йә аҡ, йә зәңгәр...

Таң ары ы беленә башланы. Шуны ғына көткән шикелле, арттан туп ата башланы, яугирҙарҙың туптары ла йәнләнде. Гөрөҫ тә гөрөҫ... шарт та шарт... Ике яҡтан да йәҙрәләр осто.

Кинйә менән Максим да үҙҙәре янындағы батареяға килделәр.

— Беҙ ҙә атайыҡмы? — тип орай кемдер.

— Ашыҡма әле, — ти Шоғаев. — Ваҡыты етер.

Ә тегендә Пугачев үҙе бер батарея янына баҫҡан да бер-бер артлы командалар бирә. Был — унын яратҡан эше.

— Заряжай...

Көбәктәргә дары тултыралар, йәҙрә алалар.

— Прикрой... Отскочи!

Филтәгә ут төртәләр... Туптар гөр өлдәп атып ебәрә, оҙаҡламай йәҙрәләр төшөп шартлай.

Тағы атыуға яҫай башлайҙар. Пугачев ашыҡтыра. Йә әтерәк, йә әтерәк! Икенсе батареяға елдереп барып етә лә унда ашыҡтыра. Китте мәхшәр, ҡупты тамуҡ усағы. Ике яҡтан да гөрҫ-гөрҫ аталар, ҡыҙғандан-ҡыҙалар. Ҡала эсенән дә, бынан да. Унда ла, бында ла йәҙрә шартлап ярыла ла, ер аҡтарып, тупраҡ сүмәләрен ауаға күтәрә, яугирҙарҙы ҡом менән ҡойондора. Бер-бер артлы, сажин айын тиерлек. Бер урында яугирҙар ара ына төштө бул а кәрәк, кемдер ыңғырашты, ергә яҭҡырылған атҡа ла эләккәндер, ул кешнәп ебәрҙе лә, түҙә алмай, тыпырсынды.

Бөтә тирә-яҡта шулай. Ҡайҙан аталар, шул ергә тоҫҡайҙар. Ҡала эсенә лә күп кенә төштө, ахыры ы. Ярылған айын ер елкенеп ала, ҡысҡырышҡан тауыштар әленән-әле ишетелде. Яралананалар, үләләр. Неплюев бастионы янында ялҡын гөлтләп ҡалды — өйҙәр яна бул а кәрәк. Ундағыларға нығыраҡ эләгә торғандыр. Ҡайҙан ат аң да шунда төбәлә — ыу күләүеккә күберәк йыйыла.

әр туп атҡан айын Пугачев дәрт өҫтәй торҙо:

— Дав-вай, да-вай! Рейнсдорптың абағын уҡыт! Да-вай!

Атҡан айын, шулай кәрәк, ти ул. Бындай ҙур крепосты шун ыҙ алып булмай. Ундайҙарҙың нимә икәнен төрөк уғыштарында күп күрҙе ул. Ай-ай... ә бында бит ундағылай ҡәлғә диуарҙарын емертеү саралары юҡ... Ни бары шул эреле-ваҡлы ғына туптар.

Шулар ҙа еткерә төҫлө.

Ҡала өҫтөн ҡуйы төтөн ҡапланы, бөтә тирә-яҡта дары еҫе аңҡыны. Төрлө яҡлап ныҡ ҡына дөмбәҫләнеләр. ыу соҡорға йыйыла, бөтә атҡан йәҙрәләр ҡәлғә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 95



эсендә шартлай. Бигерәк тә форштадт яғынан ныҡ аттылар. Ышыҡ урын. Яҡын. Бары-юғы ике йөҙ сажин. Губернатор күрҙе быны, күреп торҙо, казактарға ышыҡланыр урын булма ын өсөн туп-тура атырға ҡушып, ундағы Егорий сиркәүен емертте.

Быны ын яугирҙар үҙҙәре күреп торҙо. Ә Рейнсдорптың Аҡтүбә яғына ла бик ныҡ иғтибар итәсәген хәрби аң менән генә тоҫмаллап була ине.

— Маяҡ тауында туптар юҡ, — тип иҫәпкә алғайны ул.

— Эйе, унда, — тинеләр, — башҡорттар ғына бит. Уларға артиллерия әле тағы...

— Бына шунда атака я арбыҙ!

Ләкин быны ына ашыҡмай ине әле губернатор.

Туптар аттылар-аттылар ҙа, кемдәрҙеңдер команда ы буйынса өндәре тығылған ымаҡ, туҡтанылар.

Ләкин уғыш тыныу түгел ине әле был. Ғәҙәттә, артиллерия яман доғаның бисмилла ын ғына әйтә, шуның артынса ҙуры ы, ҡә әрле е башлана. Әле лә туптар туҡтау менән үк, казактарҙың аттары аяҡҡа баҫтырылды. Атландылар ҙа саңҡылдап осҡан шонҡарҙар кеүек алға — атакаға ташландылар. Улар ғәҙәттә иркен ерҙә ибелеп — лава булып ябырылырға ярата. Булат ҡылыстарын яҡ-яҡҡа елтәп, дошманын тураҡларға яҫҡыйҙар. Ҡай ы бер етеҙҙәре, хатта, берәү етмәй тип, ике ҡулға ике ҡылыс ала. Уңға ла, улға ла... аҡланырға ҡалҡан да кәрәкмәй, шулар менән үҙен дә аҡлай, дошман баштарына ла етә. Хәйер, берәү е менән дә бик күп эш ҡыра алалар. Тик әле ялан иркенлеге юҡ. Ҡала диуарҙарына ҡарап ынтылдылар. Уны ҡайҙандыр үтергә, эскә инергә кәрәк. Ә унда уң?.. Тик торалармы? Яҡынайған бер урында мылтыҡтан аталар. Яҡын бар аң, баштан ҡойорға ҡайнар ыу ҙа, ыҫмала ла бар.

Бер барып ҡарайҙар... юҡ, артҡа ҡаҡсыйҙар... Унан тағы ябырылалар.

Бер мәл, тынысыраҡ саҡты айлап, ҡаланың аҡмар ҡапҡа ы асылды. Эстәге казактар, драгундар, ҡылыс болғай-болғай, тышҡа ибелде. Премьер-майор Наумов команда ы ине был.

Казактар — әүҙем халыҡ. Шунда уҡ уҡмашып алдылар ҙа ҡылысҡа-ҡылыс килделәр. Сат та сат сатрашлап бәрәләр ҡылысты. Зыңҡ-зыңҡ... Шул арала дошманына уҙылалар. Улай-былай ғына түгел... Башын, муйынын сабып өҙөргә...

Бер мәл буталдылар. Ата улды белмәй, тигән төҫлө булды. Ҡасан ғына бергә йәшәнеләр, бер тирәлә хеҙмәттә инеләр. Әле — дошмандар. Яугирҙар бер-бере ен ни бары бүректәрендәге сепрәктәрҙән генә таныйҙар.

Ана, бер яугир ҡоланы, шундараҡ ҡаланан сыҡҡаны ауҙы... Тағы, тағы... Улар үлдеме, ат тояҡтары аҫтында ҡалдымы — белерлек түгел. Яйыҡтыҡылар, ҡыҫымға ҡаршы тора алмайынса, артҡа сигенә башланы.

Баш атаман быны күреп тора ине, ләкин уларға ярҙамға көс ебәрмәне, артҡа сигенергә әмер бирҙе.

Үҙҙәре белгән ымдар бар. Тауыш биреп шуны белдерәләр, шул яҡҡа сигенәләр. Ҡарыулаша-ҡарыулаша артҡа күстеләр. Ә майор Наумов ҡыуа. Хәҙер абаҡтарын уҡытам, пыран-зыран килтереп, ҡыуалап ебәрәм, тип ажғырып килә.

Казактар бер уй ыуға табан тартылды. Ике яҡта ыртлау уҙыла. Наумов команда ы шул араға еткәндә ҡапыл, ис көтмәгәндә, уңдан да, улдан да ҡалҡынып сыҡтылар ҙа, күк күкрәгәндәй, шау-шыу күтәреп, уның атлылары өҫтөнә ташландылар. Артҡа сигенеүселәр, шунда уҡ боролоп, ҡаршынан ҡыҫты.

Казактарҙың атлы уғыштарҙа яратҡан ысулдары ине был.

Шулай ҙа майор ҡаушап ҡалманы, үҙенең сафтарын тиҙ генә уҡмаштырып алды. Ләкин еңеү ҡулдан ысҡынғайны инде.

Хәҙер инде уға артҡа сигенергә тура килде. Уның команда ы уғыша- уғыша

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 96



ырт бирҙе, ҡалаға барып инергә ашыҡты. Яугирҙар, бүре ҡыуған төҫлө, ай-вай ҡысҡырышып арттан төштөләр.

Наумовтың байтаҡ ҡына кеше е шунда донъя менән хушлашты, яралылары әсир булып ҡалды. Былай ғына аттан төшөп, ҡул күтәреүселәре лә юҡ түгел ине.

***

Башҡорт сиреүҙәре яғында ла алыш-орош бара. Унда ла Аҡтүбә яғынан ҡуҙғалып, ҡалаға ябырылдылар. Ҡапҡалар ябыҡ. Яҡыныраҡ барып, диуар өҫтөндәгеләргә уҡ сорғоттолар, мылтығы бары мылтыҡтан атты.

Ләкин ҡала стена ындағы мылтыҡтар күберәк тә, яҡшыраҡ та.

Әлегә ни бары илертергә-тилертергә генә кәрәк ине.

әм бына был йүнәлешкә лә губернаторҙың иғтибары төштө. Майор Наумов теге тарафтан ҡыйралып ҡайтты. Унынса әйткәндә, ретирада... Ә бына бында, ысынлап та, башҡорттар... ысынлап та, туптары юҡ. Бынан бер ҙә атманылар.

«Хәҙер ошо тарафҡа!» – тип ҡарар итте бул а кәрәк генерал Рейнсдорп.

әм был тәңгәлдә лә ҡапҡа асылды. Унан сыҡҡан атлылар яҡыныраҡ барған башҡорт уҡсыларын ҡыуып киләләр. Тегеләр ҡыуа, былары, әйләнеп уҡ ата-ата, үҙҙәренекеләргә яҡынлай. «Ҡылыстары ла юҡ, исма ам!» – тип тештәрен ҡыҫты Кинйә. Уҡ сорғотоп ҡына алдырып булмай. Етмә ә, был яугирҙарҙың күбе е йәш. уғышты күрмәгәндәр, утты- ыуҙы кисмәгәндәр. Ана, бере е ауҙы, икенсе е ҡоланы... Юҡ, етер! Ярҙам итергә кәрәк...

Кинйә оран алырға булды:

– Туҡсоба! Туҡсоба!

әм атаман ҡылысын ҡынынан урып сығарҙы ла алға атлыҡты. Эргә енән ҡошсо о Алпар төштө. Улы ла шунда, туҙыҡа ы Ҡотлогилде лә... Бошман-ҡыпсаҡтар, ыуындар, сәңкемдәр, сарыштар...

Кинйә драгундарҙы ҡыуып еткәйне инде. Алпар алғараҡ үтте. Теҙгене менән өңгө уйылын ҡуша тотоп, алға уҙған. Аяҡ ҡымтып атына ым бирә. Үҙенә табан елдергән драгун да ҡылысын юғары күтәргән. Өҙә генә сабыр. Ләкин Алпарҙың ул ҡулында ҡалҡан, үҙ-үҙен аҡлар... Ә эш уға ҡалғансы өңгө ө өлгөрөр... Быны драгун иҙҙе әм, яҡшы саҡта атын бороп, икенсе яҡҡа янтайҙы. Уны ын булма а, барыбер икенсе ен ҡолатты Алпар. Тағы ҡыуып киткәндә, драгундар унын үҙен уратып алды. Эшенең мөшкөл икәнен иҙгәндәй, Тумаҡ-ат айылдап кешнәп ебәрҙе. Тауышты Кинйә лә, Аҡъялы ла ишетте. «Ана, ҡайҙа икән...» Үҙе барып етерлек түгел. Бер ҡысҡырып тауыш бирҙе, әм яугирҙары Алпарға ярҙамға барып өлгөрҙө. Ҡара алар, Кинйәнең үҙенең дә хәле ауыр. Бер үҙе икәү менән сәкәләшә. Йә әт кенә шулар янына еттеләр.

Был ваҡыт бөтә е буталған: атлы ы – атлыға, йәйәүле е йәйәүлегә ҡаршы алышты. Шундайҙарҙы бергә туплап, драгундар ҡыҫымын тотоп торорға әм, үҙҙәрен ҡыра-ҡыра, кире этәргә тура килде Кинйәгә...

Драгундар сигенә. Яугирҙар алғараҡ үтә, аяҡ аҫтарында үлгәндәр, яралылар тороп ҡала. Ана, уңдараҡ бер башҡорт яугиры атынан ҡолап төштө. Төштө лә, тубыҡланып, сәждәгә киткән мулла кеүек, башы менән ергә эйелде. Ҡулынан төшкән яны яҙылған, кереше өҙөлгән, өңгө өнөң уйылы ынған. Аты ғына янында унын елкә ен еҫкәп тора.

– Артҡа алып китегеҙ! – тип әмер бирҙе Кинйә.

Ауыр яралыны атына арҡылы алып алып киттеләр. Ә Кинйә башҡаларҙы алға әйҙәне. Драгундар йә әт-йә әт сигенде. Губернатор үҙе ебәргән атаканы үҙе күҙәтмәй түгелдер. Ул, моғайын, былары ла ретирада я аны, тиҙер тағы. Әйткәндәй, «сикурс» команда ы биргәндер... Ана бит, асыҡ ҡапҡанан быларына

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 97



ярҙамға яңы команда килеп сыҡты.

...«Сикурс» бул а... сигенергә, тип өйләшкәйнеләр Максим менән. Кинйәнең әмере буйынса, яугирҙар ике яҡҡа айырыла биреберәк артҡа сигенде. Яралылар, үлгәндәр артҡа алып кителеп бөткәйне. Әлеге уғыш яланы бушап ҡалды, әм шул буш аралыҡҡа, шына ише ҡағылғандай, Рейнсдорп ебәргән «сикурс» команда ы килеп керҙе. Тап шул ваҡыт артта, Максим әйткәнсә, бер туп атып ебәрҙе. Икенсе е, өсөнсө ө... Дүртенсе туптан атылған йәҙрә төшөп шартлағанда бөтә команда ҡара ҡойон эсенә ҡалғайны инде.

Аттары ауҙы, үҙҙәре йығылды... Иҫән ҡалғандары, боролоп, ырт бирҙе. Ат ыҙ ҡалғандарына ҡайҙа инде эйәр-өпсөндәрен, ергә төшкән ҡоралдарын алып тороу... Улары, иптәштәренән ҡалышмаҫҡа тырышып, уларҙың аттарының ялдарына, ҡойроҡтарына йәбеште.

Бына шул саҡ ҡына губернатор “башҡорттар диспозиция ы”ның бик үк йомшаҡ булмауын аңлағандыр, ихтимал.

Ә башҡорттар, ретирада я аған алдаттарҙы тағы ла ҡыуа-ҡыуа, ҡала ҡапҡа ына барып етә яҙҙы. Ни бары уҡ атымы саҡлы ғына ара ҡалғас, Аҡтүбәгә ҡарай боролдолар. Ундай аралыҡта ян уғына ҡарағанда мылтыҡ уты яҡшыраҡ ала.

Ҡайтыр юлда драгундарҙан ҡалған мылтыҡтарҙы, ҡорал-яраҡтарҙы, эйәр-өпсөндәрҙе йыйып алырға ла була ине.

...Оҙаҡламай туптар «отбой» сигналын атты. Яугирҙар кире ҡайтты, ҡала аҡсылары эскә үтеп китте. Ыңғыраша-ыңғыраша ауыр ҡапҡалар ябылды.

***

Пугачев маңлай тирҙәрен өрттө. Ҡулында ла, битендә лә әсе тиргә аралашҡан өрөм. Шуға ҡарап алды ла төкөрөнөп уҡранды. Ах, ҡалаға инеп булманы, тиҙер. Ә ҡан-тир түгелде. Күпме йәҙрә осоролдо, кешеләр яраланды, ә үлеүселәр?.. Шулай ҡырылма ын ине лә бит... Нишләй ең, бик үк бошоноп та булмай. Кешеләре күп, үҙе әйткәндәй, ауалағы йондоҙ саҡлы. Улар менән ҡала тирә ендәге ҡулсаны тағы ла нығыраҡ ҡыҫырға, бер кемде керетмәҫкә, ис тынғы бирмәҫкә кәрәк. Арырҙар, йонсорҙар, ҡоралдары бөтөр. Аслыҡ еңер. Үҙҙәре асыр ҡапҡаларҙы...

...Яуға ҡубынып килеүселәр нисек уйлайҙыр, әммә уларҙың күңелдәре көр ине. Губернатор менән яғалашырға мөмкин булыуын тойоп, дәрттәре үҫте.

Шуны күрергә теләгәндәй, бер ауыҡ хәл алғас, Емельян Пугачев үҙ армия ының күрәндәрен ҡарарға сыҡты. Бындай ваҡытта ғәҙәт буйынса янына Иван Зарубин[1] менән Тимофей Мясниковты[2] ала.

— Ә губернатор ни эшләп ултыра икән? — тине Мясников.

Пугачев мәрәкәгә борҙо:

— Нишлә ен, кәрт уғалыр.

Ә Зарубин-Чика шаярырға яратмай:

— уғыр... әле ул яраларын ялай... Офицерҙарын бешә, күршеләренән ярҙам орай. Уның бар белгәне — сикурс та сикурс хәҙер.

Бара-бара, Аҡтүбәгә килеп сыҡтылар. Кинйә үҙенең полктарында барын барлап, юғын иҫәпкә алып йөрөй ине. Алыш туҡталғас, Максим үҙ күрәненә киткән.

Яугирҙар үҙҙәрен тәртипкә килтерә, өҫтәрен ҡаға, ҡоралдарын ҡарай. Берәүҙәренең өңгө уйылы ынған, икенселәренең ҡылысы тупарланған, суҡмары ярылған. Ҡай ы ы ҡайрай, ҡай ы ы сүкей, ә бере енең ян кереше өҙөлгән, шуны рәтләүгә моң булып ултыра, ә үҙе көйләй:

---

[1] *Зарубин-Чика Иван Никифорович — «граф Иван Чернышев», Яйыҡ казагы, б. к. фельдмаршалы, «Икенсе ғәскәр»ҙең командалаусы ы.*

[2] *Мясников Тимофей Григорьевич — Яйыҡ казагы, б. к. полковнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 98



*Әҙернә[1] лә йәйә, өйәк баш,*
*Йәшел ебәк кәрәк керешкә.*

Кәйефтәренең күтәренке булыуы Пугачевҡа оҡшаны.

– Йырлап ултыралар әле, молодцы!

Кинйә йырҙың нимә хаҡында булыуын аңлатты:

– Яны хаҡында йырлай ул.

Ә үҙ өҙөлмәй. әр кем алышта үҙе күргәнен өйләй. Өлөшөнә сыҡҡан көмөшөн маҡтаған төҫлө, кем менән йөҙгә-йөҙ килеп сәкәшкәнен, унда ни ҡылғанын әйтә. Әкәмәт бит, бер ярлауыҡта ерән Емеля лә ниҙер фәстереп ултыра. Пугачев уға ла ҡолаҡ алды. Ҡала өҫтөнә күр әтә-күр әтә айрай. Ә үҙе уң... уғышта әллә булған, әллә юҡ. Етмә ә, башҡортса өйләй ҙә ба а. Керәшенме ул, кемдер. Кинйә өсөн ис ғәжәп түгел. Был яҡтарҙа йәшәгән урыҫтарҙың күптәре башҡортса белә. Казактар өсөн генә сәйер.

– Ну, ну, мели, Емеля!

Емеля тороп, бил бөгөп уралғыланы ла елкә ен ҡашып алды.

– Әй, осударь... Борсаҡ бүрттерергә лә беләм шул.

Ул, нисектер, шикле кеүек. Шуның өсөн дә, унан аҡ бул, тип иҫкәртте Кинйәне Пугачев.

Аҡтүбә тирә ен ҡарап сыҡтылар. Күрән яман түгел. Башҡорт алайҙарының уғышыуын да маҡтап алдылар. Юғи ә, тәүҙә, ышанып етмәйенсәлер, Пугачев Кинйәгә ярҙамға тип, күҙ-ҡолаҡ булыр өсөн Шоғаевты ебәргәйне.

***

Бер көн аша, 8 октябрҙә, Пугачев тағы атака я аны. Ғәҙәттәгесә, тәүҙә ультиматум ебәрҙе. Дүрт сәғәт эсендә аҡ флаг күтәр, тине.

Юҡ, флаг күтәрелмәй, асылған ҡапҡалар Пугачев яугирҙары өсөн түгел...

Майор Наумов тағы ҙур ғына команда алып сыҡты. Унан тағы бер команда менән коменданты үҙе сыҡты.

Юҡ, был юлы ла эш уңманы. Ҡулға төшкән ике әсирҙе Пугачев ҡалаға ҡайтарып ебәрҙе.

– Барығыҙ, әйтегеҙ кешеләргә... Атакаға сыҡҡанда, – тине ул, – ҡоралдарҙы минең байрағым алдына ал ындар...

Әммә эләккән бере е:

– Губернатор ҡапҡа асырға ҡушмай, тиҙәр, – тине.

Пугачев ыр бирмәне.

– Ҡушыр! Үҙе сығып асыр. Бөгөн тыңлама а, иртәгә тыңлар мине. Барыбер государь итеп таныр, баш эйер.

Ул губернаторға тағы хат ебәрҙе.“Дүрт сәғәт эсендә бастиондарыңа аҡ флаг эл!” – тип яҙылғайны унда.

Юҡ, аҡ флаг аман эленмәй. Ул ғына ла түгел, туптары ата башлай, айырым командалары атака я ай. Яр ып ташланалар ҙа, ҡаршылыҡҡа осрап, ҡылысҡа-ҡылыс уғышалар әм, яралыларын алып, йә әт кенә ырт бирәләр. Көнө-көнө менән бер нисә ен үле килеш ат өҫтөнә алып алып ҡайтырға ла тура килә.

Пугачев тағы губернатор ҡылығын яратмаған кешеләй ҡыланды.

– Аңламағас аңламай бит. Халыҡты харап итә. Пыран-заран ҡыйратып та алыр инек... Ундағы халыҡ йәл.

Ниңә ҡаланы алманылар?

Ниңә, имеш... әйтер ең, Пугачевтың ғәйебе. Еңелме ни елле ҡәлғәне алыуы. Шул саҡлы туптары, шул саҡлы ғәскәре бул ын да... Юҡ, тиҙ генә алып булмай

[1] *Әҙернә – хәрби йәйә (махсус эшләнгән), мәргән (төҙ атыусы батыр) ҡоралы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 99



шул. уғышманылар түгел, уғыштылар, алышманылар түгел — бик ныҡ алыштылар. Ор ҙа бәр генә алып булмай икән. Быны шул орап торғандар үҙҙәре лә яҡшы аңлай, әлбиттә. Ләкин улар батшанан орайҙар бит, ә ул үҙенекен өҙмәй.

— Алабыҙ, алабыҙ! — ти ул, ҡөҙрәтләнеп.

Бер төрлө булма а, бүтәнсә килтереп, ҡаланы төрлө яҡлап ҡыҫырға булдылар. Уны ныҡлап ҡамап алдылар бит. Ярҙамға килеүсене ебәрмәйҙәр, аҙыҡ-түлек алырға сығармайҙар. Диуарҙар эсендә ҡалғаны бөтөр — шул саҡлы ғәләмгә, әллә күпме ғәскәргә аҙыҡ-түлеге лә оҙаҡҡа етмәҫ, аттарына ашатырҙары ла ҡалмаҫ. Ана бит, күҙ терәп ҡарап торған бесәндәренән мәхрүм иттеләр.

Ҡала эсенә бикләнгәндәр үҙҙәре үк сығыр. Ләкин уларҙы көтөп кенә ятмайынса, батша исеменән указдар, хаттар биреп, бер нисә ҡатынды, әбей- әбейҙе үткәреп ебәрҙеләр.

Бында ғына түгел, бөтә тирә-йүнгә, алыҫ-алыҫтарға өгөт хаттары, указдар китте. Пугачевтың канцелярия ы тик ятмай. Писарҙар, секретарҙар, тылмастар эшләй. Берәүҙәре уңдан, икенселәре улдан яҙа. Урыҫса ла, башҡортса ла, төркисә лә уҡырлыҡ була. Сапҡындар өҙөлмәй.

Ырымбур янына килеп туҡтағандың иртәгә енә үк, ҡуйындарына батша указын йәшереп, бер сапҡын — Ҡыҙылтау ҡәлғә е коменданты капитан Улановка, икенсе е Верхне-Озерный коменданты Немеровҡа елдерҙе. Дөрөҫ, ундай хаттар халыҡҡа туп-тура ғына юлыға алмай, уларға урау-урау юлдар үтергә, бик ҡыйынлыҡ менән етергә насип итә. Ҡыҙылтауға шулай Василий Дураков[1] киткәйне, икенсе көндө үк барып етеп, батша ультиматумын, ҡушылғанса, баш өҫтөндә тотоп, комендантҡа тапшырҙы. Уланов ҡабул итеп тә алды, шундағы казактар талап иткәс, уҡырға ла ҡушты, ә уңынан Дураковты бығаулап, шул хаты-ние менән Верхне-Озерныйға — бригадир Корфҡа оҙатты. Уны ы илсене ябып ҡуйҙы. Указдың үҙен яндыр а ла, шул хаҡта күршеләрен иҫкәртеү өсөн күсереп-күсереп таратты әм, шулай итеп, Пугачев үҙҙәре бригадир ярҙамында уҡ Үрге Йайыҡ ҡәлғә енә, Ҡазанға, Силәбегә, Троицкиға, Тубыл ҡала ына, хатта Мәскәүгә, Петербурға саҡлы барып етте. Ә Корф[2] хатты казактарға уҡырға рөхсәт иткән өсөн капитан Улановтың үҙен дә «служба»нан төшөрөп, бер нисә ай буйы батальонына ҡайтармай ябып тотто. Эйе, Дураков арҡа ында ла армай ҡамсы ы уйнаны.

Әммә Пугачев ебәргән указдар барыбер таралды, унда яҙылғандар мәзлум[3] йәндәрҙең күңеленә хуш килә торҙо.

4

Генерал-поручик Рейнсдорп губернатор булып килгәс, Ырымбурҙа үҙен нәҡ бер батша итеп тойғайны. Уға саҡлы был тәхеттә күптәр булды. Беренсе е — Неплюев, унан — башҡалар. Бөтә е лә үҙен шулай иҫәпләне. Ә ул уң, кәмме?..

Ырымбурҙы, 1735 йылда алынды, ти әләр ҙә, тәүҙә — Ур йылға ы тамағына, унан — Ҡыҙылтау янындағы туғайға, шунан 1743 йылдан ғына ошо урынға күсерелде.

Губерна ҙур. Ә губернаторға бирелгән вазифа хоҡуғы сик еҙ. Бер күҙ — Европала, икенсе күҙ Азияла булырға тейеш.

Петербург, Оренбург — ике е ике полюс... Бере е — көнбайышҡа, икенсе е көнсығышҡа ҡарап тора. Тегендә — Рәсәй, бында Урал, Йайыҡ, ҡыр-ҡаҙаҡтар. Бохара яҡтары, Персия, индостан, Ҡытай... Ике яҡта ла ғәйәт мө им сәйәсәт,

[1] *Дураков Василий — аҡмар ҡаласығының казагы.*

[2] *Корф Алексей Алексеевич — барон, бригадир, Озерный дистанция ы ҡәлғәләренең коменданты, командиры.*

[3] *Мәзлум (ғәрәпсә) — йәберләнгән, рәнйетелгән.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 100



көрәш... Халҡы уҫал. Башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ. Етмә ә, өргөн оя ы. Урыҫ-ын да өрәләр, поляк конфедераттарын да.

Бына шуның көнсығыштағы ы Ырымбур аша башҡарыла, ә бөтә эште ул, губернатор Рейнсдорп, атҡара. Ләкин ул был ике полюсҡа халыҡ саруа ының нисек ҡарағанын ғына иҫәпкә алмай ине. Улар ҙа шулай, ике тараф, тиҙәр. Ләкин Петербург яғында – власть, байлыҡ, дворяндар, генералдар, батша. Бөтә енә малик улар, әр ваҡыт бал, маскарад. Ә бында – яфа, ғазап, өргөн оя ы. Шуға риза ыҙлыҡ, аяу ыҙ көрәш, тулышҡан асыу. Бына шуның ниндәй икәнен белмәй ине Рейнсдорп. ис хәүеф юҡ төҫлө.

– Былтыр Яйыҡта шаулаштылар. Ә нимә ҡыра алдылар? Бөтә ен тар-мар иттек, – тип маҡтанды ул.

Эйе, биш аҙна элек ниндәй экзекуция үтте. Баш ҡалҡыта алырлыҡмы?

Ә була икән... Ләкин был хаҡта Рейнсдорп уңлабыраҡ ишетте.

1773 йылдың 22 сентябре. Яман хәбәр килеүгә бер көн үтте, ике. ...Губернаторҙа бал. Дворяндар, дамалар. Музыка, тостар әйтелә. Әлбиттә, Екатерина хөрмәтенә.

Ә бына тағы курьер. Курьер килтергән эстафетаны уҡый. Йөҙө үҙгәрҙе... Илек ҡәлғә ен алғандар. Ярҙам да ебәрҙе бит инде. Бригадир Биловты.[1]

Аңлайҙар. Бал ҡайғы ы бөттө, таралдылар. Ҡай ы берҙәрен алып ҡалды. Генерал-майор Валленштерн[2] – обер-комендант. Коллежский советник Тимашев.[3] Ырымбур казактарының командалаусы ы Могутов.

Эшкә тотонорға. Курьерҙар Ҡазанға, Себер линия ына сапҡан. Ырымбур казактары ғәскәренең атаманы подполковник Василий Иванович Могутов бында әҙерләнәсәк.

Хәбәр бөтә ҡалаға таралды. Хәйер, халыҡ былай ҙа белә ине. Ҡапҡалар ябыҡ. Сығармайҙар. Бында төрлө халыҡ. Башҡорт та, татар ҙа, арттар, ҡыҙыл баштар, керәшендәр... Губернатор бигерәк тә өргөндә ятҡан поляк конфедераттарынан шикләнә, уларға ни фетнә ҡуптарырға уңай ваҡыт. Ҡоралдарын алып, крепостан сығарып ебәрергә әмер бирҙе.

Икенсе көндө үк уның ҡушыуы буйынса аҡмар күперҙәрен ваттылар, яндырҙылар.

Ышаныслы кешеләргә ҡорал таратылды. Крепость ҡоймаларын ремонтларға кәрәк, стена янында сүп түгеп бөткәндәр. Таҙарта башланылар. Туптарҙы ҡуйҙылар.

Бөтә енән бигерәк, Пугачев хаҡында яҡшы үҙ йөрөмә ен. Яман хәбәр таратырға...

Унан... Сапҡын артынан сапҡын. Хәбәрҙәр ғәйәт борсоулы. Бере енән-бере е яман. Губернатор командирҙар ебәрә, ярҙам орай. Үҙе, ҡалтыранып, Яйыҡтағы атаман Мартемьян Бородинды[4] ҡә әрләй, халыҡтың тәкәтен ҡоротма аң, шул саҡлы болармаҫтар ине, ти. Ул ғәйепле, ул Емельканы булдырҙы, ти. Үҙе Мартемьянды әле өҙгөләп ташлар ине...

Губернатор Рейнсдорп ҡалаға килгән касафатты бик уңлап белде.

Яйыҡ ҡала ы янында ниндәйҙер казактың ҡара батша булып ҡыланғанын ишеткәс тә тыныс, көлгәндәй булды:

– Ә, былтыр ҙа йөрөнө ул, ни эшләй алды, – тип ҡул елтәне. Шулай ҙа ул, то-

---

*[1] Билов Христиан Христианович – барон, бригадир, Ырымбур гарнизонының командиры.*

*[2] Валленштерн Карл Иванович – генерал-майор, Ырымбурҙың обер-коменданты.*

*[3] Тимашев Иван Ларионович – подполковник, коллежский советник, карат команда ының командиры.*

*[4] Бородин Мартемьян Михайлович – подполковник, Яйыҡ казактарының старшина ы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 101



топ оҙатырға ҡушып, Яйыҡ коменданты Симоновҡа указ ебәрҙе. Унда ышаныслы офицерҙар бар, алдаттар тора. ис юл ҡуймаҫтар. Ләкин өс-дүрт көн дә үтмәне, бер-бер артлы хәүефле хәбәрҙәр килде. Форпост артынан форпост унының ҡулынан китә.

Ырымбур казактарынының атаманы, подполковник Могутов Василий Иванович:

— Его превосходительство, беҙгә яҡынлайҙар, — ти.

Был юлы Рейнсдорп көлмәне.

— инең йоҡо сумандарыңа етер, йоҡлап ятма ындар!

Унының казактары... Был казачество, Ырымбур алынып ун бер йыл үткәс, айырым корпус итеп ойошторолғайны. Шул йылда унының атаманы итеп ҡала дворяны сотник Могутовты ҡуйғайнылар. Уны ла, казактарын да Яйыҡтағылар ис иш итмәне, әр ваҡыт ҡаршылыҡ, ыр-мыр, үҙ-ара хурлашыуҙар туҡтамай. Губернатор Ырымбур казактарын үҙенең төп терәге итеп иҫәплә ә лә, тегеләр ыңғайына йоҡо сумандары тип мыҫҡыллай ине.

Йоҡлатыр тегеләй Могутов! Әҙер тота. Тынғы бирмәй.

Тағы хәбәр килде. Был юлы губернатор ағая төштө.

— Казактарыңды туплап сыҡ. Ҡыйрат, аҫ, киҫ, үҙен тотоп, бында оҙат, — тип әмер бирҙе ул Могутовҡа, Яйыҡ буйы крепостарына ярҙам ебәрергә ҡушты.

Үҙе башҡорттарҙы ярҙамға килтерер өсөн Мәндей Төпәйевты[1] командалар йыйырға ебәрҙе. Башҡорттарҙы, мишәрҙәрҙе. Йортауай старшиналар олоҫонда ҡал ын, походный старшиналар команда алып бында — ярҙамға!

...Бына шунан уң ул, хәлдең уйын түгелен аңлап, Хәрби коллегияға рапорт ебәреп, Хәрби совет йыйҙы. Бик ентекләп өйләнеләр. Ғәскәр башлығы Валленштерн айырыуса. Ҡоралдарҙы, туптарҙы әҙер тоторға, ҡала стеналарын — парапеттарын нығытырға. Күперҙәр үтелде, юлға дозор ҡуйылды.

Берәүҙәр өсөн ышаныслы. Ә икенселәр ҡаланың ҡамауҙа ҡаласағын тойоп, ситтән килгәндәр, бата башлаған караптарынан ҡасҡан күселәр шикелле, сығып китеү яғын ҡарай башланы. Кибеттәр ябылды. Баҙарҙа атыусы-фәлән юҡ. Сауҙагәрҙәр генәме... Польшанан килтерелгән конфедераттар, Малороссиянан күскән гайдамактар ҙа сыға башланы.

Губернатор әлегә белмә ә лә, уларҙың күбе е Рычковта,[2] башҡаларҙа эшләгәндәре Пугачевҡа барып ҡушылғайны инде.

Ҡалғандарын төрмәгә ябып ҡуйҙылар.

— Ҡапҡаларҙы ябығыҙ! — тине комендант. Унда аҡсылар ҡуйылды.

Губернатор Водяной ҡапҡа янына сыҡты. Бында бейек яр. Ә аҡмар ҡапҡа ы... емерек.

Ул был мәлдә Неплюевты үгә. Йәнә е, насар ҡалдырған ҡаланы. Ә бит ул мәрхүм. Ошо йылда ғына донъя ҡуйҙы. Стеналар емерек, уларҙың тышындағы соҡорҙар сүп-сар менән тулған. Бик ашығыс рәүештә төҙәтә ен төҙәтергә, ҡаҙыйын ҡаҙырға тотондолар. Эшсе көсө бар. Күбе е мосолман.

— Тәксир, эшләйбеҙ, — тиҙәр. — Беҙ бит Мөхәммәт мөьминдәре. Дәғи батшаға ҡаршы.

Уларға арттар, ҡыҙылбаштар эйәрә.

Ҡала ҡапҡалары ябылды. Килгәнен индерәләр, йөгө менән. Рөхсәт еҙ ис кемде сығармаҫҡа.

Харлов[1] ҡыйралған. Ырымбур казактары Пугачев яғына ауҙы. Сотник Подуров тотош сотня ы менән сыҡҡан. Илек юҡ, Татищев крепосында база юҡ.

Бына шунан уң ундан да, улдан да ярҙам орап курьерҙар ебәрҙе. Унан ҡасан

---

[1] *Мәндей Төпәйев — Ҡазан даруға ы, мишәрҙәрҙең баш старшина ы. Почта комиссары.*

[2] *Рычков Петр Иванович — Ырымбур тоҙ контора ының директоры, тарихсы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 102



киләләр әле, ҡалала хәл мөшкөл. Әмер ебәрелгән. Башҡорттар килмәй.

Губернатор бер башҡорт старшина ын саҡыртты.

– Донос менән килгәйне... шуны...

Нуғай юлының бер старшина ы Әлмәкәй Әлкәев икән ул.

Килтерҙеләр.

– Ниңә башҡорттар килмәй?!

– Килерҙәр, Ваше высоко...

– Нисә көн хәҙер. Башҡорттар элек тиҙ йыйыла ине.

– Мин йыйып килтерәм.

Губернатор:

– инме? – Уға текләп торҙо. Ҡасырға форсат эҙләгәнен иҙҙе. Ошаҡ артынан йөрөүсе әҙәмгә ышанып булмай. – ин эргәмдә бул. Килгәнен йыйыр ың. Унда почтовый комиссар китер.

Пугачевҡа иҫән килеш 500 ум ярлыҡаш, үле көйө – 250 ум.

Мәндей Төпәйевты оҙатырға өлгөрмәгәйне әле ул.

Сентябрҙә уңғы пугачевсылар күренде. Губернатор халыҡҡа мөрәжәғәт итте.

– Ул ялған... Битендә – ҡамсы эҙҙәре, палач тамға ы. Бер ваҡыт папаха ын алмай. Ялған батша яман була!

30 сентябрҙә кәңәшмәләге ығымта: «Пугачев үтеп китмәҫкә тейеш!»

Подполковник Василий Иванович Могутов әҙер. Ләкин казактарына ышанысы юҡ. Байтаҡ казактары китте, ана, сотник Тимофей Подуров – хыянатсы. Ниңә? Бик үк яратмайҙар ҡаланы. Улар бында ныҡлы тамыр йәймәгән, Ырымбур алынғас ҡына. Элекке привилегиялар бирелмәй. Яйыҡта булғаны бөтөрөлдө, ә бында шуны талап итәләр. Шуға өмөт тоталар, ә Пугачев вәғәҙә итә.

– Юҡ, был ҡоторта. Тоторға кәрәк!

Тимашев өгөт бирҙе:

– Тотоп килтерергә кәрәк. Уға анауы Афанасий Соколов-Хлопушаны ебәрергә кәрәк. Минең элекке крәҫтиәнем. Беләм мин уны. Азатлыҡ вәғәҙә ит әң, әллә кемде тотоп килтерер ул. 30 йыл төрмә, каторга... Иректә йәшәргә теләмәйме?

Кис губернатор Хлопушаны үҙенә саҡыртты. Тура төрмәнән.

– Үҙең килдеңме?

– Килер ең. – Хлопуша ете йоҙаҡ аҫтында тотола. Губернатор үҙе, мәрхәмәт күр әтеп, төн урта ында саҡыртты.

Ул йәшермәй бары ын да өйләп бирҙе.

Афанасий Соколов[2] төрмәлә ята ине. Ҡала ҡамауҙа ҡалыу менән үк унан сығарып йөрөтмәү башланды. Ә бер төндө ятҡан урынынан ҡуҙғатып алып киттеләр. Губернатор саҡыртҡан икән. Уны ҡунаҡҡа алған ымаҡ ашатты, чарка ла бирҙе.

– Нисә йыл ултырҙың?

– Әллә, утыҙға тулалыр.

– Иреккә сыҡҡың киләме?

Хлопуша иҙенде.

– Әле... юҡ... ыйланың бит.

Рейнсдорп ҡалтыранды, гүйә, ошонда уҡ күтәреп бәрә лә сығып ҡаса. Юҡ, ҡурҡырлыҡ түгел, аҡсылар тора ла а.

– Иртәгә, тим. Бер йомош үтә әң.

– Ә-ә... Унық өсөн бер-ике көн көс йыя ы бар. Бынау әләмәне ырғытырға.

– Ну да... Уны ы булыр.

---

[1] *Харлов Захар – премьер-майор, Нижне-Озерный ҡәлғә енең коменданты.*

[2] *Соколов (Хлопуша) Афанасий Тимофеевич – каторжан, б. к. полковнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 103



Өҫ-баш бысраҡ. Бығаулы. Шаҙра бите бысраҡ. Танау япраҡтары өҙөлгән. Яҫы маңлайҙа тимер яндырып баҫылған тамға хәрефтәре. Башҡа ваҡытта саҡырыу түгел, ҡарап та тормаҫ, ерәнеп төкөрөр ҙә китер ине.

— Был бығауҙар ек ендермәнеме?

— инең ихтыярҙа, ваше высокородие.

— Оҙаҡламай алырҙар. Иртәгә, әгәр телә әң.

— Теләмәй ни... Тик өҙөп тә булмай, ҡасыр әмәл дә юҡ.

— Былай, мин ҡушырмын...

Оҙаҡ ҡына өйләне, ынаны. Яуыз Пугачевты тотоп килтер — 500 ум. Ул батша түгел. Унда аңлатыр ың. Яҙыуҙар бирербеҙ.

— Ҡасан?

— Бына, бар. Дуҫлашып ал.

Ашатырға ҡушты.

Хлопуша риза булды. Әҙерләнә башланы.

— Эйе, төйөн ҙур. Ә мин — бер үҙем. Яңғыҙ ҡул төйөн бәйләмәй.

— Иптәш ал.

— Дуҫым бар. Мусалей, шул кәрәк минә.

— Ярай.

Яңы хәбәр: аҡмар күперенә килеп еткәндәр, күпер ватыҡ булғас, Ырымбурға боролмайынса, туп-тура Ҡарғалыға табан үтеп китеүен хәбәр иттеләр. Йылға буйындағы дозорҙарға:

— Әйҙә беҙҙең менән! — тип ҡул болғайҙар икән баш күтәреүселәр.

Ҡай ы берҙәре, эйәрмәүҙәрен күргәс, йоҙроҡ күр әтеп үткән.

— Мин ундай ғына йоҙроҡ күр әтмәм! — тине сәме ташҡан Рейнсдорп.

Ә икенсе йоҙроҡто — ҡала эсендәге ҡартҡа. Урамда осраҡҡайны.

— Яуыз вор килә, — тигәйне.

Иҫе лә китмәйенсә:

— Ул крәҫтиәнгә теймәй, — ти ҡарт. — Алпауыттарҙы аҫа, үҙҙәрен ҡылыстан үткәрә. Усадьба ын ғына ҡыйрата, аттарын, малын, игенен — сиреүгә, крәҫтиәндән ал а — аҡса бирә.

— Цыц. Я илиәт үҙен өйләй ең. ин Пугачев агентымы?

Был берәй керәшендер.

— Нишләп, Хоҙай аҡла ын.

Бындағыларға ышаныс юҡ. Төрлө халыҡ. Ялсы-маҙар булып, хатта арттар ҙа бар. Уларҙы ҡыҙылбаш тиҙәр. Уларҙың суҡындырғандары ла күп.

Бында төрлө яҡҡа тырым-тырағай ыҙалар, ә икенсе бер урында тағы үҙ.

— Пугач беҙгә теймәй... Ҡорал ыҙ килә ул. Ул әйттеме — халыҡ былай ҙа тыңлай. Әйтәйек, үҙе юҡ, ти — манифесын уҡыйҙар, шул да етә.

Юҡ, былай ярамай. Губернатор ҙурҙан тотона ала.

Ул үҙе кеүек күрше ен ҡурҡытырға, мыҫҡыл итеп кенә ҡара а ла, бында ла килер тип, Рейнсдорп ысын-ысынлап ҡурҡыуға төшә. Үҙе генә түгел, Ҡазандағы губернатор генерал-аншеф фон Брантты ла ҡурҡытып, был ҙур яуыз, ирек бирәм, ти ә, бөтә крәҫтиәндәр уға эйәрер, яуыз бында туҡталып тормай, крепостар алды, туп-тура инең губернаңа китеүе ихтимал, тип рапорт ебәрә.

Әйҙә, уға Мәскәү яҡын. Сара күр ен.

Пугачевты самозванец тиҙәр. Маңлайында «ВОРЪ»[1] тигән яҙыу бар, йәнә е. Быны губернатор кешеләре ике үҙҙең бере ендә ҡабатланы. Самозванец тигәненә ышандылар. әр кем үҙенсә аңлай, күңеленән үткәрә. ис йоғонто я аманы. Ә Яйыҡ яғынан ҡасып килгәндәр, юҡ, ти. Күргәндәр бар. Тамға ла, ҡамсы эҙҙәре лә

[1] *ВОРЪ (вор) — ул заманда боласыларға, б. к. ҡарата әйтелгән үҙ.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 104



юҡ, имеш.

— Губернатор алдай улай булғас, — тине күптәр.

Уның алдауын беләләр. Әле лә ышанмағыҙ, тиҙәр казактар.

Ышаныс бөттө. Ысын батша шул көндө, дошмандары морон төбөнә төртөп үткәс, губернатор исеменән халыҡҡа беренсе тапҡыр мөрәжәғәт иткәндәр, илде әләкәткә илтә, уға ышанмаҫҡа, ул ялпы ябырылыуына уңғы тамсы ҡанға тиклем ҡаршы торорға, тиҙәр.

Губернатор поляк конфедераттарының ҡоралдарын алды. Этап менән Троицк крепосына оҙатырға була. Байҙары крепостарға инде, Таналыҡ, Ҡыҙыл крепостарына, ә ярлылары яугирҙарға ҡушылды.

аҡмар ҡала ына килгәс, Пугачев Почиталиндан[1] губернатор генерал-поручик Рейнсдорпҡа ла, Ырымбур казактары ғәскәренең атаманы подполковник Могутовҡа ла айырым-айырым указдар яҙҙыра. ис ҡаршылыҡ ыҙ баш алыу хаҡында әйтә. Ғәскәре бара, ә мө өрлө[2] конвертта указ тотҡан сапҡындар алдан елә. Баш алманылар, әлбиттә. Сапҡындар кире ҡайтманы.

Пугачевтан указ килгәс, губернатор ярандары, эй, көлөшә.

— Бына мужиктар яҙа!

— Беҙгә ерҙәр, йылғалар, диңгеҙҙәр бирәм, тигән. Ә үҙенеке? Юҡ!

— Әҙәм көлкө ө!

— Аҡса жалунъя ы бирәм, ти.

— Йолҡош казакка ҡалған көн бармы?

— Унан кем ала...

— Икмәк, провиант.

— Дары, ҡурғаш, ти. Үҙенә бирербеҙ яуыздың, килеп кенә ҡара ын.

— Ирек, ғүмерлек ирек.

— Беҙгә шуны ы ярамаймы?

— Монарх шәфҡәте, ә?..

Ҡәлғәлә йәнә Хәрби совет бара. Ул хәҙер көн айын була.

— Ярҙам киләме? Ҡасан? — тип губернаторға текләгән бөтә ғәләм.

Ул ҡарт, үҙе ҡалтырай.

— Ҡайҙа теге, ҡайҙа был?

— Бөтә яҡҡа деташамент[3] ебәрелгән.

— Башҡорт ниңә килмәй?!

— ?!

— Бошман-ҡыпсаҡтар, ыуын-ҡыпсаҡтар — самозванецтар.

— Тағы йыйырға, Стәрлетамаҡҡа тупларға.

— Был юлы ағалап килтереү сара ын күрергә. Бының өсөн Өфө воевода ына, Төпәйевҡа ышаныслы старшиналар менән конвой ебәрергә.

Был әмерҙәрҙе алып, курьерҙар үтте, башҡорт старшиналары ла китте. Улар йөрөй белә. Үтерҙәр.

Үҙенә — Пугачевтан указ. Ләкин был ваҡытлы булған. Ҡала янына ворҙар килеп туҡтаны.

Ҡурҡытып бер-ике туп көн буйы гөрләп тора. Ҡала стена ына яҡынлап-яҡынлап китәләр. Батырға — батыр сығырға саҡырған кеүек.

Лагерь ҡараңғы. Усаҡ яҡты ында шәүләләр. Ҡара яу. Ҡурҡыныс.

Ләкин: «Беҙҙе ала алмаҫ!» — тиҙәр. Ярҙам килер. Өфөнән, Себерҙән... Унда —

---

*[1] Почиталин Яков — Яйыҡ казагы, б. к. писары.*

*[2] Мө өр — печать (мисәт).*

*[3] Деташамент — ғәскәри часть.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 105



Деколонг.[1] Был юлы, башҡорттар килер, тип әйтеүсе булманы.

Ысынлап та, килделәр.

Бер яҡтан яугирҙар ҡаманы. Ә күп тә үтмәй, Яйыҡ, Меновой яғынан.

Губернатор талабы буйынса Яйыҡ ҡаласығынан казактар отряды, шундағы бер команда алдаттар менән майор Наумов, дүрт туп йыйылды. Былар Яйыҡтың ул яғы – Бохар яғынан килеп инделәр. Алты йөҙҙән ашыу. Аҙ түгел.

Ә үҙендә өс йөҙ казак, Ҡарғалы татарҙары өс йөҙ кеше, гарнизон алдаттары – мең дә ике йөҙ, офицерҙар, етмеш туп.

Губернатор дәртләнде. Шулай ҙа сикурсты көтә, бик көтә. Сара күрә. Эстә хәбәр таратмайҙармы, берәй диверсия юҡмы? Апроштар[2] ҡаҙыма ындар, ҡапҡалар ныҡмы? Юғи ә, яҡын килерҙәр.

Ҡайҙа иҙелә, шунда туп тоҫҡай.

***

Тәүге көндәге вылазкала Хлопушаны ебәрҙеләр. Хлопуша аҡмарҙың элекке үҙәнендә тороп ҡалды.

Дүрт указ: Пугачев толпа ына, Яйыҡ казактарына, Ырымбур казактарына, Илектекеләргә, бере е – Пугачтың үҙенә. Иң элек шул. Унан өйлә алдаҡсы тип, сара бул а, үҙен алып кил йә үлтер. аҡмар ҡапҡа ы яғынан вылазка уңыш ыҙ.

Икенсе көн. Иртән. Набат ҡаҡтылар.

Водяной ҡапҡа яғы тынысыраҡ. Шунан сығып, Хлопуша менән Мусалей Яйыҡ күперенә, унан Меновой дворға китәләр. Аҙыҡ-түлек, фураж. Бөтә бесән туғайҙа ҡалды. Губернатор, яусылар көсөн иҫәпкә алмайынса, ташытып ҡуйыу сара ын күрмәне.

Пугачев төркөмдәрҙе яҡын килтерҙе. Рейнсдорп ҡушыуы буйынса Валленштерн:

– Ҡыуалап ебәрергә, – тине.

Ҡапҡа асылды.

Губернатор бастиондан ҡарап тора.

Бына, бер аҙ барғас, ут астылар.

алдаттар атҡанда аттарын ятҡырҙы. Ҡор аҡ яғынан аталар.

– Батовать![3]

Башҡорттар ҙа уҡ ата.

Унан атҡа атланып ҡыуа киттеләр. Бер ыҙатлы сафҡа теҙелеп. Пугачев алдан төштө.

– Лава!

Ҡылыстарын болғап, башҡорттар ябырыла. Эргәнән – казактар. Ҡаршынан сыҡтылар. Бер казак алға китте. Уға драгундар ташланды. ай, бөтөрәләр бит! Бер башҡорт ярҙамға ырғыны, артынан тағы... Теге казак, дәртләнеп, драгундарҙың бере ен ҡылысҡа ала. Икенсе ен башҡорт үлтерә.

Казактар килеп етте.

– Молодец! Ярҙам итте, – тине башҡортҡа.

– Ҡотҡарҙы ул.

– Кемде ҡотҡарҙың?

– Казакты... Үҙебеҙҙең яуҙашты. Бөтөрә тип ашыҡтым.

---

[1] *Деколонг Иван Александрович – генерал-поручик, Себер сик буйындағы ғәскәрҙәрҙең командалаусы ы.*

[2] *Апрош (фр.) – өжүм итеүселәргә йәшеренеп ҡәлғәгә яҡынайыр өсөн кәкрәйтеп ҡаҙылған траншеялар.*

[3] *Батовать – аттарҙың ҡор аҡ ышығынан атыу.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 106



— Ә хәҙер таный ыңмы?
— Бәй, казак инде. Башлыҡ кеше.
— Батша бит.
— Кем?
— Батша.
— Хәҙер таныйым. Йөҙ йәшә, батша хәҙрәттәре. — Был да казактың яратҡан ысулы. Башҡортҡа ла хас. Күнегелгән бик йә әт. Бер йән булып, командир ымын аңлап (ҡылыс елтәүҙән, тауыштан, үҙ атынан).
алдаттар ҡаса. А ылдап офицерҙар уларҙы туҡтатырға итә. Могутов казактарының бер нисә е генә тороп ҡалды. Әсир бирелде.
Юҡ, бының әсиргә түгелен белә губернатор. Ул туҙынды.
Офицерҙар ингәс, бороп алды.
— Ниңә ҡастығыҙ?!
— Туҡтатып булмай.
— Ниңә?
— Уларҙы күр ә, алдаттарҙың ҡулдары ҡалтырай.
— Телдәре тотлоҡмаймы?..
— Тотлоға, Ваше превосходительство...
— Алға ҡыуалағыҙ!
— Аяҡтарын ер тота.
— Артҡа киткәндә күрҙем, шәп йүгерәләр.
өйләйҙәр төрлө өн, күҙ быуа, тиҙәр. Йәнә е, ата алмайҙар, уны пуля алмай.
Шик.
— Бер иштәр улар. — Бындағы казактан да, башҡорттан да шикләнә. — Шымсылар улар, — ти. Шикләнә.
Ҡапҡалар ныҡ.

***

Ундайҙар сыға тора: казактар ҙа, алдаттар ҙа. Кире китмәҫтәр, аслыҡ ҡосағына бара булалармы? Ҡалалағы көс кәмер, бында артҡандан-арта.
Ә бер казак Пугачевҡа:
— иңә арестант килер, — тине.
— Үҙеме?
— Губернатор ебәрә. Ул ебәргәс, йүнлегә түгелдер.
— Ҡасан?
— Бөгөнмө — ул бындалыр, эҙләйҙәр.
Казактан ентекләп ораштылар ҙа, дөрөҫтө өйләйме, буштымы, тип, Пугачев әмере буйынса, ни булмаҫҡа мөмкин, тип аҡ аҫтына алдылар. Водовозный башня ы ҡаршы ына башҡорттарҙан да, казактарҙан да боҫтормалар[1] ҡуйылды. Көттөләр. Төндә боҫтормалар алмаштырылды.
... Хлопуша Мусалейға:
— Хәҙер ҡайҙа китә ең?
— Батшаға хеҙмәт итәм.
Мусалей китеп күп тә барманы, эләктерҙеләр. Тегендә тағы бере е бар.
әм бер әзмәүерҙе тотоп килтерҙеләр. Оҙон буйлы, таҙа кәүҙәле, яҫы маңлайлы был әҙәмдең ыристан[1] икәне күренеп тора. Үҙен эләктереп алғанда ҡаршылашма а ла, ҡулын бәйләй башлағас, яурыны менән икәү ен ике яҡҡа этеп, тартынды.
Ҡурҡынып, артҡа сигенделәр.

---

[1] *Боҫторма — засада (автор үҙлегенән).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 107



– Ҡурҡмағыҙ, мин өрәк түгел.

Ҡурҡманылар, ҡамсы менән берҙе ыптырып алдылар.

– әй, шельма! Башҡа ваҡытта бул амы... Мин ине... Әйҙә, Емелькаға алып бар.

Уға дар ағасын күр әтәләр. Дар ағасына табан ҡыйыу бара. Тағы ҡамсы.

– Батшаға, тиң. Петр Федричка...

– Бул ын, әйҙә, – үҙе атлай. – Батшаға.

Мусалей өйләй ни өсөн сығарғандарын.

Кинйәгә илттеләр. Ҡарай. Ябай сәкмән, билбау быуған. Иҫке бүрек. Аяҡта иҫке итек... Ә төҫө? Әҙәм ҡарарлыҡ түгел, түңәрәк шаҙра бите, танау япраҡтары китек – киҫкәндәрҙер. Маңлайында тимгел-тимгел ҡыҙыл “ВОРЪ” тигәндең эҙҙәре. Ыристан, әлбиттә. Хәйер еҙ уйҙа ебәрелгән шул әҙәм.

– ин кем? – тине Кинйә.

– Мин – Хлопуша. Әйтеп ҡуям: ҡамсы уйнатмағыҙ, Емель... әй... Батшаға илтегеҙ!

– Уға ашыҡма әле.

– Улаймы? Улай а, Максимға илтегеҙ, Шоғаевҡа. Беҙ унның менән бергә баструкта яттыҡ.

Кинйә уны Максим Шоғаевҡа алып барҙы. Тиҙ танычы теге е быны.

– инме был, Афонька? Ырымбур ҡоҙғоно?

Хлопуша күкрәк киреп, ынын турайтты. оро күҙҙәре ялтлап ҡалды. Бер аҙым алға атланы.

– Мин!

Шулай итеп, губернатор ҡушҡан эште атҡарырға вәғәҙә бирҙе ул. Унда атыулашып тора ы юҡ. үҙ бирә ең... Әйтелгәндәй, үҙҙе тотоп буламы... әм ул Пугачев алдына килгәс, ис ҡурҡмайынса, ине тотоп алып ҡайтырға йә үлтереп китергә ебәрҙе, тип асығын әйтте.

Пугачев ҡарашы менән уны өтөп алды.

– Аҡса алғың килдеме? Батша башы арзан түгел.

Унның ысын батшамы, түгелме икәнен әле уйлап та торманы. Элек уйлағандыр.

– Минең башҡа биш йөҙ ум ярлыҡаш билдәләнгән, Катька – бер меңде.

– Был заманда аҡса ла булған мал, – тип ҡул елтәне Хлопуша. – Миңә нурлы күҙең менән бер ҡара – шуны ы ҡиммәт.

Пугачев ҡараны.

– Йә, күңелең булдымы? Дүрт яғың ҡибла, тиер инем... Ғаиләң ҡайҙа?

Хлопуша башын артҡа сөйҙө.

– Ана, Бердала.

– Бар шунда. Әммә...

– Ҡайттым, ти. Ә минең утыҙ йыллыҡ яфа... Үсем ҡасан ҡаныр?

– Бар, ял ит. Килер ең.

Батша ашатырға ҡушты. Ете ум аҡса бирҙе.

– Нимәгә ул? Миңә дар ағасы вәғәҙә иттеләр бында.

– Кейем ал.

– Ниңә?

– Батша ҡолдары ыҫпай була.

Ял итте, ти. Ҡатынын көсләп кейәүгә биргәндәр. Тимашев имение ында. Улы ла шунда икән. Бөтә е юғалған. Ҡатын да, ул да. Ни бар донъяла... Ышаныс та юҡ. Ике-өс көн үтте. Ситкә китмәне. Ҡатынын эҙләп китер, алып ҡайтыр ине, ундай ваҡыт түгел.

Унан күҙ яҙҙырманылар, әлбиттә. Шоғаев, белгән кешеләр Хлопушаның ышанысл ы икәнен әйттеләр. Бындай кешелә өмөт булыусан.

[1] Ыристан – арестант.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 108



– Хәҙер ҡайҙа бара ың? – тине Пугачев.
– Эш күп!
Пугачев көлдө.
– Эш менән килгән ең бит... Мине тоторға... Ә ин шул эште атҡар. Губернаторҙың үҙен тотоп килтер...
– Унда эш сығарып булмаç. Мине эт тә таный унда. ин мине заводтарға ебәр... Унда дуçтарым күп. Бөтә заводтар инеке булыр.
О о, был борсаҡты эре сирттерә. Бөтә заводтар... А что же... Мин дә, бөтә Рәсәйҙе, тим дә ә.

5

Көҙгө ел иçә. Ҡоштар ҙур-ҙур туптарға тупланды. Улар йылы яҡҡа оса. алҡын тиреç[1] еле уларҙы арттан ҡыуған төçлө этә.
Ҡоштарға ҡаршы алҡын яҡҡа табан, Яйыҡ, аҡмар яғынан сапҡындар елә. Төрлө ө бар сапҡындарҙың. Хөкүмәт бурысын, губернатор ҡушҡанын үтәп, унының рапорттарын, әмерҙәрен илтеүсе курьерҙар ҙа, Емельян Пугачев указдарын илтеүсе ябай сапҡындар ҙа бар. Уларҙы Почиталин, Балтай яҙған; Кинйә ҡулынан үткән.
Сапҡындар ҡайҙа асыҡтан-асыҡ, ҡайҙа йәшеренеп елә. Берәүҙәре – Нуғай, Ҡазан юлына, икенселәре – Уса, Себер юлына. Шундағы иләүҙәргә, иләү ағалары, йортауайҙарға.
Курьерҙар ҙа аҡ. Улары почта ямдарында яңынан-яңы аттарға атланып еләләр. Яҡында бул а – Өфөгә, амарға, алыçҡа бул а – Ҡазанға, Мәскәүгә.
Октябрь айы баштарына шундай курьерҙар Санкт-Петербургка ла яҡынлап баралар ине. Улар әле батша ҡаршы ына килеп етмәгәндер. Екатеринаның яу хаҡында хәбәре юк.
Төрөк фронтында ҙур уғыш бара.
Фельдмаршал Петр Александрович Румянцевтың ғәскәрҙәре Дунай аръяғын айҡап йөрөп ҡайтты. Ҡырым ханлығына кереп баралар. Азовта яңы флот төҙөлә. Ул Ҡара диңгеҙгә сығыр, ә Суджук-ҡала янында уғыштар бара. Был ҡала оҙаҡламай Новороссийск буласаҡ.
Ә Санкт-Петербургта туй, ҙур тантана. Россия императрица ы улы Павел Петровичтың никах туйы башланып тора.
Шул көндө Емельян Пугачев Ҡарғалыға килеп ингәнен, илдә ҙур яу ҡубыуын батшабикә күҙ алдына ла килтермәй. Шулай уҡ үҙ-үҙенә шул Павелдың ата ы исеме Петрҙы алған Пугачев та туй хаҡында белмәй, әлбиттә. Әгәр ҙә аҙмы-күпме хәбәре бул а, улым миңә етмеш меңлек ғәскәр менән ярҙамға килә, тип әйтмәç ине. Бушты өйләгәндә лә ҡыйышын ысҡындырмаçҡа тырыша шул ул.
Екатерина Икенсе 11 октябргә саҡлы байрам итте.
15 октябрҙә ике губернатор ебәргән рапортты уҡыйҙар. Бере е үҙенең Ырымбурҙа ҡамауҙа ултырыуын ҡалтыранып яҙа, үҙ күҙ алдындағы ын, икенсе ен Ҡазандан, теге енән алған хәбәрҙән ҡурҡып яҙа.
Бына туй артынан – дөмбөргә. Бөтә тантанаға сик ҡуйған төçлө, ҡапыл күк күкрәне, ер тетрәне. Ҙур яу. Хәбәр артынан хәбәр. Бере енән-бере е ҡурҡынысыраҡ. Рейнсдорп, бунттың бөтә Россияға таралыу ихтималы бар, тигәйне. Мәжлес ағайҙы, императрицаның үҙен дә бик ауыр борсоуға алды алыç ерҙән килгән был хаттар, ләкин иҙҙермәçкә тырышты. Туй дауам итте.
«Бына тағы берем артты...» – тип әсенде ул. Теге е, үҙенеке тигәне иçән ваҡытта Ораниенбаумда (хәҙерге Ломоносов ҡала ы) интектергәне етмәгән... Инде үҙен ҡолатып, Ропшала донъянан үткәреп тынысланған бит инде. Хәҙер исеме генә лә... Хәҙер нисәмә Петр Өсөнсө булды... әллә нисәмә яңы ир! Чехтар өйләй, Европала, халыҡтар, монахтар, поптар өйләй. Уралда, Исәт провинция ында,

[1] Тиреç – төньяҡ.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 109



Өфөлə Петр Өсөнсө указы тип уҡыйҙар. Күпме ялған Петр?! Хатта Албанияла – Степан Малый. Бына əле лə бер үлегə ике тере батша бар, йəнə е. Степаны алыҫта. Уны илсе е Голицын да, Алексей Орлов та күргəн. Йəшəй бир ен, ə быны ы... Кем ҡоторта уң уны? Бындағыларзмы, ситтəнме?.. Никита Панин түгелме, төрөктəрме?.. Эйе, заговор була, фетнə. Үҙе бер өйөр гвардия менəн власҡа килмəнеме? Бында халыҡты ҡуптарырҙар ҙа Павелды ҡуйырҙар. Бына, үткəр ин уға туй!

Ах, шуға ысын Петрҙың фаворитка ы Елизавета Воронцованы ебəрер ҙə ҡуйыр ине, ҡотолоп бул а... əм шул көндө үк батшабикə бөтə кəрəкле сараларын күрə башланы.

– Уйын бөттө! – тине ул үҙ-үҙенə.

Туй ғына түгел, уйын да бөткəн. Əйтер ең, ул быға са кейеп йөрөгəн маскарад битлеген ыпырып ташлаған да үҙенең шəхсəн төҫөнə ингəн. Ireклек, хөрлөк уйҙары, Вольтер тəғлимəттəре менəн шаярыу, яңы ҡанундар төҙөгəн булып күренеү – бөтə е, бөтə е лə бөттө. Ул ни бары ҡаты ҡуллы императрица! Миңə ҡаршы ҡорал күтəреүсе табылған, йəнə е, тип яр ыны Екатерина Икенсе.

Юҡ, тəхет уныҡы. Елизавета иҫəн саҡта уҡ көтөп йөрөгəн бəхет. Был уҡмаҡтан ул кире, улы аша, бере ен үлтереп, бере ен көтөп тор əле, тип алға үтеп китте. Хəҙер шуны бирə буламы? Юҡ, Ан альт Цербст бит əле ул!

Тик ул шуны белмəй: Екатеринаны ҡуйғанда халыҡтан ораманылар, ə хəҙер халыҡ үҙ үҙен əйтте. Петр Өсөнсөмө ул, Петр Федоровичмы, əллə Емельян Пугачевмы... Уны ын халыҡтың үҙ күңеле белə. Асыҡ əйтмəй, ə белə, шуға эйəрə, шуның өсөн дə ҡорал алды.

Батша, ти халыҡ... Ҡасандыр Иисус Христосҡа ла шулай үлеп ышанғандар. Булмышын бел əлəр ҙə ышаналар, үҙҙəренең күңеле, телəге менəн. Берəү ышанып үҙ тарат а, уны дөрөҫ түгел тип иҫбатлауы ла ҡыйын хатта, мөмкин дə түгел тиерлек.

Ғəйепме ни ул заманда? Батша булма а, халыҡты нисек эйəрт ен көрəшсе. Элек-электəн ҡанға, аңға еңгəн. Ил башы – хан... Рəсəй башы – батша, ə бит ханды ла, батшаны ла ябайҙан ҡуймайҙар. Улар – бүтəн ҡан, затлы ҡан, йəнə е. Уны ҡайҙан ал ындар, исеме генə кəрəк, шул затлы ҡандан булып сыға... Тик ул ярлыялпының үҙенеке бул ын...

Алдау ҙа, алданыу ҙа була... Тик быны аңламай мөхтəрəмə Екатерина.

15 октябрҙə императрица Советында Ырымбурҙан, Ҡазандан губернаторҙар ебəргəн рапорттар уҡылды. Пугачев указдарын тыңлап ваҡыт əрəм итмəнеләр.

– Указды мин бирəм! – тине олуғ хакимə. – Халыҡ ташҡа баҫылғандарын ғына уҡы ын.

Екатерина Хəрби коллегия менəн берлектə боланы баҫтырыу юлдарын билдəлəгəйне. Уны Совет хупланы, əм шул көндө батша манифесы иғлан ителде. Бола хаҡында хөкүмəттең беренсе тапҡыр я алған белдереүе ине был.

Манифеста Екатерина Пугачевтың кемлеген фашларға тырышты.

Ə Совет раҫлаған план буйынса, боланы баҫтырыуға ҙур ғəскəр ебəрергə ҡарар ителде, уның командалаусы ы итеп генерал Кар,[1] ярҙамсы ы итеп генерал Фрейман[2] ҡуйылды. Əлеге Санкт-Петербург легионына Новгородтан, Мəскəүҙəн, Калуганан, Ҡазандан байтаҡ ҡына полктар, хəт еҙ артиллерия бирелде.

Тиҙ барырға тейеш Кар почта аттарында. Ул ҡəнəғəт түгел. Польшаға конфедераттар баҫтырырға бик телəп киткəйне, ə бында... бола ғына. Унан уң ул туй алдында. Пан Хованский ҡыҙына өйлəнергə ине. Бына китергə... Карҙы ҙур уғышҡа, ил ағына оҙатҡандай, Екатерина үҙенең əсə шəфҡəтен күр əткəн төҫлө фатиха бирҙе: «Аҫырға, киҫергə!..»

Көс икенсе яҡтан да бара. Псков, Могилев губерналарынан Саратовҡа еңел

*[1] Кар Василий Алексеевич – генерал, армия командалаусы ы.*
*[2] Фрейман Федор Юрьевич – генерал-майор.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 110



командалар, Бахмуттан Царицынға ике эскадрон гусар әм тағы әле Смоленскиҙа урынлашҡан 700 башҡорт атлы ы Ырымбурға империя мәнфәғәте өсөн бөтә ен дә эшләргә тейеш.

Был ваҡытта инде Екатеринаның философ Вольтерға эйәргән төҫлө ҡыланышы бөттө. Вольтер йоғонто о үнде.

Ул ҡаты бәғерле булыуына, үҙ көсөнә ышана. Фарман биргәс — үтәлер. Аҫырҙар, атырҙар... Яу ҡуптарып нимә генә эшләй белерҙәр.

Шул көндәрҙә уға фавориты Григорий Орлов Лазаревтан 400 мең умлыҡ тип «Амстердам» исемле бриллиант алып килтерә. Ләкин ул хаҡтың бер умын да түләмәйҙәр. Түлә ә — просвещенная монархиня тигән иseme юғала, йәнә е. Ни әйтер ул сағында дворяндар? «Орлов» тигән исем бирәләр ҙә, эш бөттө.

Аҫылташты алдына ҡуйып, ҡарай-ҡарай ултыра ине Екатерина. Ара-тирә генә иҫенә бола хәлдәре төшә.

— Раскольник староверҙар ҡотортоуылыр инде был, — тип сәбәбен белергә самалай. Ә икенсе бер уйланғанда...— Сит ил агентура ының эшелер, — ти. — Йә дворяндарҙың юғары даирә ендәге ойошҡан оппозиция ҡулымы? Европа алдында сер. Был — казактар боларыуы, ахмаҡлығы. Тағы ҡанға батырҙар ҙа бөтөр.

Быйндай шиктәрҙең йә бере е, йә икенсе е еңә ине күңелендә. Уның өсөн бере е лә әллә ни ауыр төҫлө түгел ымаҡ, тик ул бында бөтөнләй икенсе сәбәп икәнен — баш күтәреүҙең Россиялағы социаль ҡаршылыҡтар киҫкенләшеүҙә барлыҡка килеүен тәүҙә башына ла килтермәй ине. уңынан, шуны аңлағас ҡына, асыуы ҡабарғандан-ҡабарҙы. Быны күреүе ауыр. Сәменә тейҙе.

Карҙы Брант Ҡазан аръяғындағы Татар ерҙәрендә Кисеү Сатта ҡаршыланы.

Әҙерлек күрелгән. Тағы көс тупларға. Алдан Чернышевты[1] ебәрәләр. Бара тор - он. Ғәскәр тупларға — Ҡолой Балтас,[2] Йософ Тәвкилев.[3]

Ырымбурға курьерҙар елде. Өфөгә, көнсығышҡа табан, бригадир Корфҡа, генерал Деколонгка хәбәрҙәр осто.

Кар:

— Ҡасырҙар, — ти, — юлдарын бүлергә кәрәк.

6

Кинйә команда туплап киткәс, Грязнов[4] ҡолағын ҡарпайтты. Белешә торҙо — барып ҡушылған.

Тамъян олоҫоноң поход старшина ы Ҡасҡын амаровты[5] эҙләп тапты. Күршелә. Китмәгәнен белә. Ҡасҡын:

— Кинйә киткән,— ти.

— Молодец! — тине Грязнов әм был хаҡта Вознесенский заводына Петровҡа[6] хәбәр ебәрҙе: аң тор он. Үҙе ышаныслы кешеләре аша Петр Өсөнсөнөң марш менән Ырымбурға китеүен ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа таратты.

Ай башында уҡ Воскресенский заводындағы бөтә эшселәр, ҡаҙна крәҫтиәндәре, эш ташлап, контора ҡаршы ына йыйылды.

Грязнов Ҡасҡын амаровты күреп өйләште.

— Яҡын булығыҙ!

— Беҙ аҡсыларын алдыҡ.

---

*[1] Чернышев Петр Матвеевич — полковник, Сембер коменданты.*
*[2] Ҡолой Балтас — Себер даруға ы, Ҡара-Табын олоҫо старшина ы.*
*[3] Тәвкилев Йософ (Осип Алексеевич) — секунд-майор.*
*[4] Грязнов Иван Никифорович — б. к. баш полковнигы, Кинйәнең әм ата ының күптәнге знакумы.*
*[5] Ҡасҡын амаров — Нуғай даруға ы, Тамъян олоҫоноң поход старшина ы, б. к. полковнигы.*
*[6] Петров Василий — Кинйәнең йәштән үк белеше, дуҫы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 111



– Молодцы!

12 октябрь. Халыҡ өйләшә:

– Батша беҙгә лә килер!

– Твердышевты тыйыр.

– Уның ҡоллоғонан ҡотҡарыр...

– Был ни хәл? – тине управляющий Кулалиев.

Ул кисәле-бөгөнлө халыҡтың төркөм-төркөм булып йыйналыуын күрҙе. Әйтеп, ҡысҡырып ҡараны. Таралалар ҙа тағы йыйылалар. Ана, бөгөн дә ни саҡлы килгәндәр. Ҡаршыларына сығып туҡтатмай булмай.

алдаттар күренмәй. Пристав та, капрал да юҡ. Ҡурҡытып ебәргәндәр.

Тирә-йүндән ярҙам орарлыҡ түгел. Ҡазан, Стәрлетамаҡ алыҫ, Мәләүездән килерҙәрме, юҡтыр...

Сыҡмай булмай. Управляющий ышан а-ышанма а ла, үҙе янына Грязновты эйәртте. Йәнә Петр Беспаловты – приказчикты. Уны ы белмәмешкә алыныбыраҡ торҙо.

– Ниңә йыйылдығыҙ? – тип аҡырҙы Кулалиев, бөкләп тотҡан ҡамсы ын арлыбирле болғап. – Эшегеҙҙә булығыҙ! Марш, марш!

Халыҡ сайҡалып алды.

– Юҡ, прапорщик, ин башта әйт: Ырымбурға батша килгәне дөрөҫмө?

Прапорщик Кулалиев ағарынды, бүртенде. Берсә Грязновҡа, берсә Беспаловҡа ҡарап, ҡамсы ын тағатып, тилбер-тилбер килтерҙе.

– Ҡайҙа алдаттар?

Беспалов яурынын йыйыра.

– Кем ул, кем орай?.. Ниндәй батша тағы? Екатерина Алексеевна – батша. Ә теге – вор... – тип екеренде Кулалиев.

– Юҡ, Петр Федорович ул.

– Ышанмағыҙ!

Кешеләр яҡынлаша башланы. Грязнов эргә ендәге управляющийҙың ҡулынан ҡамсы ын тартып алып, аяҡ аҫтына ташланы.

– Әй, быны менән ярамай, прапорщик.

– Мин отряд саҡырттым. Бөгөлсән башҡорттары киләсәк.

Эйе, унда Кинйәләр артынан уҡ Әхмәр Шәрипов,[1] Йософ Нәҙеров[2] ҡалғайны. Әле Кулалиев шуларға ышана. Улар юҡ. Ҡасҡын килде, старшина Бүләк,[3] Бикеш.[4] Шулар менән ҡыуалап ебәрҙе.

– Ә, башҡорттармы? Улар бында, тик беҙгә ҡатнашмай. Ҡарап торалар...

Бына шунда Степан Туманов ҡарт Иван Грязновҡа ярҙамға килер ваҡыт еткәнен иҙҙе. Алғараҡ сығып, ҡулын күтәрҙе:

– Эй, мир кешеләре! Ғауға күтәрмәгеҙ! Батша килгән, тиҙәр икән, барып, күреп ҡайтырға кәрәк. Кешеләр ебәрәйек. Күреп-белеп ҡайтырҙар.

– Эйе, дөрөҫ!

Берәм-берәм атап, кемдәр барасағын ҡысҡырҙылар. Кулалиев, заводты ташлап китмәйем тип, шунда уҡ баш тартты.

Приказчик Беспаловты атанылар, теге е ҡалтыранды, әммә ис ни әйтмәне, Иван Никифорович тинеләр – уны ы баш эйҙе. Туманов ҡартты ла, улы Григорий ҙа онотолманы.

Управляющий дилбегәнең үҙ ҡулынан ысҡыныуын күрҙе. Халыҡ ағыла. Йыл-

---

*[1] Әхмәр Шәрипов – Ҡазан даруға ы, Ҡаршын олоҫо старшина ы.*
*[2] Йософ Нәҙеров – Ҡазан даруға ы, Нәҙер олоҫо старшина ы.*
*[3] Бүләк Яҡубов – Себер даруға ы, унлар олоҫо старшина ы, б. к. отряд командиры.*
*[4] Бикеш Йомаҡаев – Нуғай даруға ы, ыуын-Ҡыпсаҡ олоҫо старшина ы, б. к.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 112



ға аръяғындағы яр буйына урынлашҡан Ермоловканан күмер яндырыусылар атлай, ул арала Верхоторҙан да килеп еттеләр.

Эштең башланыуы ғына кәрәк Грязновҡа.

– Шун ыҙ булмай, – тине ул управляющийға. Ҙур күҙҙәрен ҡыҫты, йылмайған булды. Аңлай алманы уны Кулалиев.

– Хата була, Иван Борисович юл ҡуймаҫ.

– Твердышев үҙе алып бар ын. Йә ин.

– Юҡ, юҡ.

– Шулай булғас, борсолма. Кешеләр тыныс булыр, тик быны ҡуйып тор, – тип пистолетын үҙенә алды.

– Был нимә?

Ҡаршы төшөр ине лә, халыҡ улар яғында. Управляющий үҙенең әсир хәленә төшөүен аңланы. Ҡасмаҡсы ине. Грязнов уны бер өйгә бикләп, аҡсы ҡуйҙы.

– инә тейерҙәр әтү. Ә мин, халыҡ әйткәс, барырмын. Бына шулай.

Хәүефле ваҡыт, юлда ышанып булмай, тип, Грязнов, унлап кеше алырға кәрәк, тине.

Управляющий аҡ ыҙ ҡалырға риза булмағас, заводты беҙ ҡайтҡансы халыҡ ҡарап торор, тип килештеләр.

– Быны Туманов эшләр.

Ул шуның өсөн Григорийҙы[1] ла алды, ата ын бында ҡалдырҙы.

– Теге ҡасма ын, – тине Грязнов.

Ләкин илткәндә Кулалиев үкты. Уны туҡманылар. Үлде бахыр. Өйөн яндырҙылар.

Иртән Иван Никифорович үҙенә 600 кешелек отряд, кәрәк кешеләрҙе алды. Беспалов, улар киткәс, мылтыҡтар, дары, бер тупты билдәләп ҡуйҙы. Тупсы ы ла юлда алдаттарҙан мылтыҡтарын алды.

Киттеләр.

Тамъян олоҫоноң поход старшина ы Ҡасҡын заводҡа етте лә үҙенең кешеләрен ауылдың төрлө урындарына ҡуйҙы. Юлдарҙы бикләне. Заводтың үҙен, контора, сиркәүҙе лә эшселәр ҡарамағына ҡалдырҙы.

Крәҫтиәндәр уны яҡшы ҡаршыланы. Кинйәләр менән, батша яҡлы ла түгел кеүек. иҙмәнеләр ҙә. Хәйләкәр. Тәүге ҡуҙғалыш бит әле, икеләнәме?

Бикеш, Бүләк старшина отрядтары менән бергә Ҡасҡын ҡалған кешеләрҙе тупланы. 14 тупты алды. Бөтә дары, йәҙрә. 30 мең ум көмөш аҡсаны.

– Аҡса документтарын ни эшләтәбеҙ? – тине Ҡасҡын.

– Яндырырға!

Шулай бурыс купчийҙары, векселдәр – бөтә е янды.

Ҡасҡын тупланған көстө Вознесенкийға оҙатты.

– Үҙебеҙ күп түгел. Күмәк яҡшыраҡ булыр. – Бөгөлсән аша. Ике завод кешеләре бер-бере е менән бик тиҙ аңлаштылар. Көс тә, ҡорал да артты.

Икенсе көндө Ҡасҡын үҙе лә килеп етте.

Пугачевтың уйҙары киләсәкте айҡаны.

– Шунда ҡорал, йәғни яңыларҙы эшләп буламы?

– Була.

– Кем? – Баш боласы Кинйәгә ҡараны. – инең ерҙәр ҙә ә, әйт.

Грязновҡа ла ҡараш төбәне. Юҡ, ултыра буламы уң заводта. Ул аңлап:

– Бына, Беспалов, – тине. Батша йәнләнә төштө.

[1] *Туманов Григорий – Воскресенский заводының крәҫтиәне, б. к. атаманы, Иван Грязновтың ярҙамсы ы. Тылмас, б. к. Хәрби коллегия повытчигы (письменных дел производитель).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 113



– Завод начальнигы ҡулына указ бирермен. Миңә гаубицалар, единорогтар, мортирҙар, йәҙрәләр кәрәк. Күп кәрәк!

– Беспаловтың үҙен генә ебәрергәме? Грязнов та ҡайтыр. Шул яҡҡа эш...

Бергәләп өйләштеләр: Петров, Грязнов, Кинйә, Шоғаев. Пугачев Чумаковҡа:

– Артиллерия аҙ ти ең? Бына эшләтәбеҙ.

– Воскресенскийҙа туптар я ап була ти егеҙме?

Грязнов:

– Ник булма ын. Була. Беспалов... эште көйләр. Оҫта үҙе.

– Туптар ҡойорға!

Петров баш ҡаҡты. Кинйә лә улар хәлен белә. Дөрөҫләне.

Пугачевта теләк ҙур.

– Ә тағы ҡайҙа?

– Әүжәндә, Белоретта...

– Кемде ебәрәбеҙ?

– Воскресенға Беспаловты ҡайтарырға кәрәк. Оҫта кеше.

Ә Әүжәнгә? Хлопуша, үҙем барам, ти.

Шоғаев:

– Афанасий Соколов яҡшы булыр,– тигәйне.

Грязнов:

– Во! Тап үҙе.

– Белә еңме?

– Беләм дә ул. Эшләр.

Саҡыртып әйткәс, Хлопуша был хаҡта:

– Заводта складтар күп, мылтыҡтар. Бөтә е бар. Ебәрегеҙ. Дары кәрәкме, ҡурғашмы – килтерәм. Мужик бирер. Үҙен хужа итергә генә кәрәк, – тине уйсан ғына.

– Ә туптар бармы? – Пугачев аман төпсөнә.

– Бар. Яңыларын да я арға була.

– Эш ҡуш, тинең... иңә эш. Батшаңа хеҙмәт ит.

– Давай, а то... – Баш эйҙе.

– Хеҙмәт ит, полковник...

Ҡалай бик тиҙ! Ниндәй ҙур чин бирә! Тиҙҙән ундай чин Грязновҡа ла биреләсәк.

Грязнов:

– Мин бөтә заводтарҙы күтәрәм.

Пугачев Әүжәнгә лә, Белоретҡа ла указдар яҙырға ҡушты.

– Йыйынығыҙ!

Кинйә:

– Ҡай ы яҡҡа?

– Стәрле, унан Әүжән.

– Стәрлетамаҡҡа ғәскәр ебәреп, юл асырға ине. Ағиҙелдең тау яғынан.

– Әүжәнгә юлдар күп. ин Табын, Богоявлен аша бар. Унда дуҫтар ҙа күп.

– Эйе... Мин туҡтамам.

Пугачев ул яҡтар менән таныш булма а ла, юлды дөрөҫ айлай икәненә төшөндө.

– Эйе, унда Богданов сиреү туплай. инең ҡоҙаң Ораҡов. Унда – Төпәйев, Балтачев.

Сығып киткән ерҙән Пугачев Грязновты кире саҡыртып керетте.

Пугачев уға полковник чины бирҙе. Ваҡыт табып, Петров сыҡҡан саҡта Пугачев Грязнов менән Кинйәнән орашты. Был тыныс тәбиғәтле, уҡымышлы кешегә оҡшай. Петровты, Голицындарҙа булған, тигәс, ораны:

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 114



– Ышаныслымы?
Грязнов:
– Башымды киҫергә бирәм. Бына, уны Кинйә лә беләө.
– Эйе... Аксаковта эшләне.
Пугачев Петровты үҙ янында ҡалдырырға булды. Заводҡа башҡалары ҡайтыр.
Грязнов алып ҡайтты заводҡа. Беспалов вәғәҙә бирҙе, эшселәр шатланды. Ә Грязнов, Тумановты эйәртеп, ары юлланды. Стәрлегә уғылманы. Көсө аҙ. Табынға. Унан – Богоявлен, артабан – Архангел. Силәбе яҡыная...
Хлопуша ла бергә ҡуҙғалды. Уға бер нисә кеше бирелде. Заводтарҙа тапшырырға тип, ҡулына батша манифестарын тотторҙолар. Ул бынан Преображенскийға ҡарай китте.

***

Иртәгә енә Ҡасҡын амаров килде.
– Батшамы, юҡмы? – Икеләнеп ораны Ҡасҡын.
– Батша!
– Беҙҙекеме, түгелме?
– Беҙҙеке... Унда кем ҡалды?
– Бүләк, Бикеш йортауайҙар, – тине Ҡасҡын.
...Икенсе юлдан Стәрлебаш аша Ҡәнзәфәр Усаев[1] килде. Тәүҙә Өршәк буйлап үрләгәндәр. Мө абәт кәүҙәле, төлкө тун кейгән, яңаҡтары беленеп тора. Етди төҫлө. Күр тауышлы, тыныс тәбиғәтле кеүек.
Пугачев ҡаршы ына баҫты был, рапорт бирҙе.
– Рәхимле падиша ыбыҙ ағзам хәҙрәттәренә хеҙмәткә...
Боҙаяҙҙан поход старшина ы булып йөрөгән был сотникты Кинйә күптән белә. Үҙ ауылы кешеләрен яҡлап, байҙар менән яғалашып, губернаторға барып йөрөгән.
– Кем?
– Мулла. Кәрәк ә – мулла, сотник ҡылғанда – сотник.
– Ҡайҙан? – Пугачев йәнә төпсөндө.
– Өфө яғынан.
– Юл? Стәрлелә – Богданов, ҡоҙаң Ораҡов, – тине Ҡәнзәфәр Кинйәгә. – Түрәләр. Ғәскәр туплайҙар. Юл бикле...
– Көсөң аҙ.
– Бер төркөм бар ҙа.
– Булыр.
– Уны ы булмаймы.
Кинйә ҡарамағында. Унда писарь. Киләләр. Төрлө тарафтарға ебәреләләр.
...Яңыраҡ амарға атаман булып килгән крепостной Илья Арапов,[2] йәнәшенә Ставрополгә ҡалмыҡ Федор Дербетовты[3] ебәрҙеләр. Ҡазан яғынан татарҙар, мишәрҙәр килә.
Ә бына Әлибай[4] уң...
«Ул Ораҡовтың уң ҡулы, воеводаның ул ҡулы», – тип уйлай Кинйә.
Пугачев указын күсереп, уға үҙе хат ҡушып ебәргәйне. Юҡ, үҙҙе ыҡҡа алмаған, йә, серҙәш дуҫы...
Кинйә уға тағы хат яҙырға булды. Яҙырға ултырғас, уй... юҡ, бында хат менән

---

*[1] Усаев Ҡәнзәфәр – Нуғай даруға ы, Боҙаяҙ ауылы мишәре, мулла, б. к. бригадиры (баш полковнигы).*

*[2] Арапов Илья Федорович – Ырымбур алпауытының крепостной крәҫтиәне, б. к. атаманы.*

*[3] Дербетов Федор Иванович – Волга буйы ҡалмыҡ б. к. атаманы.*

*[4] Әлибай Мырҙағолов – Ҡырҡөйлө-Меңле олоҫо старшина ы, Нуғай даруға ында баш старшина, б. к. атаманы, Кинйәнең йәштән үк дуҫы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 115



генә эш бөтөрҙән түгел. Унда Әлибай ғынамы ни, Ораҡов та, Богданов та Стәрлелә ғәскәр туплайҙар. Уны туҙҙырыу фарыз. Башҡорттан, мишәрҙән ғәскәр йыйма ын Рейнсдорп ҡулына уғырға... Әлегә көс менән туҙҙырып булмай, шунда улар йыйғанды был яҡҡа ауҙарырға, тик был эште кем атҡарыр? Ҡасҡынғамы, Ҡәнзәфәргәме? Юҡ, Ораҡ, Әлибайға үҙ үтәрлек кеше кәрәк. Их, үҙе бар амы? Үҙенә арҡаланып өйләргә, туҙыҡа ы Ҡотлогилдене... Эйе... аҙыраҡ... еләү енде лә саҡыртырға кәрәк. Тик ҡайҙа ул, ҡай ы ерҙәрҙе ҡыҙырып йөрөй?

әм Кинйә уны алып ҡайтырға бик оҫта эҙбаҫар әҙәм ебәрҙе. Был ҡаҙаҡ иң яҡшы оҙон ҡолағынан кәм түгел. Уны ете ҡат ер аҫтынан эҙләп табыр.

7

Хлопуша менән Грязновты, Тумановты, Беспаловты оҙаттылар. Кинйә менән Петров бергә ҡалдылар. Күптәнге дуҫтар. Бер юғалтып, бер табышып, тағы осраштылар. Кинйә унан русса өйрәнде, аҡылын башына, тәжрибә ен күңеленә алды.

Петров:

– Бая инең менән китте бер башҡорт. Ул да килгәнме?

Кинйә:

– Килгән... Губернатор ебәргән. Бында ул.

Кинйә менән шунда баралар. Петров өндәште. Теге аңланы, яуап бирергә итә, теле юҡ.

– Кем киҫкән?

– Губернатор... күр әт ен. Тел еҙ ҙә, баш ыҙ ҙа ҡалыуҙарын аңларҙар, йәнә е.

Петров төкөрҙө, асыуы килде.

– Башҡорт телен генә киҫмәйҙәр. Ике йыл элек Мәскәүҙә ҙур бунт булды. Чума бунты. Кремлгә бәреп керҙеләр. Үлтереш, ҡырылыш та булды. Шул саҡ бик ныҡ набат ҡаҡтылар. уңынан кеше баштарын киҫтеләр. Шул рәттән колокол телен дә алдылар. Хатта колоколдыҡын да... Әле лә тел еҙ ул.

Кинйә:

– Еңергә ине лә, шундай хәлдәр бөт өн ине.

Петров:

– Еңеп ал аҡ, шундай тыныс, берҙәм булырбыҙ. Халыҡ асыҡмаҫ. Россия бай, бөтә е етеш булырлыҡ. Беҙҙәге кешеләр күндәм ул, тырыш халыҡ. Ирек кенә бир.

Татлы төш кеүек. Ләкин ябай. Булмаҫ тиерлек түгел.

– Еңеп булырмы уң?

– Еңербеҙ. Икеләнеп ятырға ярамай.

– Екатеринаның көсө күп.

– Ҡойолоп төшөргә тора ул.

– Ҡулда тоторҙар. Генералдар, алдаттар.

– Беҙҙең үҙебеҙҙә булыр. Бына ин... баш полковник. Ни ерең кәм генералдан. Эште атҡара ың. Рейнсдорп ойоштора алмағанды атҡарғанды күрә ең бит.

Пугачев килде. Янында адъютант Давилин.[1] аҡсылар. Улары арттараҡ.

– Ни хаҡта үҙ?

– Набат башня ын өйләйем. Мәскәүҙе.

Пугачев уны белмәй. Ә үҙгә ҡатнашырға теләй.

– Эйе, Питерҙа... Эйе, унда йөрөгән саҡтар бар ине. Ах, ул саҡтар!

Ярай, башҡаса үҙ оҙайтманы. Петров аҡтарманы. Юғи ә ул Голицындарҙа эшләгәндә Петербургта күҙ йомоп йөрөй ала ине. Петр Өсөнсөнөң әр ҡылығын белә. Бик уңай ыҙ хәлдә ҡалыр ине.

[1] *Давилин Еким – штаб-дежурный, даими дежур-майор, Пугачевтың адъютанты, «камергеры».*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 116



Ул ғына түгел, Перфильев та, Шоғаев та насар белмәйҙәр, Кинйә лә беләүҙ ул хаҡта түгел. Өндәшмәйҙәр. Үҙҙәре я ап ҡуйған батша.

Ғөмүмән, кеше шулай. Элек Алла тип тораташтар я ап ҡуйғандар. Таш икәнен белмәй түгел. Белгәндәр. Улай ти әң. Господь ти ә лә, Алла...

Ой, юҡ, тәүбә, тәүбә...

Пугачев унан заводтар тура ында ораша. Петров өйләй.

— Мин Вознесенский заводынан, Сиверстыҡы ул.

Пугачевтың уны ишеткәне бар.

— Ә барон...

— Эйе, граф фон Сиверс Карл Ефимович, аға ы Ревель губернияның вице-губернаторы.

— Шунан.

— Воскресенский, Преображенский...

— Ниңә унан килмәнеләр?

— Указ көтәләрҙер.

— Юҡ, минән ғәскәр барғанын көтәләр улар. Мин уларҙы...

— еҙ, государь, ғәскәр еҙ ҙә тыңлатыр ығыҙ. Батша саҡырғас, нисек килмә ендәр. Ғәскәрҙең башҡа эше бар.

— Яҙ указ.

Петров яҙҙы Сорокинға[1]. Илтеп бирҙеләр, матур итеп, ләкин әйтеп ҡуйҙылар: барма аң, казактар ебәрер, тип. Батша күрергә киләләр, ә ҡайтҡас тыңлай алмайҙар.

Петров менән йәнә оҙаҡ өйләшеп ултырҙы Пугачев. Ышаныслы кеүек. Петровтың аңлауынса, бөтә ҡала уратып алынған, иген, фураж инмәй. Шулай була уғышта, хатта эттәр, бесәйҙәргә саҡлы ашап бөтәләр. Бында ла шулай булыр. Күпме кеше... Унда дуҫтары, таныштары бар. Шунда Петр Рычков, шунда...

— Губернатор бында ебәргән бит, беҙ ҙә ебәрәйек.

— Ой, бик күп. Бәлки, хат яҙып...

Яҙҙы. Пугачев исеменән хаттар яҙҙы. Был хаҡта Кинйә лә уйлап йөрөй ине.

— ин үҙең ин, унда өйлә... — тине Кинйә Петровҡа.

— Эйе, бәлки...

Был хаҡта әйткәс, Пугачев уйлап алды.

— өйлә, күндер. Аҡ флаг күтәреп бар ҙа ҡапҡа астыр.

Кинйә лә, Петров та дәртләнеп ҡуйҙы. Хәйлә ҡорҙолар.

— Мин йәшерен-батырын ғына Богданов курьеры булып үтә алам. Әйтәйек, бесән йөктәре менән. Дүрт-биш йөккә юл бирә егеҙ, күрмәгәндәй булып, — тине Петров.

Богданов Павел курьеры... Ул — Өфө воевода ы, дөрөҫөрәге, воевода Борисовтың[2] товарищы-ярҙамсы ы, коллежский асессор, Стәрлетамаҡта ғәскәр туплай, тигәйнеләр. Йә шуның курьеры, йә бүтәнсә, уны ын үҙе самалар. Губернатор менән генә өйләшерлек, шунда үҙенә дуҫтар табыр. Ҡапҡа асыр...

Пугачев:

— Эшең барып сыҡма а, бер вылазкала тороп ҡалыр ың.

Кинйә уға Усман тылмастың улына яҙған кескәй яҙыуын бирҙе.

— Вылазка ваҡытында... Атын ҡапыл Аҡтүбәгә бор он, танырмын.

Петровты көттөләр. Вылазкалар булып тора. Ул-был юҡ, Петров үҙе лә, Усмандың улы Әмир ҙә күренмәй.

Бынан да ябырылып торалар. аҡмар ҡапҡа ына яп-яҡын ҡалалар, ләкин аҡ

---

[1] *Сорокин Назар Петрович — Кано-Никольский заводының приказчигы.*

[2] *Борисов Алексей Никифорович — надворный советник, полковник, Өфө воевода ы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 117



флаг юҡ. Башҡа ҡапҡалар янында ла юҡ. Кинйә үҙ тәңгәлендәге вылазка урындарын билдәләне. Шундағы уйпат урындар, йырындарға засадалар ҡуйҙы. Иртән баралар, кискә саҡлы буталыш. Йә арттан, йә флангынан сығалар.

Ҡапҡанан сыҡтылар. Шул саҡ ике яҡтан бәрҙеләр. Сыҡҡандары ҡастылар. Бер нисә е үлде, өсәү е башҡорт икән. Атмайҙар. Бүректәрен болғайҙар. Бере е Әмир ине.

Кинйәгә шунда уҡ барып етте. өйләтте. Петров барып еткән. Иҫән- ау йөрөй. Яҙыуҙы биреп киткән.

Әмирҙең йөҙө көл кеүек. Аслыҡ, ти. Төпәйевҡа ебәрергә иткәйнеләр. Бүтәнде табырҙар.

– Миңә, Дим буйлап барырға, тигәйнеләр. Ул да шунан китер.

Кинйә:

– иңә лә эш муйындан.

– Хеҙмәт итермен.

– ин ҡайтып атайыңдан хәл бел. Унан кил. Бында эш күп.

Пугачев приступҡа шәхсән әҙерләнә. Кейенеп, әҙерләнеп сыҡҡан. Атамандарҙы саҡырҙы.

Кинйә уға ҡарай, кафтан эсенән тимер күлдәге күренә. Нәҡ үҙе биргәне.

Пугачев ҡарашын иҙеп әйтеп ҡуйҙы:

– Ҙурыраҡ. Атайың ҙур кәүҙәле булған, эйеме?

– Батыр ине. иңә алдан йөрөргә кәрәкмәй.

– Батшаға пуля теймәй, ҡылыс үтмәй...

Быны ын фәстереп әйт ә лә, алдан барырға, ысынлап та, ынтыла. Үҙем алдан ынтылма ам, мине анламаҫтар, тип уйлайҙыр.

Пугачев алға сыҡты. Кинйә әлегә урынында, алыҫ түгел.

Ҡуҙғалдылар. Ҡапыл ҡала стена ынан аттылар. Унан икенсе ҡапҡа ла ҡалаға яҡын. Ҡапҡанан сыҡтылар. Ҡылысҡа – ҡылыс. Кинйә тәңгәлендә дошман күп ине. Ҡыҫа башланылар. Кинйә алға ташланды, юҡ, алдаттар күп. Офицерҙар. Ҡара а, улдан – казактар. Ярҙамға барҙылар. Пугачев – алда. Кинйә бер төркөмдө уратып алды. Ҡалғандары сигенеп, ҡалаға етеп, инеп бикләнде.

Кинйә төркөмдө әсир итеп, Пугачев станына барҙы. Пугачев сыҡты эргә енә.

– ин ниңә алға ташландың? – тине Кинйә.

– Шун ыҙ булмай. Ҡыҫтылар бит.

– Ә үҙең уң? Ниңә?..

– Миңә ярай ул... – ти Пугачев.

– ин – батша.

– Ә ин минең ҡанатым. Бере е – Зарубин, ә икенсе е – ин. Россия императоры ике ҡанатлы ул. Гербты ҡара. Ике ҡанатлы бөркөт. Белдеңме? Мин дә ыңар ҡанат менән оса алмам.

Әсирҙәрҙе Пугачев алдына килтерҙеләр, тубыҡландырҙылар. Емельян зә әр ҡарап, хәтәр әр[1] яуҙарҙы.

– еҙ нимә, үҙ батшағыҙға ҡаршымы?

– Ҡуштылар бит. Тегендә күп әле. Ә беҙ – хеҙмәттә.

Быларҙың ҡай ылары Әлмәкәй менән килгән, ҡай ыларын йә Балтас, йә Мәндей килтергән.

8

Батша ҡушты.

Ата ы ебәрҙе. Батша анаты.

– Ил ағаларына ян фарман алып китә ең, – тине.

[1] *Әр – асыуланып, әрләп әйткән үҙ.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 118



Борон да уғыш ваҡытында ғәскәр йыйыу өсөн уҡ ебәргәндәр, хәҙер и ә батша курьеры ҡулына бирелгән ҡағыҙ тышына ҡауыр ын бәйләп ҡуялар. Сенат та, губернатор ҙа шулай ебәрә. Улар тиҙ йөрөй. Ян фарман килтергән сапҡындан кәм түгел. Ә еләү ен шәп йөрөр, эш эшләп йөрөр. Халыҡты яуға күтәреп, көрәшкә әйҙәп.

еләү енгә йәнәш Буранбикә ыбай бара. Был юлы ҡалманы шул. Үҙенең яғына барып сығыу ихтималын әйткәс, эйәрҙе.

— Бына аҡмар нисек аға, — тине ул хисләнеп.

Ҡатыны эсәр ыуҙары булғас, үҙ ыуының ҡайҙа ҡойғанын күрҙе, хәҙер буйлатып бара, тик заманы тыныс түгел. Йәш ҡатын эшеме? Ләкин ул кейгән кейем? иҙгәне иҙә, иҙмәгәне юҡ.

аҡлана инде былай.

Ә еләү енгә Ҡарғалыла туҡталмай булмаҫ. Үҙе ғилем тәхсил[1] иткән мәҙрәсә, мөғәлимдәр, остазы Ғәбдессәләм — ошонда.

Уңай ыҙыраҡ. еләү ен мулла үҙе яу-яраҡтар аҫҡан, ә бына йәш оҫтабикә ат өҫтөндә. Ләкин Буранбикә ҡалманы. Үткән айҙа ире батшаны ҡаршылап, башҡорттарға беренсе манифест алырға килгәндә еләү ен эйәртмәне, сөнки ҡайны ы ла юл ҡуймағайны.

Әле ҡала буламы... Алла аҡла ын. Үҙенә атып тор алар ҙа, үлеш бул а ла, оло сиреүҙә ис ни булмаҫ, ә бына ире әллә ҡайҙа китә... Юлда ниҙәр генә булмай.

Отрядта — Ҡарағужа ауылы, Айыттың[2] элекке ҡасҡындары, еләү ендең үҙе менән бергә бәктәр булып уйнап үҫкән ир-егеттәр.

Ҡарғалы ҡасаба ында уны-быны ораштылар. Мәҙрәсә хөжрәләре буш, шәкерттәр, талиптар таралған. Ҡай ы яуҙа, ҡай ы ҡайҙа. Ҡарттар ғына сүтерләшеп ултыра. Улар ҙа яу хаҡында, үҙҙәренең батша ы хаҡында әңгәмәләшә, буғай.

Әйтеп алды: «Батша фарманын уҡыйым». Уҡыны. Уҡыған уғыл атанан оло шул.

— Ата ы ла ғалим кеше — Кинйә абыҙ, — тине кемдер.

Салан-сарпы ғына ишетелде бер мулланың хәбәре:

— Олуғ император ғәзиме бадиша ымыҙ хәҙрәттәренең йәш бә леүәнде йөҙ ҡәҙәрә ен ҡылыстан кисергән, тип ишеттек. Раҫ үҙме?

— Дөрөҫ. уғыш бит.

Ғәбдессәләм:

— ижрәттең ошбу бер мең дә бер йөҙ туҡ анынсы сәнәсендә[3] Алла Тәғәләбеҙ беҙләргә ниндәй мәрхәмәт ебәрер. Зобанийҙар[4] ишәймә ә, — тине. — Беҙҙең Мөхәммәт мөьминдәренә яңы бәлә-ҡаза килмә ә...

Бер ҙә мәслихәт тимәй.

— Мин халыҡтың ҙур-ҙур яуҙарына ша ит, — тип өҫтәне Ғәбдессәләм. — Әммә шә иттәр[5] күп булды.

Аттар ашағансы, үҙҙәре сәй эсте.

— Торғай шә әрен мохасара[1] ҡылдынғыҙ. Алып булмаҫ. Борон ундай эшкә мәнжәних[2] я ап истиғмал[3] иткәндәр, таш атҡандар. Әле туптар ата, яҡын барыш ағыр.

аҡмар ҡала ын үткәс, еләү ен сотник үҙенең төркөмө менән йылға үренә табан

---

*[1] Тәхсил — ғилем алыу.*
*[2] Айыт — ҡасҡын, каторжан, еләү ен янында йөрөй.*
*[3] Сәнә (ғәр.) — йыл.*
*[4] Зобанийҙар — тамуҡта кешеләрҙе язалаусылар (автор үҙлегенән).*
*[5] Шә ит — ҡорбан.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 119



китте. Уйланды: «Стәрлетамаҡ юлы тыныс түгел.  алдаттар йөрөп тора. Был бәләкәй төркөм менән имен йөрөп булмаç... Ә  аҡмар буйында башҡорт ауылдары, нуғайҙарҙан ҡалған Ҡундрау татарҙары күп».

Шуларҙа батша указын уҡып, бер төркөм тупланы ла Ырымбурға табан оҙатты.

— Ҡай ы Ырымбурға? — Шулай тинеңме, был ваҡытта уны өсәү тип беләләр. Ур тамағы... Орскиҙа, Ҡыҙылтауҙа  әм...

— Өсөнсө өн Яйыҡ тамағына Неплюев  алғанына.

— Ә Торғай ҡалаға...

Батша указын уҡығас, уны батша  анаты, тип атанылар. Шул хәбәр уларҙың үҙҙәренән алда тарала торҙо. Ләкин яҡшы ла, яман да бер юлдан йөрөй.

Ҡара батша бағиҙары[4] килә, тигәне лә бер ҡатар ишетелә.

Заводтар алыç.  алдаттар күренмәй ине. Шулай ҙа  алдаттармы, берәй старшина сиреүеме килеп сығыуы бар.

Бер ауыл ситендә туҡтанылар.

Айыт ебәргән бере е ауылда карат[5]  алдаттар барын әйтте. Күреп ҡалған да  иҙҙермәй килгән. Сослоҡ,  иҙгерлек бар уларҙа. Ни ти әң дә, ҡасҡын  әләте бар. Есте  иҙәләр, килештерә беләләр.

— Егеттәр! — Үҙе ғәҙәт буйынса кәләшенә ҡарап алды. Ҡурҡмаймы, бындамы?..

 еләү енден был  үҙе әҙерләнергә ҡушыу ине. Шунда уҡ яçҡынып, аттар янына килделәр, эйәр айылдары тартылды, ҡойошҡан ҡаптырылды.  өңгө әҙер, ян да.

Сотник мулланың әйтеүе буйынса кәртә-ҡура янына килделәр. Бында йәшеренеп, бынан уҡ яуҙырып була.

 еләү ен эргә ендәге Айытҡа ымланы.

— Бына ул, бына... Өсәүләп барып ҡарағыҙ. Бәйлән әләр, бирегә эйәртегеҙ.

Ауыл урта ына староста сыҡты, уларҙы алты  алдат уратып алды. Айыт,  ис ни булмағандай, башын ҡурҡаҡҡа  алды.

— Бәй, бәй... Нинә тейә егеҙ? Беҙ боласымы ни? Беҙ үҙебеҙ ҡастыҡ уларҙан.

— Ҡайҙалар?

—  әй, китеп баралар. Тегеләй. — Ҡайҙа китеүҙәрен ҡарайбыҙ тип барғанда, кәртә-ҡура артынан  өңгө тотоп сыҡҡан егеттәр староста менән  алдаттарҙы уратып алды. Сержанты ҡылыс сығарғайны, Айыт уның ҡулын тотоп, шаҡарып алды. Ярҙам итергә тип ҡуҙғалырға иткән  алдаттарға ҡыçҡа  өңгөләр тоçҡалды.

Ҡоралдарын ергә ташларға тура килде тегеләргә.

— Ә ә, былар ярап тора ул хәҙер, — тине Айыт.

Сержанттың да,  алдаттарҙың да ҡулдарын бәйләгәс, староста келәтенә яптылар. Ауыл кешеләре ҡатнашманы. Староста  ис ҡаршы өндәшмәне. Бәлки, ул  алдаттар ҡурҡынысынан  уң шатланғандыр ҙа әле.

Халыҡ йыйылды.

— Көллөгөҙ кил ен, батша манифесын уҡыйбыҙ, — тине  еләү ен.

— Ә  инме ни уның  анаты?!.[1]

Тәүҙә мулла-сотник:

— Йәмәғәт, тынысланығыҙ, бадишах хәҙрәттәре  аулығына доға ҡылабыҙ, — тигәс, шаулатып бер Ҡөрьән аяты уҡып алды ла доға ҡылды  әм уның батша тәхетен юллауға сығыуын әйтте.

---

[1] *Мохасара — ҡамалыш, блокада.*
[2] *Мәнжәних — таш атыу машина ы (автор  үҙлегенән).*
[3] *Истиғмал — ҡулланыш, файҙаланыш.*
[4] *Бағи — баш күтәреүсе, бунтовщик (автор  үҙлегенән).*
[5] *Карат — карательный тигән  үҙҙән.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 120



— Ҡарасы... Мулла кеүек бит был анат.
Тыңланылар.
— ин беҙгә уның указын уҡы, манаписын.[2]
еләү ен уҡый башланы.
«Император ғәли йәнәптәре Петр Федорович указының ҡеүәтенсә...”
— Бәй, үҙе яҙмағанмы ни? — тине ауылдағыларҙың бере е.
Икенсе е:
— Ә ин уның анаттары юҡ ти еңме, бисырҙары күптер.
еләү ен уҡып бөттө, аңлатты. Бөтә е — улар теләгәнсә, сөнки улар ишетеп өлгөргәндәр, имеш.
— Быларын ишеттек... Кем тамға алған? — тип ораны староста.
еләү ен ғорурлыҡ менән:
— Баш полковник Кинйә Арыҫланов, Петр Федорович батшаның анаты,— тине.
Староста:
— Ә, Кинйә абыҙ булғас, хаҡты раҫлар.
— Үҙебеҙҙеке шул. Башлы ил аға ы. Ана бит, улы ла ҡулына ҡаурый тота белгән. Хур булмаҫ.
Шунан китте орашыу, белешеү. Үҙен күрҙеңме лә ҡулын үптеңме, мәрхәмәтешәфҡәте бармы ла сиреү көсө ҙурмы... еләү ен генә түгел, янындағы егеттәре Әбеш, Тайсура ла, Айыт та. Бер үҙҙе өйләргә оҫтарып алғайнылар инде.
— әммәгеҙ уға бағынығыҙ, — ти еләү ен.
Ә янындағы Айыт:
— Кем ҡаршы — батшанан өмөт көтмәгеҙ. Улар ҡаты ҡуллы була, — тип йөпләне.
әр биш йорттан — бер яугир. Ҡушар ат, батша сиреүенә аҙыҡ. Бөгөн үк — юлға.
Ә бер йор әҙәм, араларында берәү енең толомо йәшеренгән, танау аҫтына төк үҫмәгән нәҙек тауышлы булыуын шәйләп, хихылдап алды:
— Батша йәш бисәләрҙе әрмегә аламы? — тип ораны.
— Ала, теләгәндәрҙе.
Буранбикә:
— Ҡурҡаҡ булма а, — тип өҫтәне.
Шулай уйын үҙҙәр бул а ла, былдай ваҡытта халыҡ ғәм еҙ түгел. Әҙерҙәр, ала ын алып, йыйына ы ғына. Ылауҙар тейәлә, аттар эйәрләнә, азаматтар яраҡлана.
Ауылдың мулла ына:
— ин халыҡҡа белем бирҙең! — Шулай тип ҡулына билет яҙып бирҙе, юлда үтергә, ис тоҡтар ыҙ, хәүеф еҙ йөрөргә, ә юлда — пикеттар, аҡсылар, яугирҙар. Әлбиттә, карателдәргә күр әтмәҫкә, улар тирә ендә күҙең асыҡ бул ын, батша манаписын ныҡ йәшерергә тейештәр.
еләү ен үҙенең ике егетен биреп, ошонда йыйылған төркөм менән әсир алдаттарҙы батшаға тапшырырға ҡушты.
— Баш оноп бар ағыҙ, ирек бирер. Уға хеҙмәт ит әгеҙ, — тине ул әсирҙәргә, — әммә!.. Белегеҙ уны!
Юлда бер төркөм башҡорттар осраны.
Таналыҡ крепосына йыйғандар ҙа Верхне-Озерныйға бригадир Корф ҡарамағына оҙаталар икән. Үрге дистанцияла сик буйын аҡларға тип.
орашып белделәр. Батша яраны икәнен ишеткәс, ҡулында яҙыуын күргәс:
— Курф балгадирға барамыҙ, — тиҙәр.

[1] анат — сенатор (автор үҙлегенән).
[2] Манапис — манифест.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 121



— Беҙҙе үҙенә ҡуш, — тинеләр.

еләү ен алды. Үҙ төркөмөн ҙурайтыу яғын да онотмай ул. Ауылдан-ауылға, йәйләүҙән-йәйләүгә ингәндә гелән шулай булды. Буранбикә орашты:

— Беҙгә алыҫмы әле?

— Күп әле, — еләү енден яуабы билдә еҙерәк юҫыҡта әйтелде.

— Ҡасан етәбеҙ? Әсәйемде күргем килә.

— Улай а, шунда ҡалып торор оң, — тине ире.

— Ай- ай, инән ҡала буламы?

— Оҫтабикәгә яу сабыу килешәме уң?

— Оҫтабикә, имеш. Түр башында ултырғаным бармы?

«Йә Ташлыла, йә әсәйем янында ҡалдырырмын», — тип күңеленә алып ҡуйҙы ире.

Ҡарағужа ауылына етәрәк, Буранбикә тирә-йүнде йотлоғоп ҡараны. Бына уларҙың ятраҡан Елтеймәҫ тауы, Буранбикә ыуы. Ҡасан ғына ошонда яр ып киләләр ине. Был ерҙәр еләү енгә лә яҡын. Бына тирәктәр. Мауығып булмай. Аръяғында мал тоталар ине. Әле ыйырҙар мөңрәүе ишетелә, ләкин йәнлелек юҡ. Яу шауҡымы еткәндер.

Бында еләү ен ағайып торманы. Үҙ сиреүе менән ауылға инде. Ләкин бында ла атҡа атланғандар, ҡорал-ярактарын аҫҡандар күп икән. Үтеп- үтеп йөрөйҙәр. Ләкин еләү ен егеттәренә йоғонманылар, уларҙан тайшаныу ҙа юҡ. Башҡорт башҡортҡа теймәй, тиҙәрҙер.

еләү ен сиреүҙе ауыл янында ҡалдырҙы. Айыт та ҡалды. Үҙҙәре туп-тура атай йортона ашыҡты. Ҡайны ы сырхап ята ине. Кейәүен күреүгә асыуы булмаҫ та ине. Ошондай ваҡытта ҡыҙы ла килгән. Эйәрткән бит. Шуға бер ажғырып алды ла ҡалҡынып:

— еҙ иҫәнме ни?

Әсә е үҙгә ҡыҫылды, ҡартын орошто:

— Йүнләп өйләш әң булмаймы?

— Ә, бағи батша янаралымы?

— Ыҫылдамасы.

— Атай! — Буранбикә асыу менән ҡараны ла әсә ен ҡосаҡланы.

еләү ен ҡорал-ярактарын алды. Ҡайны ының ҡаршы ына килде.

— Бына, килдем... Оҡшама ам — инең ҡулында.

Ҡарағужа алға атланы, кейәүе ҡарашынан туҡталды.

— Ултыр, кейәү ең бит. Башта ҡунаҡ бул. — Ым менән генә ҡымыҙ килтертте.

— Мине сотник ти ең, мин мулла бит әле... Тә әрәт алып, намаҙ уҡый ым бар. ин дә мосолман ың, әйҙә, бергә...

— Эйе, эйе...

Тә әрәт алып кереүгә намаҙлыҡ йәйелгәйне. Йәнәш тора намаҙ уҡынылар.

Эстеләр, ашанылар.

— Хәҙер, бына, губернаторға оҙат ам да була.

— Беҙ уны ҡала ына ябып ҡуйҙыҡ үҙен. Губернатор бикле. Ҡамауҙа. — еләү ен көлдө. — Миңә сиреүең етмәҫ.

— Етер, мин — йортауай! Бөтә иләүем килә.

еләү ен:

— Йый яугирҙарыңды. Бына бит, тот мине. Ҡаршылыҡ юҡ. Оҙат батшаға.

— Губернаторға.

Йыя ын йыйған икән, арлы-бирле сыҡҡан арала еләү енден бер нисә кеше ен тотоп, бәйләп тә алғандар. Айыт иҙеп ҡалғас, ағайырға ҡушҡан, әммә, ҡотҡарырға барыу ғауға күтәрмәҫме тип, хәбәр иткән.

еләү ен:

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 122



– Яңылыш ҡушҡан ың, ҡайным! – тине.

Ҡыҙы:

– Шулай ҡаршылауыңмы, атай? – тип яҡынайҙы ла янында ятҡан ҡылысын тартып алды, хатта ҡынынан сығара бирҙе.

– Бир, ҡыҙым!

– Яуға – яу, атай. Барып, аҡсыларыңды үҙем тураҡлайым.

Буранбикә Айыт янына сығып йүгерҙе.

Ҡарағужа ажғырып ебәрҙе.

– Ултыр, ҡунаҡ бул аң – ҡурҡаҡ бул... – Үҙе ултырҙы. – Ҡыҙым... инең батырлығың юғалмаған. Унда... Бына ин бар... Был сиреүҙе юҡҡа йыйманым. Илдән ҡалмаҫ инем, сырхаумын, ә ин башҡа ырыу кеше е, тигәйнем. Үҙемдең улым юҡ...

– Ҡыҙың алып барыр.

– Ә ул... ул. Ҡарағужа ҡыҙы ул!

Буранбикә килеп керҙе.

Барған да: “Мин – Ҡарағужа ҡыҙы, бына уның ҡылысы”, – тип елтәп алған. “Мин ҡушам, тыңлаң, – тине, аҡсыларҙы этеп ебәрҙе, үҙе систе. – Был сиреүгә йоғона ы булмаң. ыйлаң ҡунаҡтарҙы. Ҡымыҙҙары ямаҡ, тимә ендәр!”

Бөтә е киткәс, ҡыҙ ҡайтты.

– ин ни ҡылдың?

– Ҡуштым, байрам ит ендәр. Егеттәрҙең аҡылы етмә ә, үҙем.

Иртән Буранбикә йыйына. еләү ен менән икәү ҡарап сығалар. Ҡарағужа ат өҫтөнә үҙен ултырттыра саҡ-саҡ.

– Ата-баба юлын ҡыу... Иҫәнғаҙы юлын Алдар батыр ҡыуҙы, Күсем батыр юлын – Аҡай. Ә ин, Арыҫлан батыр ейәне, Кинйә ҡа арман улы бул...

– Амин. Рәхмәт изге теләгеңә.

Ҙурланы-ҙурланы ла:

– Ә минең сиреүҙе... – Тағы бер тиҫкәреләнеп алма а, унынса булмай, йәнә е. Алтынбай әйҙәт ен, ти ә ни була ла, юҡ әйтмәне...

Ҡыҙы тәүәккәл шулай ҙа:

– Үҙем алып барам, – тимә енме.

еләү ен алға баҫты. Киттеләр. Преображенский заводы – бошман-ҡыпсаҡтар ерендә. Ырыуҙаштары ярҙам итер, өйләшеүе еңел булыр. Завод тирәләрен яңы батшаға бағындырыр. Унда батыр йөрәкле кешеләр аҙ түгел. Хәҙер был ҙур отряд менән Покровка, Кано-Никольск заводтарына ла барырға иҫәбе. Унда эшле рус крәҫтиәндәре, башҡорт ауылдары күп.

***

Йылайырҙар борон-борондан уҫал халыҡ. Хатта Аҡ аҡ Тимерҙең иң көслө дошмандары. Уларҙы ҡырған, ҡалдығын төрлө олоҫтарға тараҡкан. Шул саҡта ҡасып килгәндәр. Улар әле лә асыулы. Күндерә бел әң, батшаға хеҙмәт итә беләрҙәр.

Шуларға йүнәлгәндә сапҡын ҡыуып етте. Ата ы ебәрткән. Ай, был эҙбаҫар!.. Эҙгә төшөп алған да, орашып-белешеп, уй-сама ҡороп эҙләп килгән. Ырымбур янына бергә боролдолар.

Шул көндө үк Покровка заводында бер төркөм осраны. Уның башлығын еләү ен күргәне юҡ. Шөкәт еҙ әҙәм. « аҡ булырға!»

Эҙбаҫар таный икән. Айыт та таный, имеш. Алға сыҡты. Ҡасандыр бергәләп Воскресен янында. Ләкин...

– Ҡайҙа хазина? – тип ораны теге әҙәм.

– Бул а, былай йөрөр инекме?

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 123



– Хәҙер заводтың үҙенә барып алабыҙ.

Хлопуша заводтарға барам, ти.

еләү ен:

– Дөрөҫ, мин дә шунда йүнәлгәйнем, шунда барырға ине. Атай саҡырта...

– Бергә йөрөр инек.

еләү ен:

– Мин бөтә ендә булғаным бар.

– Уны ы... Мин Уралдағы заводтарҙы ғына түгел, әр уҡмаҡты беләм.

Ниндәй эштә йөрөгәнен иҙә еләү ен.

– Мал күп йыйған ындыр.

– Йыйҙым... Тимашевҡа... Демидовҡа... каторгала...

Айырылышалар.

***

...Хлопуша яҫы маңлай, тулы бит, шаҙра – нәҡ үҙе! Айыт танының ла алғараҡ сыҡты. Күҙҙәре яна. Яға ынан эләктерәм тигәндәй, бармаҡтары тырпайған. Хлопуша ла уны танының. Ҡарашып торҙолар. еләү ен ниҙер иҙҙе.

– Туҡта, Айыт ағай! – тип еләү ен аңына килтерҙе әм, беләгенән тотоп, үҙе килеп иҫәнләште.

– Мин – еләү ен. Батша ҡушҡанға, атайым ебәрҙе.

– Эйе, Кинзин, бергә барырға тейешбеҙ.

– Юлдар бер, тимәк.

Шунан әйтте Хлопуша:

– Анау кешең миңә таныш. Күрешергә теләгәйне. Туҡтаттың. Кил әле.

– Эй, ин!

– Ҡулыңды бир тәүҙә. аумы?

Айыт килде, ләкин ҡул бирмәне.

– Ҡайҙа теге нәмәләр? – тип ораны Айыт.

– Ә, алтын... көмөшмө? Батшаға илттем.

– Алдай ың!

– Алда ам, былай йөрөмәҫ инем. Бына, – ҡулын күр әтә. Йоҙроҡ янында быҒау эҙҙәре. Уны күр әтмә әң дә аңлап булырлыҡ. Танау япраҡтары өҙөлгән. Маңлайында эҙҙәр. Тамғалар юйылған.

Башҡа ваҡытта уғышырҙар ине. Кем кемде еңер? Әле туҡталдылар. еләү ен ораны – Айыт йәшермәне: «Бергә ҡандала управляющийҙы беҙ ҡыйҙыҡ».

– Килештегеҙ бит.

– әй, Аитка. Был эш тегенең ишеме! Ул саҡ... Тьфу.

– Әйт, теге ваҡыт шул баҡырҙар ғына булмаған бит.

Хлопуша ла онота алмай теге ваҡыттағы ғәрлеген.

– Көмөш тә күп ине. Алтын да. Ағас аяҡка алдым. Шунан үҙем таландым. Тағы төрмә...

Йәл булды Айытҡа Хлопуша.

– Әйт ин, шул әҙәмде осрат аң. Табырға кәрәк уны.

– Алйот! Алтын-көмөш ҡайғы ымы хәҙер. Сүп ул. Батшаны тотоп килтер, тинеләр.

Айыт ышанып етмәй. Был юлбаҫар, каторжан. Тиктәҫкә түгел... Ә мин... Мин үҙ ерем өсөн... Ә ул? Уның да үҙ үсе, үҙ юлы бар.

9

Айым[1] моңайып ҡалды. Ире лә, улы ла – китте. (Уймаҡ ауыҙ, йөҙө балҡып тора ине. Йоҡа ирен, ҡашы дуғалы, ҡыйғас.)

Улы әләүек[2] инде. Уға ҡарап тора.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 124



– Тауға күсәйек, – ти әләүек. Айым ҡарап тора. еләү ен түгел, ул ата ы уғышҡа киткәс, улай тимәне.

уғышҡа киткәндә лә улай уҡ түгел ине. Сәсән бар ине. Улы йүн тапты, ә быны- ы мал-тыуар ҡарармы?

Үҙе генә түгел. Әлиә е[3] өсөн дә ҡайғыра. Күс әк ни... Батырша яуында күстеләр бит. Әле шунан яманыраҡ. Унда килен ине. Юҡ, унда ла ярҙамсы ыҙ булмаған. Ынйыҡай, Аҡтуған бар ине. Фәрештә ебәргән кеүек Төҙөнбикә, Алпар килде. Ә ҡәйнә е китмәне.

Торҙолар. Унда ла атлыҡ еҙнә е килеп, ҡәйнә ен үлтерҙеләр. Ауылды яндырҙылар.

Миңә лә шул көн килер. Шулай ҡайғыр а ла, ул-был юҡ. Халыҡ борсолоп ал а ла, ҡыуанып та ала.

– Батша килгән! – тиҙәр. Йөҙҙәр башҡаса, ҡайҙалыр ынтылалар, оло юлда елдереп үтеп китәләр, сабауыл-маҙар юҡ, завод мужиктары ла зарланмай хәҙер. Тормош ниндәйҙер бүтән, яҡшыраҡмы, яҡтыраҡмы – бүтән тормош килгән төҫлө.

– Батша килгән! – тиҙәр.

Ниндәй батшалыр, Айымға ла, Ынйыҡайға ла аңлашылмай. Элек гел батшаға ҡаршы яу сапҡандар, әле шуны яҡлап уғыш, имеш. Был ниткән баш ыҙ ирҙәр ул? Баштарына тай типкән микән, ти. Улай ти ә, ире уң?

Малай ғына улы ла:

– Мин дә китәм, – ай, яҫҡыған була. Көл дә, ила ла. Танау аҫты ла кипмәгән бит әле.

Халыҡ үҙенә йүнле көн яулап ҡуҙғалды ымаҡ. Мәғәнә е генә булырмы?

Аға ы Бикбулатҡа ышанмай ышаныуын, шулай ҙа бер көн килгәнендә шом ҡалды.

– Кейәү батшаға ярай белгән, – тип көлдө.

– Ниңә?

– Дәү түрә итеп ҡуйған бит үҙен.

– Ҡуй а ни.

– Бисә батшаға хеҙмәт итеп ярамағас, ир батшаға ҡол булайым, тигәндер, тим.

Ҡайҙа инде ул элекке кеүек сәхтиән итектәр, нағышлы камзулдар кейеү.

Көләр инде. Ҡайнаға була тороп, ғүмер буйы үсәне Кинйә ен.

– Үлеүен көҫәй еңдер инде, – тип әсенде Айым.

– Бәй, үҙе шуға уҡтала ул. Белмәй микән ни батша тип табынғаны бер баға бит, ҡасҡалаҡ. Далала ас бүре йөрөп ята инде. Ябағаны атҡа анай ул. Әҙәм рәтле кешеләр уға йә дәғи, йә Ҡара батша тиҙәр. Бына, йүне бөт ә, ташлап ҡасыр. Шунан Кинйә кейәүебеҙҙе... Билдәле инде.

– Кит, ис мәрхәмәтең юҡ миңә, – тине Айым.

Килгән айын шулай әрнеүле күңелгә тоҙ алып китә. Ярай әле, ата ы хәҙер дошман түгел. Көҫәпәй ҙә.

Ата ы Аптыраҡ менән ҡусты ы Көҫәпәй килде. Тынысландырған булалар. Былар йүнле әҙәмдәр шул. Хәлен белештеләр.

– Еҙнәңә ярҙам ит. Кешеләр ебәр, – Айым Көҫәпәйгә өндәште.

– Бөтә ен алып китте.

---

[1] *Айым – Кинйәнең ҡатыны.*
[2] *әләүек Кинйин – Кинйәнең кесе улы.*
[3] *Әлиә Ораҡова – Кинйәнең ҡыҙы, кенәз Ташбулат Ораҡовтың ҡатыны.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 125



– Аттар кəрəктер.
– Ул тапмай буламы?
– ис юғы өңгөлəр, уҡтар əҙерлəп ебəрер инең.
Ата ы көлөп ҡуйҙы. Ҡыҙы еңел уйлай... Уйла а, ҡыпсаҡтар уҡты күп ала тигəнде белə. Борон-борондан шулайҙыр. Ҡыпсаҡ кеше енең хыялында төнгө күк йөҙө лə – ҙур уҡ ауыты, ə йондоҙҙар иҫəп еҙ-хисап ыҙ уҡтар булып йəйелгəн. Кинйə енə лə шулай күп кəрəк, тиҙер.
Улы əлəүек аңламай, сыбыҡтар күр əтте.
– Бына, əсəй, үҙем юнам əм күп, күп итеп əҙерлəйем.
Үҙе генə түгел, ҡыҙы өсөн дə ҡайғыра əсə. Ə бер ваҡыт Кинйə ен көн дə ауыл осона сығып көттө. Əле лə көтөр. Ынйыҡайҙы үҙ янына саҡырҙы.
Əле лə ярҙамсы ыҙ түгел икəн. Бер көндө Юрматынан мəрхүм ҡəйнə е Аҫылбикəнең ҡусты ы килде.
Был кеселəре, лəкин Кинйəнəн өлкəн. Быуайыным[1] тип ярата ине. Хəл белергə килгəн.
– Килен, хəлдəрең нисек?
өйлəй, а -зары күп.
– Борсолма, беҙ бар бит.
Фəрештə ҡанаты...
Бар. Төрки донъяла ир-егет үҙеме, унын балаларымы, ауыр хəлгə төшкəндə əсə яғы – түркен яғы ярҙам итə, үҙ ҡанаты аҫтына ала. Фəрештə ҡанатынан кəм түгел.
– Ҡустың йортауай булып ҡалды. Ситкə тибəрмəҫ, – ти, үҙе серле ҡарай, ынай.
– Ул тибəрмəҫ тə... Минең түркен[2] армытым...
– Йоланы анламайҙар.
Быны белəлəр, күреп торалар.
Ағиҙел буйында юрматылар. уҡайлы, Юрматы буйында ла. Ə Ашҡаҙар үрендə Аҫылғужа быуайы утары. Ҡазбулат яҡын. Кинйə яуға киткəс, унын ташлап китмəүен белеп, ярҙам итергə Аҫылғужа старшина Моталлап менəн өйлəшкəн.
Ҡазбулаттан Ырымбур ҡарау арҡа артылдыңмы, унын төйəге өйлəшкəндəр.
– Малдарҙы Ашҡаҙарҙан уҡайлы буйына күсер, – тигəн. – Эш ауырлаш а, тауға яҡын тот. Шунда Кинйə батыр төйəгенə күҙ-ҡолаҡ бул.
Ə үҙе Аҫылғужа менəн Көҫəпəйгə барған. Аҫылғужа маҡтай икəн Кинйəне.
– Беҙҙең йортауайҙы арҙаҡлай ың, – ти Көҫəпəй. – Еҙнəмде.
– иңə еҙнə. Ə юрматы уны үҙенең улы анай.
– Ə, мəрхүмə Аҫылбикə ҡоҙағый.
– Эйе, шунын улы, – йырлай:

*Юрматының улы, вай, Кинйəбеҙ,*
*Ил аға ы абыҙ ҡа арман.*
*Яу башлығы булып яуҙар əйҙəр,*
*Аҡ батшаға барып баш орған.*

– Үҙегеҙгə тарта ығыҙмы? Юҡ, Кинйə абыҙҙы бүлмəйек. Ул бөтəбеҙгə етер. Уға ике яҡтан таяу булайыҡ.
– Эйе, эйе.
– Йəүкəй еҙнəң юҡ. Бүтəне булма ын. – Беҙҙəн ҡыҙ булып төшкəн Аҫылбикəне үлтерҙе, нигеҙен ҡыйратты, тип кенə əйтмəне, быңдайы кəрəк сағында ла онотолмаҫ.

[1] *Быуайын – əсə енең бер туғаны, дядя (автор үҙлегенəн).*
[2] *Түркен – ҡатын кешенең атай-əсəй йорто, ауылы (автор үҙлегенəн).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 126



Ана шунда Моталлап менән Аҫылғужа.

— Айым — туғаның. Ҡәҙерен бел, әгәр... Юрматылар ҡон ҡайтара белер.

Әле шул хаҡта иҫкә алғандай:

— Беҙ барышып йөрөйбөҙ. Аптыраҡ ҡоҙаға, Көҫәпәй ҡоҙаға йыр йырлайыҡ.

Айым аңланы.

Ябраил фәрештә онотмаған икән.

уңынан да Юрматының эҙҙәрен ыуытмай, килеп-китеп йөрөнөләр.

Ошонда йәшәй, ирен көтә, үләндәр йыя, яралан а кәрәге булыр, ҡортмоштар[1], бетеүҙәр тегә.

Заман ауыр.

Моталлап үҙе яуға киткән. Айым юлда. Үтәләр. Крәҫтиәндәр. Бер көндө ул Кинйәнең теге ҡырлас танаулы ын күрҙе. Ҡул болғап үтеп китте. Елдерәләр. Элек өйкөм өҙ булып тойолған ҡырлас танау яҡын булып тойолдо. Уның ҡайтҡанын да күргәндәр. Унан уң да килгәндәр. Бөтә енең бүрегенең маңлайында зәңгәр таҫма, ти.

Ире генә ҡайтмай. Батша уны бөтә башҡортҡа баш итеп ҡуйған, тиҙәр. Губернатор кеүек буламы икән. Улай булғас ни, эше күптер.

әй, түрәләр йөрөмәй, тиме... Ҡайтып кит ен ине.

Юҡ, ире түгел, улы ҡайтты.

Эй, шатлыҡ, ни ҡыланырға белмәй. Ашыҡҡандар, аттары тиргә батҡан. Үҙҙәре лә астыр. Ләкин әсә кеше быңдай ваҡытта уларҙы онотоп та ҡуя.

— Атайың иҫән- аумы?

— Иҫән.

— Шулай ҙур түрәме?

— Эше күп.

— Ә килен ҡайҙа?

— Буранбикә — батыр. Ул ғәскәр башында китте атайым янына.

— Нисек ғәскәр башында?

— Эйе, үҙ иләүенән... Батыр ул.

Китте, китте орашыу...

— Егеттәр, бер сама ял итегеҙ. Айыт ағай... — Уны ына ғына айырым әйтте еләү ен.

Бер сама ат ашатып, тамаҡ туйҙырып алдылар.

Тағы китәләр... Әсә кеше хуш аяғы бирҙе.

## 10

Хлопушаға полковник чины биргәндә бик ныҡ киҫәттеләр.

— Миңә ҡаршы бул аң, яҡшылыҡ өмөт итмә. Ҡулым оҙон минең. Хыянат өсөн — үлем.

Үлем... Уны белә... Унан ҡурҡҡаны юҡ Хлопушаның.

Ҡулында Емелька указы, уның әмере. Тегендә Рейнсдорп. Ике е лә ҙур әмер бирҙе. Бере е ирек, аҡса вәғәҙә итте, икенсе е — үлем...

— Эйе, үлемде губернатор тиҙерәк бирер... Быны ы хаҡ...

Емелька тигәнең батша булыуы хаҡында уйланманы. Халыҡ күтәрелгән. Губернаторға, дворяндарға ҡаршы, шул еткән уға.

Туптар кәрәк Емелькаға... Йәҙрәләр, мылтыҡтар, аҡса, оҫталар, кешеләр. Бына шуларҙы табырға... Юлда уҡ. Имәнғол, Бикҡол ауылдарына старосталар ҡуйҙы.

---

[1] *Ҡортмош — ҡатын-ҡыҙҙың биҙәүестәре (автор үҙлегенән).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 127



Указ birҙе.

... еләү ен менән айырылышҡас ул, Хлопуша, ҙур отряд ойошторорға тейеш. Был ҡасҡындар шайка ы ғына булмаҫ. Ҡасып-боҫоп йөрөргә түгел. Ер тетрәтеп, дошман ҡалтыратып йөрөргә. Көслө хәрби команда. Полк! Ана тегендә, Ырымбур янында, шулай тиҙәр.

Әйтер еһ, әмер бирә еһ, ҡушҡанды үтәгәнде талап итә еһ. Анты бар, тәртибе бар.

Юл ыңғай шуны эшләргә.

Преображенский – Йылайыр баҡыр иретеү заводы Твердышев менән Мясниковтыҡы. Урман Йылайыр буйында бөрйәндәр әм түбәнге яғында түңгәүерҙәр ерендә.

Бөтә е уратылған. Ағас ҡойма. аҡсылар.

– Ас! Батша указы менән!

Теләр-теләмәҫ кенә асты.

– Живо! Ниңә үҙеңдең батшаға хеҙмәт иткең килмәйме? Ҡара уны!

– Ниңә, хеҙмәт итәбеҙ инде, ҡатын батшаға ни, ир батшаға ни.

– өйләнмә. Катька тормошон күп татыныҡ.

Ҡәлғә. Бер-беренә ҡушып кәртәләнгән ихаталар ҙа ҡәлғә кеүек. Бөтә заводтар ҙа шулай. Бейек ҡойма, ҙур ҡапҡа. Бер бында ғына түгел. Әүжәндә лә, Табында ла, Левашевкала ла.

Колокол саң ҡаҡты. Халыҡ йыйылды. Манифест уҡылды. Халыҡ шаулаша... Шатлыҡ. Ҡыуылып килтерелгән крәҫтиәндәр бит.

– Ҡайтабыҙ.

– Ә кем ирек яулар?

Хлопушаның бында элекке таныштары табылды. Урыҫтар, башҡорттар, йылайырҙар – уҫалдар, батырҙар.

– Эй, еҙ минең менән бара ығыҙмы?

– Барабыҙ.

– Бергә барабыҙ. Берҙәм булырға кәрәк!

– Белдең? – тип ораны Хлопуша бер башҡорттан.

– Беләбеҙ. Беҙ риза! Утҡа керергә, ыуға төшөргә лә.

– Ну как? – Рустарға ҡарап орандай сәпәне ораyҙы.

– Знамо!

– Бына үҙегеҙ кеүектәрҙе йыйып килтерегеҙ.

Килделәр урыҫтар, башҡорттары. Атаман үҙе тикшерҙе. Ары-бире үҙ юҡмы? Күҙ ҡырыйы менән күҙәтте. Аранан ҡара бесәй үтерлек булма ын, ҡоро ҡауҙынға сатҡы төшмә ен. Юҡ кеүек.

Байтаҡ кеше йыйылды. Сотня бар. Ләкин үҙе менән алып китеп булмай. Ырымбурҙы ҡамарға кәрәк. Үҙенә тағы табылыр.

– Быларҙы биш туп менән, дары, ҡаҙна аҡса ы менән батшаға илтеп тапшырығыҙ. Тик үҙенә йә Максимға...

Үҙенә тағы юл буйына рудниктарҙан, тирә-яҡ башҡорт ауылдарынан кеше йыйҙы.

Кано-Никольский – бында приказчик Сорокин Назар Петрович... Бикле. Бикле булыр инде ул.

Ситтә бер таныштa туҡтай. Ул мужиктар йыя.

22/X. Иртән Сорокинға китәләр. Юлда өңгө осона – указ. Кеше күрә.

– Ана батюшка государь указы!

Сорокин сыға.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 128



— Уҡы! — тиҙәр.

Уҡый. Мәжбүр.

Хлопуша әлеге Сорокинды Пугачевҡа ебәрҙе. Башҡорттар туптар алып китте.

Пугачев Сорокинды кире ҡайтарҙы. Эш менән.

Заводта атаман 120 кеше тупланы. Туптар, дары йыйҙы. Ырымбурға алып китә. Юлда ҡаса, Верхне-Озерныйға. 2/XI Демаринға[1] бара.

Ә конторщик Лупоглазов[2] илтә отрядты (яҫауыл ителде).

Хлопушаны Әүжән-Петровский заводтарында яҡшы ҡаршыланылар. Был яҡта, бөтә заводтарҙа Пугачев хаҡында, уның манифестары хаҡында бик асыҡ беләләр инде. Быға уйламаҫтан Верхне-Яицк ҡәлғә е коменданты полковник Егор Алексеевич Ступишин үҙе булышлыҡ итте. Уға бригадир Корф, аҡ булыу өсөн, «ялған указдар йөрөй» тип Пугачевтың бер указын ебәргәйне. Была ошондайҙар, абай бул, йәнә е. Уны күсереп, башҡа офицерҙарға тараталар. Шул саҡ писарь копияларҙы күсереп алып ҡала, ҡулдан-ҡулға китә, телдән дә өйләнә. Тарала ла ҡуя.

Хлопушаны Әүжән-Петровскийҙа ла яҡшы ҡаршыланылар. Ул килгәнсе заводта эш туҡталғайны.

Был болалы завод ине. Демидовҡа ҡалғас, болалар, язалауҙар йышайҙы. Бөтә ен кисергән властар.

Халыҡ аҙ. Губернатор ҙа тарата. Тимашев, Ступишин крәҫтиәндәргә ҡайтыу мөмкинлеге, юлға билет та бирә. Бирә, йәнә е. Пугачҡа ҡушылыуын белә. Хлопуша туҡтата.

Тирә-яҡтан йыялар. Ҡотҡор, Үҙән, Ҡағы заводтарынан йыялар. Сход. Бер ҙә каторжан тимәйҙәр.

— Рады!..

Бурыс ҡағыҙҙары, кенәгәләр, купчийҙар яндырыла. Иркен улап ҡалалар. Хужаның мөгәзәйҙәре,[3] тоҙ амбарҙары асылды, таратылды. Крәҫтиәндәргә электән тейешле жалунья бирелде.

Кабакты ла астылар. Эс, әйҙә! Бөтә ен ал.

Бында приказчиктар — Максим Осипов, Давыд Федоров.

Көйлә эште... Копыловҡа ҡуша. Бында байлыҡ күп. Руда, баҡыр. Тыңламаған приказчиктарҙы бай эшләткән баҙға ябып ҡуя.

Тирә-яҡтан Иҙелбаш заводы, Тирләндә, Ҡотҡор.

Үҙәндә — суйын ҡоя торған.

Ҡағыла — тимер иретәләр.

Тирләндә — ҡалай я айҙар.

Үҙән. Яҡындағы ын Хлопуша үҙе барып, алыҫтағы ына кешеләр ебәреп, уларға ла батша манифесын уҡыта.

Батша туптар, мортир я арға, йәҙрә ҡойорға, бомбалар эшләргә ҡушты. Эшлә ендәр.

Эш башланды.

Чертеж. Форма ҡомдан. Белгән кеше кеүек, үҙе ҡарап эшләтә. Баҡыр, суйын кәрәк. Ә был ерҙәме! Бай.

Әүжән ҡушылдығы Бағарашты йылға ында Мәсәғүт Малаев тимер руда ы.

Ҡыҙыл балыҡлы йылға ы буйында Этекәй ауылы кеше е Соҡо Ҡушымбәтов.

---

[1] *Демарин Отто Христофорович — полковник, Верхне-Озерный ҡәлғә енең коменданты.*

[2] *Лупоглазов — Кано-Никольский заводының конторщигы, б. к..*

[3] *Мөгәзәй — склад. Магазей (магазин) үҙенән.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 129



Сәләй Боҫҡонов – марганец.

500 кеше казак ителә. 120 ат, 300 арыҡ, 77 үгеҙ, 6 туп. Ылауҙар. Аҡса – 7 мең ум.

Воскресен заводында – оҫталар. Ә тыңламаған приказчиктарҙы быҒаулай (Набатов, Федоров). Уларҙы оҙаҡламай Ырымбур янында Бердала аҫырҙар.

Бөтә енә командир Әүжән кеше е. Тәүҙә Воскресенға барырға кәрәк.

Оло юлға төштөләр.

***

Грязновтың ҡайтыуын халыҡ шатланып ҡаршыланы. Ул килгәнсе эш туҡтаған.

Элекке приказчик, хәҙер завод начальнигы Петр Беспалов –алдаҡсы.

Ул ҡурҡты. Төҫө лә, уҫаллығы ла. Майҙанда халыҡ. Шулар алдында ҡул уҙҙы.

Грязнов:

– ин башта ҡойған туптарыңды күр әт.

– Булмай.

– Ҡайҙа гаубицалар?

– Юҡ.

– Батша әмерен шулай үтәйҙәрме?

Беспалов Грязнов алдына йығылды. Ул, Грязнов, Берданан оҫталар табып алып килгәйне.

– Бына еҙгә начальник Яков Антипов.[1]

Эшселәрҙе йыйҙы.

– Ниңә юҡ?

– Оҫталар шәп түгел. Беҙ өйрәнмәгән.

Әүжән-Петров заводтарында бар ҙа бит. Катав-Ивановскиҙа.

– Ебәрербеҙ.

– Әҙерләнә башлағыҙ.

Шул көндө үк үҙҙәре белгәнсә өлгө әҙерләргә, формалар, көбәктәр ҡойорға тотондолар.

– Тимер юҡ, баҡыр аҙ.

– Ҡай ы урында кәрәкмәй, шуны алып иретегеҙ.

Шулай эшләп йөрөгәндә, еләү ен үҙенең төркөмө менән килеп инде.

Ауыл йәнле ине. Тәүге өйҙәргә тиңләшкәс тә, еләү ен йылға аръяғына күр әтте:

– Айыт ағай! Ана ҡара әле тауыңа.

Ҡарап алды Айыт:

– Бөтә е минеке хәҙер. Элекке атайым төйәге. Бала саҡтан мин уйнаған-үҫкән ерҙән барам. Заводы ла, – хужа кеүек ҡарай. Крәҫтиәндәр уны таный. Ләкин сәйер енмәй ҡала. Күкрәк киреп бара.

еләү енең эргәләрендә Ырымбур янында күргән, ата ы хәбәр ебәргән кешеләр бар. Былай ҙа орашып табырҙар.

Заводта эш бара. Быуа буйында кешеләр, урамда. Бай йорто, сиркәү тирә е... Контора янында арбаға алынған туптарҙы ҡарап тора ине. Тояҡ тауыштарын ишетеп, атлы командаға ҡараны. Кинйә кешеләрен көтә ине.

Аттарын бәйләп килделәр. Айыт ҡал а ла ярай.

еләү енде мужиктар таный. Айытты ла. Кинйә улы бер хәл. Бының батша хеҙмәтендә булыуы уны күҙ алдына батыр итеп баҫтыра.

Аш ваҡытында орашып белештеләр. Грязнов заводты күр әтте, еләү ен бында булғаны бар. Элек былай йәнле булмай ине. Әле геүләп тора. Пистолдәр, мыл-

[1] *Антипов Яков Степанович – Яйыҡ казагы, б. к. полковнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 130



тыҡтар төҙәтәләр, даға сүкейҙәр, аҙаҡ я айҙар, өңгө баштары, балталар.

Шунан:

– Кемде казначей итәйек?

– Григорий Тумановты.

– Бына шулай бергәләп, бутҡа бешерербеҙ. Ана, шундайҙар менән, – ул эргә ендәге арбаларға күр әтте. Туптар, йәҙрәләр тейәгән.

12 октябрҙә Грязнов бында килеү менән аңлағайны. Завод эшләмәй. Беспалов ҡарыша. Грязнов уны алып, Яков Антиповты ҡуя. Ул казак булып алған.

Гаубица, единорог, мортир ҡойорға кәрәк. Ләкин эш көйлө түгел.

– Быларҙың оҫталары юҡ. Әүжәндә табырбыҙ.

– Бергә кәрәк. Мин үҙем генә был ерҙә көс өҙ.

Дөрөҫ самалайҙар ине улар. Ишеткәндәр, бар.

Эйе, Әүжән, Ҡағы, Үҙән, Ҡотҡор. Шунда оҫталары табылыр. Бында рустан да, башҡорттан да бар ундайҙар.

Разведка я алды, халыҡтан ораштылар. Стәрле тирә е тыныс түгел, Торатау яҡтары, әләүек буйҙары ғәскәр менән тулған.

Грязнов та Табынға киткәндә Кинйәкәү, Янырыҫ аша урап киткән икән.

Көҫәпҡол Азатбаев[1], әйет айран[2] старшиналар ил ҡыҙыра имеш. Батшаға баш алмайҙар. Ә улар янында... Подпоручик Ташбулат-Михаил Ораҡ[3].

еләү ен ишетеп, саҡ көлөп ебәрмәне.

– Минең кейәү. еңлемде бирҙек уға.

– Әллә ҡунаҡҡа бара ыңмы?

– Бар а ни...

Тауҙар ара ынан тураға өҫкө яҡтан барырға булдылар. Юлда еләү ен, Айыт. Уларға юл таныш. Хлопуша ла булғаны аҙ түгел.

Әүжәнде күтәрәләр.

Туптар ҡоялар.

еләү ен үҙенә башҡорт отряды тупланы. Грязнов ынау үткәргәнде ҡарап тора. Шартлай.

– Яңынан эшләгеҙ, – тип китә. Тумановтың яҡтарына әм Богоявленскийға.

11

ыуға таш төш ә, түңәрәк булып йәйелә. Бер түңәрәк, ике... алыҫҡа-алыҫҡа. Шуның кеүек, дворяндар күленә таш булып төшкән ең икән, алыҫ-алыҫҡа.

Быны Пугачев та, янындағы ярандары ла яҡшы аңлай ине. Яу тулҡыны йәйелен, ҡамыр төрлө урында күпсе ен, янғын кеүек дөрлә ен – халыҡ ҡуҙғал ын.

Уралға, Волга буйҙарына, Өфө тирә енә, Кама буйҙарына таралды.

М. Шоғай барып ҡайтты.

Овчинников ҡайҙа?

Пугачев үҙе...

Ә Яйыҡ ҡала ынан түбәнгә Гурьевҡа саҡлы – Толкачев.[1] Хатта Гурьевҡа саҡлы. Элек Нуғай мырҙаларының пәйтәхете. Сарайчык яны.

Бер ваҡыт барҙы Кинйә. Унда ҡойма, балыҡ сауҙагәрҙәре генә ине. Ағас ҡойма. Казактар нығынғас, пайтәхет харабаларынан йыйып, бейек итеп таш ҡойма

*[1] Көҫәпҡол Азатбаев – Нуғай даруға ы, Юрматы олоҫо старшина ы, б. к. отряд командиры.*

*[2] айран әйетов (Сайран Сәйетов) – Нуғай даруға ы, Юрматы олоҫо старшина ы, б. к. отряд командиры.*

*[3] Ташбулат Ораҡ (Михаил Иванович Ураков) – кенәз, подпоручик, батшабикә яғында. Кинйәнең кейәүе, ҡыҙы Әлиәнең ире.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 131



алдылар. Туптар бар, ҡорал бар. Ана, ҡайҙа саҡлы!..

Көнсығыш ныҡ түгел, ҡыр-ҡаҙаҡтар менән тамырлыҡ, араҙашлыҡ урынлаштырып булмай. Ҡайҙа ла араҙашың[2], ҡайҙа ла барманың[3] бул ын, тиҙәр.

Нуралы ханға ике хат яҙҙылар. Яуап ебәрә. Бүләк ебәрә. Ә сиреү ебәрмәй. Туғандары Дусалы[4] солтан да, Сәйдалы[5] солтан да килмәй. Ай, монафик йән — ике йөҙлөләнә...

Улар менән ныҡлы бәйләнеш тоторға күрше ҡәлғәләрҙең бригадир Корф ҡулында булыуы ла ҡамасаулай.

Бригадир Алексей Корф Верхне-Озерный ҡәлғә ендә нығынып алған. Яйыҡ буйлап Ырымбурға саҡлы уҙылған сик буйы дистанция ын[6] күҙ уңында тота. Шунан Ырымбурға фураж үткәргеләй. Кешеләре лә күп.

Бер команда (үттеме?).

Ырымбур ҡамалған. Яйыҡ аръяғынан Меновой двор яғында ла, Сулаҡ тауында ла казактар редут[7] ҡороп урынлашҡан. Ә бына көнсығыш яҡта юл бикле түгел. Нежин тирә енән асыҡ кеүек. Ә унда Яйыҡ буйлап ҡаланан үрҙә Озерная дистанция ы бригадир Корф, тегендә Орск тирә ендә генерал Деколонг килгән. Ә Нежин редуты алынмаған.

— Ишек асыҡ, ҡараҡ инә, — тине Пугачев. — Алырға кәрәк уны.

Пугачев Твороговҡа әм Федулевҡа[8] ҡарап шунда Почиталиндың отрядын ебәрергә ҡуша.

— Унда ҡырғыҙ-ҡайсаҡтар сыуалана.

— Беҙгә янайҙармы?

— Юҡ, — тине Кинйә. — Улар янамаç. Күҙәтәләр. Ырымбурға ярҙам ебәреп ҡуйыуҙары бар.

— Эйе, беҙгә хәйлә ҡоралар.

Кинйә:

— Нежинға мин барам. Уны алырмын. Шунда ҡыр-ҡаҙаҡтар килмәй булмаç. Йөҙгә-йөҙ osрашмай эш сыҡмаç.

— Бар, көйләп ҡайт, — тине Пугачев.

Нығытырға кәрәк көнсығыш яҡты. Тиҙҙән Кинйә форштадт тәңгәленән үтеп китте. Унда Егорский сиркәүе ине. Уны губернатор ваттыра туп менән.

Ҡыр-ҡаҙаҡтар менән Яйыҡ казактарын ике арала талғын ғына аҡҡан йылға айыра.

Күрше булып, аралашып йәшәлә. Малдары бер тирәлә йөрөй, йылғаға ике яҡтан төшөп балыҡ тоталар, ерҙәре аша бер үк каруан юлдары уҙыла.

Көн болот оҙ ҙа булмай, әлбиттә. Ҡай ы бер ваҡытта, юҡ-бар сәбәптәр арҡа ында асыуланышып, өҙөшөп тә алғылайҙар. Ә мө им эштәрҙә бер-бере енә ярҙамсылар. Жанғарҙар ҡысҡанда ҡыр-ҡаҙаҡтар Яйыҡ казактарына ыйынды. Яйыҡта бола ҡупҡанда күршеләге ябай халыҡ-шаруа өçтән ҡотко алынып тор а ла, арт-

---

[1] *Толкачев Михаил Прокофьевич — Яйыҡ казагы, б. к. атаманы. Туғандары Петр, Семен менән яуҙа бергә ҡатнаша.*

[2] *Араҙаш (ҡаҙаҡса) — илсе (автор үҙлегенән).*

[3] *Барманың — танышың (автор үҙлегенән).*

[4] *Дусалы солтан — ҡаҙаҡ, Нуралы хандың ике туғаны, Пугачевҡа ярҙам итә (IX.73 й. — III. 74 й.).*

[5] *Сәйдалы солтан — ҡаҙаҡ, Дусалы солтандың улы.*

[6] *Дистанция — округ.*

[7] *Редут (фр.) — XX быуатҡа тиклем оборона тотоу өсөн тәрән соҡор, ур менән уратып алынған хәрби нығытма.*

[8] *Федулев Иван — Яйыҡ казагы, б. к. полковнигы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 132



тан бысаҡ күтәрмәне, уларҙың ҡасаҡтарын йәшерҙе, аҙыҡ-түлек менән бул а ла ярҙам итте.

Ике аралағы был тамырлыҡ (дуҫлыҡ), бер яҡтан Рәсәй хөкүмәтен, икенсе яҡтан Нуралы ханды, уға яҡын солтандарҙы ағайта ине. Шуның өсөн дә улар менән эште көйләп булмай. Ике хат ебәрелде, яуап юҡ. Пугачев талап иткән 200 кеше килмәй. Ул саҡлы ғына көстән әллә ни мәғәнә лә, юғалтыу ҙа юҡ. Ул үҙ-ара ышаныс булдырыу өсөн генә кәрәк.

Ә хандар менән өйләшеү ауыр, әр ҡай ыны ы үҙ яғын ҡайыра.

Улар, ҡыр-ҡаҙаҡ ялпы ынан айырмалы рәүештә, үҙҙәренә күрә бер төрлө ҡылыҡ менән әр ҡай ы ы үҙ мәнфәғәтендә эш итәләр.

Нуралы хандың туғаны – Дусалы солтан (Нуралының туҙыҡа ы, ике туғаны). Айсыуаҡ солтан, кесе ҡусты ы Эралы солтан. Бөтә е губернатор яҡлы.

Уға ни бары бер талап: йәйләүҙәргә ебәр ен, ҡаҙаҡ урҙа ынан ҡасҡындарҙы тотоп ҡайтар ын. Губернатор элек риза түгел, әле хәйләләй. уңынан? Әле тоғро хеҙмәт итегеҙ. Ни бары болаға ҡатышма ын... Ә Нуралы далаға китте...

«Ҡай ы беҙгә яҡыныраҡ килер, кем менән өйләшеү файҙалы»,– тип уйланы Кинйә.

Нуралы ипкә килмәҫ, ике йөҙлө. Үҙе Рейнсдорпҡа хат ебәргән.

Айсыуаҡ солтан ерҙәрендә, Жағайбалы ырыуында Кинйәнең ышаныслы кеше е старшина Серке батыр бар. Абруйлы Кәрим аҡ аҡал бар. Уларҙы саҡыртып булырмы?

Ә Дусалы солтан? (Нуралының туҙыҡа ы.)

Кинйә Нежинский редутты алырға бара.

Ала. Ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар уның янына сыға. Бында туптар алыныуын ҡалмыҡ та күреп тора.

Кинйә бер ҡалмыҡ ҡартын осратты.

Хотон-аҡа. (Ырыу башлығы.)

Танып алдылар. Хотон-аҡаға былайыраҡ йәйләү бирелгән. Шунда ҡалған икән.

– Улдарың ҡайттымы?

– Бына улдарым, аҙмы ни?

Шунда ҡалғандарҙы йыйған. Үҙенең бер улы ҡайтҡан. Кинйә уны баш итеп ҡуйҙы. Ҡыр-ҡаҙаҡтар яҡын йөрөй.

Ҡаҙаҡтарға үҙе баралмай. Кеше ебәреүе сетерекле. Үҙҙәре яҡын килә. Саҡырып ораштты. Аптыш Тангаевты[1] ебәрә (ноябрҙең урталары).

Дусалы солтан яҡын килә. Хобда менән Илек йылғалары ара ында йәйләй.

Кинйә батша исеменән хат яҙып ебәрҙе. Дусалы килде.

Кинйә алға сыға. өңгө өн ҡаҙай. Дусалы ла килеп өңгө өн ҡаҙай. Йән аҡсылары-төләнгиттәре артта ҡала.

Кинйә:

– Ярҙам ебәр.

Дусалы:

– Шул саҡлы кеше е юҡмы, Кинжә молад?

– Шунан дуҫлыҡ ныҕый.

– Аманатмы?

– Ниңә ҡурҡырға? Нуралы Өфөлә ятты. Мин – Петербурҙа. Бына әле мин аманат.

[1] *Аптыш Тангаев – Яйыҡ казагы.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 133



– Жибәрәм. Межан жайыҡ үткәзсен, әлегә шул.

Күптәнге Батырша яуында башҡорттарға хыянат иткәндә лә Нуралы губернаторҙан орай Яйыҡ аръяғында йәйләргә. Ебәрә буламы Рейнсдорп. Бер үткәр әң, кире ҡайтарып булмаç. Ул Пугачевтан да шуны орай. Пугачевҡа йәл түгел, әммә бөгөнгө файҙа. Толкачев менән Яйыҡты ал, унан үтер ең.

Кинйә лә шуны әйтте.

– Яйыҡты ал, унан үтер ең.

– Бәнем көсөм аҙ.

– Улай бул а, бында ебәр.

Дусалы күнде.

Улы алыç түгел ине.

– Иртәгә Сәйдалы барыр. Ике йөҙ сарбаз[1] менән.

Икенсе көндө килә йәш солтан, батыр егет сарбаздар менән.

Кинйә быларҙы үҙ янына ала. Пугачев шат. Беренсе төркөм. Бынан уң Аптыш Тангаевты ебәрә. Кеше, ат, мал ебәр ен тип.

...Ике яҡтың осрашыуы, бер команда булыуы аңлашылды. Яҡынлай башлағас та, Ҡыҙыл Тау ҡәлғә ендәге казактар Кинйә яғына сыҡты. Ә ҡалғандарын бригадир Корф үҙ янына Верхне-Озерный ҡәлғә енә саҡыртты. Унын янында көс күп, ти. Верхне-Яицк крепосында Ступишин башҡорттар йыйып ебәргән. Ҡай ылары ҡасты, ҡай ы шунда ине.

Кинйә шул яҡҡа яҡынлай.

Берәүҙе (Дураков) Пугачев указы менән ебәрә. өңгө осона элеп бара. Кешеләр эйәрә. Ҡул осона ала, баш өçтөндә тотоп, капитан Улановҡа бирә.

– Уҡы! – тиҙәр. Халыҡ талап итә.

Уланов Дураковты ябып ҡуя, әлбиттә. Указды Верхне-Озерныйға оҙата. Ә Корф быны ҡулына алған өсөн Улановтың үҙен ябып ҡуйырға кешеләр ебәрә, кандалы алалар. Кинйә бер команда ебәрә. Дураковты ҡотҡара, казактар уға ҡушыла. Ә Уланов ҡаса.

Корфтың эше ҡыçылды. Кинйә ҡайтып китә.

...Ә уңынан Улановты Корф кеше ебәреп яба... Указға инҡар үҙҙәре. Ул яман ҡағыҙ, ышанмағыҙ. Унда әйтелгән Петр...

Указ хаҡында башҡаса яҙып тарата. Батша юҡ, ул – Пугачев. Был хаҡта уҡыйҙар – ул Петр түгел. Ә халыҡ шул, шул тип аңлай.

Быны Табында ла, Силәбелә лә, Ҡазанда ла уҡыйҙар. әр ерҙә, шул, шул үҙе, тиҙәр.

Был уңыраҡ. Әле октябрь урта ы...

уңыраҡ Пугачев килеп ул генералды бер аҙ теткеләп, ҡыуалап ебәрер... Тик ул да йоҡлап ята торған Корф түгел.

*(Дауамы бар.)*

---

[1] *Сарбаз (ҡаҙаҡ.) – яугир (автор үҙлегенән).*

Agidel 3:Agidel 3.qxd  13.04.2009  23:29  Page 134





**Ғәли**
**ИЛЬЯСОВ**

## Таштар

*Был таштарҙы тауҙарымдан*
*Кем алып ҡайтты, әсәй?*
*иҙә еңме, улар бында*
*Урман шауын ишетмәй.*

*Төймә кеүек ялтыр улар,*
*Гәү әр ымаҡ нурлылар,*
*Тик барыбер тауҙарҙағы*
*Кеүек балҡымай улар.*

*Уларҙы өймәй елдәр ҙә*
*Бүлмәгә эҙләп инеп,*
*Бер-бере енә ыйынып,*
*Яталар, ана, үнеп.*

*ағыналыр улар илен –*
*Ҡарт тауҙарҙың күкрәген,*
*Зәңгәр күктең иркенлеген,*
*Болоттарҙың күкрәүен;*

*Ҡарағайҙарҙың йырлауын,*
*Йылғаларҙың ағыуын,*
*Бөркөттәрҙең саңҡылдашып*
*Күктә ҡанат ҡағыуын.*

*Ғәли Ильясов 1938 йылдың 18 ноябрендә Мәләүез районы Әбет ауылында тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, училищела уҡый. “Совет Башҡортостаны” гәзитенең үҙ хәбәрсе е була. 1974 йылдың 26 авгусында вафат булды.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 135



*Шул донъяға мин уларҙы
Ҡабат алып барайым.
Үҙем дә бит – бөркөт кеүек,
Тауға ғына ҡарайым.*

***

*Саф елдәр ялан өҫтөндә
Кәйелә ҡанат ҡағып.
Көтөүсе килә иңенә
Көмөшлө йүгән алып.*

*Ул ниндәй ҡар үҙ өйләмәҫ,
Быны мин яҡшы беләм.
“Олатай, ау ғынамы?” –тип
Башымды уға эйәм.*

*Ирейем унын янында,
Иҫ киткес рәхәт миңә.
Әйтер ең, дала-олатай
Иркәләп үҙе өйә.*

*Әйтер ең, дала – киң,
Сал ил –
Өмөттәй бағa миңә,
Тамырың – мин, быны, ти, бел,
Моң-серем етер иңә.*

## Ҡурайкайым

*Урмандарҙан килгән ҡурайкайым,
Уйнамайым ине ярышта,
Ҡулға алам ине, дуҫ ора а
Йә күмелгән саҡта ағышҡа.*

*Килтерә ең ҡара урмандарҙы,
Дауылдарҙы тыныс бүлмәгә,
Тауҙар ғорурлығы – ҡаяларҙы
Баҫтыра ың бында, эргәгә.*

*Урғып килеп етә тау ыуҙары,
Сал таштарҙа тулҡын ҡыйрала.
әм мин болоттарға тиклем үҫәм
Ошо ҡыҫҡа ғына арала.*

*Күҙҙәремә тула ҡояш нуры,
Йөрәгемә тула яр йыры,
Киләсәктә күрер шатлыктарҙың
ис тә булмаҫ кеүек ахыры.*

*Күкрәгемдә – гүйә, тау яланы,
Яурындарым – гүйә, тау ҡыры,
әм үҙем дә – гүйә, ябай түгел:
Яңы тыуған Урал батыры!*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 136



## Ике шишмә

*Күҙле шишмә, уҡыр шишмә*
*Минең тыуған яғымда,*
*Мин уларҙы иҫләмәйем*
*Йә уянған сағымда.*

*Кис бул а, уҡыр шишмәнең*
*Күрәм ҡарамаларын,*
*Ел-ел килеп беҙ йүгергән*
*Сауҡалыҡ араларын.*

*Ҡылғанлы Бүләк сикә ен,*
*Селектәр ыҙғырыуын,*
*Селғурайының елдәрҙә*
*Ниҙер көйләп тороуын.*

*Уянди әм, иҫкә төшә*
*ыуы күҙле шишмәнең,*
*Аҡ муйыл сәскәләренең*
*Шул шишмәгә төшөүе;*

*Иркен болон, моңло өндәр,*
*Йырҙары әсәйҙәрҙең*
*әм әйтелмәгән ағышы*
*Беҙ яратыр йәрҙәрҙең.*

*Шуға ла күңел-йөрәгем*
*Тыуған яҡҡа ынтыла,*
*уҡыр шишмә моңландыр а,*
*Күҙленән – шатлыҡ тыуа.*

## Минең йырым

*Нөгөш кенә буйы, ай, ил икән,*
*Туғайҙары тулы ел икән,*
*Сит ерҙәргә сығып китмәҫ элек*
*Тыуған ерҙең ҡәҙерен бел икән.*

*Оҙон юлдарҙы мин күп тапаным,*
*Күңел тыныслығы тапманым:*
*Йөҙәр саҡрымдарҙан, күҙем терәп,*
*Бүләк буйы булды ҡайтҡаным.*

*Бүләк тауҙарында бер ҡайын бар,*
*Атай ғына ҡартлас ҡайыны,*
*Шул ҡайынды күреп беҙ яратҡан,*
*Баҫыр инем дә бит ҡайғыны.*

**Шиғырҙарҙы баҫмаға шағирҙың**
**ҡыҙы Йәмилә ҒАФАРОВА әҙерләне.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 137



# “Күңелемдә – донъя сере”



## Фәнил БҮЛӘКОВ

***

*Күңелемдең ҡылдарына*
*Сиртсе саҡ ҡына.*
*Йән тетрәтер моң шул саҡта*
*ыҙасаҡ ҡына.*
*Күңелемдең көмөш ҡылы*
*Шулай тартылған.*
*Моң-зар илендә сайҡалған*
*Рухым – сал ҡылған.*
*Бар булмышым – киң далала*
*Сыңлар ҡыл-ҡумыҙ.*
*Тыңлаусы юҡ, йөрәк яна,*
*оноғоҙ ҡымыҙ.*
*аумал ҡымыҙ тиғәнегеҙ*
*Әрем икән дә.*
*Көйләп кенә сың-сыңлатыр*
*Йәрем икән дә.*

***

*Сыңғырлатып ҡына аттар кешнәй,*
*Йондоҙло төн – күктә ай - даға.*
*Ҡырпаҡ ҡарҙан лерт-лерт юртҡан өйөр.*
*Аҡ юрғанға ҡайый ай тамға.*

*Ҡайсы ҡолаҡ, ҡаты тояҡ аттар –*
*Эйәр күрмәй ҡалған тай-тулаҡ.*
*Ҡараңғыға оса, ҡар бауырлап,*
*Ирек тиеп, сапсып та тулап.*

*Өйөр рухы – азатлыҡты көҫәй,*
*Муйындарҙа еҙҙән ҡыңғырау.*
*Киң далала ирек эҙләп аман*
*Башҡорт атҡайҙары сырҡырай.*

*Өйөр саба, ҡар бураны уйнай,*
*Биткә уға елдең ҡойроғо.*
*Ирек көҫәп аттар аман саба,*
*Ҡанат ҡуйғас рухтың бойороғо.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 138



***

*Буш хыялдар бер көн ек ендерә,*
*Тоҙ оҙ бешкән ыуыҡ аш кеүек.*
*Тормош ҡай саҡ – бәхет шарабынан*
*Иртәгә ен сатнар баш кеүек.*

*Йәшәйештә бәхет сатҡылары*
*Балҡып китә гәү әр ҡаш кеүек.*
*Уянғас та тоям, бар булмышым –*
*Ярсыҡланып ҡалған таш кеүек.*

*Йәшәйешем көслө өйөрмәләй,*
*Бар хистәрҙе бергә өйөргән.*
*Етлекмәйсә тыуған хыялдарҙан*
*Көл-күмерле уба өйөлгән.*

***

*Шыбырлашып ҡына, быш-быш килеп*
*Ағастарҙан япраҡ өҙөлә.*
*Көҙ таңында уҫаҡ усаҡ яҡты,*
*Елдәр менән килде көҙө лә.*

*Көҙгө төҫлө күл дә семәрләнде,*
*Шыяланып ҡалды елдәрҙән.*
*– Дауылдарҙа йөҙгән карап-япраҡ,*
*Туҡталышың ҡай ы илдәрҙә?*

*– Туҡталышым – тупраҡ, сөм-ҡара ер.*
*Минең ошо уңғы улышым.*
*Ясин сыға ергә көҙгө ҡырау,*
*уңғы туйҙы тоя булмышым.*

*Аҡ кәфенлек ҡырҡа көҙ хәҙрәте,*
*Ҡау япраҡҡа үлсәп, самалап.*
*уңғы япраҡ ерҙе ҡосаҡланы,*
*Йәшәү миҙгелдәрен тамамлап.*

***

*Сыуаҡ йылы көҙҙөң уңғы көнө,*
*Ирәмәлдә туҙа ҡар-буран.*
*Ҡырҡмыш тайҙай тырым-тырағайлы*
*Уйҙарымды йыйып ултырам.*
*Ирәмәлдә күптән ҡыш улышы,*
*Осҡонланып ята ҡар түбә.*
*Тик түбәндә аман ҡара көҙҙәр,*
*Биттәремдән йылы ел үбә.*
*Ирәмәлдә ҡыштың тантана ы,*
*Күңелдә лә көрттәр бик бейек.*
*Хистәремдән тыуған бурандарҙа*
*Йөрөгән мәл, туңам, тип бейеп.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 139





## Айгиз САФИН

***

*Бер ҡасан да осмаҫ инем*
*Йы андарға шулай ашҡынып.*
*Бер ҡасан да йотмаҫ кеүек ине*
*Был диңгеҙҙең тулҡын-ташҡыны.*

*Яратмаҫ та өсөн яратылған*
*Мәхлүк кеүек тойҙом үҙемде.*
*Ҡайнар өйөү, ҙур мөхәббәт орап*
*Мин Алланан ҡат-ҡат үтендем.*

*Йылдар үтте. Йәшлек таңымды ла*
*Ҡаршыланым туң боҙ хәлендә.*
*Ҡуйынымда шундай ҡыҙҙар булды,*
*Тик булманы ялҡын күңелдә...*

*әм килде көн! ине мин ҡосаҡлап,*
*Күкрәгемә ҡыҫып тотҡан саҡ!*
*(Ышан миңә: тап шул бөйөк мәлдән*
*Бөйөк шағир минән сығасаҡ).*

*Йоҡлар йоҡом инде йоҡо түгел,*
*Аш та түгел ашар аштарым.*
*Был донъяла миңә тик ин кәрәк!*
*Хет бөгөндән донъя шартла ын.*

*Минең өсөн, эйе, тик ин кәрәк.*
*Осрашыуҙы көтәм өҙөлөп.*
*Тик ин мине, зин ар, кире ҡаҡма,*
*Мәхлүк хәлен түгел түҙерлек.*

## *Мин ғашиҡмын иңә, илем!*

*Мин ғашиҡмын иңә, Башҡортостан!*
*әм буш ауаз түгел өйөүем.*
*Йылдар яңғырашын артыласаҡ*
*Үҙәгемдә үҫкән моң-көйөм.*

*Мин ғашиҡмын иңә, Башҡортостан!*
*Мөхәббәтем бөйөк, күләм еҙ.*
*ине данлап йөрәк нисә тулай,*
*әм әр йыры уның үлем еҙ.*

*Мин ғашиҡмын, илем, ыуҙарыңа!*
*әр тамсыңа инең моң тамған.*
*Ҡояш түгел, хатта йондоҙҙар ҙа*
*Ошо ынйыларҙан нур алған.*

*Мин ғашиҡмын, илем, тауҙарыңа!*
*Болоттарҙы йыртҡан таштарың.*
*Тупрағыңа күпме ирҙәр еңгән,*
*Ырыу өсөн алып баштарын.*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 140



*Мин ғашиҡмын сиге емерелгән*
*Иркен далаларҙың серенә.*
*Тарих тулы ҡылған ҡанаттары*
*Сәләм илтә тыуған еремә.*

*Мин халҡыма ғашиҡ! Башҡорттарым,*
*Мин дә еҙҙең ғорур улығыҙ.*
*Аҡ тирмәләр ҡороп, шау-гөр килеп,*
*Тик хеҙмәттә үт ен юлыбыҙ.*

*Тыуған илем, ҡайҙа ашҡын ам да,*
*ин өмөтөм минең, ҡалҡаным.*
*Ос ыреккә, изге Башҡортостан!*
*Мәңге йәшә, бөйөк Ватаным!*

***

*Эй, хыялдар, ниңә борсой оғоҙ!?*
*Мин еҙ еҙ ҙә шундай тилемен.*
*Кеше кеүек йәшәй алмайымсы,*
*Әллә енмен, әллә биремен.*
*Ни тип миңә аҡыл өйрәт әләр,*
*Мин эшләйем шуның кире ен.*

*Эй, мөхәббәт, ниңә ҡаҡшата ың!?*
*Әллә өйәм, юҡтыр, шаярам.*
*Ҡыҙ күңелен яулап маташҡанда*
*алҡын көйө йырҙар сығарам.*
*Әйтер ең дә, ҡурҡам мөхәббәттән,*
*Ҡуҙғыр, тиеп, иҫке бер ярам.*

*Эй, азатлыҡ, ниңә саҡыра ың!?*
*ин тип яныып, ҡалды тик көлөм.*
*Ҡоштай осҡом, елдәй елгем килә,*
*Ирек көтөп үтә әр көнөм.*
*Тик көсөм юҡ әле емерергә*
*Заман ҡоллоғонон ситлеген.*

*Эй, шиғриәт, ниңә инәлтә ең!?*
*Әйтер ең дә, тәү ҡат беҙ бергә.*
*Икәү генә яңғыҙ ҡалған саҡта*
*Оялма ин яҡын килергә.*
*өйөп туйғас, ташлап китер, тимә,*
*ин булмышым тейеш ғүмергә.*

*Эх, ин, яҙмыш, ниңә шаяра ың!?*
*Ни көтөргә инән — белмәйем.*
*Көтөп ята торған түгел дә мин,*
*Ҡаршы сығам иңә — түҙмәйем.*
*Үҙеңде сер, оло бер сер ти əң,*
*Сереӊ сисмәйенсә — үлмәйем.*
*ин дә мине әле белмәй ең!..*

# МӘҒАРИФ ФИЛОСОФИЯ Ы

Кешелек тарихы үçешендә, ҡаҙаныш-уңыштарында мәғарифтың роле ба а-лап бөтөргө өҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн был өлкәлә лә кире күренештәр күҙәтелеп, был хәл йәмәғәтселекте борсоуға ала. Фекер йөрөтөргә әләтле кешеләрҙең мәғариф философия ы менән ҡыҙыҡ ыныуының көсәйеүе, тимәк, тәбиғи. Торғонлоҡ уңғы 20–30 йылда Рәсәй мәғарифында ла күҙәтелә. Быңдай күренештең төп сәбәбе итеп тармаҡтың аныҡ стратегия ы булмау, философик нигеҙҙәре билдәләнмәүҙе күр әтергә кәрәк. Тағы ла бер сәбәп бар: ошоғаса тармаҡтың маҡсатлы параметрҙары эшләнмәгән. Кемдәрҙе әҙерләргә, социаль тормоштоң ҡай ы өлкәләре белгестәргә мохтаж икәнлеген Ватан мәғариф система ы күҙ алдына ла килтермәй. Бәлки, уға киң фекерләгән, инновацион ижади эшмәкәрлеккә әләтле белгестәр кәрәктер? Бәлки, ул тар даирәлә генә эш йөрөткән, әммә үҙ бурысын энә енән ебенәсә атҡарған, ләкин тормоштоң башҡа яҡтары менән бөтөнләй ҡыҙыҡ ынмаған белгескә мохтаждыр? Хәл иткес өлөшө Совет власы йылдарында формалашҡан, дәүләт алдында ниндәй маҡсаттар тороуын, илгә ниндәй белгестәр кәрәклеген яҡшы аңлаған гуманитар-интеллектуаль йәмәғәтселекте был орауҙар хәүефкә ала.

Эйе, совет белгестәре матди етештереү әм дәүләт органдары ихтыяжын ярай-ы ҡәнәғәтләндерә ине. Тик ул саҡтарҙа тармаҡ интеллигенция ының үҙаллылығы әм социаль-сәйәси әүҙемлеге дәүләт идеология ы ҡалыптары менән сикләнде. Дөрөç, уңғы 10–15 йылда социаль тормоштоң (иҡтисади, сәйәси .б.) барлыҡ өлкәләре лә ҡырҡа үҙгәрештәргә дусар ителде. Йәмәғәтселек үçешенең мө им тармаҡтарына ҡағылған был үҙгәрештәрҙең рухи-әхлаҡи өлкәне, бигерәк тә мәғарифты, урап үтмәүе айырыуса ҡиммәт. Әйткәндәй, уңғы осорҙа тармаҡ йөкмәтке ен ағымдағы проблемалар өçтөндә эшләүҙән бер ни тиклем арындырған, юғары уҡыу йорттарында белем алған йәштәрҙе йәмғиәттең үçеш талаптарына йүнәлдергән, алдан күрә белеү әләтен үçтергән ыңғай, әммә күҙгә бик аҙ салынған йүнәлеш тоçмөрләнә кеүек.

Мәғарифтың бөгөнгө ө тура ында фекер йөрөткәндә, унда кире әм йәмғиәт үçеше өсөн ыңғай булмаған, илдең дөйөм кешелек сифаттарына таянып үçешкән донъя йәмәғәтселеге сафтарына баçыуына аяҡ салған күренештәр хаҡында ла баçым я ап әйтеү мотлаҡ. Был хәл Рәсәйҙең ватансыл рухлы өлөшөн айырыуса борсой. Әхлаҡ-мәҙәниәт мәсьәләләре менән шөғөлләнгән байтаҡ әләтле белгестәр был ауыр хәлдән сығыуҙы йәмғиәт үçешендә яңы идеологияла, мәғарифтың заманса философия ын эшләүҙә күрә. Быуаттар сигендә ғилми әм ижтимағи фекер алышыуҙарҙа үҙ күберәк “глобалләштереү”, “алтын миллиард”, “мәҙәниәттәр диалогы” йүнәлешендә бара. Был башлыса кешелек донъя ының үçеш типтары алмашыныу менән аңлатыла. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мәғарифтың яңы философия ы тура ында фекер алышыу етешмәй. Көнбайыш Европа фекер эйәләре, сәйәсмәндәре ара ында популярлыҡ ҡаҙанған Ф. Фукуяманың “Тарих аҙағы әм уңғы кеше” хеҙмәтендә күр әтелгәнсә, либераль-демократик система-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 142



ның тамам еңеүе ғәмәлгә ашманы. Глобалистар күҙаллағанса, Ер шары дәүләттәре либераль-демократик йөкмәткегә күсмәне. Ул әле лә күп төрлө, сыбар булып ҡала. АҠШ даирәләренең бер бөтөн донъя ҡоршарға маташыуына ҡарамаҫтан, яңы цивилизациялар тыуа, бер-бере е менән бәрелешә тора. Был классик Көнбайыш әм Көнсығыш ара ында ғына түгел, ә Көнбайыштың үҙендә лә күҙәтелә. Бөгөн Көнбайыштың бер бөтөн түгел, ә Америка, Европа, Көнсығыш Азия кеүек төркөмдәргә бүленеүе көндән-көн асығыраҡ күренә.

Был цивилизацияларҙың уртаҡ яғы ла байтаҡ, әммә улар бер-бере енә тап килмәй, тимәк, бер типҡа ҡарамай. Ҡушма Штаттар, мәҫәлән, үҙҙәре генә хакимлыҡ иткән донъя ҡороу өсөн ҡулынан килгән-килмәгәндең бары ын да эшләргә тырыша. Был сәйәсәт Германия менән Франция кеүек Европа дәүләттәренең яңы донъя, яңы донъя өлгө өн ҡороуҙа алдан барырға ынтылған дәүләттәр мәнфәғәтенә ҡаршы килә. Бер яҡтан – Америка, икенсе яҡтан – Германия әм Франция ара ындағы көсөргәнешлек көндән-көн көсәйеп, уның уңғы дәрәжәгә етеүе лә ихтимал. “Демократик” Америка үҙен либераллектең ныҡлы таянысы итеп хис ит ә, Германия менән Франция бөгөн абруйлы булған социаль-демократия “костюм”ын кейеп, күп полярлы донъяны етәкләп барырға ынтыла. Үҙенең үҫеш идеология ы булмаған Рәсәй и ә – юл сатында. Шул уҡ ваҡытта власть даирәләрендә әм либераль-демократик фирҡәләр етәкселәрендә Европаса кәйеф көслө булыуға ҡарамаҫтан, ил Евразия цивилизация ы буйынса алға бара әм нығына, тип ышаныслы әйтергә мөмкин. Хәйер, Көнсығыш дәүләттәренең дә ҡай-ы йүнәлештә үҫеүен аныҡ ҡына әйтеп булмай. Ҡытай, мәҫәлән, коммунизмдың бер аҙ үҙгәртелгән йөкмәтке ен айланы, ә Японияла милли капитализмдың үҙенсәлекле алымы үҫешә. Ғәрәп донъя ы, Ислам донъя ы ла ярап бөткән, тигәнерәк фекерҙә.

Әле донъяла кешелек йәмғиәтенең йөкмәтке ен, йәшәү мәғәнә ен билдәләү өсөн көрәш бара. Көн үҙәгендә — цивилизациялар диалогы, цивилизациялар бәхәсе, уларҙың рухи-әхлаҡи нигеҙҙәрен сағыштырып ҡарау. Ошондай ҡатмарлы мәлдә мәғариф философия ының роле үтә мө им булыуы бәхәс еҙ. Цивилизацияларҙың артабанғы үҫешендә әм камиллашыуында уның төп йөкмәтке е булып ошо мөхиттә йәшәгән социаль йәмғиәттәргә кешелек донъя ының быуаттар буйы туплаған ҡиммәттәрен еткереү, үҙләштерергә ярҙам итеү тора. Кешелектең глобаль мәсьәләләрен хәл итеүҙә донъя йәмәғәтселегенең бөтөнлөгөн, тупланғанлығын нығытыуҙа ла мәғариф философия ының роле ҙур. Бөгөн беҙ бар кешелектең, шул иҫәптән Рәсәйҙең дә, рухи-әхлаҡи көрсөккә килеп терәлеүен яҡшы күрәбеҙ. Хәлдең көсөргәнешлеген демографик кризис, йәғни үҫеп килеүсе быуындың аулығы (уны “Урыҫ тәре е” тип тә йөрөтәләр) асыҡ дәлилләй. Илебеҙҙә үлем тыуымдан 1,7 тапҡырға юғары. Йәмәғәтселекте шулай уҡ бошонҡолоҡ кәйефтәренең арта барыуы ла борсой. Был кире күренеште иҡтисади, сәйәси, идеологик әм шәхес кризисы, уның йәмғиәт менән үҙ-ара мөнәсәбәте лә “туйындыра”.

Рәсәйҙә билдә еҙлек хөкөм өрә. Миллиондарса ватандаштарыбыҙ, айырыуса оло быуын кешеләренең аңында “идеологик боролош” тамамлана. Иң алдынғы ижтимағи ҡоролош тип иғлан ителгән социализм юҡҡа сығарылды, ә аяҡҡа баҫыусы капитализм, бынан бер быуат элекке кеүек үк, рухи, әхлаҡи, мәҙәни йөкмәткегә эйә түгел. Йөкмәтке е, мәғәнә е менән Рәсәй капитализмы уғрыларҙыҡынан айырылмай ҙа. Ғалимдар — социологтар әм сәйәсәт белгестәре ара ында социаль тормошобоҙҙоң бөгөнгө өн ба алау буйынса берҙәм ҡараш юҡ. XIX быуатта моронлаған иммәттәрҙе ҡайтанан ба алау буйынса көрәш ике быуат сигендә бөтә ҡитғаларҙы үҙенә ылыҡтырып, тәрәнлек, масштаблыҡҡа өлгәшеп, әлеге мәҙәни цивилизацияларға ла ҡағылды. үҙ тормоштоң барлыҡ өлкәләре, иң элек мәғариф тура ында. Постиндустриаль мөхиттең аҡланыуы, камиллашыуы әм еңеүе мәғарифтың теге йәки был йәмғиәт талаптарына яуап биреү-бирмәүенә

бәйле. үҙ ҙә юҡ: кешелек мәғарифтың заманса философия ына мохтаж. Баҙар иҡтисады шарттарында Рәсәй йәмғиәтенең тармаҡҡа реформа үткәреүгә, унын философия ын эшләүгә мохтажлығы Көнбайыштыҡынан бер ҙә кәм түгел. Ләкин РФ Мәғариф министрлығы Ватан уҡытыусыларын белем философия ының яҡынса ыҙма ы менән бул а ла тәьмин итергә әҙер түгел. Илдә ныҒытылырҒа тейешле философияға оҡшаған мәғариф йөкмәтке е прагматик нигеҙгә ҡоролған, әм унын ә әмиәте ғәмәли, матди күр әткестәрҙән уҙмай. Рәсәйҙәге мәғариф кризисы ошонон менән ба алана ла инде.

Был кризис шуны күр әтә: йә беҙ ныҡлы үҫешкән дәүергә аяҡ баҫабыҙ, йәки әлегесә сеймал сығарыусы ил булып ҡалабыҙ. Бөгөн Ватан мәғарифында түбәндәгесә фекер йөрөтөүселәр ҙә осрай: кешеләргә баҙарҙа эшләп тапҡан аҡсаларын дөрөҫ иҫәпләрлек белем дә еткән. Имеш, йәмғиәт юғары талаптар ҡуйған мәғарифҡа мохтаж түгел. Әгәр ҙә фән, мәҙәниәт өлкә ендә юғары технологиялар эшләү йә әтенән "үҫеш нөктәләре" ролен уйнаған, юғары әҙерлекле белгестәр әҙерләү буйынса киҫкен саралар күрелмә ә, ил бер кризистан сығыуға икенсе енә барып инәсәк.

Мәғарифтың классик өлгө ө иҫкереп, бөгөн йәмғиәт ҡуйған талаптарға яуап бирмәй, тигән ҡараш сит илдәрҙә лә, Рәсәйҙә лә ныҒына. Күпселек ғалимдарҙың фекеренсә, мәғарифтың нигеҙен тәшкил иткән педагогик әм философик идеяларҙың яңы ын эҙләү мотлаҡ. Шуға күрә үҙ аллы фән булараҡ 200 йыл элек Джон Дьюриҙың фәнни эҙләнеүҙәре ерлегендә барлыҡҡа килгән мәғариф философия ы унғы 20–30 йылда етеҙ үҫешә башланы. Яңы ҡараш формалаштырыу барышында ғилемлек, мәғарифтың маҡсаттары кеүек идеялар буйынса фекер алышына, педагогик системалар тарихы, философияның мәғарифҡа йоғонто о тикшерелә.

Хәҙерге мәғариф система ының нигеҙе XVIII быуат аҙағында–XIX быуат башында күренекле философтар Песталоцци, Фребель, артабан Герберт, Дистервег, Д. Дьюри .б. тарафынан алынды. Оҙаҡ йылдар хакимлыҡ иткән мәғариф философия ына Ян Амос Каменскийҙың да өлөшө ҙур. Иҡтисади, социаль, сәйәси әм рухи өлкәлә, шулай уҡ йәмғиәттәр ғәйәт ҙур үҙгәрештәр кисереүгә ҡарамаҫтан, мәктәп аман да Ян Каменский эшләгән элекке класс–дәрес өлгө ө буйынса уҡытыуын дауам итә. Каменский белем биреүҙең боронғо грек философия ы идеяларын, айырыуса Платон менән Аристотель хеҙмәттәрен файҙаланып, христиан тәғлимәтенә яраҡлаштырып эшләнгән схоластик системаға ҡаршы булған. Аристотелдең, белем тыумыштан бирелмәй, ә факттарҙы туплау, күҙәтеү әм факттар өҫтөндә уйланыуҙы күҙ унында тота, тип әйтеп ҡалдырғаны билдәле.

Ян Каменскийса уҡытыу башлыса сенсуалистик концепцияға ҡайтып ҡала әм танып белеүҙең берҙән-бер сығанағы – тойоу әм белем туплауҙың дидактик алымын аңлата. Алымда материалистик йөкмәтке лә бар, тирә-йүнде танып белеү әүҙем процесс булып, белем биреү менән тығыҙ бәйләнгән. Кешеләрҙең бары ы ла, ғалим фекеренсә, танып белеү әм ғилем алыуға әләтле, ябай халыҡҡа ла ғилем юлының асыҡ булыуы мө им. Педагогика тарихында беренсе булып Каменский айырым фән булараҡ дидактиканың система ын эшләй. Унын дидактик принциптары — күргәҙмәлелек, аҙ-аҙлап үҙләштереү, кемгәлер оҡшатырға тырышыу, күнекмәлелек – тәбиғәт закондарын аңлап үҙләштереп, белемде ныҒытыуҙы талап итә. Был бөйөк дидактиканың иң ҡиммәтле яғы шунда: "Бары ын да бөтә енә лә өйрәтеү сәнғәтен булдырып, христиандар дәүләттәренең әр община ында, ҡала әм ауылдарында ике енес үҫмерҙәре лә белем алырлыҡ мәктәптәр асырға. Был мәктәптәр әхлаҡты камиллаштырыуға, изге ниәт-тойғолар үҙләштереүгә, шулай итеп йәшлек йылдарынан уҡ әлеге тормош, киләсәк өсөн кәрәкле барлыҡ нәмәләрҙе лә белергә булышлыҡ ит ен". үҙ, күренеүенсә, әр яҡлап үҫешкән гармониялы шәхес тура ында. Был маҡсатҡа балалар, үҫмерҙәр әм йәштәрҙең тәбиғи үҙенсәлектәрен яҡшы белгәндә әм үҙләштергәндә генә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 144



өлгәшергә мөмкин. Каменскийҙың ошо тәғлимәтенә эйәреп, Рәсәйҙең ғалим-педагогтары, иң элек философтары, философия үҙенең тәбиғәте буйынса мәғариф өлкә ендә система барлыҡҡа килтереүсе, әйҙәүсе урын биләргә тейеш, тигән фекерҙе уртаҡлаша. Был фекергә сәйәсмәндәр, дәүләт эшмәкәрҙәре лә ҡолаҡ ала. Владимир Мономах, Петр I, В. Ленин кеүек әләтле шәхестәр мәғарифҡа тәрән үҙгәрештәр индереү өсөн С. Радонежский, Нил Сорский, Максим Грек, Андрей Рублев, Андрей Курбский .б. кеүек билдәле философтарҙы йәлеп итә.

XVIII быуат башында Рәсәйҙә философик белемдең ике төрө – донъяуи әм дини — таралған. Был бүленеш Петр Беренсенең Синодаль, йәғни дини реформа ы арҡа ында килеп сыҡҡан. Император раҫлаған Дин ҡағиҙәләрендә, мәҫәлән, дини-академик белем буйынса махсуслашыу ҡарала әм был, үҙ сиратында, философик белемдең дини әм донъяуи киҫәктәргә бүленеүенә килтерә. 1755 йылда М. В. Ломоносов тырышлығы менән нигеҙ алынған Рәсәй университетының философия факультетында логика, этика әм философия тарихы уҡыу программа ына индерелә. Рәсәйҙә философия мәктәптәренең үҫеүе ошо уҡ фәндең Германияла үҫеүе менән йәнәшә бара. Тәүҙә Рәсәйҙә Лейбниц-Вольф кеүек фекер эйәләренең йоғонто о көслө булып, XIX быуатта И.Кант, И.Фихте, Ф.Шеллинг философия ы менән ҡыҙыҡ ыныу арта. XX быуат башында Рәсәйҙә неокантиантлыҡ менән ҡыҙыҡ ыныу көсәйә. Совет хакимлығы йылдарында дәүләттең рәсми идеология ы итеп К. Маркс менән Ф. Энгельстың Рәсәй шарттарына яраҡлаштырылған тәғлимәте алына. Яңы мәғариф философия ының мәғәнә ен әм йөкмәтке ен билдәләгәндә илдең ниндәй үҫеш баҫҡысында булыуына таянып эш итеү, ә методологияла, стратегик үҙгәрештәрҙә уның иммәтен әм маҡсаттарын асыҡлау мө им. Был осраҡта, ис үҙ еҙ, Рәсәй философы әм педагогы С. И. Гессендың фекерен ҡулланма итеп алыу мотлаҡ. Ғалимса әйт әк, мәғарифтың маҡсаты кешенең билдәле әхлаҡи, хоҡуҡи, ғилми, сәнғәти, хужалыҡ итеү әм дини мәсьәләләрҙе үҙ эсенә алған мәҙәни иммәттәр йыйылма ын үҙләштереүенә ҡайтып ҡала. Белемдең сифатын С.И. Гессен философияның теге йәки был өлкә ендә эшләгән уҡытыусының шәхесе менән бәйләй. Этика, философия, хоҡуҡ, эстетика, логика, хужалыҡ итеү философия ы, дин белеме – шулар иҫәбендә. Ошо йә әттән С.И. Гессен былай тип яҙа: “Педагогик эшмәкәрлектең мө имлеген аңлау, эште дөрөҫ алып барыу өсөн, ни тиклем генә мө им булма ын, бер ниндәй педагогик әҙерлек тә ғилми, нәфис әм хужалыҡ итеү предметтарын уҡытҡан педагогтың был өлкәләрҙә белеп еткермәүен... алмаштыра алмай. Фәнгә, сәнғәткә, хужалыҡ итеүгә әм дингә ошо өлкәләрҙе яҡшы белгән әм мәҙәни ижадта тик шулар менән генә йәшәгән кеше генә ылыҡтырырға әләтле”.

Икенсе бер урыҫ педагогы К.Д. Ушинскийҙың да педагогик мираҫы ғәмәлдә тәбиғилек принцибына ҡоролған. “Педагогик антропология” тигән китабында ул “тәбиғилек” төшөнсә енең мәғәнә ен аса. “Педагогика кешене әр яҡлап тәрбиәләргә теләй икән, ул кешене иң элек әр яҡлап белергә бурыслы”,– тигән Ушинский. Был үҙҙәргә аңлатма кәрәкмәй, авторҙың уҡытыу әм тәрбиәгә ҡарата ниндәй ҡараште булыуы яҡшы күренә. Кешенең нимәгә әләтлелеген асыҡламайынса, уның тәбиғәтен, тәбиғәттәге урынын дөрөҫ билдәләп булмай. Америка философы, педагог Д. Дьюри “Демократия әм мәғариф” тигән китабында кешенең шәхескә әүерелеүендә тәбиғәт роле тура ында түгел, ә социаль тормош, уның төп өлкәләренең йоғонто о хаҡында үҙ алып бара. Тәрбиә мәсьәлә е был хеҙмәттә социаль тормоштоң айырылғы ыҙ өлөшө итеп үрәтләнә. Дьюри тәбиғилектең социаллек, шәхестең социалләшеүе менән алмашыныуын асыҡлаған философ-педагог була. XIX әм XX быуаттар сигендә Европала яңы методология барлыҡҡа килә: бала тәбиғәт емеше булараҡ ҡына түгел, ә йәмғиәттең бер өлөшө булараҡ ҡарала башлай.

Кризисҡа дусар ителгәндә Көнбайыш Европа илдәре унан мәғариф ярҙамында

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 145



сығыр булған. Бөйөк француз революция ынан уң Францияла ла, Икенсе донъя уғышынан уң Германия, Япония әм АҠШ-та ла шул хәл күҙәтелә. Сөнки мәғариф ҡына социаль тормошто иҫкелек ҡалдыҡтарынан арындыра, иҫке менән яңының ҡаршылығын тетрәнеү еҙ бөтөрөргә булышлыҡ итә. Шуға күрә яңы мәғариф философия ын эшләү мәсьәләләре төрлө ғилми форумдарҙа бер нисә тапҡыр күтәрелде. 1998 әм 2003 йылдарҙа Бостон ҡала ында (АҠШ), 2002 йылда Австрияның баш ҡала ы Венала яңы философия ижад итеү мәсьәләләре әр яҡлап әм тәрән тикшерелде. Бостонда үткән XX Бөтә донъя философия конгресының төп идея ы француз философы Пьер Аубенконың "Белем – кеше тәбиғәте аша" тигән сығышында сағылыш таба. Философ әйткәнсә, кеше тәбиғәте ике төрлө ҡабул ителә, шуға күрә тик белем (пайдейя) генә кешене тулы мәғәнә ендә кеше итә ала. Белем ярҙамында кешенең тәбиғәтен дә үҙгәртергә, мәҫәлән, аҡыл еңдереп, кешене көс ҡулланыу, золомға ауышыуҙан арындырырға була. Йәғни белем кешене үҙен-үҙе үҫтереүгә этәрергә тейеш. Бостондағы Конгрестың төп идея ы — философияны бөйөк мәҙәниәт булараҡ үҙгәртеп ҡороу, боронғо традицияларҙы тергеҙеү.

Конференцияла ҡатнашыусыларҙың ығымта ы шундай: хәҙерге иң мө им бурыстарҙың бере е — үткән йылдарға йомғаҡ я арға, белем идея ының ҡай ы дәүләттә, ниндәй үҫеш баҫҡысында булыуына ҡарамаҫтан, бөтә донъя философтарын берләштерә алыу-алмауын асыҡларға. Төрлө илдәрҙән килгән философ, социолог әм политологтар сығышында бер төп фекер яңғыраны: бөгөнгө донъя бынан бер нисә тиҫтә йыл элеккегенән ныҡ айырыла. Ул бик тиҙ ойоша, ҡасандыр милли, дини мәсьәләләр дөйөм кешелек, глобаль кәүҙәләнеш алып, яңы идеялар, яңы системалар сиселештәр көтә. Был хәлдә донъя философтарынан башҡа бер көс тә кешелек мәнфәғәттәрен сағылдырған яңы идея, логик ынланыш тәҡдим итә алмай. Был фекер Бостон университеты профессоры А. Олсондың йомғаҡлау үҙендә ентекле асып бирелде. "Үҙен аҡлау өсөн кешелек мәҙәни фекер төрлөгөнә, берҙәм этик ҡанундарға эйәрергә бурыслы. Дөйөм кешелек, мәҙәни әм дини төрлөлөктән башҡа,— буш үҙ". Ысынлап та ошо ҡанундарға ихтирам булмай тороп, тотороҡлолоҡто, кешелеклелек мөнәсәбәттәрен аҡлап ҡалыу мөмкин түгел.

Мәғарифтың көрсөккә терәлеүе белгестәрҙә тармаҡтың яңы философия ын эшләү менән ҡыҙыҡ ыныуын арттырҙы. Был тәбиғи күренеш ысынбарлыҡтың ҡатмарлылығына бәйле. Бөгөн ил тормошонда үҙенсәлекле революция күҙәтелә. Йәшәү сифатының өҫтөнлөктәре, дәүләттең үҫеш маҡсаттары ҡырҡа үҙгәрә. Әммә, үкенескә ҡаршы, уҡытыуҙың маҡсаты әм өҙөмтәләре тура ында уртаҡ фекер әле лә юҡ. Элекке СССР-ға донъяла алдынғы урын тәьмин иткән мәғариф философия ы йәмғәтселекте, айырыуса йәштәрҙе, ҡәнәғәтләндермәй. Уларҙың байтағы сит ил юғары уҡыу йорттарында белем алырға тырыша. Уҡытыуҙа мәғарифтың классик алымынан өр-яңыларына күсеү мотлаҡ. Әлегесә белемде яйлап туплау әм артабан нисек етте шулай ҡулланыу көн талаптарына яуап бирмәй.

уңғы 10–12 йылда йәмғиәттә технократлашыу көсәйеүҙә мәғарифтың да йоғонто о бар. Был тәбиғи фәндәрҙе уҡытыуҙың өҫтөнлөк алыуында, йәғни тармаҡта тәбиғи фәндәрҙе өйрәнеүгә иғтибарҙы күберәк бүлеүҙә күренә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был йәмғиәт ихтыяждарына ҡарап белгестәр әҙерләүсе булараҡ мәғарифҡа насар мөнәсәбәт уятып, тармаҡтың мәҙәни, социаль йөкмәтке е юҡҡа сығыуға. Мәғарифтың яңы философия ы алмашҡа килеүсе яңы донъяның ихтыяждары менән бергә социаль-мәҙәни иммәттәрен дә ҡәнәғәтләндерергә бурыслы.

Цивилизацияның яңы тулҡыны әлеге индустриаль йәмғиәтте алмаштырыусы информацион йәмғиәттең үҫешенә бәйле булып, унда йәшәгән кешеләрҙең фекерләүенә лә йоғонто я ай. Мәғарифтың үҫеш йүнәлештәрен өйрәнеүсе Б.Гершунский, А.Гуревич, В.Дмитриенко кеүек билдәле философтарҙың фекеренсә, иҫкергән индустриаль ҡарашҡа ҡапма-ҡаршы булған яңыларын булдырыу ғына

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 146



өҫтөнлөклө сифатҡа эйә булған иммәттәрҙе аҡлай, артабан үҫтерә ала. Өр-яңы технологиялар нығынған мәлдә хеҙмәттең тәбиғәте үҙгәрә, ул энергия аҡлау сығанаҡтарына күберәк таяна, яңы эш урындары барлыҡҡа килә, кеше байлыҡты икенсе төрлөрәк аңлай. Информацион-компьютер технологиялар йәмғиәт тормошоноң барлыҡ өлкәләрен үҙгәртеп, кешеләрҙең йәшәү рәүешенә, шул иҫәптән хеҙмәт эшмәкәрлегенә лә, ныҡлы йоғонто я аны.

2006 йылда Магнитогорск ҡала ында Бөтә Рәсәй ғилми конференция ында сығыш я аған М. Карнаухтың фекерҙәренә ҡарағанда, хеҙмәт баҙары юғары әҙерлекле белгестәр сығарыуҙы талап итә. Иң элек йәмғиәттең социаль-иҡтисади үҫешенең яңы баҫҡысҡа күтәрелеүенә бәйле. Яңы технологияларҙы күпләп ижад итеү, информацияның тиҙ “иҫкереүе”, матди етештереүҙең ҡатмарлашыуы, автоматлаштырылыуы әм компьютерлашыуы, эштә ғәҙәти булмаған хәлдәрҙең барлыҡҡа килеүе — былар бөтә е лә уҡыу йорто тамамлаусыларҙан яҡшы белем менән бергә билдәле әләттәргә эйә булыуҙы, ығылмалылыҡ, үҙ аллы ҡарарға килә алыу .б. сифаттар талап итә.

Тимәк, Рәсәй философтары әм педагогтары әлегә ҡул теймәгән мәғариф философия ының яңы категорияларын эшләүгә кисекмәҫтән тотонорға бурыслы. Был тәңгәлдә ҡай ы бер ҡараштар бар. Н.Пищулин әм Ю.Огородниковтың фекеренсә, мәғариф философия ы ул — тармаҡты дөйөм теория күҙлегенән ҡараған социаль-мәҙәни ғәмәл булып, милли-дәүләт әм донъя мәғарифы берлеген аңлата. Философик мәғәнәлә был донъя ҡоролошо, донъя тәрбиә е йөкмәтке енә ярaштырып ҡарау тип ҡабул ителә. Ғилемлелек — шәхестең күптән үҙләштергән алымдарға йәшеренгән билдәле ҡалыптар, нормаларҙы тоя-күрә белеү әләте. Йәғни кешенең тәбиғи әләтенән тыш ижади камиллашыу юлында ҡабул иткән мөмкинлектәре. Донъяға яңы ҡараштың ҡиммәте шунда: ул ваҡыттан алда килә, үҫә барған цивилизация шарттарында йәшәргә, эшләргә әҙер шәхес тыуҙыра.

Мәғарифтың яңы философия ы фән әм техниканың төрлө өлкәләрендә эшләгән йәмәғәтселекте донъяның киләсәген фаразлай алырлыҡ кимәлдә тупларға бурыслы. Был йәмәғәтселектең тәбиғи фәндәрҙе ҡабартыу яҡлыларҙың кәйефен үҙгәртерлек, кеше яратыу, патриотлыҡ, ауыр хәлдәге халыҡ, этнос әм кешеләрҙең хәлен аңлай белеү иммәттәре, йөҙәр, меңәр йылдар буйы тупланған барлыҡ ыңғай, изге нәмәләрҙе аҡлау буйынса яңы идея, йүнәлеш әм алымдар эшләүе мө им. Әлбиттә, әр ғилми тикшеренеү, ғалимдың асышы, был кешелеккә ниндәй файҙа килтерер, тигән орауға яуап биреүе мотлаҡ. Ул беҙҙең мөхиткә файҙалы булырмы, әллә, кире енсә, зыян килтерерме? Цивилизация үҫешенә ыңғай йоғонто я армы, әллә кире енсәме? Яңы мәғариф философия ының иммәте тап ошонда. Йәш быуындың аңы тап ошондай иммәттәр менән байытылыуы мотлаҡ. Ҡай ы өлкәлә эшләүгә ҡарамаҫтан, уҡытыусы-педагогик коллективтар ошо мө им бурысты атҡарырға бурыслы. әр предметтың философик фекерҙәр менән байытылыуы, үҫеп килеүсе быуынды киләсәк тура ында фекер йөрөтөргә өйрәтеүе бөгөн айырыуса ҡиммәт. Милли мәғариф концепция ының шулай уҡ рухи йүнәлештәре лә булыуы мотлаҡ. Әхлаҡи йүнәлеш итеп әр шәхестең ҡабатланмаҫлығын, кеше ғүмеренең ҡиммәтлеген, уның әр яҡлап үҫешен күр әтергә кәрәктер. Фәндең төп тәғәйенләнеше – донъяны бөтөн итеп ҡабул итеү, уның менән гармонияла йәшәү теле булдырыу.

Донъяға ҡараштың икенсе талабы — экологик мәҙәниәт. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, баҙар иҡтисады экологик мәҙәниәтте тәрбиәләүҙә төп тоҡарлыҡ булып тора, сөнки ҡулланыусылар йәмғиәтенең төп маҡсаты — табыш алыу, ә тирә-яҡ мөхитте, тормош сығанаҡтарын аҡлау түгел. Экологик аң әм культура күпләп етештереүҙе, ҡулланыуҙы кәметеүҙе, иҡтисадты камиллаштырыуға аҡсаны күберәк талап иткәндә, урлап йыйылған капитал был аҙымға бармаясаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлеге капиталды кешелектең киләсәге борсомай, ул бөгөнгө көн менән генә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 147



йәшәй. Кешелек донъя ының әлеге үҫеш йүнәлеше, йөкмәтке е үҙгәреү унық техноген баҫҡыстан кешелекле, ноосфер йөкмәткегә тиҙерәк күсеүен аңлата. Донъяны закондар, әхлаҡлылыҡ принциптары менән ҡоралландырмай тороп, был маҡсатҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Кешегә әлеге кризистың сәбәптәрен әм ауырлығын, уны еңеп сығыу мөмкинлеген аңлата, ҡай ы бер мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнашырға теләү тойғо о уятырлыҡ философия ижад итеү — Рәсәй мәғарифының бурысы. Тирә-яҡ мөхиткә төҙәлмәҫлек зыян килтерелгән хәҙерге шарттарҙа бындай сифаттарҙы ғаиләлә, балалар учреждениеларында бала саҡтан тәрбиәләү мө им.

Етеҙ үҫешеүсе әлеге донъя мәғарифҡа күп етди проблемалар ҡуя. Тармаҡтың яңы идеология ы әм философия ының мө им бурыстары булып, беренсенән, информацион йәмғиәттең аҡланыуын, артабан камиллашыуын тәьмин итеү; икенсенән, технологиялар әм кеше менталитеты берлегендә глобаль мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ауырлыҡ кисергән йәмғиәткә ярҙам итеү иҫәпләнә. Әлеге хәл ғилми-интеллектуаль йәмәғәтселектән донъяуи мәсьәләләрҙе халыҡтарҙың мәҙәни-рухи традицияларын иҫәпкә алып, рухи күҙлектән үткәреүҙе талап итә. Фән әм мәғарифтағы кризисты еңеү өсөн махсус программа эшләп ғәмәлгә ашырыу мотлаҡ. Унда хәл ителәсәк мәсьәләләрҙең тулы ынса иҫәпкә алыныуы мө им. Фундаменталь фәндең төп роле тура ында ла оноторға ярамай, сөнки ул Ватан мәғарифының Көнбайыш алдында өҫтөнлөгөн тәьмин итәсәк әм нығытасаҡ, мө им ҡаҙанышы — фундаменталлекте әм классиклыҡты аҡлаясаҡ. Хәҙерге мәғариф система ы йәш быуынға донъя халыҡтарының традицияларын, аҡылын әм әхлаҡи байлығын үҙенә туплаған дөйөм кешелек иммәттәрен еңдерергә бурыслы. Рәсәйҙе алдынғылар рәтенә сығарыу өсөн, быны ил етәкселәре аңларға тейеш, яңы идеялар, дәүләттең үҫеш стратегия ы, мәғариф, социаль сәйәсәт аша рәсәйҙәр аңына еткерергә кәрәк. Бындай фундаменталь мәсьәләне айырым философик, сәйәси, экологик хеҙмәттәр генә хәл итә алмай. Бының өсөн донъяны яңыса аңлау мотлаҡ. Тәбиғәтте әм социаль донъяны көс менән үҙгәртергә ынтылыуҙан арынып, кеше эшмәкәрлегенең яңы идеалдарын, өр-яңы идеология ижад итеү — донъяны яңыса аңлауға күсеү мотлаҡ. Был ҡаҙаныш илдәрҙе, тотош ҡитғаларҙы бүлгеләгән иҫке ҡараштарҙы алмаштырыуға, бер төптән эш итеүгә килтерәсәк. Уның үҙәге — мәҙәниәттәр өйләше, эгоцентризмдан баш тартҡан дөйөм кешелеклелек идея ы.

Мәғарифтың яңы философия ы шулай уҡ шәхестең үҙенсәлекле үҫешенә юл асырға бурыслы. “Инженерға гуманитар белем, мәҫәлән, философия нимәгә хәжәт?” тигән орауға яуап бирергә ваҡыт. Яуап бер: беҙ – иң элек кеше, унан уң ғына инженер, информатик, химик, табип .б. Ҡатмарлы, ҙур тиҙлектә үҫеүсе цивилизация шарттарында йәшәгән кешенең төп иммәте — философик өлгөргәнлегендә. Боронғо әм аҡылды үҫтереүсе философия кешегә донъяға дөрөҫ ҡарарға мөмкинлек, дөйөм мәҙәни иммәттәр, тормош мәғәнә е тура ында мәғлүмәт бирә. Йәмғиәтебеҙҙә мәҙәниәт әм рухтың тарҡалыуы хәҙер бер кемгә лә сер түгел. өм өҙлөк, оят ыҙлыҡ, байлыҡ артынан ҡыуыу, коррупция кеүек яман күренештәрҙән башҡаса нисек арынырға?! Яуап бер: яңы философия аша. Рәсәй өсөн ул бөгөн ҡаты ауырыуға дарыу кеүек кәрәк.

**Миҙхәт САҘРЫЕВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 148



# ҠАҢЛЫЛАР БАЙРАҒЫ АҪТЫНДА

Тарих... Риүәйәттәр... Уҙған заманды барлау, быуындар төпкөлөнә төшөү — әр кемдең изге бурысы. Сөнки Тарих-ата үтә талапсан, ул уҡытыусы ла, тәрбиәсе лә.

Бөгөн Көнбайыш Башҡортостанда “Өфө — амар” тип аталған оло юл бар. Элек уны “Өфө — Биләр юлы” тип йөрөткәндәр. Бына ошо юлдың Бүздәк ауылына боролған урынында 1193 йылда Өфөгә барышлай Биләр ханы Ғабдулла-Силбәр ислам дине таратып йөрөүсе туғандары, кенәздәр Өйҙәш-Мөхәммәт әм Көйҙәш-Мөхәммәт менән осраша. Ошо төбәктә йәшәгән башҡорттарҙың мәжүси классик ырыуҙары әм уғырҙарҙың күбе е ислам динен ҡабул иткән була. Мосолманлаштыу тура ында дин ә елдәре ханға ла еткерә. Ошо осрашыуҙан уң, Ғабдулла-Силбәр әсә е яғынан туған булған Ҡыпсаҡ ханы Башҡорт исемле яраткан баба ы хөрмәтенә Урал тауҙарына тиклемге төбәкте “Башҡорт иле” тип атай.

Кем уң ул Башҡорт хан? XII быуаттың 50-се йылдарында был шәхес көнбайышта иң көслө ҡыпсаҡ берләшмә е ханына әүерелә. Хандың 20 меңлек атлы ғәскәре була. Урыҫ кенәзлектәренең сәйәси эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнашыусы уҙаман. Уның ханлығына Урал әм Урал алды башҡорттары менән тамырҙаш башҡа ҡәбиләләр әм ырыуҙар ингән.

XII быуаттың 60-70 се йылдарында урыҫ кенәзлектәренең ҡыпсаҡтарҙы талау өсөн ойошторған ҡанлы яуҙары Башҡорт Урҙа ының көсөн тамам ҡаҡшата. 1184 йылдың июнендә Башҡорт, Көбәк хандар урыҫтарға әсирлеккә эләгә әм бик ҙур сығымдар иҫәбенә генә иреккә сығарыла.

1185 йылда Башҡорт хан ҡыпсаҡтарҙың Ҡоншаҡ ханы етәкселегендәге урыҫтарға ҡаршы яуында ҡатнаша. Ғүмер көҙөнә еткәс, иҫән ҡалған берләшмә е менән үҙ исемен йөрөткән Башҡорт иленә — ейәне Өйҙәш-Мөхәммәт (1156 — 1235) янына килә. Риүәйәт буйынса, 1206 йылды Сәрмәсән йылға ының урта ағымында, Белалап тауында, ерләнгән. Тыуған йылы билге еҙ.



*Ҡаңлылар байрағы.*

Тарихта, Башҡорт иле Башҡорт хан исемле

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 149



ҡыпсаҡ берләшмә енең эре ҡәбилә е атама ынан килеп сыҡҡан, тип фараз ителә. Шулай уҡ ҡыпсаҡ халҡы ойошоуҙа боронғо башҡорт ырыуҙары ҡатнашыуы әм башҡорттарҙың урыҫтар менән тәүге бәйләнештәре тура ында йылъяҙмаларҙа ла әйтелә.

Бөрө, Сәрмәсән йылғалары әм ҡушылдыҡтары буйында, Ҡаңлы түбә (Бүздәк) юл киҫелешенән Өфөгә илтеүсе боронғо юлда урынлашҡан ауылдарҙың мең йыллыҡ тарихы бар. Ошо төбәктә Ҡаңлы (Ҡайыңлы) олоҫо ойоша башлаған ваҡыт 1188 йылға тура килә. Олоҫ үҙәге Белалап ауылына 1186 йылда нигеҙ алына, ләкин үҙәк әм уға йәнәшә урынлашҡан ауылдар халҡы үҙ-ара ыҙғышта, баҫҡынсыларға ҡаршы көрәштә юҡ ителә. Ҡай ылыр ауылдар ҡабаттан тергеҙелә, шулар ара ынан Шәҙе, Ҡарасайылға, ынташ, Сабай (Өйҙәш) ауылдары беҙҙең көндәргә килеп еткән. Исеменә — есеме тигәндәй, кенәз Өйҙәш-Мөхәммәтте аҡлап йөрөгән, мәжүсиҙәр әм тәңреселәр менән алышта әләк булған ғәскәр башлығы Бел-Алып хөрмәтенә олоҫ үҙәге аналған ауылға Белалап исеме бирелә.

Ислам динен таратып йөрөүсе кенәз Өйҙәш-Мөхәммәт — сығышы буйынса Биләр ҡәбилә е башҡорто. Ул бәләкәйҙән имән ағасын яратҡан була. Йәй айҙарында сәфәргә сыҡ а, юлда осраған шул ағас төбөндә туҡталып ял иткән йәки намаҙын уҡыған. Күберәк ғүмере олоҫ үҙәге Белалапта үтә.

Ислам миссионеры Сәрмәсәнгә әм Бөрөгә ҡойған бөтә йылға буйҙарын йөрөп сыға, унда йәшәгән халыҡҡа ислам динен тарата. Бер йылды ул Сәрмәсәнгә ҡойған Өйҙәш (Иҙәш) йылға ынан юғары күтәрелә әм 1186 йылда үҙе исемендәге (Сабай) ауылына нигеҙ ала. Ләкин, урындағы мәжүсиҙәр әм тәңре еҙҙәр өжүменән аҡланыу өсөн, мосолман башҡорттар төпләнеү урынын йә Балыҡтауға, йә Ташлытауға күсерә. Тик 1207 йылдың көҙ аҙаҡтарында Балыҡтау өҫтөнә аҡсылар өсөн күҙәтеү ҡоролма ы ҡуйылып, ауылдың тирә-яғына ҡәлғәне хәтерләткән имән ҡаҙыҡтары ултыртылғас ҡына, көтөлмәгән “ҡунаҡтар”ҙан ҡотолоу мөмкинлеге тыуа. Шуға ла Сабай (Өйҙәш, Субай) ауылына нигеҙ алыныу ваҡыты тип (Өйҙәш исеме менән) 1207 йыл иҫәпләнә.

Өйҙәш-Мөхәммәттең буласаҡ Сабай ауылы урынына туҡталыуы осраҡлы түгел: Балыҡтау, Ташлытау, Асытау, Шишмәтау өҫтәрен имән урманы ҡаплаған була. Иҙәш (Өйҙәш) йылға ы буйҙары, уның күркәм тәбиғәте үҙенә тарт а ла, ғүмере күберәк Сәрмәсәндең урта ағымындағы Белалапта — “Иске йорт”та үтә. Күрә ең, дини ғөрөф-ғәҙәт шулай талап иткәндер. Өйҙәш-Мөхәммәтте Белалапта ерләгәндәр.

Өйҙәш-Мөхәммәт ейәне Хатай-Май (1234 — 1319) Ҡаңғылы, Ҡаңғылы-Юрматы, Ҡан-Ҡаңлы (Ҡайыңлы), Ҡаңлы, Ҡаршын, Дыуанай ырыуҙарын берләштереп, бер үҙ олоҫ (өлкә) ойошторған була. Ырыуҙар берләшмә е айырым өлөштәргә тарҡалғансы Белалап өлкә үҙәге хеҙмәтен үтәй. Иҫке йорт хужа ының ейәне, ғүмеренең уңғы көндәре яҡынлашҡас, бөтөн ырыуҙарға ла ерҙе тигеҙ бүлеп бирә. Ә бер улы Ҡан-Ҡаңлинға (1270—1360) ата ы Хатай-Майҙан Сәрмәсәндең урта өлөшө әм ҡушылдыҡтары эләгә. Ҡаңлы түбә киҫелешенән Асылыкүлгә әм Ҡандракүлгә (Ҡандар күле) ҡәҙәр дала күп ырыуҙарҙың күсеп йөрөү төйәгенә әйләнә.

Монгол яуынан уң Ҡаңғылы, Ҡан-Ҡаңлы, Ҡаңлы, Юрматы, Бөрйән, Үҫәргән ырыуҙары үҙ-ара аралаша. Шуға ла тамғалары бер-бере енә оҡшаш: ике ҡабырға, әнәк, ҡаҙаяҡ, әүернә, сүкеш. Мәжүсилектән, тәңреселектән ҡалған ҡоштары ла юрматыларҙыҡы әм үҫәргәндәрҙеке кеүек — торна.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 150



Ҡаңлыларҙың ерҙәрен, тамғаларын, ҡошон, ағасын Алтын Урҙа хакимдарынан раҫлатыусы, олоҫтоң йыйын урынын (Белалап), кесе йыйын төбәктәрен (Шәҙе, Ҡарасайылға, ынташ, Өйҙәш (Субай, Сабай) билдәләтеүсе кенәз Ҡан-Ҡаңлин анала. Урҙа хакимынан ул ҡәбилә оранын (уран) ғына ала. Кенәз Ҡан-Ҡаңлинға тамғалар, торна, имән ағасы сигелеп эшләнгән йәшел төҫтәге әләм йөрөтөү хоҡуғы бирелә.

Ҡан-Ҡаңлинға тархан дәрәжә е бирел ә лә, ғүмеренең аҙағына тиклем ул үҙен кенәз тип белә әм баҫып алыу уғыштарында ҡатнашмай. Ҡан-Ҡаңлин да Белалапта ерләнгән. Ҡаңлылар тарафынан кенәз Ҡан-Ҡаңлинға “Баба-Ҡаңлы” исеме беркетелеп ҡала.

Үҫәргәндәрҙән айырылып, Ирәндек буйҙарынан ҡабат үҙ ҡәрҙәштәре янына ҡайтҡан ҡаңлыларҙы кенәз Башҡорт (Ҡан-Ҡаңлы улы) ҡабул итә. Был нәҫел Сәрмәсән башланған ерҙә төпләнә ә лә, аҙаҡ нуғай мырҙалары баҫымы аҫтында Асылыкүл әм Ҡандракүл буйҙарында күсенеп йөрөргә мәжбүр була.

Тарихи Башҡортостан ерҙәрендә йәшәгән ырыуҙарҙы берләштереүгә кенәз Башҡорт күп көс ала. Уның Табын, Мең ырыуҙары ара ындағы ыҙғышта аралашсы ролен үтәүен бабамдар тарафынан өйләп ҡалдырылған миҫал да раҫлай. Көнбайышҡа күсеп килгән аҙ анлы Ҡырғыҙ (Ҡаҙаҡ), Ҡаршын, Йылан ырыуҙары ҡаңлылар әләме аҫтында берләшә башлай. Ләкин Урта Азия әмире Аҡ ак Тимер яуы көньяҡ әм көнбайыш башҡорттарының бер халыҡ булып берләшеүен күп йылдарға тоткарлай. Ҡаңлы олоҫо Нуғай, Ҡазан, Уса даруғаларына бүлгеләнеп бөтә. Кенәз Башҡорт та үҙенең уңғы төйәген Белалапта таба.

Аҡ аҡ Тимер яуынан уң башҡорт тарихы өҙөлөп ҡалғандай була, әммә Ҡаң-Ҡаңлы шәжәрә ендә быуындар теҙмә е дауам итә. Кенәз Башҡорттоң улы Остоҡ, уның улы Отон, уның улы Мәмәт, уның улы Иҙәш батырға (1506 – 1588 йылдар) килеп туҡтала.

Урыҫ дәүләтенә ҡушылыу алдынан Ҡаңлы олоҫо ваҡ ырыуҙарға, нәҫелдәргә бүленгән була. Ырыуҙар башында байҙар, муллалар, бейҙәр, батырҙар, кенәздәр тора. Улар бер-бере ен үҙ ерҙәренең айырым хужа ы тип таный. Көнбайыштан Ҡазан ханлығы, көньяҡтан Нуғай урҙа ы был тарҡау нәҫелдәрҙе берәм-берәм бөлгөнлөккә төшөрә. Тәү тапҡыр был ҡармаҡҡа ҡаңлыларҙың көньякта йәшәгән ырыуы ҡаба. Икенсе ҡармаҡ Ҡаңлы волосының төньяғында йәшәүсе ырыуҙарға янай. Беренсе сиратта, Кама аша Ағиҙелдән күтәрелгән тоҙ, тире эшкәртеү магнаттары Строгановтарҙың сауҙагәрҙәре Бөрө йылға ы тамағына уҡ килеп етә. Күрә ең, башҡорттарҙың бында электән үк ҡаласығы булған. Ҡаңлы волосының эре ер биләүсе феодалы кенәз Мәмәт Отоновтың бер улына Мәскәү исеме ҡушыуы ла осраҡлы түгел, сөнки кенәз урыҫтар менән аралашып, икмәкте тоҙға алмаштыра торған була. Икенсе сиратта, Себер хандарының башҡортто талау маҡсаты менән Уса юлына уҡ килеп сығыуы ла тарихта билдәле. Ҡаңлы олоҫоноң был өлөшөнә ҡараған юлда хәҙер Бөрө, Благовещен, Борай, Мишкә районддары ауылдары урынлашҡан.

Бүлгеләнгән волость халҡын берләштереү өсөн оран алыусы кенәз Мәмәттең өлкән улы Иҙәш батыр анала. Ул баба ы кенәз Башҡорт күтәргән байраҡты ҡабат тергеҙә. Ирекле кешеләрҙән торған мең ыбайлы ғәскәре менән Иҙәш батыр ата-бабаларынан ҡалған ерҙәрҙе әйләнеп сыға. Ҡаңлы олоҫо был ваҡытта Нуғай, Ҡазан, Уса юлдарында ҡалыу сәбәпле,

ырыуҙарҙы берләштереү ауырлаша. Дыуанайҙарҙың бер төркөмө хәҙерге Благовещен ҡала ы урынлашҡан ерҙәрен ҡалдырып, Сәрмәсәндең урта ағымына күсенә.

1552 йылдың октябрендә Ҡазан ханлығы Мәскәү батшалығы тарафынан емерелә. Урыҫ ғәскәрҙәре көнбайышта йәшәгән башҡорт ырыуҙары ерҙәрен баҫып алыу менән янамай, шуға күрә башҡорттар йәш батша Ивандың тәҡдимен ихлас ҡабул итә. Улар, аҫабалыҡ хоҡуғын аҡлау теләге менән, Мәскәү дәүләтенә ҡушыла.

Төньяҡ-көнбайыш әм көнбайышта йәшәгән башҡорт ырыуҙарының беренселәрҙән булып Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуы тура ындағы хәбәр Ағиҙелдең уң яғындағы ҡаңлыларға ла килеп етә. Иҙәш батыр тәүҙә волосҡа ҡараған ырыу аҡ аҡалдарын Белалапҡа кәңәшкә йыя. Нуғай юлында ҡалған Көньяҡ Ҡаңлы аҡ аҡалдары ғына был йыйында ҡатнаша алмай.

Ҡоролтайҙың кәңәшен тотоп, Иҙәш батыр шул уҡ йылдың ноябрендә бер төркөм ышаныслы атлы ғәскәре менән Ҡазанға юлға сыға. Ләкин, нуғайҙарға әм ханға тоғро ҡалған баш күтәреүселәргә тап булып, ҡанлы бәрелештә бер нисә кеше ен юғалтҡас, ҡаңлылар кире борола.

1553 йылдың ҡышында саңғыла, йәйен атта ошо уҡ сәйәхәт ҡабатланып, тағы ла уңыш ыҙ тамамлана, сөнки баш күтәреүселәр Ҡазанды аман ҡамауҙа тотҡан була. Башҡорт илселәренең изге ниәте был юлы ла тормошҡа аша алмай.

Иҙәш батыр Сәрмәсәндең урта ағымында әм унның ҡушылдыҡтарында урынлашҡан халыҡтарға оран ала. Ҡармасан йылға ының уң яғынан боронғо Өфө – Бүләр юлын ыбайлы сик аҡсылары нуғайҙарҙан аҡлай. Көнбайыштан аҙ анлы Ҡырғыҙ ырыуы атлылары ла ярҙамға килә. Хәҙерге Шишмә районы Аҡзыярат тирә ендә урынлашҡан Нуғай ставка ы мырҙалары, үҙҙәренә буй онорға теләмәгән ҡан-ҡаңлыларға ҡаты абаҡ бирергә ниәтләп, ғәскәр менән ерҙәренә баҫып инә. Иҙәш батыр волосҡа ҡараған барлыҡ ырыуҙарҙы ҡаңлылар байрағы аҫтында баҫҡынсыларға ҡаршы күтәрә. Белалапта ҡаты уғыш булып, ҡаңлылар нуғайҙарҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып сығара. Шул көндән Ҡармасан йылға ының уң яғы әм боронғо Өфө – Бүләр юлы нуғайҙар өсөн ябыла. Олоҫ үҙәге Белалап ауылы тамам емерелә әм ҡабат тергеҙелмәй. Унның тарихи исеме быуындар хәтерендә оҙаҡ аҡлан а ла, аҙаҡ тамам онотола. Тик боронғо зыярат әм тау исеме Белалап ҡына риүәйәттәрҙән беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

1553 йылдың сентябрендә Иҙәш батыр үҙенең ыбайлы мең сик аҡсы ы башында Сәрмәсәндән йыраҡ түгел Ҡаңлы түбә дала ындағы боронғо юлдар киҫелешендә башҡорттар менән өйләшеү өсөн ебәрелгән Иван батша илсе е Семен Ярцевтың ғәскәре менән осраша. Ике яҡтан килешеү акты төҙөлә, Ҡаңлы волосы сиктәре билдәләнә: Ҡармасан йылға ының ул яҡ яры буйлап эске ағымынан тамағына; Бәләкәй әм Оло Нөгөш йылғаларының тотош ағымы буйлап Өсән йылға ы башына; унның ике яры буйлап Йылан волосына, унан ары аҙ йылға ы тамағына, Базы йылға ы башынан йәлдәктәргә; Ағиҙелдән сығып, Бөрө йылға ынан Борай урмандарына, Ҡармасандың өҫкө ағымынан Асылыкүлгә тиклем.

Был килешеү – ҡаңлыларҙың Урыҫ дәүләтенә ирекле ҡушылыуы, башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең Ҡазанға йәки Мәскәүгә барып тормай ғына ата-бабаларынан ҡалған ерҙәрҙе раҫлатыуы хаҡында тәүге документ.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 152



Лəкин улар урыҫ ғəскəрҙəре менəн бер хоҡуҡта Ватанды аҡларға, йəнлек тире е йəки бал менəн я аҡ түлəргə тейеш була.

Иҙəш батыр волосты аҡлау өсөн байраҡты ҡусты ы Мəскəү Мəмəтовҡа тапшыра əм йөҙ башы булып Ливон уғышына алына.

Ливон уғышында ике йыл йөрөп ҡайтҡан Иҙəш батыр Мең ырыуы менəн берлəшеп, нуғайҙарҙы үҙ ерҙəренəн ҡыуып сығарыуҙа ҡатнаша. Лəкин, көньяҡ Етерыу берлəшмə е азатлыҡ яулауға ҡарамаҫтан, баҫҡынсылар яңынан килеп, был ерҙəргə дəғүə итə башлай. 1557 йылда Мəскəүгə бөтə башҡорттар исеменəн барып, Урыҫ дəүлəтенə үҙ иректəре менəн ҡушылыу тура ында килешеү төҙөгəс кенə, был төбəктə тыныслыҡ урынлаша. Ҡазан юлы башҡорттарының Мəскəүгə үҙ ирке менəн тəүгелəрҙəн булып ҡушылыуы арҡа ында был төбəктə 1552-1553 йылдарҙан уҡ тыныслыҡ урынлаша. Ə Урал аръяғы башҡорттары Себер ханлығынан XVII быуат башында ғына азат ителə.

Риүəйəт буйынса, Иҙəш, Мəскəү, Көйəҙ батырҙар үҙ тыуған илен аҡлап əлəк була. Улар – Башҡорт хан əм артай бей вариҫтары. Архивта аҡланған “ уңғы артай” исемле ҡулъяҙмала əйтелеүенсə, Ялыҡ бейҙең улдары Ҡармасан менəн Сəрмəсəн баҫҡынсыларға ҡаршы көрəштə əлəк була. Унда ҡарт артайҙың ҡалған ырыуҙаштары менəн Алтын Урҙаның Туҡтамыш ғəскəре яғында түгел, ə, Ватанын аҡлап, Аҡ аҡ Тимергə ҡаршы үҙ аллы уңғы кеше е ҡалғансы əм яуҙа əлəк булған ҡан ҡəрҙəштəре өсөн дошмандан үс алып йөрөүе тура ында бəйəн ителə.

Кенəз Саҡлан Сурашев (Иҙəш батыр ейəне) осоронда Ҡаңлы волосы тамам тарҡала. Кенəздең Боик, Көйөк, Күсəрбай, Туҡбай, Иҫəнбай, Аҡтау, Сынны, Санны исемле улдары була. Ошо бер туған башҡорт аҫабаларының күбе енең түбə башлыҡтары булыуы тура ында тарихтан билдəле. Уларҙың бере е – Боик (1633 – 1735) ырыуҙарҙы берлəштереүгə күп көс ала əм 1672 йылда олоҫ ерҙəрен ҡабат раҫлатыуҙа ҡатнаша. Лəкин көньяҡ ҡаңлылар Мең əм Табын ырыуҙары йоғонто онда ҡала. Тик 1688 йылдың 19 ноябрендə ҡаңлыларҙың юлбашсы ы Мерəҫ Сараев ҡына олоҫто тамам берлəштерə.

Батша Рəсəйенең башҡорттарға ҡаршы баҫып алыу сəйəсəте башланғас, бер-бер артлы ихтилалдар ҡабына. Уларҙы баҫтырыу өсөн батша хөкүмəте башҡорттарға ҡаршы хатта ҡалмыҡтарҙы ла файҙалана. Салауат яуында ҡатнашҡан арҙаҡлы Ҡаңлы волосы старшина ы Минəй Солтоҡовтан (1726–1774) уң ҡаңлылар тамам көс өҙлəнə, ерҙəре тартып алына, күскенсе халыҡтарға таратып бирелə. Айырыуса нəфсе е сигенəн ашҡан, суҡынған татар мырҙа ы Ҡотломөхəмəт Тəвкилев (Алексей Иванович Тевкелев) – башҡорттарҙың ғына түгел, уға бəйле булып хоҡуҡ ыҙ ҡалған татар крəҫтиəндəренең дə яуыз дошманы. Ул Ҡаңлы олоҫо ерҙəрен Иҙəш йылғаының урта ағымынан Сəрмəсəнгə тиклем, килешеү буйынса, 60 йылға ҡуртымға ала. Аҙаҡ, ерҙəрен аҡлап ихтилалда ҡатнашҡан башҡорт аҫабаларын ҡурҡытып йəки алдап, Сəрмəсəн буйындағы билəмəлəрен киңəйтə. Был яуыз мырҙа тура ында “Тəфтилəү” йырында асыҡ əйтелгəн.

Боик кенəздең “Субай” ҡушаматы ҡаңлыларҙың боронғо башҡорт ауылына XVII быуат башында Сабай исеме менəн беркетелеп ҡала. Күсəрбайҙан шул исемле ауыл ойоша, лəкин артабан унда күсеп килгəн мишəрҙəр өҫтөнлөк итə башлай. Сынныйның улдарының бере е Ишембəт була, унының

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 153



ейәне Бүздәк. Тарихта Ҡаңлы түбә исемен олоҫ старшина ы Бүздәк Ишембәтов алмаштыра. Бөгөн Иҫке Бүздәк әм район үҙәге урынлашҡан Бүздәк ауылдары бар. Түбә аҡ аҡалы Туҡбай буласаҡ Күҙәй ауылына нигеҙ ала, ләкин, унының малайҙары булмау арҡа ында, ауыл Йылан ырыуынан күсеп килгән аҫаба башҡорт Күҙәй Ҡоҙаймәтов исемен йөрөтә башлай. Аҡтау Саҡлановтан Иҫке Аҡтау әм Яңы Аҡтау ауылдары барлыҡҡа килә. Ҡаңлы аҡ аҡалы Күнкилде улы Үрмәкәйҙән ошо исемле ауыл әм түбә ойоша .б.

Ҡаңлыларҙың бөйөк тарихи шәхестәре: Ислам динен таратыусы кенәз Өйҙәш-Мөхәммәт, кенәздәр Ҡан-Ҡаңлин, Башҡорт, Иҙәш, Мәскәү әм Көйәҙ батырҙар, кенәздәр Боик әм Аҡтау Саҡлановтар, Минәй Солтоҡов .б. анала. Минәй волость старшина ы вазифа ын егерме йыл башҡара. Салауат Юлаевтың көрәштәше булараҡ, Минәй 1773-1774 йылдарҙағы яуҙа ата-бабалары ҡалдырған байраҡты яңынан күтәрә, ерҙәрен ҡайтарыу, милли азатлыҡ өсөн көрәшә.

Минәй батыр нәҫелдәре: 1812—1814 йылдарҙағы Ватан уғышында батырлыҡтар күр әтеп, ордендар әм миҙалдар алып ҡайтҡан (1839 йылда уғыш ветерандарының иҫәбен алғанда хәрби дәрәжәләре үҙгәр ә лә, яуҙағы дәрәжәләре аҡлана) Бүздәк районы Сабай ауылынан йөҙ башы Бәхтегәрәй Инсеғолов, башҡорт казактары Алтынбай Көҫәпов, Кәлимулла Сыуашбаев, Ихсан Урманшин, Ҡотлоюл Этҡолов, өйөндөк Ҡояшов, Муллағол Зыяшев, Әбделмәжит Миңлейәров; Шығай ауылынан Нужан Шығаев, Әбделмәжит Ҡотломбәтов, Бурансы Амангилдин, Хужахмәт Ғәлекәев; Усман ауылынан Ноғман Килдеғолов, Үлмәҫкол Ниязғолов, Мырҙағол Таймаҫов, Ишкыуат унарсин; Ҡаңлы-Төркәй ауылынан Мөхәмәтғәле Бурanғолов; Кәпәй ауылынан Боҫҡон Ишҡолов; Иҫке Бүздәк ауылынан Хисмәтулла Кинйәкәев; Арыҫландан Әбделғәлләм Ғәҙелшин; элекке Ҡандра районы (хәҙер Туймазы — **Ф.Ш.**) Йәрмөхәмәт ауылынан Иманғол Өйлөков; хәҙерге Саҡмағош районының Рапат ауылынан Фәйзулла Вәлитовтың исемдәре мәңгелеккә Башҡортостан халыҡтары тарихында ҡаласаҡ.

XX быуаттың 20-се йылдары аҙағында Башҡорт автономиялы республика ына нигеҙ алыуҙа ҡатнашыусылар: Ҡаңлы олоҫо түбә аҫаба ы Көйөктән башланған нәҫел Бабич-Мөхтәр-Ишбулды-Ғилуан-Мөхәмәтзакир-шағир Шәйехзада Бабич (Дүртөйлө районы Әсән ауылы); ошо уҡ олоҫтоң түбә аҫаба ы Аҡтауҙан сыҡҡан нәҫел Сабанай-Уран-Тамир-Йы анша-Халиҡ-Дәүләтша-педагог, дәүләт әм сәйәсәт эшмәкәре Муллайән Халиҡов (Бүздәк районы Иҫке Аҡтау ауылы) тарихыбыҙҙа юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. Улар волостың түбә тамғаларын, ағасын, ҡошон сағылдырған байраҡты ҡабат күтәреп, республика флагына йәшел әм зәңгәр төҫтәр өҫтәүҙә ғүмерҙәрен аямай, халыҡ бәхете өсөн көрәште әм еңеп сыҡты. Был — башҡорт милләтенең күмәк ҡаҙанышы. Шулай итеп, был арыҫландай егеттәр игеҙ быуатҡа яҡын элек монгол яуы туҙҙырған милли дәүләтен яңынан тергеҙә алды. Бөгөн күп ырыуҙарҙың байрағын берләштереүсе Башҡорт флагы килә е быуындарға ла маяҡ булып Республика йортонда балҡый.

**Фәнил ШӘРИПОВ.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 154



# УКЫЛМАҒАН ХАТ

5

Егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарының икенсе ярты ы уңышлы килде. Утыҙ етенсе йылда ашлыҡ бик ныҡ унды. Ауылдарыбыҙҙа муллыҡ барлыҡҡа килде. Был Советтар Союзының яңы Конституция ы ҡабул ителеү менән тап килде. Пропагандистар бар тауышына, социализмдың тулы ынса еңеүе, муллыҡ килеүе – бары ы ла социалистик хужалыҡ итеү система ының өҫтөнлөгө, ил иҡтисадының ныҡлығы тура ында өйләй, тип шапырынды.

Был ысынлап та шулай булдымы – беҙгә, балаларға, аңлайыш ыҙ әм кәрәкмәй ҙә ине. Беҙҙе тик бала-саға уйыны, күңел асыу ғына ҡыҙыҡ ындырғандыр. Уны ы инде теләгәнсә булды. Йәмғиәт мул тормошта йәшәй икән, балалар ҙа уның рәхәтен үҙенсә татый...

Оло юлдан әм мәғрифәттән ситтә торған ай белемле ауыл халҡы, бәлки, пропагандистарҙың был әкиәтенә ышанғандыр ҙа, колхоздар – ауыл хужалығын алып барыуҙың иң уңышлы юлы, тип тә уйлағандыр. Сөнки тап ошо осорҙарҙа күмәк хужалыҡтарҙың тамам ойошоуы күҙәтелде, хатта теш-тырнағы менән ҡаршы торғандар ҙа колхоз ағза ы булып китте. “Актив” исеме йөрөткән беҙҙең ауыл колхозы, ысынлап та, хәлле булғандыр. Дөрөҫ, ул ваҡытта техника тигән нәмә булма а ла, крәҫтиән хужалыҡтарынан йыйылған мал-тыуар әм йылҡы малы күп ине.

Колхоз бик күп йылҡы өйөрөнә хужа булды, сөнки уға тиклем әр йортта тиерлек дүрт-биш екке ат аҫрай торғайнылар. Ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ, йылҡы малы ул саҡтарҙа крәҫтиән хужалығында төп тартыу көсө аналды. Шуларҙы колхоз ихата ына килтерҙеләр ҙә инде.

Беҙҙең ауылда колхоз биш бригаданан тороп, йылҡы малы ла биш өйөргә бүлеп йөрөтөлә ине. Колхоздың ул тиклем йылҡы ы булғаны ҡабат күҙәтелмәне.

Беҙҙең ише малай-шалайға ат тоттор алар, үҙе бер ҡыуаныс. Мәҫәлән, өлкәндәрҙең ҡушыуы буйынса беҙ йылҡы малын ыу эсерергә алып барыр булдыҡ. Әлбиттә, ыбай. Ул саҡтарҙа ошонан да олораҡ ҡыуаныс, моғайын, булмағандыр ҙа. Шулай уҡ ат менән ураҡта, ашлыҡ уғыуҙа ҡатнашыу ҙа – күңелдәргә шатлыҡ. Беҙҙең бала әм үҫмер саҡтар коммунизм төҙөүгә инаныу, бер-береңә ихлас ярҙам итешеү, кешеләргә, айырыуса ата-әсәләргә, ихтирам менән ҡарау рухында үтте. Әлбиттә, беҙҙе бәләкәйҙән ихатала эшләргә, колхозға хәлдән килгәнсә ярҙамлашырға өйрәттеләр.

---

*Аҙағы. Башы 2-се анда.*

6

*“Аҡылды кәм етеп булмағанға, унан үс алалар, төрлөсә ҡыйыр ыталар”.*

*П. Бомарше.*

Тирә-яҡ мөхит, уның мөғжизәле мәлдәре кешеләргә бала саҡтан уҡ ниндәйҙер юйылмаҫ йоғонто я ай. Кешелә әхлаҡи башланғыстарҙың, уның тормошҡа, тирә-яҡ мөхиткә, йәмғиәткә ҡараштары, киләсәккә пландары формалашыуҙа ижтимағи процестар менән бергә тәбиғәт менән йәмғиәт тә ҡатнаша. Тыуған яғым тәбиғәте Ер шары яралғандағылай саф килеш аҡланған ти әм, бер ҙә артыҡ булмаҫ. Ул хатта фәнни-техник прогресс сәскә атҡанда ла әллә ни үҙгәреш кисермәне. Тирә-йүнгә аҫыҡ төтөн тараҡкан завод-фабрикалар ҙа, күмер шахталары ла, ер аҫтынан нефть сығарған вышкалар ҙа юҡ бында. Ер ҙә, ауа ла кристалл кеүек саф.

Йәйге ҡояшлы көндәрҙең бере ендә атайым район үҙәге Борай ауылына барырға йыйынды. Хужалыҡ кәрәк-ярағы әм беҙгә, балаларына, кейем- алым артынан. Тәбиғи, уның менән арбаға мин дә менеп ултырҙым. Район үҙәге йыраҡ булма а ла – ни бары утыҙ саҡрым – унда ат менән бара-бара күҙең тоноп бөтә. Юлға сыҡҡас, атайым тәүҙә йырлап күңел асты, арығас, хәбәре менән минең күңелде күрергә тырышты.

– Был юлы инә Граждандар уғышында нисек үлемдән ҡотолғанымды өйләйем әле, – тип башланы ул үҙен.

Уның өйләүенсә, ауылды аҡтар баҫып алғас, атайымды үҙ сафтарына көслөк менән мобилизациялайҙар. Ауыл егеттәре, шул иҫәптән атайым да, уғыш өнәренә өйрәнмәгән, шуға күрә уларҙы төрлө эштәрҙә файҙаланғандар. Ә фронтта ундай ваҡ-төйәк, күрә ең, етерлек. Еңел яраланғандан уң атайымды Урал тауҙары яғында уғышыусы частарҙа бронепоезд кочегары итеп ҡалдырғандар.

Аҙыраҡ ситкәрәк китәйек. Атайым өйләгәндәрҙе беҙҙең көндәрҙә ауылдың иң өлкән кеше е Шакирйән Нурғәлиев та дөрөҫләне. 90-сы йылдар аҙағында беҙ ике туған ағайым Сәлих менән Нурғәлиевтарға бабайҙың хәлен белергә кергәйнек. Ныҡ олоғайған булыуына ҡарамаҫтан, Шакирйән ағай атайымдың ҡай ы бер хәтирәләрен иҫләй. Атай тура ында үҙ сыҡҡас, Нурғәлиев уның Граждандар уғышында кочегар булып йөрөгәнлеген иҫенә төшөрҙө. Был факт дөрөҫләнә әм ул шик тыуҙырмай.

Атайымдың хәтирәләрен дауам итәйек. Кочегарҙар икәү: бере е – яранан яфа сиккән, шуға күрә лә ауырыу әзербайжан Сәләхдин. Дингә мөкиббән ышанған был кавказлы доға уҡыған ваҡыттарҙа бер бетеүен күҙ алдында тотор булған әм бер саҡ атайыма ла күр әткән. Кеҫәгә ыйышлы, урыҫтарҙың икона ына оҡшаған был бетеүҙә кеше үрәте төшөрөлгән. Әзербайжан атайыма, был Мөхәммәт ғәләй - иссәләмдең үҙе, Ислам диненә нигеҙ алыусы, тип аңлатҡан. Был үҙҙәренән уң, Сәләхдин бик уҡынған, доғаларҙы ҡысҡырып ҡабатлаған. Уның ҡай ы бер үҙҙәре атайыма таныш булған.

Атайым тынып ҡалды. Моғайын, уйланғандыр. Бер килке тын барҙыҡ. Пинжәгенең эске кеҫә енән ҡатырғаға оҡшаған бәләкәй үрәт килтереп сығарып, атайым уны миңә күр әтте. Мин ул ҡатырға киҫәгендә башына салма ураған мыйыҡлы ирҙе күрҙем. Был Мөхәммәт ғәләй иссәләмдең үрәте булып сыҡты.

Атайым әңгәмә ен артабан дауам итте. Сәләхдиндән бына нимәләрҙе ишеткән ул. Мөхәммәт – бөтә мосолмандарҙың да Алла ы. “Лә иллә у иллә алла Мөхәммәд рәсүл улла” тигәндә барлыҡ мосолмандар ҙа уның исемен атай. Ишеткән-күргәндәренә атайым бик ныҡ аптырай. Ул тын ҡала. Сәләхдин уҡыған доға уға таныш, тик атайым уларҙың нимә аңлатҡанын ғына төшөнмәй. Ғәрәпсәнән тәржемә иткәндә был үҙҙәр “Алла ы Тәғәләнән башҡа бер Алла ла юҡ, Мөхәммәт

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 156



– унының илсе е” тигәнде аңлата. Быны бер ҡасан да онотма, Кәрәметдин, ти Сәләхдин.

Ҡышын Себергә сигенгәс, әзербайжан бик ныҡ алҡын тейҙерә әм аяҡтан яҙа. Уны дауаларлыҡ дарыу ҙа, башҡа шарттар ҙа булмай. Үлеме яҡынлашыуын иҙенеп, Сәләхдин атайымды янына саҡырып ала ла ошо бетеүен бирә. Иң ҡиммәтле әйберен тапшырғанда ул былай ти:

– Был бетеүҙе ныҡ аҡла. Артабан балаларыңа тапшырыр ың. Пәйғәмбәр үрәтен аҡлармын, тип ант ит.

– Балалары тыуғансы йәшәр был, тип уйлай ыңмы ни? – тип асырғанып яуаплай атайым.

– Мөхәммәт пәйғәмбәр үрәте ине йәшәтер. Күҙ ҡара ылай аҡла уны, телә ә кемгә күр әтмә. Был әйберҙең изгелеге сер. Белә еңме, был үрәтте миңә атайым биргәйне. Үҙең белә ең, минең атым юҡ урамда, ҡайғым юҡ буранда. Ҡә әр уҡкан был уғыш! Бына ҡайҙа әжәл килеп боғаҙҙан ала. Ҡә әр уҡ ын был уғышты. Ҡайҙарға килтереп ташланы. Уны башлаусыларға Алла ы яза ын бирер әле. Улар игелек күрмәç. Ант ит!

Атайым Сәләхдиндең теләгән үтәй.

– Ант итәм, Алла и-биллә и, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең үрәтен аҡлармын. Ул бынан ары минең бетеүем буласаҡ. Алла ы Тәғәлә насип әйлә ә, бетеүҙе улыма тапшырасаҡмын. Амин!

– Яҡшы. Мин ҡәнәғәтмен, – ти әзербайжан әкрен генә, күҙҙәрен йома.

Был унының уңғы үҙҙәре була.

Фронтта ул саҡта тыныс мәл. Командир Сәләхдинде яҡындағы урман ситенә ерләргә бойора. Был бойороҡто аҡтарҙың хәрби берәмектәрҙе хеҙмәтләндереүсе подразделение ы менән командалыҡ итеүсе унтер-офицер Иван Слепцов атҡарырға тейеш була. Унтер үҙе менән ике кеше, шул иҫәптән атайымды ла алып, әзербайжанды уңғы юлға оҙата.

Слепцов – аяу ыҙлығы әм ҡаты бәғерле булыуы менән танылған кеше. Бер ни менән дә иҫәпләшмәй, бойороғона ҡаршы килеүселәрҙән ҡаты үс ала, йыш ҡына йоҙроҡтарын да эшкә ҡуша. уғышсылар унан ныҡ ҡурҡа. Унтерҙың кемлеген, кемдәргә хеҙмәт итеүен бер кем дә белмәй.

Кочегарҙы ерләгәс, Слепцов часына ҡайтмай, бер ни ҙә аңлатмай ғына төркөмдө урман буйлап алып китә. Ауыр рюкзакты унтерҙың бер иптәше күтәреп бара. Ҡалын урман эсенәрәк кереп, төркөм арығас ҡына, унтер ял итергә бойора. Иптәшенә ниҙер әйткәс, теге е рюкзактан аҙыҡ-түлек, фляга сығара.

– Мәрхүмде иҫкә алайыҡ, – ти Слепцов. Кружка ына йөҙ грамм сама ы араҡы ҡойоп эсә. Башҡаларға ла шул сама араҡы бирелгәс, алдаттар аптыраштa ҡала. Унтерҙан телә ә ниндәй этлек көтөргә мөмкин, тик быны түгел.

Атайым и ә быңдай ихтирамдан бөтөнләй ҡаушап төшә. Ҡан ыҙ-иман ыҙ, әммә кешелеклеген юғалтмаған, тип уйлай ул. Унтер, ә үҙенең ҡул аҫтындағыларҙы араҡы менән ыйлай. Бына иңә кәрәк бул а!

Тамаҡ ялғап алғас, Слепцов үҙгә керешә.

– Колчак уғышты отторҙо, – ти ул, – быны әр кем күрә. Был мәғәнә еҙ Граждандар уғышында еңеү халыҡ яғында. Беҙ бик күп бәләләр килтерҙек. Артабан уғышыуҙан мәғәнә юҡ. Бынан ары беҙ уғышсы түгел. Етте! Мин ҡыҙылдар яғына сығам. Атып үлтер әләр ҙә, ҡаршылығым юҡ. Был хатта ғәҙел булыр.

Унтер тынып ҡала. Бер аҙ йөрөнә лә, атайыма ҡарап:

– Ә ин, Ғәлләметдинов, йәл ең. Бигерәк төңөлгән, көс өҙ өң. ин минең күрше ауылдан бит. Мин Киҙгәнбаштыҡы. Күреп торам, ин уғышсы түгел. иңә был юлы бәхет йылмайҙы, тип иҫәплә. Ә кем минең менән бара – шул минең дуҫ.

Артабан юл урман буйлап төньяҡҡа китә. Унда, Слепцов фекеренсә, ҡыҙылдар ғәскәре, ис юғында ҡыҙыл партизандар булырға тейеш. Ул саҡта ҡыш булып, ҡа-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 157



ты Себер ыуыҡтары тора, ә ашау-эсеү яғы бик наҡыҫ. Тирә-яҡ тотош урман, хатта төн ҡунып сығырға ла урын табырмын тимә. Улар урман буйлап өс көн бара. Слепцов урманда йөрөй бел ә лә, ҡайҙа баралар, ҡай ы ерҙә торалар — бер ни ҙә әйтә алмай. Элекке унтер бер нәмәнән генә ҡурҡа әм был турала иптәштәренә лә әйтә : аҡтар ғына осрама ын. Уларҙан ярлыҡау көтмә.

Бишенсе көн алйыр сиккә етеп арыған, аслыҡ әм алҡын елегенәсә үткән төркөм урмандағы бер ташландыҡ өйгә килеп юлыға. Бер аҙ ял итеп, йылынғандан уң үлек кеүек йоҡоға талалар. Бына ошонда тап итә лә инде ҡасаҡтарҙы ҡыҙыл партизандар. Әммә тегеләрҙең бер нигә лә яраҡлығы юҡ. Ҡул-аяҡтары туңған, бере е лә атлап йөрөй алырлыҡ хәлдә түгел.

Ҡыҙыл партизандар кешелекле булып сыға. Кәйефтәре күтәренке, аҡтар табан ялтырата бит. Улар ҡулына үҙҙәре килеп ингән аҡтар ҡалдығына беренсе тапҡыр юлыҡмай. Слепцов төркөмөнән орау алғандан уң бары ын да дауаханаға оҙаталар. Ошонан уң элекке аҡ алдаттарҙың юлы айырыла, артабан иптәштәре ни яҙмышҡа юлыҡҡандыр — атайыма билдә еҙ. Үҙенең дә хәле мөшкөл, башҡалар ҡайғы ымы? Больницала ярты йылдан күберәк аунап, аяҡ әм ҡул бармаҡтарынан яҙып сыға ул. Хатта ул аяғы үксә енең бер өлөшөн дә аямай хирург бысағы. Өҫтәүенә, ике үпкә е лә шешкән. Атайымды, бәхетенә, бик яҡшы дауалайҙар. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда ышанырлыҡ түгел кеүек, әммә шулай.

Дауахананан атайым Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең үрәте әм хәрби мундир әләмәләре менән генә сыға. Документ та, аҡса ла юҡ. Ул үҙенең Омск губерна ында икәнлеген, Колчактың тар-мар ителеүен ишетә. Артабан ни эшләргә? Үҙен дауалаған табиптың кәңәше менән, атайым Себер помещигына батраклыҡҡа ялланып, өс йыл эшләй. Мал-тыуар көтә, баҫыу эштәрендә ҡатнаша. Ғөмүмән, бармаҡ ыҙ башҡара ала торған эштәрҙең бары ына ла тотона.

Ә ваҡыт үтә тора. Сәләмәтлеге нығынып, өҫтөнә кейем- алым табып, аҙыраҡ аҡса ла туплағас, атайым тыуған яҡтарына йыйына башлай. Помещик и ә уны ниәтенән кире үрергә, үҙендә ҡалырға өгөтләй. Ҡатын алып бирергә вәғәҙә итә. Тик атайым ныҡ тора. Тыуған яғын, төштәренә инеп йонсотҡан ауылын, туғандарын күрге е килә. 1925 йылда Иҫке Ҡарағошҡа ҡайтып төшә.

Бына шундай атайымдың тағы ла бер шаҡ ҡатырғыс хикәйә е. Мин уны бүлдермәй генә тыңланым. Ул өйләгәндәргә әүрәп китеп, кешеләрҙең рәхим еҙлеге, бер-бере ен үлтереүе тура ында уйға баттым. Элек атайым бер ҙә ундай хәтирәләргә бирелмәй ине бит. Шундай ығымта я аным: тимәк, атайым был ғибрәтле хикәйә ен мин кешеләрҙе яҡшы аңла ын, тормош ауырлыҡтарын бел ен тип өйләгән.

Граждандар уғышы хәтирәләрен атайым минең менән артабан да уртаҡлашты, тик быны ы хәтерҙә онтолмаҫлыҡ булып уйылып ҡалған.

Бер ни тиклем өндәшмәй барҙыҡ.

— Бына шулай ул, улым, — тине атайым. — уғыш мине үлтерҙе, ти әң дә ярайҙыр. Ошо көндәргә тиклем йәшәп тә булмаҫ, тип уйлай торғайным. Ғүмерем бөтмәгән икән. Ишеткәндәреңде онотма, улым. Тормошоңда бик тә ауыр мәл була ҡал а, иҫкә ал. Атайың да тамуҡтың үҙенән иҫән ҡайтты бит. Ҡайтыуын ҡайттым да, тик тормошта күкрәк уғып маҡтанырлыҡ эш ҡыра алманым. Алмайым да, сөнки ғәрипмен. Ә ин үҙлегеңде ташлама, ныҡыш бул, маҡсатыңа өлгәшергә өйрән. Яҡшы кеше бул. Уҡы, кешеләргә игелек итергә тырыш. Мин үҙем дә йәшерәк саҡта шулай уйлай, эшләргә ынтыла инем дә, хыялдарым тормошҡа ашманы. Мин иңә ышанам, улым. Мин әйткәндәрҙе атҡара алыр ың кеүек. әләтең күренеп тора. Граждандар уғышы тура ында иҫтәлек булып Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең үрәте ҡалды, уны ғүмерем буйы аҡланым. ин тыуғас, мин фронтташ дуҫым иҫтәлегенә “Сәләхетдин” тип исем ҡуштым. Быны хәтереңә төйнәп ҡуй.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 158



Атайымдың хикәйә е мине ныҡ тулҡынландырҙы. Ул минуттарҙа ни кисергәнмендер, әйтә алмайым, әммә мин бик ныҡ үҙгәрҙем. Эске донъям яңы кисерештәр менән байыны, күп нәмәне аңлап, ололарса эш итә, ниндәйҙер уйҙарға сумып, пландар ҡороп йөрөй башланым. Атайымдың тормош юлын аңлайышлыҙ, маҡсат ыҙ тип ҡабул иттем, үҙемдең яҡты киләсәгем өсөн тырышасағымды, юлда осраған бар ауырлыҡтарҙы ла еңәсәгемде аңланым. Эстән генә үҙемә шундай үҙ бирҙем: бер ҡасан да атайым кеүек көс өҙ әм маҡсат ыҙ булмаясаҡмын, үҙ ғүмеремдә беҙҙең нәҫелдә бер кем дә өлгәшә алмаған хыялдарға етермен, ғаиләбеҙ, атайым әм үҙем тура ында яҡты эҙҙәр ҡалдырырмын. Йәш саҡтарҙа кемдәр генә ошондайыраҡ пландар ҡормай икән.

Алғараҡ китеп, дөрөҫөн әйтергә кәрәк: бала саҡта ғына бирелгән был ант мине ғүмерем буйына оҙата барҙы, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға көс өҫтәне, йәнде йылытты, көрәшергә, намыҫлы, әҙәпле булырға өндәне. Уйлана торғас, мин шундай ығымтаға килдем: кешелекле булып уңыштарға өлгәшеү, ауыр бул а ла, мөмкин. Ҡәбәхәттәр, ике йөҙлө бәндәләр намыҫлы кешегә ҡарағанда уңышҡа тиҙерәк өлгәш ә лә.

Атайымда ихтыяр көсө самалы булған. уғыш уны тамам бөккән, гәрип я аған, тере мәйеткә әйләндергән. Тап шул арҡала ул меҫкен булып йәшәне. Үҙенең хәле шәптән түгеллеген аңлай ине атайым. Шулай ҙа ул бер кемдән дә ярҙам ораманы, уға хатта иң яҡындары ла ярҙам итергә ашыҡманы.

Фәҡир, үтә лә ярлы көн итте атайым. Шул уҡ ваҡытта ауылда иң аҡыллы кешеләрҙең бере е булды. Ләкин үҙен, үҙенең әләттәрен күр әтә белмәне. Аҡыл булыу менәнме ни, унан файҙалана белмәгәс? Атайым йәшәй белмәне, үҙенең аҡылынан файҙа күрмәне. Ә бит ул урыҫ телен дә яҡшы белә ине. Биш йыл буйы уғышта йөрөү, Себер помещигында эшләү дәүерендә үҙләштергән ул урыҫ телен. Минеңсә, ауылыбыҙҙа уның кеүек урыҫ телен яҡшы белгән башҡа кеше булмағандыр ҙа.

Фәҡирлеге арҡа ында, бер кемгә лә зыяны теймәүгә ҡарамаҫтан, атайыма ниндәй генә ҡушамат таҡманылар. Әммә ул бер кемгә лә үпкә белдермәне, асыу тотманы. Ауылда атайымдың көс өҙлөгөнән файҙаланып, мине ҡыйыр ытырға тырышыусылар ҙа табылды. Ундайҙар башлыса эшлек еҙ, көнсөл, әммә үҙенең мәртәбә ен сама ыҙ арттырып ебәргәндәр ара ынан булды. Ваҡыты еткәс, мин уларҙың бары ынан да уҙҙырып ебәрҙем. Урыҫтар әйтмешләй, уларҙан йырағыраҡ төкөрҙөм.

Көс өҙ, еңгәсәй кеүек ярҙам ыҙҙарҙы ҡыйыр ытырға ятраҡандарҙы, әйҙә, Аллаы Тәғәлә үҙе ярлыҡа ын. Ундайҙар үҙҙәре йәлләүгә мохтаж, бәхет еҙ. Уларҙы тиреҫ ҡорто менән дә сағыштырыу мөмкин түгел. Тиреҫ ҡорто файҙа килтерә бит.

7

*“Фекер билдә генә,*
*үҙ фекер билдә е булған кеүек”.*

*Ф. Ницше.*

Кеше ғүмере, шул иҫәптән минеке лә, бер нисә миҙгелдән тора. Шартлы рәүештә генә алынған эре миҙгелдәр: йәшлек, ғүмер урта ы, олоғайыу – кеше ғүмере шундай бүлемдәрҙән ғибәрәт. Нисек кенә ҡаршылыҡлы тойолма ын, әр кем өсөн уртаҡ булған был тормош миҙгелдәрен әр кем үҙенсә ҡабул итә. “Йәшлек шуны ы менән ҡиммәт,– тигән күренекле урыҫ яҙыусы ы Федор Достоевский, – уның киләсәге бар”. Дөрөҫ фекер. Шундай уҡ йыйнаҡ әм образлы итеп беҙ ғүмер урта ы хаҡында ла әйтә алабыҙ. Был осорҙа кеше кем булырға хыялланған, шул кимәлгә етә: аҡыллы, эшлекле, кешеләргә хас теге йәки был эштәр атҡарырға әләтле. Бер үҙ менән әйткәндә, үҙе булып ҡалыу өсөн унда бөтә сифаттар,

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 159



шул иҫәптән киреләре лә етерлек. Тап ошо осорҙа ул ҡулынан эш килерлек, башҡалар менән әҙәп аҡлап өйләшерлек бөйөк шәхес йәки тиран, әҙәм аҡтығы йәки кеше сүрәтендәге “селәүсен” булып етешә. Ундайҙар янында булыу башҡалар өсөн түҙеп торғо оҙға әйләнә.

Ғүмер миҙгелдәрен кеше төрлөсә ба алай. Йәшлек башлыса ал ыу төҫтәргә төрөнгән, уны әр кем үҙ итә, ярата. Кеше ерҙән атлап түгел, осоп йөрөй. Артабан да ошолай бары ы ла яҡшы булыр, тигән уй әр ваҡыт иркәләй, тынысландыра. Кеше алда ихтимал буласаҡ ауырлыҡтар хаҡында баш ватмай. Башҡаларҙың интегеү, ғазап сигеүҙәре йәш кешене борсомай. әр хәлдә уның ғүмере артабан да ошолай ағыр, бөтә е лә әйбәт булыр кеүек.

Ир урта ы булғас, кеше бөтөнләй икенсе төрлө фекерләү юҫығына күсә. Ул тормош тура ында дөрөҫ фекер йөрөтә. Тормошо ла урта йәштәгеләрҙекенә тап килә. Был ваҡытта белем дә етерлек, уҡыуы ла тиҙ. Ниндәйҙер яңылыҡ таба ҡал а, башы менән шунда сума. Уның тәртибендә баҫалҡылыҡ, алмаҡлыҡ өҫтөнлөк итә. Ауыҙ үлсәп асыла, тәртип уйланған.

Бәлки, кеше ғүмер юлында ҡасан да бул а осраясаҡ мәшәҡәттәрҙән торған тормош шулай булырға тейештер. Сөнки был ваҡытҡа кешелә уға үҙ ғүмерендә кәрәкле сифаттарҙы үҙләштереү тамамлана, шуның менән бергә кеше йә бәхетле ғүмер кисерә, йә мажараларҙан башы сыҡмай.

Ҡартлыҡ осоро үҙенсәлекле. Кеше кемлеген, кем була алмаясағын яҡшы белә. Ҡартлыҡ кешенең өлгөрөп етеүе менән туранан-тура бәйләнгән. Өлгөргән мәлендә кеше нисек булған, нимәгә өлгәшкән – ҡарт көнөндәге матди хәле, аулығы ла шуға бәйле. Олоғайғас та тормош төрлөсә ҡабул ителеп ҡуя: кеше мыжыҡҡа, бәйләнсеккә әйләнә, йәшерәктәргә аҡыл өйрәтергә әүәҫ булып китә. Уға хәҙерге тормош ул йәш саҡтағылай түгел, әллә ниндәй килеш еҙ, ә йәштәр булдыҡ ыҙ. Инде ныҡ олоғайғас, кеше ғүмере осланыуын иҙә, йән-тәне донъялағы тәғәйенләнешен үтәүен аңлай.

Оло кешене инде бер нәмә лә ҡыҙыҡ ындырмай, уға бер ни ҙә кәрәкмәй, ул күберәк үткән тормошо тура ында уйлана. Оло кеше “теге донъя” тура ындағы уйҙарға бирелә әм үҙе лә, башҡалар кеүек үк, Алла ы Тәғәләнең булыуына элек ышанып етмә ә лә, уның исемен йышыраҡ телгә ала. Был тәбиғи ҙә, сөнки ҡартайған, хәле- аулығы самалы кеше таяныс эҙләргә мәжбүр әм, ул уйлағанса, был таяныс Алла ы Тәғәлә ярҙамында. Ғәмәлдә уға үҙенән башҡа бер кем дә ярҙам итмәйәсәк.

Кеше, үҙең тура ында уйланыу ҡыҙыҡлы, әүрәткес. Беҙ, Ерҙә йәшәгән кешеләр, ҡасан да бул а үҙебеҙ әм башҡалар тура ында бары ын да белербеҙме икән? Был орауға ҡәтғи рәүештә “эйе” йәки “юҡ” тип яуап бирә алмайым. Әммә кеше ҡасан да бул а үҙе тура ында бары ын да белер, яҡшыраҡ, тынысыраҡ йәшәй башлар, тип ышанғы килә.

Ул арала минең мәктәпкә барыр көндәрем дә яҡынлашты. Мәктәп йылдары, минеңсә, тормошомда, иптәштәремдең дә шулайҙыр, айырым урын биләй. Әлбиттә, уғыш менән бәйле булғанға. Шуға күрә ошо дәүерҙә мәктәпкә йөрөгән балаларҙың уҡыуы ауыр булды. уғыштың тәүге йылында башыбыҙға күктән төшкән төҫлө бәләләрҙе әллә ни иҙмәнек кеүек. Уҡыу йылын шундай теләк менән башлап ебәргәйнек бит.

Бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ беренсе йылдың беренсе сентябренә саҡлы уҡ беҙ йәйҙән мәктәпкә йөрөү кәрәк-ярағы: китап, дәфтәр, ҡәләм, ручка . б. атып ала башланыҡ. Хәтеремдә, мин кибеткә әсәйемә эйәреп барҙым. Кәштәләр буйыма ҡарағанда бейегерәк булғанлыҡтан, мин унда нимәләр ҡуйылғанын күрмәнем. Уҡыу кәрәк-яраҡтары алынған кәштәне күр әтеү өсөн, әсәйем мине юғары күтәрҙе. Ә унда нимә генә юҡ! Уҡырға-яҙырға кәрәкле бар әйберҙе лә атып алды

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 160



әсәйем. Был ҡырҡ беренсе йылдың июль баштарында ине. уғыш инде башланған. Беренсе сентябргә кибет кәштә ендә яткан уҡыу әсбаптары бөтөнләй юҡ булды. Беҙ быңдай муллыҡты башҡа күрмәнек.

Уҡыу миңә еңел бирелде, бар предметтарҙан да өлгәшә инем. Китаптар ҙа, дәфтәр ҙә булманы. Бары ын да ҡара таҡтаға аҡбур менән яҙа инек. Мәсьәләләр ҙә шунда сиселде. Дәрестә уҡытыусылар беҙ үҙләштерә торған белемде әйтеп тора, ә беҙ уны иҫке китап биттәренә яҙып барабыҙ. уғыш тамамланғансы шулай уҡыныҡ. Китап, дәфтәрҙәр уғыш баҫылғандан уң ғына күренә башланы.

уғыш йылдарында тормош ниндәй бул а, миңә лә шул шарттарҙа үҫергә тура килде. Был йылдар минең балалыҡ ғүмеремә үҙенең тамға ын алды. Өшөптуңыу, аслыҡ-яланғаслыҡ, бала-саға уйындарынан төңөлөргә мәжбүр ителеү — былар бары ы ла тәбиғи ине. Кейем- алымды әүәлге замандарҙағыса өй шарттарында туҡынылар, тектеләр. Бик ауыр бул а ла, халыҡ сыҙаны, түҙҙе. Фронттан килгән хәбәрҙәр тура ында беҙгә уҡытыусылар еткереп торҙо. Артабан ауылда у-ғыштан аяҡ йәки ҡулын ҡалдырып, ғәрипләнеп ҡайтҡан алдаттар ҙа күренә башланы. Уларҙы мәктәпкә саҡырып, уғыш, уның ҡот осҡослоғо, фашистар тура ында өйләгәндәрен ишеттерҙеләр. Әлбиттә, уғыш геройҙары фашистарға ҡаршы йән аямай уғышыуы, ә беҙ, малай-шалай, фронтовиктарҙың ҡа арманлығы менән ғорурлана инек.

Синыфташтарымдың кәйефе нисек булғандыр — билдә еҙ, әммә кешеләрҙең йәшәү шарттары бер төрлө түгел ине. Беҙҙең арала тормош ҡытлығын тоймаған балалар ҙа булды. Бәлки, улар тормошто үҙенсә ҡабул итеп тә ба алағандыр. Әйтергә кәрәк, мәктәптә уҡығанда мин әүҙемлегем менән айырылып торманым. Түбәнге кластарҙа уҡығанда мәктәптә үткәрелгән барлыҡ сараларҙан, төрлө сәбәптәр табып, ситләшергә тырыштым. Юғары кластарҙа ғына мин активлаштым, төрлө түңәрәктәргә йөрөнөм. Миңә ҡыйыу ыҙлыҡ хас булды. Бер кем менән бәйләнешмәнем, бер кемгә ҡаршы әйтмәнем, хатта бер ҡасан да уғышманым. Ҡышҡы айҙарҙа, йылы кейем булмағанлыҡтан, йыш ҡына дәрес ҡалдырҙым.

Үҙебеҙҙең синыф уҡыусыларының бары ын да хәтерләйем. Уларҙың әр ҡай ы-ы үҙенсә холоҡло булды. Күсләө, уғышырға оҫта малайҙар, дәрес аңламаусылар, әммә мәктәпкә көн дә йөрөүселәр. Ундайҙарҙың ни өсөн мәктәпкә йөрөүен аңламаным. Күрә ең, ата-әсәләренең ихтыяры буйынса йөрөгәндәрҙер. Яҡшы өлгәшеүселәр ҙә бар ине. Мәҫәлән, Вафа Вәлиев, Кәбирә Ғилфанова, Фрунзе ауылынан Иҙрис Рахманов . б. шундайҙарҙан.

Мин тарих менән әҙәбиәтте яраттым. Буш ваҡыттарҙы ошо китаптарҙы уҡыуға бағышланым. Күп уҡыным. Айырыуса әкиәттәрҙе. Өсөнсө синыфта саҡта Александр Пушкин әкиәттәрен уҡырға яраттым. Китапты иртәнән кискә тиклем ҡулдан төшөрмәй торғайным. Хатта дәрестә лә йәшереп уҡырға маташтым. Уҡытыусы күреп ҡала ла мине иҫкәртә, әммә мин бер аҙҙан тағы ла уҡырға тотонам. Бер мәл уҡытыусы яныма килде лә, китапты тартып алып, мәктәп китапхана ына тапшырҙы. Беҙ, уҡыусылар, үҙебеҙ өсөн идеал итеп күргән, уларға әр саҡ оҡшарға тырышҡан, Алла ы Тәғәлә дәрәжә енә күтәргән уҡытыусының был ҡылығы миңә бик түбән булып күренде. Шул уҡ ваҡытта уның әйткәнен тыңламауымдың насар икәнен дә аңланым. Уҡытыусылар бүлмә енә саҡырып шелтәләүҙәрен йәки мәктәпкә ата-әсәйемде саҡырырға ҡушыуҙарын көттөм, тик үҙ әйтеүсе булманы.

Мәктәп йылдарының хәтерҙә ныҡ уйылып ҡалған мәлдәре лә булғыланы. Өсөнсө синыфта уҡығанда беҙҙе урманға яҙыу ҡара ы эшләү өсөн ашарға яраҡ ыҙ ҡыҙыл емеш йыйырға алып барҙылар. Яҡындағы урманда ундай емеш күп үҫә торғайны. Күпме кәрәк, тиҙ генә йыйып алдыҡ. Ҡайтырға йыйына башлағас, бер ҡыҙҙың — Гөлнараның — юҡлығы асыҡланды. Барыбыҙҙың да кәйефе ҡырылды. Ҡыҙыҡай ҡайҙа булған — бер кем дә белмәй. Уҡытыусы Зөләйха апа ҡурҡыуға төштө әм барыбыҙға ла эҙләргә ҡушты. Тик йыраҡ китмәгеҙ, тип иҫкәртте. Оҙаҡ

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 161



эҙләнек Гөлнараны, юҡ та юҡ. Шул саҡ бер уҡыусы ҡыҙҙы беҙ еләк йыйып йөрөгән урындарҙан эҙләргә тәҡдим итте. Беҙ шулай эшләнек әм оҙаҡламай Гөлнараның өҫтөнә лә барып сыҡтыҡ. Ул бер үлән төп ә енә башын ҡуйып йоҡлап ята ине. Шатландыҡ, урманға сәйәхәттең уңышлы тамамланыуына кәйефебеҙ күтәрелде.

Етдиерәк икенсе ваҡиға ла поход менән бәйле. Ул йылдарҙа аҡбурға ҡытлыҡ ҙур булды. Дөрөҫөн әйткәндә, аҡбурҙы беҙгә бөтөнләй бирмәнеләр. Ҡара таҡтаға яҙып уҡырға мәжбүр булғас, аҡбур ыҙ дәресте күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Уҡытыусыларыбыҙ юлын тапты, улар ҡара таҡтаға яҙыу өсөн эзбиз ташын файҙаланды. Бәхеткә күрә, был таш беҙҙең яҡтарҙа тулып ятты. Иҫке Ҡарағоштан ун-ун биш саҡрымда эзбиз ташы сығара торған карьер бар ине. Таҡтаға яҙыу өсөн таштарҙы шунан алып ҡайтыу беҙгә, уҡыусыларға, йөкмәтелде. Эзбиз таш алып ҡайтырға төркөмләп, бер синыф бер юлы йөрөнөк.

Бер саҡ беҙҙең синыф етәксе е Рәхмәй абый беҙҙе, дүртенсе синыф уҡыусыларын, йыйҙы ла эзбиз таш артынан барырға йыйынырға ҡушты. Икенсе көнө беҙ юлда инек. Ара йыраҡ булғас, ҡалын кейендек, ашарға ла алдыҡ. Көн бик матур, шуға күрә тиҙ барып еттек. Карьер бик тәрән дә түгел, әммә сит-ситтәре бик текә. Аҡбурға ярағандарын иң аҫка төшөп йыйырға тура килде. Ә бына эзбиз киҫәктәренең иң матур яҙа торғандары үрелеп буй етке еҙ ерҙә икән. Уларҙы йыйыр өсөн юғарынан ғына төшөргә мөмкин.

Карьер ситендә, унын өҫтөнән өс метр сама ы түбәнерәк бейек кенә үҫкән ҡайындың остары текә карьер өҫтөнә сығып уҡ тора. Нисек килеп эләгеп үҫкәндер. Мин, ағас ботаҡтарына тотона-тотона аҫкараҡ төшөп, эзбиз киҫәктәренең иң яҡшыларын йыйырға ҡарар иттем. Билдәле, уҡытыусынан рөхсәт-маҙар орап торманым. Бәләкәйҙән шундай мажаралы хәлдәргә тарырға әүәҫ инем, ә бында синыфташтарым алдында нимәгә әләтле икәнемде күр әтергә самай унайлы мәл. Мин карьерҙың өҫтөнә менеп, ҡайын ботағына йәбештем дә ипләп кенә түбәнгә төшә башланым. Әммә күп тә үтмәне, мин көтмәгән, әммә ихтималлығы ҡотолғо оҙ булған хәлгә тарыным: ҡайын ботағы эйелде лә олононан ынып сыҡты. Мин ботаҡтарға тотона-тотона аҫка остом. Ни булғанын да аңлап етмәй осоп барғанда, бәхетемә, нимәгәлер эләгеп, ҡайын тамырында ултырыуымды күргәс кенә, ни ҙә бул а аңларлыҡ хәлгә килдем. Мин ҡайын тамыры менән текә карьер ара ында ҡыҫылып ҡалғайным.

“ ин, Сәләхетдин, күлдәкле булып тыуған ың икән, бындай бәхет ғүмер эсендә бер генә эләгә”, – тиәсәк уңынан уҡытыусым. Әгәр ҙә ошо рәүешле ҡыҫылып ҡалма ам, ис шик еҙ, карьер төбөнә төшөп имгәнер йәки был яҡты донъя менән бәхилләшкән булыр инем. Әлбиттә, был ығымта-кисерештәр артабан, әлегә мин, ҡото алынған малай, күҙ йәштәренә сумып ҡайын тамырында ултырам...

Минән ис кәм ҡурҡмаған синыфташтарым, уларҙан да яман ҡото алынған Рәхмәй абый миңә ҡараған да ҡатып ҡалған. Бер аҙҙан улар, иҫтәренә килеп, мине нисек ҡотҡарырға уйлап баш вата башланы. Уҡытыусы әмәлен тиҙ тапты. Ул яҡындағы быуа янында үҫкән таллыҡтан оҙон шыйыҡ тал ҡырҡып алды ла юғарынан миңә табан уҙҙы. Мин ике ҡуллап талдың осона йәбештем, әм мине иптәштәрем өҫкә өйрәп сығарҙы. Ҡот осҡос ысынбарлыҡтан имен-аман ҡотолғаныма сик еҙ шат инем. Тәнемдең ҡай ы бер өлөштәре ыҙырылыуын иҫәпкә алмағанда, миңә бер ниндәй ҙә зыян килмәгәйне.

Бишенсе синыфта беҙгә күрше Яңы Ҡарағош ауылынан да балалар өҫтәлде. Ул ауылда мәктәп башланғыс синыфтарҙан ғына тора ине. Римма, Тәҡлимә исемле ике ҡыҙ бик күңелсәк, мәҙәни яҡтан әләтле булып сыҡты. Айырыуса Римма ы бик күп йыр белә, гармунсы ыҙ ҙа йырлай. Синыфты мәҙәни яҡтан “ағартыу” буйынса ҡыҙыҡай бик күп эш башҡарҙы. Унын арҡа ында мәҙәниәт донъя ына

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 162



күҙебеҙ асыла төштө. Тәклимә, миңә сыбыҡ осо туған синыфташым, яҡшы уҡыуы менән бергә ылыу ҙа булды.

Шулай бер саҡ Тәклимәгә беҙҙең синыфтан Радик исемле малай бәйләнә башланы. Күрә ең, ҡыҙыҡайҙың үҙенә “иғтибарлыраҡ” булыуын теләгәндер. Мин ҡәрҙәш булғанлыҡтан, Тәклимә, әгәр ҙә кәрәк бул а, үҙен яҡлауымды ораны. Кистәрен мәктәптә концерт ҡуйырға әҙерләнеп уңлап ҡайтҡанда, мин ҡыҙыҡайҙы оҙатып ҡуйыр булдым.

Бер кис шулай уңлап ҡайтып килгәндә, Тәклимә уҡыған ваҡытта фатирҙа йәшәгән йорт янында Радик тап булды. Ул йүгереп килде лә Тәклимәгә уғырға ынтылды. Мин, ике араға инеп, уҡтырмаҫҡа тырыштым. Ә Радик, минең ҡаршы тороуыма ҡарамаҫтан, килә лә килә. Бер саҡ мин уның артына бер аяғымды ҡуйҙым да үҙен ҡаты ғына этеп ебәрҙем. Малай көрткә тас салҡан барып төштө. икереп тороп тағы ла уғышырға ынтыла башла а ла, мин уны Тәклимәгә яҡын ебәрмәнем.

Минең менән уғышырға Радик теләмәне, ахыры ы. Үс аласағын белдереп, өйләнә- өйләнә китеп барҙы. Уның миңә этлек ҡылырына ышанып етмә әм дә, уңынан хаталанғанымды аңланым. Радиктың ата ы ауылда йоғонтоло ғына кеше ине, ҡасандыр яуаплы вазифала ла эшләгән. Ата ына Радик, йәнә е, мин кисен ул бер ҡыҙ менән йөрөгәндә ҡамасаулағанмын, хатта уғышырға маташҡанмын, тип алдаған да был турала директорға еткереүен ораған. Шундай сеп-сей ялған. Был турала класта ғына белдем.

Радиктың ата ы, ысынлап та, мәктәп директорына барған әм миңә ҡарата ҡаты сара күреүен ораған. Беҙҙә ул саҡта директор булып ҡайҙандыр килгән Ғилметдинов фамилиялы, уғышта булып ҡайтҡан бик ҡыҙыу холоҡло кеше эшләй ине.

Ошо ваҡиғанан уң бер көн үткәс, дәрес алдынан беҙҙең класҡа директор Ғилметдинов килеп инде. Мине таҡта янына сығарып баҫтырҙы ла бөтә класс алдында әхлаҡҡа өйрәтә башланы. “Бына был малай, – тине ул, миңә төртөп күр әтеп, – үҙенең класташы Радик менән урамда талаш ойошторған. Ҡарағыҙ әле үҙенә: бер нәмә е менән дә айырылып тормаған егет. Хатта уның йүнле кейеме лә юҡ. Ә бына ғашиҡ булырға оҫта. Хурлыҡ! Ул ғына ла түгел, класташының ҡыҙын тартып алып, үҙенә ҡаратырға маташҡан. Шулаймы, Радик?” – тип ораны ул теге малайҙан. “Шулай”,– тип яуапланы Радик.

Ишеткәндәрем мине шаҡ ҡатырҙы. Ояттарын юғалтып, мине нахаҡҡа ғәйепләп маташалар. Күрелмәгән-кисерелмәгән өм өҙлөк, сей ялған! Былдай ҡәбәхәтлекте тәү тапҡыр күреүем. Бына бит, үҙенең шәхси мәнфәғәттәрендә башҡаларҙы, кем булыуына ҡарамаҫтан, кәм етергә, хатта тапап китергә әҙер кешеләр була. Ғәҙел еҙлек, ваҡсыл әҙәмдәрҙең күрәләтә ялғанлашыуын күреү минең үҫмер саҡтарҙа уҡ арыуымды ҡайната торғайны. Ҡәбәхәтлек түгелме ни был?! Мин түҙмәнем, илап, кластан сығып йүгерҙем. Үҙем өсөн түгел, ә ошондай ҡәбәхәттәр өсөн оят ине миңә.

Бер аҙна буйы мин мәктәпкә бара алманым.

Радик, директор Ғилметдинов кеүек кешеләрҙе мин ғүмерем буйы аңлай әм ҡабул итә алманым. Ошондай кешеләрҙе кәм етә, ялған ғәйеп тағы, хатта үлтерергә әләтле бәндәләрҙән арыраҡ торорға тырыштым. Үҙемә килгәндә, бер ҡасан да кешеләргә яманлыҡ ҡылманым, ауыр үҙҙәр әйтмәнем, миңә ҡарата бигүк яҡшы мөнәсәбәттә булмаған, хатта дошманлыҡ күр әткәндәргә лә. Былдай мөнәсәбәт миңә әхлаҡи яҡтан өҫтөнлөк бирә әм мин үҙемде бик яҡшы хис итә инем. Намыҫ ыҙлыҡ, ҡәбәхәтлек өҫтөнән әхлаҡи еңеү – цивилизациялы кешенең йәмғиәттәге бөйөк еңеүе ул.

Бына ошондай күңел еҙ хәлдәр мине үҫмер, йәш саҡтарҙа әр саҡ эҙәрлекләп торҙо. Моғайын, был хәл минең башҡаларға оҡшамауым менән бәйлелер. Шикләнмәй әйтәм, сөнки факттар шуны дөрөҫләй. Бер ваҡыт мин үлемдән саҡ

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 163



тороп ҡалдым.

...Сентябрь аҙаҡтарында математика әм физика уҡытыусы ы Рәхмәй абый беҙҙең бишенсе класс менән физика буйынса практик дәрес үткәрергә булды. Беҙ колхоздың ауылдан өс саҡрым ситтә урынлашҡан ыу тирмәненә юл тоттоҡ. Алдыбыҙға шундай орау ҡуйылды: ыу тирмәне нисек эшләй, ниндәй көстәр тирмән таштарын хәрәкәткә килтерә? Был турала беҙгә уҡытыусы класта уҡ аңлатҡайны. Беҙ, уҡыусылар, был процесты ғәмәлдә күреп, инша кеүек нәмә яҙып бирергә тейеш инек. Тирмәнгә барыу беҙҙең өсөн ҡыҙыҡ, ылыҡтырғыс булды. Йәйәү бул аҡ та, тиҙ генә барып еттек. Тирмәнде баштан-аяҡ тигәндәй ҡарап сыҡтыҡ. Тирмәнсе беҙҙең өсөн тирмәнен эшләтеп ебәрҙе, нисек эшләүен өйләп бирҙе. Уҡытыусы дәрескә йомғаҡ я аны әм беҙҙең теманы нисек үҙләштереүебеҙҙе белеү өсөн өйләп бирергә ҡушты. Бөтәбеҙҙе лә тыңлап бөткәс, Рәхмәй абый, Карамов дәресте башҡаларға ҡарағанда бик яҡшы аңлаған, ә бына Әлимов – бик насар, тигән ығымта я ап ҡуйҙы.

Бер аҙҙан беҙ ҡайтырға сыҡтыҡ. Юлда бәләкәй күл буйында туҡтап алдыҡ. Көн бик ҡояшлы, эҫе булып, бөркөү тирмәндән уң рәхәтләнеп ыу индек. Унан уң бер төркөм уҡыусы менән Рәхмәй абый ауылға ҡайтып китте, ә беҙ дүртәү: мин, Әлимов, Иҙрисов, Кәбиров тағы ла ыу инергә тип тороп ҡалдыҡ. Уҡытыусы китеү менән беҙ, шаулаша-шаулаша, ыуға икерҙек тә, шатлыҡтан сума-сума, инә башланыҡ. Мин күлдең урта ына йөҙөп барҙым да төньяҡ яр буйында ҡуйы булып үҫкән ҡамыштар эргә енән йөҙөп үтергә булдым. Ай Алла, шул саҡ ни менәндер башыма килтереп уҡтылар. Ҡалған яғын бер нисек тә хәтерләмәйем...

алҡындан иҫемә килдем. Тын алырға иткәйнем, байтаҡ ҡына ыу йоттом. Күл төбөндә ҡамыштар ара ында ятҡанымды шунда уҡ шәйләп алдым. Хәл юҡ, баш ярылып бара. Сығырға кәрәк, тик көс юҡ. ауа уларға ит әм, ауыҙға ыу тула ла ҡуя. Ҡамыштарға тотоноп, күл төбөнән күтәрелә башланым. Күл тәрән түгел ине, әм мин тиҙ генә өҫкә ҡалҡтым. Ҡом оҙланып, ауаны ыу менән бергә улайым. Яр яҡын икәне күренә. Сәсәй-йүткерә, ярға табан йөҙәргә тотондом. Ярға етәрәк аяҡтарым күл төбөнә тейҙе әм мин аяҡҡа баҫырға иттем, әммә аяҡтар тотмай ине. Көс-хәл менән мин ярға сыҡтым. Бер аҙ ятып хәл алдым. Тирә-йүндә бер кем дә юҡ. Эңер төшөп килә, ҡояш байырға ла күп ҡалмаған.

Үҙемдең йәшәү менән үлем ара ында булыуымды, ниндәй мөғжизә менән тере ҡалыуымды аңлата алмайым. Башты төрлө уйҙар ҡайната: минең менән ыу ингән малайҙар ҡайҙа, башыма кем уҡты? Әлбиттә, туңбаш Әлимов, ул ғына, иҫәрлегенә барып, башҡаларҙы ҡыйыр ытырға оҫта бит. Әйтергә түгел, көслө малай. Унан ҡурҡалар. Радиктан бары ын да көтөргә мөмкин, әммә ул быға кеше үлтереүгә барып етмәгәйне әле. Кешене башына уғып, ыуға батырыу – үлтереүгә тиң. Шулай ҙа ул ныҡ уға алмағандыр, мин тиҙ генә иҫемә килә алмаҫ инем.

Малайҙар ҡайҙа? Улар минең ыу төбөнә киткәнемде күрмәнеме икән ни? Әллә Әлимов уларҙы ҡурҡытып алып ҡайтып киткәнме? Әлбиттә, ҡурҡытҡандыр, ниңә быға шикләнергә? Бәлки, өйлән әгеҙ, үҙегеҙҙе лә батырам, тип янағандыр.

Кисләтеп ауылға ҡайтып еттем. Әсәйемдең ҡурҡыуы йөҙөнә сыҡҡайны: “ иңә ни булды, төҫөң ҡасҡан?” “Баш ауырта”, – тигән булдым. Үҙем кисергән мажара тура ында бер үҙ ҙә әйтмәнем, сөнки шунда уҡ тауыш ҡубасаҡ ине. Унан ни файҙа?

Бергә ыу ингән малайҙар минең менән осрашыуҙан ҡаса башланы. Ғөмүмән, улар башҡаса минең менән аралашыуҙан баш тартты. Хәйер, минең дә ундайҙар менән өйләшергә иҫәбем юҡ ине. Күлдә ниндәй мажара булыуы менән ҡыҙыҡынманым да. Әлимовтан да үс алырға йыйынманым, көсөм дә етмәҫ ине. Алла ы Тәғәлә был гона ы өсөн яза ын үҙе бирер әле. Ысынлап та, күп йылдар уҙғас, мин был эшлек еҙ бәндәнең ауыр яҙмышҡа тарығаны хаҡында белдем: бер нисә тапҡыр төрмәлә ултырып сыҡҡан, тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмаған. Артабан

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 164



унын тура ында иçкә алғы ла килмәй.

Эх, был мәктәп йылдары! Күпме яҡтылыҡ, шатлыҡ әм киләсәккә өмөттәр! Йәш саҡта уларҙы барлап та, тулы ынса аңлап бөтөрөп тә булмай.

Егерменсе быуаттың ҡырҡынсы йылдары урта ында беҙҙең төпкөл ауылда радио ла, электр энергия ы ла, улар менән бәйле башҡа цивилизациялы нәмәләр ҙә юҡ ине.

Беренсе тапҡыр ауылға “тел еҙ” кинофильм килтергәндәрен хәтерләйем. Киномеханик беҙҙе, өс малайҙы, электр энергия ы эшләп сығарыусы динамикты әйләндерергә ҡушты. Беҙ алмашлап әйләндерҙек, кино ҡарарға ла өлгөрҙөк. Киномеханик беҙгә уңынан берәр ум да бирҙе.

Ә бына “телле” кино ҡарау үтә лә мауыҡтырғыс булды. Уны ы инде уғыштан унғы йылдарҙа. Был юлы киномеханик электр двигателен үҙе менән йөрөтөп, билет хаҡы ла ҡиммәтерәк ине. Поезд хәрәкәте менән бәйле бер фильм ҡарағаным хәтерҙә. Мин ауыл клубының беренсе рәтендә ултыра инем. Клуб шығырым тулы, сөнки актерҙарҙың өйләшкәнен күр әткән фильм беренсе тапҡыр ҡуйыла әм уны әр кемдең ҡарағы ы килә. Фильм башланып ун-ун биш минут сама ы үткәс, экрандың ул яғынан күренгән поезд, ҙурая барып, залға табан боролдо ла паровоз экранды тултыра башланы. Кешеләр ҡурҡыштарынан урындарынан ҡубып, сығыр яҡҡа эркелде. Ишек янында ҙур өйкөм барлыҡҡа килде, халыҡ, бер-бере ен тапай-тапай, тышҡа сығырға ашҡына. Ә поезд үтеп китте, залға “ҡолап” төшмәне. Күптәр фильмды ташлап ҡайтып китте, ә беҙ, малай-шалай, ҡарап бөтөрҙөк. Киномеханик көлкө ө быуыуҙан йығыла яҙа ине. Баҡти әң, ул паровоз тамашасыға көслө йоғонто я а ын өсөн тауышын көсәйтә төшкән, имеш. “Телле” кино ҡарап өйрәнмәгән ауыл кешеләренең был эпизодты нисек ҡабул итәсәген алдан белеп шулай эшләгән ул. Быға тиклем дә зал өҫтөнә килгән паровоздан ҡасыусылар булған.

Ошонан уң фильмдарҙы йышыраҡ күр әтә башланылар. “Разведчиктың батырлығы” .б. хәрби тематикалы фильмдарҙы йотлоғоп ҡарау хәтерҙә ҡалған. Тыныс тормошҡа ҡағылған кинофильмдар ҙа күр әтелә ине.

8

*Үлгәндән уң да тынлыҡ*
*Булмаҫтыр миңә.*
*инең менән бер төн өсөн*
*атылырмын шайтанға.*

(Йырҙан юлдар).

Ҡырҡ игеҙенсе йылдың йәйе минең өсөн тынғы ыҙ булды. Ә бит тәүҙә бары ы ла ғәжәйеп яҡшы ине: йылы ҡояшлы көндәр, мин мәктәптең ете класын тамамланым әм шул турала документ алдым. Ә был — кеше ғүмеренең мө им этабы. Ул шатлыҡ өҫтәй, киләсәккә өмөттәр уята. Имтихандар биреп, мәктәп менән тантаналы хушлашыуҙар ойоштороп йөрөгәндә, әр беребеҙҙең кәйефе күтәренке, күңелдәрҙә байрам. Мин дә ҡанат ҡуйғандай йөрөнөм, йырлай ы килә. Ауырлыҡтар ҙа еңел үтелде. Башҡа ваҡыттарҙа ла шулай булыр кеүек тойолдо. Ә бына мәктәп менән хушлашҡайныҡ, бары ы ла үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Борсоулы көндәр башланды. Хикмәт шунда: ауылда мәктәп ете йыллыҡ ҡына, белемде артабан дауам итеү өсөн ситкә китергә, ә бының өсөн матди етешлек кәрәк булды. Ғаиләбеҙҙең ундай мөмкинлеге юҡ ине.

Был борсоулы көндәрҙә йәштәштәрем менән йыш осраштым. Уларҙың күбе е документтарын техникумға, күрше ауыл мәктәбенең игеҙенсе синыфына тапшырған. Бындай хәбәрҙәрҙе ишетеү еңел түгел, йөҙөм көндән-көн ҡараңғылана

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 165



барҙы. Уҡыуҙа иптәштәремдән артта ҡалыу тура ында уйланыу мине даими эҙәрлекләп, бер минутҡа ла ҡалдырманы.

Әммә тормош ул тиклем үк ҡараңғы түгел ине әле. Иң элек тәбиғәт миңә еңеллек килтерҙе. Урманға сығып әйләнеү, баҡсала эшләү, беҙҙең яҡтарҙа бик күп булған күлдәрҙә ҡойоноу күңелгә еңеллек бирә әм ауыр уйҙарҙан арындыра ине. Көн айын беҙ ауылдан ярты саҡрым ситтәге Сөңгөллө күлгә ыу ҡойонорға йөрөнөк. Унан уң күлдең иң бейек ярына күтәрелдек. Бынан йәйрәп ятҡан урман, баҫыуҙар күренә. Көнсығышта ҡалҡыулыҡтар менән бүлгеләнгән ағаслыҡтар, уларҙың ул ҡанаты офоҡҡа инеп юғала. Шул уҡ тарафтарҙа өсмөйөш барлыҡҡа килтергән кеүек урынлашҡан бәләкәй ауылдар күҙгә салына.

Көнбайышта – бойҙай баҫыуы. Ул саҡтарҙа дым аҡлағыс урман ыҙаттары булмағанлыҡтан, баҫыу офоҡҡа барып төкәлә лә күк йөҙө менән тоташҡандай тойола. Ошо яр өҫтө беҙҙең, үҫмерҙәрҙең, үҙҙәрен борсоған донъяуи мәшәкәттәре бер аҙға онотолоп торған, күңелдәр и ә ысынлап та ял иткән урын булып сыҡты. Бында бары ы ла улыш ала, хатта йырлай. Киң далала тормош ҡайнай, зәңгәр күктә абантурғай айрап кинәнә, уға башҡа ҡоштар ҡушыла. Улар ҙа ошо тыныс күккә ҡарап шатлана – әр хәлдә беҙгә шулай тойола. уғыш баҫылғандан уң ике йыл да үтеп китте, тормош күҙгә күренеп еңеләйҙе. Ҡырҡ етенсе йылда ашлыҡ яҡшы уңғас, кешеләрҙең күңеле шундай көрәйҙе, әйтер ең дә, уғыш булмаған. Арыҡ тәндәргә ит ҡунды, кейемгә лә туя башланыҡ.

Көндәр бер-бере енә оҡшап уҙа торҙо. Ҡотолғо оҙ тойолған хәлем менән килешергә теләмәйенсә, ниндәйҙер әмәл табырға тырыштым. Көндәрҙең бере ендә урамда элекке класс етәксе е Рәхмәй Аллаяров абый осраны. Уның минең өсөн борсолғанын беләм, шулай ҙа элекке уҡытыусым алдында меҫкен булып күренмәҫ өсөн, икенсе урамға боролорға иткәйнем, Рәхмәй абый үҙе тауыш бирҙе. Минең артабанғы уҡыуым өсөн минән нығыраҡ хафаланыуын тәүге үҙҙәренән үк белеп алдым.

– Вәт! – тине ул. Уның борсолған-тулҡынланған сағында шулай үҙ башлағанын беҙ яҡшы белә инек. Ошо “вәт” үҙе менән ағайыбыҙҙы әр саҡ ирештерә инек.

– Вәт, иңә обязательно уҡырға кәрәк. Ялҡауланырға уйлама ла. Күреп торам, кәйефең яҡшы түгел, нимә булды? Әле иңә ун биш кенә йәш, бар ғүмерең алда. инең башҡалар а итерлек уңыштарға өлгәшәсәгеңә ышанам. Бына бер саҡ юғары белем тура ында диплом да алыр ың...

Аллаяров ағай бер аҙ тынып торҙо. Ул мәктәпкә китеп бара ине әм мине лә үҙе менән эйәртте.

– Белә еңме, дуҫҡай, мин инең кеүек мендәрҙе уҡыттым. Уларҙың әр ҡай ы - ының артабанғы яҙмышы нисек буласағын күрә белдем. әр кемдең үҙенә күрә объектив үҙенсәлектәре була. Әйтәйек, шәхси аура ы, башҡаларҙа осрамаған ниндәйҙер әләте, аҡыл ҡеүә е, тормошта уңыштарға өлгәшергә тырышлығы әм башҡалар. Уларҙы анализлап, мин теге йәки был кешенең киләсәге нисек буласағын билдәләй алам. Маҡтанмайым, әммә бер саҡта ла хаталанманым. Киләсәгең яҡты күренә. Үҙ көсөңә ышан, үҙ юлыңдан бар...

Элеке уҡытыусымды бүлдермәй атлайым. Уны ни тиклем тыңла ам, шул саҡлы үҙ көсөмә ышаныс арта барҙы. Ысынлап та, башҡаларҙан ҡай ы ерем кәм уң әле? Әйткәндәй, мин әр саҡ шулай уйлай инем: ә бит барыбер синыфташтарымдан уҙҙырып ебәрәсәкмен. Сөнки мин, башҡаларҙы аптыраршта ҡалдырып, бик ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлын тиҙ таба, нимәне лә бул а яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ эшләй инем.

Мәктәптә беҙ уҡытыусылар бүлмә енә индек. Рәхмәй абый тәүҙә тәҙрә янына килеп, оҙаҡ ҡына текәлеп торҙо. Унан яҡындағы күлдең киң панорама ы асыла, арыраҡ, ҡаршы ярҙа, ауылдың бер өлөшө күренә. Уҡытыусы шул килеш үҙ алды-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 166



на өйләнгәндәй үҙ башланы:

– еҙгә, уғыш йылы балаларына, ауыр булды шул. Бик ауыр! Барығыҙ ҙа ысын-ысындан эш кеше е булып китеүегеҙ өсөн нимә эшләргә? Нисек ярҙам итергә? Бик ҡатмарлы бурыс бит был...

Шул саҡ бүлмәгә синыфташым Роза килеп инде. Минең бергә уҡыған иптәшем генә түгел, ә күҙем төшөп йөрөгән ҡыҙ. Берҙән-бер әм оло мөхәббәтем. Мин Розаны бергә уҡыған йылдар буйы яраттым, әммә был хаҡта үҙенә бер ҡасан да әйтмәнем әм уны бер кем дә белмәй ине. Үҙенә әйтмә әм дә, ҡыҙыҡай, минең үҙенә ҡарата мөнәсәбәтемә ҡарап, моғайын, иҙмәй ҡалмағандыр. Мин дә ниндәйҙер эске иҙенеү менән Розаның үҙемә битараф түгеллеген тоя инем. Йылт ҡына минең яҡҡа ҡараш ташлап, ҡыҙыҡай Аллаяровҡа мөрәжәғәт итте:

– Ғәфү итегеҙ, оҙаҡланым, буғай. Әсәйемде оҙатып йөрөнөм. Ә үҙем иртәгә китергә булдым. еҙҙе бында осрата алмам, тип ҡурҡҡайным.

– Документтарыңды бирәм тигәс, ҡайҙа китәйем, ошонда ҡул ҡуй.

Роза ошоғаса ете класты тамамлауы тура ында документтарын алмаған икән. Аллаяров уларҙы мәктәп хакимиәте исеменән тапшырырға килгән.

Бер аҙ ситкәрәк тайпылайыҡ. Беҙ Роза менән беренсе синыфтан етенсене тамамлағансы бергә уҡыныҡ. Ул аҡ ыл йөҙлө әм шундай уҡ ҡабарып торған сәсле бик матур ҡыҙ. Беҙ икәү-ара әр саҡ дуҫтарса мөнәсәбәттә булдыҡ. Дәрестәрҙә бер-беребеҙгә запискалар ебәрештек. Яйы килгәндә бергә булырға тырыштыҡ. Роза бик матур йырлай. Минән айырмалы, оҫта бейей, шуға күрә парлы бейеүҙәрҙә мине ике синыф түбән уҡыусы Флүрә менән төшөрә торғайнылар. Минең концерт номерҙарым хөртөрәк килеп сыҡ а, Роза борсола, яҡшы бул а, шатлығын йәшермәне.

Бер концертта мине лә, Розаны ла тетрәткән ваҡиға булды, әм шунан уң дуҫлығыбыҙ тағы ла нығый төштө. Май байрамы ине, беҙ концерт ҡуябыҙ. Мәктәптең үҙешмәкәр нәфис түңәрәге етәксе е Рәхмәй абый бик әйбәт номерҙар айлап алды, шуға күрә лә концерт ҙур уңыш менән барҙы. Мин бер үҙем генә сәхнәлә яраткан номерым – башҡорт бейеүен башҡарғанда, Фәүзи, ауылдың беренсе гармунсы ы әм әр концертта ҡатнашыусы ы, ҡапыл уйнауын туҡтатты. Концерттарҙа былдай хәлдең бер ҡасан да булғаны юҡ. Мин юғалып ҡалдым, бейеү, билдәле, туҡталды.

Ни өсөн шулай килеп сыҡҡандыр, үҙем дә иҙмәҫтән, сәхнәләге көҙгөгә күҙ алдым. Хәрәкәттәрем бик тәбиғи әм көлкөлө тойолғандыр инде, зал гөр килеп ҡул саба. Уларға мин дә ҡушылам, хатта көлөп тә ебәрәм, әммә сәхнәнән төшмәйем. Шул саҡ башыма бер уй килде лә, мин залға ҡарап аҙый Таҡташтың юмористик шиғырҙарын ятҡа өйләй башланым. Ул бер кешенең күрше әтәсен урлап хурлыҡҡа ҡалыуы тура ында. Зал тағы ла алҡышлай. Был миңә ҡеүәт өҫтәне, әм мин шиғыр уҡыуҙы дауам иттем. Уларҙы күп белә инем шул.

Шул саҡ гармун тауышы яңғыраны. Гармунсы хатта сәхнәгә килеп сыҡты әм мин яратҡан көйҙө (ҡайҙан белгән тин) уйнарға тотондо. Әйтер ең дә, ул мине яңынан бейергә саҡыра. Тик мин шиғырымды тиҙ генә тамамланым да клубтан сығып йүгерҙем. Күл янына еткәс, ҡамыш ара ына инеп ултырҙым. Бер яңғыҙым илап, эс ҡайғыларымды бушаттым. Бейеүем шулай өҙөлгәнгә оят ине. әм миңә генә лә түгел, сөнки тап шул мәлдә гармундың туҡтауы осраҡлы түгел. Моғайын, мине хурлыҡҡа ҡалдырыу, кәм етеү өсөн шулай иткәндәр.

Күпме ултырғанымды хәтерләмәйем. Ауыр уйҙарҙан күңелгә бик ҡыйын ине. Әле генә үҙем менән булған хәлде аҡларлыҡ бер ни ҙә таба алманым. Былай ҙа тыныс булмаған донъяла кешеләр ни ҡыландыра? Ни өсөн, нимә хаҡына ҡай ы берәүҙәр бер ни менән аҡлап булмаҫлыҡ хаслыҡ ҡыла? орауҙарыма мин яуап таба алманым. Ултыра торғас, тынысландым. Ғәжәп, миндә бер кемгә ҡарата ла асыу тойғо о юҡ ине. Ошо минуттарҙа ла уйҙарым яҡты, синыфташтарыма ҡара-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 167



та әр саҡ яҡшы мөғәмәлә итеү, ғөмүмән, кешеләргә игелектәр генә эшләй белеүем мине гармунсы кеүек әҙәп еҙ бәндәләр алдында әхлаҡи яҡтан күтәреп ебәрҙе. Минең өсөн кешеләрҙең үҙемә мөнәсәбәте түгел, ә үҙемдең уларға ҡарашым нисек булыуы мө им. Гармунсы Фәүзи каше әҙәп еҙлеккә мин бер ҡасан да бара алмаҫ инем. Тик шуны аңлай алманым: ни өсөн хаслыҡ шул тиклем уҡыр? Мин бит бер кемгә ҡарата ла насарлыҡ ҡылманым, берәүҙе лә ҡыйыр ытманым. Ауылдаштарым өсөн бейенем генә. Бәлки, башҡаларҙан оҫтараҡ булғанмындыр. Бының өсөн хаслыҡ ҡылырғамы?

Ғөмүмән, ул йылдарҙа әм унан уң да ауылдаштарымдың байтағы миңә ҡарата аңлайыш ыҙ насар мөнәсәбәттә, хатта дошманыраҡ та булды. Ҡай ы берәүҙәре был тойғо он асыҡтан-асыҡ белдереүҙән дә тартынманы. Минән көнләшкәндәрҙер, тип уйлайым. Үҫә килә мин әүҙемлек, эш өйөүсәнлек, тегене-быны уйлап табыу буйынса төрлө оҫталыҡ күр әтә башланым. Былар көндәлек тормошта сағылыш тапты. Мәҫәлән, магазиндан ике кирза сумка атып алдым да үҙемә итек тегеп кейҙем. Төрлө материал киҫәктәренән кейем- алым: күлдәк, салбар, кепка тектем. Ул саҡта миңә ни бары ун ике йәш ине. Ун дүртем тулғас, олатайымдың үҙебеҙ йәшәгән иҫке өйөн үтеп ташланым да шул уҡ материалдарҙан яңы ын өйҙөм. Атайым миңә ҡулынан килгәнсә ярҙамлашты. Металл көнкүреш әйберҙәренән дә күп нәмәләр я ай торғайным. Төбө төшкән иҫке биҙрәләрҙе йыйып алып төпләнем. ынған көрәктәрҙе ап ҡуйырлыҡ урын я ап рәткә килтерҙем. Борайҙан хужалыҡ магазинынан тимер ҡалай атып алып, мейестәр өсөн торба я аным.

Ҡырҡ беренсе йылдың ҡышында беҙҙең өйҙә Ленинградтан уғыштан ҡасып килгән кешеләр торҙо. Яҙын улар ҡайтып китергә мәжбүр булды, сөнки ауылыбыҙҙа йәшәү өсөн шарттар самалы ине. Уларҙан ихатала өс тәгәрмәсле, йөрөй алмаҫлыҡ булып ватылған велосипед ҡына тороп ҡалды. Бер ниндәй запас частар, ҡулайламалар булмауға ҡарамаҫтан, мин был велосипедты йүнәттем. Йүнәтеп тә бөттөм, ихатаға Мөжип ҡарттың аҡ аҡ уҡытыусы ҡыҙының ире килеп инде лә, бер үҙ ҙә әйтмәйенсә, велосипедты алып сығып та китте. Ғәмәлдә кеше милкен тарып алды, Енәйәт кодексы теле менән быны талау тип ба аларға мөмкин. Был эшлек еҙ ваҡ жуликтың исемен дә телгә алғы килмәй.

Бынан тыш, мин ҡағыҙ яҙыуҙа ла оҫталыҡ ҡаҙандым. Ауыл кешеләренә ғариза яҙып бирҙем, төрлө акттар төҙөнөм, теге йәки был эш ҡағыҙҙарын күсереп яҙҙым. Кем ярҙам орап килә, шуға ярҙам иттем. Атайым ғәрип булғас, минең бындай дәрәжәлә аҡыллы әм эшлекле булыуым, күрә ең, ҡай ы бер ауылдаштарымдың аңына икенсе төрлөрәк еңгән. Тәкәббер, үҙе хаҡында юғары фекерҙә булған кешеләргә, хатта был бәләкәй ауылда булған сүрәттә лә, күрә ең, уларҙан да аҡыллыраҡ тағы ла кемдеңдер булыуы мөмкин түгел. Ата-әсә е кем булыуға ҡарамаҫтан. Ауылдаштарым минең әләтемә, оҫталығыма ышанырға теләмәне, сөнки үҙҙәренең сикләнгәнлеге арҡа ында шәхесемдең шундай булыуына аңлатма таба алмай ине. Үҙҙәренең наҙанлығын, аң ыҙлығын улар мине хурлай торған үҙҙәр менән компенсацияларға тырышты. Ул барыбер ата ы кеүек буласаҡ, ата ынан уҙҙыра алмаясаҡ, уны ла ата ы Кәрәметдиндеке кеүек яҙмыш көтә, тигән үҙҙәр ишетелде. Ауылыбыҙҙа минең аҙаш – Сәләхетдин исемле тағы ла бер әҙәм бар ине. Шул минең турала, уның (минең – **С.К.)** исеме генә минеке кеүек, ә үҙе и ә буш ҡыуыҡ, тип өйләнгән. Күрә ең, ул бәндә үҙенең яратҡан шәхесенә ба а биргән. Тормошта кемгә ниндәй файҙа килтергән ул? Ауылда берәй е ҡасандыр ошонда Сәләхетдин тигән кеше йәшәгәнен хәтерләйме? Юҡ ундай кешеләр! Юҡҡа сыҡты ул, ямғыр селәүсене кеүек. Буш ҡыуыҡ, маҡтансыҡ бәндәләр халыҡ күңелендә оҙаҡ аҡланмай. Үҙ тәртибемә үҙем ғәжәпләнә башланым: минең хаҡта насар хәбәрҙәр күберәк таралған, ҡысҡырыбыраҡ әйтеләгән айын мин кешеләргә игелекте күберәк килтерҙем, намыҫлы кешеләргә, оҫта ҡулдарға ихтирамлыраҡ ҡараным.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 168



Әйтергә кәрәк, минең турала алама хәбәрҙәр тараҡкан бәндәләр ара ында миңә туған тейешлеләр ҙә булды. Был хәл мине ысын-ысындан яфала а ла, айлаған юлымдан сигендерә алманы. Улар ара ында ла таланттар юҡ бит. Бары ы ла төç өҙ, эшлек еҙ, йәлләүгә генә мохтаж бәндәләр.

Үҙемде хурлаусыларға бер ниндәй ҙә ә әмиәт бирмәнем. Үҙемә ышанып, эшемде дауам иттем: уҡыным, эшләнем, эшләнем, уҡыным. Яҙмыш миңә үçмер саҡта ла, йәшлек йылдарында ла, өлгөрөп еткәс тә, ҡартлыҡта ла шундай миссия йөкмәткәйне. Тормошта ең ыҙғанып эшләү, йәмғиәт, кешеләр өсөн игелек эшләүҙән дә юғарыраҡ тойғо юҡтыр ул...

Хәҙер мәктәпкә әйләнеп ҡайтайыҡ. Документтарын алып, Роза сығып китте.

— Мин дә китәйем инде,— тинем, хушлашып. — Бары ы ла аңлашылды. Әйткәндәрегеҙҙе үтәргә тырышырмын.

— Бик яҡшы. — Рәхмәй абый шатланды. — ин ҡалаға кит тә уҡырға кер.

Бик яғымлы хушлаштыҡ, ә мине урамда Роза көтөп тора. Был мине ҡанатландырып ебәрҙе. Етмә ә, Роза йылмая. Бик йылы өйләшә башланы. үҙгә әм бер-беребеҙгә әүрәп, алға атланыҡ. Кемдәрҙер эргәнән үтеп кит ә, ҡай ы ылыр иçәнләш ә лә, уларҙы күрмәй инек. Беҙҙең күптән инде ошолай өйләшкән юҡ ине. Бергә булыу, бер-бере енә ҡарата битараф булмаған кешеләрҙең ошондай уңайлы шарттарҙа эс серҙәрен уртаҡлашыуы, әлбиттә,— ҙур ҡыуаныс. Ә бит мин Розаны шашып өйәм, үҙенә әйтергә ҡыйыулыҡ ҡына етеңкерәмәй. Әлбиттә, унын мине яратыуы, бөгөн ошо хаҡта әйтәсәге тура ында күҙ алдына ла килтермәнем...

Ул арала кис тә яҡынлашты. Тәүҙә беҙ күлде уратып йөрөнөк, унан ауыл ситенә килеп сыҡтыҡ. өйләшеп үҙебеҙ бөтмәне.

— Роза, әйт әле, киткең килмәйме? — Мин ораууыма яғымлылыҡты мөмкин тиклем күберәк өçтәргә тырыштым.

— Нисек әйтергә? Эс бошоп тора инде ул. Бәлки, ҡабат ҡайтып та булмаç. Бары ы ла ихтимал. Тик мө име ул түгел. Ҡабат дуçтар менән бергә була алмабыҙ.

— ин хаҡлы. Класташтарыбыҙ таралышты. Рәйеф — Урта Азияла, Вафа — Уралда. Ә ин ҡайҙа уҡырға самалай ың?

— Шаҙы мәктәбенә барам. Ә инең уҡыу яғы нисек уң?

— Башҡаларҙыҡы кеүек инде. Тик ҡайҙа барырға ла белмәйем. Рәхмәй абый ҡалаға китергә кәңәш бирҙе. Шулайтырмын, ахыры, тик уҡыуҙы дауам итәсәкмен. Уҡыу ыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Бик күпте эшләргә уй бар, тик был хаҡта нисек өйләргә белмәйем.

— Миңә өйләр еңме?

— Әлбиттә. иңә бигерәк тә.

— Ниңә?

— Ниңә икәнен үҙең белә ең...

— Беләм! Ышанам да, сөнки...

Роза әйтеп бөтөрмәне. Хәйер, бының кәрәге лә юҡ ине. Беҙ бер-беребеҙҙе ярты үҙҙән үк аңлай инек. Шулай өйләшә- өйләшә, беҙ ауылдың көньяҡ сигенә лә килеп еткәнбеҙ. Роза мине ҡултыҡлап алды ла ышаныслы аҙымдар менән йылға буйына алып китте.

— Кем белә, ҡасан да бер был гүзәл ерҙәр буйлап йөрөргә тура килер. Был кис беҙҙеке, әм уны бер кем дә беҙҙән тартып ала алмаç, — тине ул серле итеп.

Йылғала беҙ балаларса ыу сәсрәтештек, көлөштөк, шаярҙыҡ. Күңелдәрҙә бер ҡасан да булмағанса әйтеп бөтөргө өҙ рәхәт. Беренсе тапҡыр Розаны өйөүемде, унын хаҡына бары ын да эшләйәсәгемде, ул минең йөрәгемдә саҡта бары ы ла ҡулымдан киләсәген әм был донъяла кешеләр, йәмғиәт өсөн игелектәр генә ҡыласағымды тойҙом.

Йылға аръяғындағы ҡайынлыҡта ялан сәскәләре йыйҙыҡ. Мин уларҙы бергә бәйләнем дә Розаға букет итеп тотторҙом. Бер ҡыуаҡлыҡ янына еткәс, икебеҙ ҙә

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 169



йәшел үләнгә ултырып ял итергә булдыҡ. үҙ күп нәмә хаҡында, шул иҫәптән йәштәр әм үҙебеҙ хаҡында ла барҙы. Бына эңер төшә башланы. Шундай йылы йәй кисе. Кәйеф шундай күтәренке, күңелдәрҙә бығаса бер ҡасан да кисерелмәгән иләҫлек. Тирә-йүн тып -тын, тик ҡай ы берҙә ҡайын япраҡтарының әкрен генә иҫкән елгә ҡыштырҙауы ғына боҙа был тынлыҡты..

Роза миңә яҡыныраҡ ултырҙы ла ҡосаҡлап уҡ алды. Мин уның тәненең еңелсә ҡалтыраныуын тойҙом.

– Ҡосаҡла, ниңә йән еҙ кеше кеүек ултыра ың? – тип шелтәләне ул. Мин албырғап ҡалдым әм, бер ни тиклем ҡыйыуланып, ҡыҙҙы ныҡ итеп ҡосағыма алдым. Бер үҙ ҙә әйтмәйенсә, Роза миңә табан ауышты әм ирендәре менән ирендәремә үрелде. Үҙем яратҡан кеше ҡосағында булыу, ҡайнар улышын тойоу шундай көслө тәьҫир итте – үҙемде ниндәйҙер кисәлә эсеп иҫергән кешеләй хис иттем. Розаның йөрәге нисек тибеүенә саҡлы ишетелде миңә. Үҙемдең әм ҡыҙҙың был минуттарҙа ни эшләүен мин томанлы ғына аңланым. Ул тиҙ генә өҫтөмдәге күлдәгемде ыҙырып алды, үҙенең кейемен сисеп ырғытты... Мин уны тағы ла ҡосаҡланым, уның ҡыҙҙарға ғына хас тығыҙ күкрәгенең йылы ын тойҙом.

Роза мине ирендәремдән үбә, үҙе өйләнә: “Уҡыған саҡтарҙа мин әр ваҡыт ошо минуттар тура ында уйлана инем. Нисек рәхәт миңә... Ҡәҙерлем минең, өйгәнем... Онотма, мин инеке, инең өсөн үҫкәнмен. Был минең беренсе тапҡыр...” Роза, ҡыҙып китеп, күкрәгемде еңелсә тешләне лә тештәрен муйыныма батырҙы...

Беҙ икәүләп енси бәйел еҙлеккә биреләек. Үҙебеҙ менән ни булғанын, моғайын, аңлап та еткермәгәнбеҙҙер. Донъя ҡайҙалыр ситтә, беҙ уны бөтөнләй иҙмәйбеҙ. Ниндәйҙер татлы иҫерткес арбаныу беҙҙе икенсе, кеше аҡылы етмәҫлек донъяға алып киткән. Тойғолар аҡылыбыҙға буй онмай, донъяның аҫты-өҫкә килгән. Беҙ ҡайҙалыр осабыҙ...

...Бынан уң күп йылдар уҙасаҡ. Инде олоғайып бөткәс, ауылға ҡайтҡанда мин ошо ергә киләм. Ниндәйҙер билдә еҙ тойғо мине был урынға әйҙәй. Элекке иҫерткес минуттарҙы уйлауҙыр, моғайын. Күҙ алдына килтерегеҙ: мин ул урынды таба алмайым. Ул урын үҙгәргән. Элекке ҡайындар, ҡыуаҡлыҡтар хәҙер юҡ. Тәбиғәт бөтөнләй икенсе сүрәткә ингән. Ваҡыт бары ын да үҙгәртә шул.

Барыс йылға ы яры буйында үләнгә ултырып уйға сумам. Тағы ла үткәндәр иҫкә төшә. Әлеге кистең әр бер киҫәге хәтеремдә. Телдә йырсы Александр Малининдың “На том берегу” тигән йырының үҙҙәре урала:

*А на том берегу незабудки цветут,*  
*На том берегу все было в первый раз.*  
*На том берегу я от счастья был глуп...*  
*...и это никогда забыть не смогу.*

Был көн мин буш инем. Ҡайҙалыр ашығырға түгел. Мин тәбиғәт ҡосағында хәтирәләргә биреләем.

Роза менән мине тормош төрлө тарафтарға оҙатты. Мөхәббәтебеҙгә оло хискә әйләнергә насип булмаған. Ҡыҙғаныс. Тәүҙә беҙ хат алыштыҡ. Уларҙың йөкмәтке е мөхәббәт менән тулы. Уларҙы аҡланым. Был хаттар бер повесҡа торошло, шуға күрә бында ҡыҫтырып тормайым. Егерме йәшем тулыу айҡанлы ҡотлап яҙған хатындағы шиғри юлдарҙы килтермәй булдыра алмайым:

*Ниндәй бүләк бирәйем икән*  
*инең тыуған көнөңә?*  
*Пион-сәскә бирер инем,*  
*Ул сәскә лә тиҙ шиңә.*

*Юҡ донъяла матур әйбер*

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 170



*иңә бүләк булырлыҡ.*
*ин йәмләгән был тормоштоң*
*Ер йөҙөндә тиңе юҡ!*

*Оҡшар, бәлки, бүләк ит әм*
*Ҡайнар йөрәк күңелен,*
*Ысын хистәрҙең саф сәскә ен,*
*Шиңә торған түгелен.*

Бына шундай тәрән мәғәнәле, ябай әм күңел түренән ағылған хистәр. Уларҙың эскер еҙлегендә шик юҡ, мин был юлдарҙы ысын күңелдән ҡабул иттем. әр саҡ үҙем менән йөрөттөм, эстән генә ҡабатланым. Хатта көйгә лә алып ҡарарға иткәйнем, килеп сыҡманы.

Эх, мөхәббәт, мөхәббәт! Кемдәрҙең генә башын ҡатырмай ул. Ул ысынлап та уҡыр ғына түгел, еңеп булмаҫлыҡ, хатта үҙгәреүсән дә тойғо. Беҙҙең мөхәббәт менән дә шулайыраҡ килеп сыҡты. Ҡыҙыу хатлашыу бер саҡ туҡтаны. Байтаҡ ваҡыт уҙғас, өйгәнемдән мине шаҡ ҡатырған шундай йөкмәткеле хат килде:

*“Ҡәҙерле Сәләхи! Тормошомда ҡай ы бер үҙгәрештәр булып алды. Мин, әсәйемдең өгөтөнә күнеп, кейәүгә сығам. Ул кеше минән өлкән, инженер булып эшләй. Файҙалы бәйләнештәре күп. Юғары белем алыу өсөн миңә матди гарантия ла бирә. Ҡаршы килмәҫ ең, тигән өмөт менән яҙам да инде был юлдарҙы. Зин ар, яуап ебәр”.*

Бер аҙ ышанмай торҙом, бәлки, был шаярыуҙыр. Юҡ икән шул. Хат мине бөтөнләй “үлтерҙе”. Баштараҡ мин бер ни ҙә аңламай торҙом. Артабан үҙемә урын таба алманым. Асыуымдан хатты киҫәктәргә йыртҡыланым. Өс көн буйы иҫерек кеше кеүек йөрөнөм. Йыртып ташлаған хат киҫәктәрен йыйҙым да тағы уҡып сыҡтым.

Дүртенсе тәүлектә бер аҙ тынысландым. Был хәлдә мин бер нәмәне лә үҙгәртә алмаясағымды аңланым. Роза минән йыраҡта. Яҙмышҡа, телә әм-теләмә әм дә, буй онорға тура килде. Тамам тынысланғас, хәлде тулы ынса төшөнгәс, хатты тағы уҡыным. Көтмәгәндә бары ы ла аңлашылды. Минең өсөн үтә мө им фекерҙәр юл ара ына йәшеренгән икән. Бына нимә хаҡында әйтә ине улар: “файҙалы бәйләнештәре булған инженер” тигәнен генә алайыҡ. Ошо юлдар ара ынан уҡ миңә: “ Ә ин кем уң?” – тигән ороу ишетелгәндәй булды. Әлеге ваҡытта мин, ысынлап та, бер кем дә түгел. әм был – ысынбарлыҡ! Хаттағы икенсе фекергә лә иғтибар итәйек: “Юғары белем алыу өсөн матди гарантия бирә”. Шул уҡ юлдарҙан “Ә ин, ыштан ыҙ сибәр малай, миңә ниндәй гарантия бирә ала ың?” тигән ораuҙы табырға мөмкин. Быны ы ла хәҡиҡәт. Бөгөн мин уға бер ниндәй ҙә гарантия бирә алмайым. Юлдар ара ынан уйландырырлыҡ башҡа фекерҙәр ҙә таптым. Мө им, тормоштоң әсе абағы булды был хат.

Ғәжәп, мин үҙемдә бер ниндәй ҙә асыу тойманым. Ҡатын-ҡыҙҙың тәртибенә төшөнөү ауыр. Был – бер. Икенсенән, әр кем үҙ юлын эҙләй әм отошло он. Үҙеңә бик яҡын кешене хөкөм итеү минең өсөн ҡабул ителгә еҙ, хатта әхлаҡ ыҙлыҡ кеүек тойолдо. Елгә ҡаршы төкөрөргә ярамай. Был ваҡытта башымда тик бер төрлө уй урала ине: “Тойғоларымды тыйып тота алырмынмы?” Эсемдән, булдыра алырмын, ис шик еҙ тотормон, тигән яуап килде. Әгәр ҙә булдыра ал ам, мин тормош юлында осраған барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы ла психик тетрәнеү еҙ үткәреп, әхлаҡи йөҙөмдө аҡлап ҡаласаҡмын. Был уй мине тынысландырҙы, өмөт саҡтылары өҫтәне.

Шул уҡ ваҡытта икенсе уй ҙа килде әм ул мине айнытыбыраҡ ебәрҙе: тимәк, унын мине яратыуы ваҡытлы, ялған күренеш булған. Ғәмәлдә эскер еҙ, тормошта үҙ урынын табырға тырышҡан, әхлаҡи йә әттән саф кеше үҙенең тормошсан ҡарашын ҡапыл үҙгәртә, мөхәббәтенән, әгәр ҙә ул ысын тойғо бул а, баш тарта ал-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 171



май. Бәлки, уның мөхәббәте эскер еҙ, ысын булмағандыр. Ул ләззәткә иҫергән теге мәлдә ашығып ант итеүгә ҡарамаҫтан, мин уның тәүге мөхәббәте булмағанмындыр. Әлбиттә, юҡ! Мин аңлай башланым: ҡайҙан килгән уға ундай тәжрибә?

Эйе, был ваҡиға әле минең нығынып та бөтмәгән холҡом өсөн көтөлмәгән, бик ҡаты удар булды.

Бер тәүлек уҙғас, мин Розаға телеграмма уҡтым: *"Килешәм. Ғаилә бәхете теләйем. Тик минең иңә булған мөхәббәтемде бер кем дә тартып ала алмаҫ. инең мәңгелек була алмаған дуҫың"*.

Ләкин был йөкмәтке миңә бигүк оҡшап етмәне. Ул бөгөн минең мөхәббәткә мохтажмы ни? Бер аҙ уйланып торғандан уң, артыҡ үҙҙәрҙе ыҙып ташлап, дүрт кенә үҙ ҡалдырҙым: *" иңә ғаилә бәхете теләйем"*. Ошо телеграмма китте. Элекке нескә хистәргә ҡоролған хаттарҙы ғына ҡалдырып, башҡаларын сығарып ташланым.

Бер аҙна сама ы уҙғас, унан ҡалын ғына конверт килде. Бер аҙ тотоп ултырҙым, әммә асып уҡырға теләк юҡ ине, сөнки унда минең өсөн ҡыуаныслы булмаған юлдар барлығын иҙендем. Хатта ышандым. Әйҙә, ул хәтеремдә мине яратҡан, тоғро ҡатын-ҡыҙ булып ҡал ын, тинем эстән генә. Хатты уҡый ҡал ам, был тойғоларҙың селпәрәмә килеүе ихтимал.

Ул саҡта мин шулай уйланым. Хатты асып уҡымай ғына яндырҙым...

Ул саҡта мин был уҡылмаған хаттың аңымда әм йөрәгемдә ниндәй эҙ ҡалдырасағын уйлап еткермәгәнмен. Байтаҡ йылдар уҙғас ҡына төшөндөм мин быға. Ә бит хат, бәлки, тормошомдо үҙгәртер, уға бөтөнләй башҡа йүнәлеш бирер ине. Бәлки, юҡтыр. орау әр хәлдә яуап ыҙ ҡалды.

Уҡылмаған хат мине даими эҙәрлекләне: нишләп тиҫкәреләндем, уҡыманым икән? Бер нисә йылдан уң, армияла хеҙмәт иткәндә, башыма шундай уй килде: бәлки, тәүге хат минең тойғоларымды ынап ҡарау өсөн генә ебәрелгәндер? Сөнки әр ҡатын-ҡыҙ иң элек өйгәненең үҙенә тоғролоғо хаҡында уйлай. Әммә мин был тойғоға ышанып етмәнем. Белеүемсә, ул былай хәйләгә бара торған ҡыҙ түгел. Тимәк, мин юҡ менән баш ватам.

Институтта уҡыған йылдарҙа мин тағы ла ошо хат тура ында уйландым. Фекерем үҙгәрҙе. Ул, минең телеграмманы алыу менән, асыуы килеп хат яҙырға ултыра: мин иңә ғашиҡ булып хаталанғанмын икән, ин буш ҡыуыҡ, бер нигә ярамаған бәндә, яратам, тип мине алдап йөрөгән ең, ә үҙең минән еңел генә баш тартаың. Хуш, мин ине башҡаса яратмайым...

Институтты тамамлап, үҙ аллы әм матди яҡтан етеш кеше булып киткәс, бер ниндәй ҙә мохтажлыҡ кисермәй башлағас әм үҙем был донъяла ниндәйҙер файҙалы, ә әмиәтле эш башҡарырлыҡ булып етешкәс, уҡылмаған хаттың йөкмәтке е икенсе төрлөрәк булып күҙ алдына баҫты. Бәлки, хатта ул ярҙам орағандыр: ҡотҡар мине был ғәҙел еҙлектән! Мөхәббәт еҙ тормош — тамуҡ. Минең инән башҡа бер кемем дә юҡ әм ин генә миңә ярҙам ҡулы уҙа ала ың. Алып кит мине бынан. инең менән хатта ер сигенә лә китергә әҙермен...

Хаттың йөкмәтке ен ошолай ҡабул итеү тынғы ыҙ йәнемде тағы ла нығыраҡ телгеләне. Әгәр ҙә шулай була ҡал а, мин ниндәй иҫәр! Әммә икенсе бер фекер шунда уҡ ҡаршы төштө: тәүге хатта ғәҙел еҙлек, ярҙам орау тура ында бер ниндәй ҙә ишара юҡ ине бит...

Әлбиттә, артабан мине ғүмер буйы әхлаҡи үкенес эҙәрлекләне: үҙем ғәйепле! Сөнки мөхәббәтем, бәхетем өсөн көрәшеү тура ында уйламаным да бит. Тормош беҙгә, әр уңыш, шул иҫәптән ғаилә тормошондағы бәхет өсөн дә, көрәшергә кәрәк, тип өйрәтә. Ә мин и ә был йә эттән ҡул ҡаушырып ҡалдым. Ошоноң өсөн үҙемде ғәфү итә алманым. Ошо тойғо әр саҡ йөрәгемде телгеләне. Эштә генә ниндәйҙер дәрәжәлә йыуаныс, онотолоу таба инем.

Эйе, юрист өнәре ҡыҙыҡ әм ылыҡтырғыс. Ул йәш саҡтағы шәхси тәьҫораттарҙан арындыра. Тик уҡылмаған хат бер ҡасан да онотолманы...

Ә ваҡыт аяу ыҙ уҙа бирҙе. Мөхәббәт еҙ генә ғаилә ҡорҙом. Ҡатын менән татыу йәшәмәнек. Балалар ғына йыуаныс бирә ине. Шулар хаҡына йәшәнем. Үҙемсә бәхетле лә кеүекмен. Ғүмеремдә башҡа ҡатындарҙы өйә алманым, сөнки тәүге мөхәббәтем йөрәгемде тулы ынса биләгәйне. Шулаймын инде: берәгәйле өйәм. Еңелсә шаярыуҙар булды, ә өйөү – юҡ.

Әле бына йылға буйындағы ҡыуаҡлыҡтар янында ултырам. Ошо килеш мин бер ҙә уйламаған ҡылыҡ ҡылып ташланым. Тоттом да Алла ы Тәғәләгә, күктәге көстәргә мөрәжәғәт иттем:

– Эй Аллам, эй Күк али әләре! – тип үтендем мин. – Әгәр ҙә еҙ бар икән, ҡөҙрәтегеҙҙән килә икән, шәфҡәтлелек күр әтегеҙ: мөхәббәтемде, Розаны, ниндәй сүрәттә бул а ла ҡайтарығыҙ. Үтенеп орайым!

Йы ан миңә яуап ҡайтарманы...

Көнө буйы йөрөүҙән, тойғолар ауырлығынан арып, йәшлекте уйлап, мин ҡуйы үлән ара ына яттым. Йылы ел бит-ҡулдарҙы иркәләй, ә күҙ алдымда – саф, сик еҙ күк йөҙө. Унда, Йы андың сик еҙ киңлектәрендә, башҡа тормош, башҡа донъялар. Беҙҙәге кеүек аңлы тормош итеүселәр ҙә бар. Күккә ҡарап ята торғас, онотолғанмын...

... Нимә был? Мин ултырған ерҙән йыраҡ түгел киң автомобиль юлы әм унан ялтырауыҡ лимузиндар үтеп тора. Бере е миңә яҡында туҡтай ҙа, машинанан бик ҡарт ҡарсыҡ сыға. Ул миңә табан атлай әм килеп етеү менән: “Иҫәнме, Сәләхи? Был инме?”,– ти. “Эйе, мин”,– тип яуаплайым. “Мин Роза, инең йәшлек мөхәббәтең”. “Булмаҫ, тим, мин инең кеүек ҡарсыҡ менән таныш түгел”. “Мин дә быныдай ҡарт менән таныш түгелмен. Мин йәш, ҡайнар мөхәббәтле Сәләхиҙе генә беләм”. “Әгәр ин Роза икән, иҫбат ит”. “Роза икәнлегемде иҫбатлап тормайым. Йәш сағыма ҡайтып, алдыңа килеп баҫам”.

Ҡарсыҡ ҡулы менән иҙәп ебәргәйне, мөғжизә хасил булды. Минең алда йәш Роза, теге иртәлә оҙатып ебәргән Роза тора ине. “Бына хәҙер мин ине таныйым. Ҡайҙарҙа йөрөнөң ин, ни эшләп беҙ оҙаҡ осрашманыҡ?” “Мин дә инән шул хаҡта орарға теләйем: ҡайҙа юғалдың ин, нишләп белгертмәнең?” “Мин уҡыным да, эшләнем дә, әммә ине әр саҡ иҫкә алдым,” – тим. “Миңә был ғына етмәй, ин миңә бөтә барлығың менән кәрәк. Тотошлай. Аңлай ыңмы?” “Эйе, аңлайым... Ҡайҙа китә ең?” “Мине машинала дуҫым көтә”, – ти ҙә ул, әбейгә әүерелеп, китеп бара.

“Туҡтале, Роза. Әйт әле, уңғы хатыңда ин нимәләр тура ында яҙғайның?” “ ин уны уҡыманыңмы ни?” “Юҡ, нимә яҙғайның уң?” “Минең хатты уҡыманыңмы? Тимәк, теләмәгән ең. Ә үҙең, яратам, тигәйнең... Интернеттан уҡы ин уны. Мөхәббәт хаттары янмай ҙа, юғалмай ҙа. Уҡымаған ың, шуға күрә беҙҙең мөхәббәт ғүмер еҙ булды. Хуш, йәшлек мөхәббәтем!..”

Мин тертләйем әм тороп баҫам. Бер ниндәй машина ла, киң юл да юҡ. Яныма килгән ҡарсыҡ та күренмәй. Нимә булды уң әле был? Төшмө, әллә күҙемә генә күрендеме? Әллә был Алла ы Тәғәләнең ярҙамымы? Әллә ул минең үтенесемде башҡарҙымы? Тимәк, Алла ы бар, беҙгә таныш булмаған донъя ла бар. Бар, Аллаға шөкөр. Бында мин тикмәгә генә килмәгәнмен икән.

9

Йәш саҡтарҙы иҫкә алайыҡ әле.

Иртәгә ен иртә менән Роза китеп барҙы. Үҙен оҙатып йөрөмәүемде үтенде.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 173



Унын артынан кырандаска ат егеп олата ы килгәйне. Шулай ҙа мин ауылдың ул китә е яҡ осона сығып, артынан ҡарап ҡалырға булдым. Кырандастың ауылдан бик шәп сығып, Яңы Ҡарағош яғына китеүен күҙәтеп торҙом. Роза мине күреп ҡалды ла ҡул болғаны. Мин и ә, шатлығымдан үҙемде онотоп, ике ҡулымды ла болғайым. Әлегәсә күҙ алдымда унын кырандаста китеп барыуы. Аҡ ыл йөҙ, шундай уҡ ҡабарынҡы сәстәр, бер аҙ тулышҡан оҙонса бит, йоморо танау. әм ул ҡул болғай ҙа болғай...

“Юнона” спектакленән:

*“Я тебя никогда-никогда не увижу,*
*Я тебя никогда-никогда не забуду”*

– тигән үҙҙәр нисек иҫеңә төшмә ен!? Тик ул саҡта мин был әҫәр менән таныш түгел инем. Ә бит спектакль геройы хаҡлы: мин Розаны ҡабат бер ҡасан да күрмәнем. Бына шундай моң оу тарих...

Бер нисә көндән мин дә ауылдан киттем. Уҡырға тип уйлағайным, бөтөнләйгә булған. Тормош шундай көтөлмәгән хәлдәргә лә юлыҡтыра икән.

Шул уҡ көндө район үҙәге Борайға килеп еттем. Беҙгә яҡын туған Ғилми ағай юлға сығыр алдынан үҙен күрергә ҡушҡайны, шуға күрә ашыға-ашыға Вострецов урамындағы иҫке йортта урынлашҡан район гәзите редакция ына атланым. Икенсе ҡатҡа күтәрелдем. Ишмәтов урынында, ниндәйҙер мәҙәк гәзит ҡарап ултыра. Мәҙәклеге шунда: ҡай ы бер биттәрендә бер нәмә лә баҫылмаған. Артабан гәзит эшенең ҡай ы бер үҙенсәлектәрен төшөндөм. Ғилми ағай сығып килгән номерҙың хаталарын төҙәтеп ултырған икән. Мине күреү менән ул шатланды. Беҙ оҙаҡ ҡына өйләшеп ултырҙыҡ. Тормошта күпте күргән, үҙ башынан кисергән ағайым миңә өгөт-нәсихәт уҡыны, кәңәштәр бирҙе. Шунан әйтә ҡуйҙы:

– Ә мин иңә сюрприз әҙерләнем.

Ул эске кеҫә енән бер нисә ҡағыҙ аҡса сығарып иҫәпләне лә миңә уҙҙы:

– Бында йөҙ ум. Ал. Ул иңә бик кәрәгер.

Көтөлмәгән хәлдән аптыраушта ҡалдым. Аҡса тура ында үҙ булманы бит. Шуға күрә мин баш тарттым, хатта артҡа сигенә биреп ҡуйҙым. Баштан әллә ниндәй уйҙар теҙелеп үтте. Ундай аҡса минең ҡулға кергәне лә юҡ.

– Аҡса ыҙ бер ни ҙә ҡыла алмаҫ ың, – тип ныҡышты Ғилми ағай. – Ал. Пажалыста...

– Юҡ, – тинем мин, тулҡынланып. – Миңә аҡса кәрәкмәй. Хушлашырға ғына кергәйнем.

Ғилми ағай уңай ыҙ хәлдә ҡалды. Күрә ең, ул ауыл малайынан бындай эскер еҙлек көтмәгән. Ул ни эшләргә лә белмәне. Аҡсаны өҫтәлгә алды ла эргәмә килде. Моғайын, ул мине, хәҙер тотор ҙа тышҡа сығып йүгерер, тип уйлағандыр. Минең ҡулдарҙан тотто ла, өҫтәл янына ултырғысҡа ултыртып, ағайым бүлмә буйлап йөрөргә тотондо.

– Туғанҡайым, ин шуны аңла, – тип мөмкин тиклем яғымлыраҡ булырға тырышты. – Мин инең ҡалаға барып урынлашыуынды теләйем. инән яҡшы кеше сығасағына ышанам. Уҡыр ың да ҙур кеше булып китер ең.

– Аҡсаны барыбер алмайым, – тинем кире ҡаҡмаҫлыҡ тауыш менән. – Минең үҙ аҡсам бар. Әсәйем бирҙе.

Ғилми ағай ныҡыш кеше булып сыҡты. Аҡса ын алды ла, яныма килеп, тиҙ генә кеҫәмә алып та ҡуйҙы. Шундай тиҙ әм көтөлмәгәндә булды был, мин ҡаршылыҡ күр әтә алмай ҙа ҡалдым. Башыма килгән беренсе уй шул булды: был ауыр хәлдән сығыу өсөн иң уңайлы ы, әм миңә үҙ аллы йәшәй башлағанға тиклем бары ы ла ыңғай килеп тора. Әммә бер нисә секундтан ҡапма-ҡаршы икенсе уй мейене еңкетте: мин бит кеше аҡса ын, үҙем эшләп тапмағанды алам!

әр хәлдә мин бүлмәнән аҡса ыҙ ғына сығып китәсәгемде хәл ҡылғайным инде.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 174



Тик быны нисек эшләргә? Китергә ашыҡманым. Ғилми ағай ҙа тынлыҡ аҡланы. Өндәшмәй күпме торор инек, билдә еҙ, шул саҡта телефон шылтыраны. Ғилми ағай трубканы алды ла өйләшә башланы. Күрә ең, танышы булғандыр, уның кәйефе күтәрелеп китте: көлдө, өҫтәлгә уҡҡылап алды. Бер аҙҙан урынынан торҙо ла тәҙрә яғына, миңә арты менән тороп өйләшә башланы. Ошонан файҙаланып, мин тиҙ генә кеҫәмдәге аҡсаларҙы өҫтәлдәге ҡайтармалы календарь биттәре ара ына тығып ҡуйҙым. Ошонан уң үҙемдең дә кәйеф бер аҙ күтәрелеп китте. өйләшеүен тамамлап миңә табан боролғас, Ғилми ағай ҙа шатланды.

– Ну, туғанҡай, – тине ул. – Мин иңә бик күп өйләнем. Бары ын да хәтереңдә тота алмаҫ ың. Тик бер нәмәне онотома: кеше булыу еңел түгел! Әҙәм аҡтыҡтары, ҡом оҙҙар был донъяла аяҡ тибеп йәшәй. Был кешеләрсә түгел! Үҙ аллы әм атылмаҫ булғанда ғына кеше үҙенең асылында ҡала. Ҡалғанын тормош үҙе бирер әле...

– Ғилми ағай, бары ы өсөн дә рәхмәт, – тинем мин. – Айырыуса аҡыллы кәңәштәрең өсөн. Мин уларҙы бер ҡасан да онотмам.

Ишмәтов менән осрашыуҙан бик ҡәнәғәт булып сығып киттем. Намыҫымды төшөрмәнем, кеше байлығын кеҫәгә алманым. Әлбиттә, был хаҡта ағайымдың күҙенә тура ҡарап әйтә алманым. Бәлә түгел, яҙып ебәрермен әле.

Редакциянан сыҡҡанда мин хатта үҙ-үҙемә шундай үҙ бирҙем: бер ҡасан да, ис ниндәй хәлдә лә кеше аҡса ына ҡул уҙмаясаҡмын. Ә әйткән үҙҙә торорға кәрәк.

Ишмәтов мине үҙәк урамға саҡлы оҙата килде.

– Хәйерле юл, туғанҡай, – тине ул. – Тормош юлың уңыштарға бай бул ын.

Беҙ хушлаштыҡ. Мин ауылдың Яңауыл ҡасаба ы яғына илткән юлын табан атланым. Юл ыңғай машинаға ултырҙым. Элек, хәҙергеләй, автобустар йөрөмәй ине. Йөк машина ының кузовында бер үҙем. Машина мине тыуған яҡтарымдан торған айын йырағыраҡ алып китә.

Матур, ҡояшлы көн. Ә уйҙарым бутала ла бутала. Бере енән-бере е "текәрәк" уйҙарға сумып киләм. Торҙом да кабинаға ҡулдарҙы терәп, ҡаршы елгә битемде ҡуйҙым. Көслө машина еле миңә яҡшы тәьҫир итте, ахыры, рәхәтерәк булып китте. Тирә-яғыма ҡарандым.

Башҡорт дала ы ик еҙ-сик еҙ булып йәйелгән. Күҙҙәремде ауырттырырҙай итеп йыраҡҡа ҡараш ташланым. Унда – урмандар, бейек булмаған ҡалҡыулыҡтар. Тағы ла арыраҡ – урман, кескәй сауҡалыҡтар. Тирә-йүн ысынлап та мөғжизә. Яҡты әм ҙур, ә мин унда бер ҡом киҫәге генә. Тик был мине ҡурҡытмай, сөнки юғалып ҡалмаҫымды яҡшы беләм.

Борай, тыуған ауылым Иҫке Ҡарағош, өҙөлөп өйгән мөхәббәтем тороп ҡала. Юҡ, ҡалмай, улар әр саҡ минең менән, йөрәгемдә.

Алда – билдә еҙлек. Шул турала баш ваттым. Кешенең киләсәге – сер, кешегә уны күрә белеү әләте бирелмәгән. Алда нимә көтә? Был аяу ыҙ донъя кемдәр менән осраштырыр? Ҡайҙа, кем булып эшләрмен?

Билдә еҙлеккә ҡаршы барам. Мине ҡыҙыҡлы көрәш, драматик хәлдәр менән тулы тормош көтә. Унда ижади уңыштар ҙа буласаҡ...

Ул хаҡта әлегә белмәйем. Әммә шуны ы яҡшы билдәле: идеалдарым, хыялым өсөн бар көсөм менән аҙағынаса саҡлы көрәшәсәкмен.

**Сәләхетдин КАРАМОВ.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 175



# БАҘАР ШӘҮЛӘ Е

Донъя иҡтисады тәрән кризис кисерә. Уның эҙемтәләрен белгестәр АҠШ-та 70 йыл элек башланған Бөйөк торғонлоҡ менән сағыштыра.

Кем ғәйепле? Кризисҡа юлыҡтырған сәбәптәрҙең тамырҙары тәрәндә булыуы тура ында “Совершенно секретно” аҙналығының быйылғы 2-се сығарылышында баҫылған “Аҡсаны ул ниңә уйлап тапты” тигән мәҡәләлә ҡыҫҡа, әр кемгә аңлайышлы яуап бар. Аҙналыҡ, күптән түгел Бөйөк Британияла донъя күргән “Аҡсалар батшалығы. Донъяның финанс тарихы” тигән китап авторы, инглиз тарихсы ы Н. Фергюсонға ылтанып, түбәндәгеләрҙе яҙа. 2006 йылда тулайым иҡтисади продукт 47 триллион доллар, ә фонд баҙарҙарында әйләнештә йөрөгән ҡиммәтле ҡағыҙҙар 473 триллион доллар тәшкил итте. Был әйләнештәге әр ун долларҙың тик бере е генә атып алыу әләтенә эйә, ҡалғандары и ә буш ҡыуыҡ икәненә ишаралай. Финанс кризисына хәл иткес дәрәжәлә булышлыҡ иткән әле иҫән кешеләрҙең бере е – АҠШ гражданы А. Гринспен. Ул Федераль резерв система ына етәкселек иткән осорҙа ҡиммәтле ҡағыҙҙар хәтәр ташҡынға әүерелеп, АҠШ-тың дәүләт бурысы 11 триллион долларға еткерелде.

Рәсәй Федерация ы Президенты Д. Медведев та, былтыр Федераль Йыйылыш депутаттары алдына 2009 йылға бурыстар ҡуйғанда, кризистың барлыҡҡа килеүендә төп ғәйепте АҠШ-тың финанс әм эшлекле даирәләренә ауҙарҙы. Донъя баҙарында ҡатнашҡан башҡа илдәр иҡтисады менән иҫәпләшмәйенсә, аҡса ҡыуығын саманан тыш өрөп, тине ул, Ҡушма Штаттар бөтә донъя иҡтисадын кризис упҡынына өйрәне. Швейцарияның Давос ҡала ында үткән быйылғы иҡтисади форумда Ҡушма Штаттар яғынан ҡатнашҡан элекке президент Б. Клинтон ошо фекергә бер аҙ асыҡлыҡ индереп, кризистың тәүге билдәләрен 2001 йылда уҡ төҫмөрләп була ине, тине. Фонд баҙарына ҡиммәтле ҡағыҙҙар иҡтисад мөмкинлектәрен иҫәпкә алмай сығарылды. Ан ат табыш алыуға иҫәп тотоусыларҙың нәфсе ен ҡиммәтле ҡағыҙҙар ағымының көслөлөгө, рәсми Вашингтондың анығ ҡына иҡтисади стратегия ының юҡлығы тағы ла үҫтереп ебәрҙе.

“Көнбайыш байтаҡ ваҡыт үҙ мөмкинлектәрен инҡар итеп, ғәмәлдә бурысҡа йәшәне”, – был Германия канцлеры А. Меркелдең фекере.

Ләкин ҡай ы бер белгестәр кризисты АҠШ-тың эшлекле даирәләренә генә яп - арыу ғәҙел түгеллеген иҫкәртә. Мәскәүҙә нәшер ителгән “Ведомости” гәзитендә донъя күргән “Кризисҡа ҡаршы тәҡдимдәр”гә ҡул ҡуйған бер төркөм (улар ара - ында элеккеләр: СССР Президенты М. Горбачев, Дәүләт Дума ы депутаты В. Рыжков, финанс министры урынбаҫары С. Алексашенко .б. бар) фекеренсә, кризис иҡтисадтың сеймал йөкмәткеле булыуы, унда монополистик тенденциялар көсәйеүе, сит ил капиталын туранан-тура индереүгә ҡамасаулау, эре корпорацияларҙың сит ил банктарынан күпләп кредит алыуы арҡа ында килеп тыуҙы. Ошондайыраҡ фекерҙе Рәсәй Хөкүмәтенең Финанс министры А. Кудриндың февраль баштарында “Известия” гәзитенә биргән мәғлүмәттәре лә дөрөҫләй. Мәҫәлән, 2007 йылда уҡ федераль ҡаҙна сығымдары тулайым эске продукт үҫешенән 24,9 процентҡа күберәк артҡан. Сит ил банктарынан алған кредиты

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 176



(Рәсәйҙә ставкалар юғары тип, хәтәр байҙар кредитты сит ил банктарынан алырға күнеккән – **М.Х.**) буйынса бурысы 417,2 миллиард долларға еткән, йәғни дүрт тапҡырға артҡан.

Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе В. Путин Давос форумында төп доклад менән сығыш я аны. «Кризис капитализм донъя ын хеҙмәтләндергән финанс система ының яраҡ ыҙлығын, уның көйләүгә бирелмәүен, финанс тәүәккәллектәренең хәүефлелеген күр әтте», – тине ул. В. Путин фекеренсә, ҡиммәтле ҡағыҙҙар операцияларында активтар, кредит сәйәсәтендә уның сығанаҡтарын тәьмин итеү бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Бынан тыш донъя иҡтисадына бер үҙәктән (АҠШ-тан – **М.Х.**) тороп идара итеү ҙә үҙен аҡламай.

Ни эшләргә? Рәсәй Хөкүмәте башлығы донъя сауҙа ының тулы азатлығын тәьмин итергә, капитал юлына кәртәләр ҡуймаҫҡа (кооперация) тәҡдим итә. Шул уҡ ваҡытта Путин, дәүләт әр саҡ хаҡлы, көслө була алмай, тигән принциптан сығып, иҡтисади эшмәкәрлеккә (эшҡыуарлыҡҡа – **М.Х.**) сама ыҙ ҡыҫылмаҫҡа саҡырҙы. Журналистар менән осрашыуҙа Хөкүмәт башлығы Рәсәй йәмәғәтселеген ныҡлы борсоуға алырлыҡ мәғлүмәт тә килтерҙе: 2008 йылда Рәсәйҙән 128 миллиард доллар капитал үҙенә ҡулайлы урынды сит ил иҡтисадында тапҡан. Был ғәйәт ҙур сығанаҡ сит ил (Көнбайыш тип аңларға кәрәк – **М.Х.**) иҡтисадын үҫтереүгә, унда яңы эш урындары булдырыуға хеҙмәт итәсәк. Эйе, был – Путиндың, капитал ирекле хәрәкәт итергә тейеш, тигән тәҡдименә ышанысла башланғыс. Фекер, бәлки, Давоста урынлы яңғырағандыр, әммә беҙҙең өсөн шатлыҡлы була алмай. Рәсәйгә Б. Ельцин идара иткән уңғы йылдарҙа ла "аяҡланған" капитал күләме 25 миллиард долларҙан артманы. Тимәк, илдә уңғы ун йылда иҡтисади хәл тағы ла ҡатмарлаша төшкән. Былтыр Рәсәй иҡтисадына алынған сит ил капиталының 87 миллиард долларҙан артмауы был фекерҙе ҡеүәтләй генә.

Кризис эҙемтәләрен еңеү буйынса үрҙә телгә алынған "Кризисҡа ҡаршы инициатива" тәҡдимдәре ныҡлы уйланған, иң мө име – ил өсөн файҙалы күренеүе менән иғтибарҙы йәлеп итә. Мәҫәлән, чиновниктарға дәүләт сығымдарын 15, ә үҙҙәренең дөйөм иҫәбен 25 процентҡа кәметеү, компаниялар бурысы өсөн уларҙың акциялары менән иҫәпләшеү, иҡтисадта структур үҙгәрештәр (сеймал сығанағы булыуҙан туҡтап, донъя баҙарында үткән продукция етештереүгә күсеү – **М.Х.**), тәбиғи монополияларҙың тарифын элекке кимәлдә ҡалдырыу, банктарға ентекле аудит үткәреү, автомобиль сәнәғәтен хосуси секторға биреү отошло булмаҡсы.

Кризис менән бәйле Рәсәй властарын иң ныҡ борсоғаны – финанс ойошмалары эшмәкәрлеге. уңғы йылдарҙа үрсеп киткән банктар кредитты сама ыҙ биреп, проценттарҙы мулыраҡ туплау өсөн бары ын да файҙаланды. Ә беҙҙә кеше биргәндән бер ҡасан да баш тартмай, йәғни инеренән алда сығырын уйламай. 2006 йылдың йәйендә "Известия" гәзитендә халыҡтың бер ҡасан да булмағанса – 2 триллион умдан ашыу – кредит алыуы менән бәйле борсоулы мәҡәлә лә донъя күргәйне. өҙөмтәлә торлаҡ, машина өсөн кредит алып та түләргә әләт еҙҙәр күбәйҙе. Хәҙер улар менән армияға әүерелә барған суд приставтары шөғөлләнә. Банктарҙың үҙ мәнфәғәттәренә сығымдарҙы иҫәпләп бармауы сер түгел. "Аргументы и факты" аҙналығы мәғлүмәттәре буйынса, былтыр тармаҡта уртаса эш хаҡы 36794 умға менгән. Был яғыулыҡ-энергетика комплексынан ҡала икенсе күр әткес. Февраль урталарында АҠШ президенты Б. Обаманың банкта эшләүселәрҙең уртаса йыллыҡ эш килемен 500 мең доллар менән сикләүе беҙҙең өсөн өлгө була алыр ине.

Рәсәй Президентының күр әтмә е буйынса былтыр банктарға 1,5 триллион ум финанс ярҙамы күр әтелмә ә, улар 2008 йылды 450 миллиард ум килем менән тамамлай алыр инеме икән? Әлбиттә, юҡ, әммә был ярҙам бушҡа түгел, финанс ойошмалары аҡрынлап уларҙы ҡайтарырға бурыслы. Ярҙам ҡулы уҙып, ил башлығы, үҙ сиратында, банктарҙың кредит биреүҙе туҡтатмай, эште әүҙемерәк алып барыуына иҫәп тотҡайны. Ләкин ул яңылышты, финанс ойошмалары дәүләт аҡса -

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 177



ын долларҙар атып алыуға тотондо. Тимәк, был аҡсалар елгә осто, ум түбән тәгәрәне.

Банктарҙың быйыл ауыр хәлдә ҡалыу ихтималлығы аҡлана. Бигерәк тә торлаҡ кредиты өлкә ендә. Сөнки, йыл урталарына торлаҡ баҙарында ихтыяждың ҡырҡа кәмеүе сәбәпле, кредит түләүселәр алдында проценттар өсөн иҫәпләшеү проблема ы килеп баҫыуы бар. Дөрөҫ, хөкүмәт финанс ойошмаларында дәүләт акцияларын арттырып, улар өсөн яуаплылыҡты үҙ елкә енә алырға ынтыла, ләкин уның мөмкинлектәре лә сик еҙ түгел икәнен онотorға ярамай.

Йәмғиәт социаль-иҡтисади ауырлыҡтар кисергәндә енәйәтсел көстәрҙең әүҙемләшә төшөүе әр саҡ күҙәтелә. РФ Эске эштәр министры Р. Нурғәлиевтың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2008 йылда бөтә е 3,2 миллион енәйәт теркәл ә, шуларҙың ярты ы тиерлек иҡтисад өлкә енә ҡағыла. Банктарға бүленгән дәүләт ярҙамын үҙләштереүселәргә ҡарата былтыр ғына 99 мең енәйәт эше асылған. Дөрөҫ, министр күпме урланғанын атап әйтмәне, ә бына дәүләткә ҡайтарылғаны — 20 миллиард ум. РФ Прокуратура ы ҡарамағындағы Тәфтиш комитеты етәксе е А. Бастрыкин да уҙған йыл йомғаҡтары буйынса дәүләт органдарын биҙәмәгән мәғлүмәттәре менән уртаҡлашты. Былтыр төрлө кимәлдәге чиновниктар дәүләттең 900 миллион умына хужа булып алған. Бындай “оҙон ҡуллылар”ҙың иң күбе е — милиция, прокуратура, таможня, муниципалитет хеҙмәткәрҙәре сафында. Иң ғәжәбе: ҡаҙна аҡса ын үҙләштереүселәр ара ында РФ Хөкүмәтенән финанс министрының элекке, хәҙерге урынбаҫарҙары ла бар. Тимәк, РФ Президентының ҡаҙна аҡса ын урлауға ҡаршы көрәшкә Федераль именлек хеҙмәткәрҙәрен дә әүҙем ҡушылырға саҡырыуы тиктәҫкә түгел.

Кризисты алдан күҙаллап була инеме? Әлбиттә, бында “юҡ” тигән яуап урынығыҙ. әр хәлдә финанс белгестәре уны иҙемләргә бурыслы. АҠШ-та финанс кризисы былтыр мартта уҡ моронлай башлап, беҙҙә уның донъя баҙарында нефткә хаҡтар ҡотолғо оҙ түбән тәгәрәү менән генә беленеүе ошо хаҡта өйләй. Тотороҡландырыу фондына бер нисә триллион ум туплап та, Федераль Хөкүмәт уны матди етештереү тармаҡтарын үҫтереүгә йүнәлтмәне. Был хәл кризисҡа үҙ ауырлығын өҫтәне.

Тағы ла бер миҫал. Кремль күр әтмә енә ярашлы, былтыр йәй А. Кудрин етәкселегендәге төркөм федераль ҡаҙнаның өс йыллыҡ проектын әҙерләне. Документ буйынса 2009 йылда ҡаҙна килеме 11 триллион умға етергә тейеш ине. Дөрөҫ, донъя баҙарында бер баррель нефттең хаҡы 95 долларҙан да түбән төшмә ә. Ә ул декабрҙә үк 40 доллар кимәленә тәгәрәне. Тимәк, финанс белгестәренең фаразы нигеҙле булмаған. Хәҙер ҡаҙнаның килем өлөшө ҡайтанан ҡаралып, ул йәй урталарына ғына билдәле буласаҡ. Яҡынса күҙаллауҙар буйынса, федераль ҡаҙна килеме быйыл 6,5 триллион ум менән генә сикләнеп ҡалыуы ихтимал. Тимәк, дәүләттең социаль бурыстарын үтәүе лә шик аҫтында.

Донъя баҙарында нефть баш әйләнерлек хаҡтар менән үҫкән йылдарҙа Тотороҡландырыу (хәҙер ул Резерв тип атала — **М.Х.**) фондына бер нисә триллион ум туплап ҡалған Федераль Хөкүмәт тәүҙә кризисҡа еңел ҡараны. Резерв фондында сығымдар кризисты ауырлыҡ ыҙ үтергә етерлек, тине А. Кудрин. Ә бына февраль баштарында ошо уҡ кеше кризис эҙемтәләрен бөтөрөү федераль ҡаҙнаға 2 триллион умға төшәсәген әйтте. Йәғни, тулайым эске продукттың 5 проценты. Министр тағы ла хәҡиҡәтте йәшермәйме икән?

Эш еҙлек — кризистың ҡотолғо оҙ юлдашы, әм был — граждандар өсөн иң яманы. Быйыл илдә ундайҙарҙың 2 миллионға етеүе ихтимал. Башҡортостанда әле үк 30 мендән ашыу эш еҙ бар. Федераль Хөкүмәт был йә әттән ниндәй саралар күрә? В. Путин йыл башында уҡ эш еҙлек буйынса пособиеның 4900 умға еткерелеүе тура ында белдергәйне. Эш еҙлекте кәметеүгә (бөтөрөү тура ында үҙ бармай — **М.Х.**) тәүҙә Федераль Хөкүмәт 43 милилард ум бүл ә, февралдә тағы ла 34 миллиард ум өҫтәлде. Был сығымдарҙы яңы эш урындары булдырыу, йәмәғәт эштәре

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 178



ойоштороу, эш еҙҙәрҙе эшле урындарға күсереү кеүек сараларға тотонасаҡтар. Шул уҡ ваҡытта ҡай ы бер эш еҙҙәрҙе яңы өнәргә өйрәтеү ҙә күләмлерәк дауам итәсәк. Төбәктәргә ошо йүнәлештә үҙ програмаларын, айырыуса яңы эш урындары булдырыу буйынса, эшләргә ҡушыла. Федераль Хөкүмәт эш биреүселәргә тулы булмаған эш аҙна ына күсеү, түләү еҙ отпуск биреү кеүек сараларҙы ла әүҙем ҡулланырға кәрәклеген иҫкәртә.

Башҡортостанда, иҡтисади үҫеш министры Е.Евтушенконың мәғлүмәттәре буйынса, кризистан иң элек төҙөлөш, сауҙа әм машиналар эшләү тармаҡтары зыян күрҙе. Ләкин ситтән кредитты самалап алыу ыңғай өҙөмтәләр бирә, башҡа өлкәләрҙәге кеүек бурыстар юҡ. Яҡын арала республикала 500 миллиард умлыҡ 70-кә яҡын проект ғәмәлгә ашырылып, яңы эш урындары барлыҡҡа килергә тора. Быйыл Башҡортостан Хөкүмәте ваҡ предприятиеларға 2,5–3 миллиард умлыҡ финанс ярҙамы күр әтергә ниәтләй. Бынан тыш, ваҡ кәсеп менән шөғөлләнеүселәргә 1,5 миллиард ум бүлеү ҡаралған. Министр шулай уҡ, ҡаҙнанан эш хаҡы алыусыларға аҡса ваҡытында түләнәсәк, тигән фекерҙә.

Кризис ҡасанға тиклем дауам итәсәк? Оптимистар фекеренсә – ошо йылдың йәйенә, пессимистарса и ә – 2011 йылғаса. Абруйлы финанс белгесе М. Хазиндың “Комсомольская правда” гәзитенә интервью ында, кризис апрелдә үҙенең иң юғары нөктә енә етәсәк, тигән фекер әйтелә. Әгәр ҙә Федераль Хөкүмәт дөрөҫ эш ит ә, йылды 5-6 процент үҫеш менән тамамларға мөмкин. Хазиндың фаразынса, апрелдә доллар 40–45, ә йыл аҙағында 50–55 умғаса күтәрелеүе ихтимал. Рәсми булмаған даирәләрҙән ишетелеүенсә, Мәскәүҙә умдың курсын билдәләү буйынса ике ҡараш бар. Хөкүмәт Рәйесе В. Путин, мәҫәлән, долларҙы әлеге ише “коридорҙа тотоу”ҙы яҡлай, ә РФ Президенты яғындағылар и ә уны ирекле әйләнешкә ебәреүҙе хуп күрә. Кем өҫтөнлөк алыр – ваҡыт күр әтер.

Мәскәүҙең либераль даирәләре ғөмүмән, финанс тотороҡ оҙлоғо АҠШ-тың иҡтисады ауыҡҡанса дауам итер, тигән ҡарашта. Был фекерҙә лә хәҡиҡәт бар кеүек, сөнки, беренсенән, донъя иҡтисады долларға ҡорол а, икенсенән, Рәсәй әлегә донъя баҙарына сеймалдан башҡа етди тауар тәҡдим итергә әләт еҙ. АҠШ был йә әттән – иң күп ҡулланыусы. Ил башлығы Бөйөк депрессия осорондағы Ф. Рузвельт курсын дауам итмәксе. Конгреста сығыш я ап, Б. Обама хосуси сектор хәл еҙләнгәндә бөтә ауырлыҡ федераль хөкүмәткә төшкәнен аңғартты. АҠШ хакимиәте фонд баҙарында аҡса уйнатыуҙан матди етештереүгә күсергә ниәтләй.

Президент планы буйынса, илдә 4 миллион эш урыны булдырыу ҡарала. Банктарҙың хәл еҙҙәрен дәүләт үҙ ҡарамағына алырға йыйына. Юлдар, күперҙәр йүнәтеү, больницалар төҙөү кеүек йәмәғәт эштәре лә киң ҡолас алмаҡсы. Обама Конгрестан 800 миллиард доллар ярҙам ораны. Ләкин Ҡушма Штаттар парламенты Рәсәй депутаттары кеүек ашыҡмай, былтыр бирелгән ярҙамды нисек тотоноуҙары тура ында байтаҡ банкирҙарҙы саҡырып ентекле орау алды. Был да аңлашыла, сөнки, Ҡушма Штаттарҙың ҡаҙна дефициты быйыл 1,2 триллион долларға етер, тип көтөлә. Әйткәндәй, американдар, беҙҙән айырмалы, кризистан сығыу өсөн бары ын да эшләй кеүек. Байҙар шәхси самолеттан, эш хаҡынан баш тарта. Күптәр ваҡытын эштә үткәрергә тырышып, хеҙмәт етештереүсәнлеген арттыра.

Бындай башланғысты Рәсәйҙә лә күрергә мәжбүр булдылар. Д. Медведев Президент хакимиәтендә эш урындарын кәметеү буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. Дәүләт Дума ы Рәйесе Б. Грызлов әйтеүенсә, 2009 йылда аппарат сығымдарын 25 процентҡа кәметәсәктәр. Оборона министрлығында эш машиналарын файҙаланыуҙы (?) сикләргә ҡарар иткәндәр. Д. Медведев Кремль әм Аҡ йорт чиновниктарын сит илгә ял итергә йөрөүҙән тыйылырға саҡырҙы .б.

Дәүләт Дума ы вәкилдәре лә үҙ фекерҙәрен еткерҙе. Либералдар, коммунистар өҫтәлгән хаҡҡа (НДС) алымды бөтөрөргә йәки сикләргә тәҡдим итә. Коммунистар етәксе е Г. Зюгановты ауыл хужалығы яҙмышы борсой. Ул дәүләттең

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 179



крәҫтиәндәрҙән 15 миллион тонна иген атып алырға йыйынып та, 7 миллиондан уҙмауын әйтте. Ипотека кредитына дәүләт ярҙамы, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡты 2008 йыл кимәлендә ҡалдырыу кеүек тәҡдимдәр ҙә бар.

Рәсәй Президентының парламентҡа ҡуйған бурыстарында яңғыраған илде төбәк валюта ы ( үҙ ум тура ында – **М.Х.**) үҙәгенә әүерелдереү хаҡындағы фекерен дауам итеп, В. Путин февралдә ошо идеяны ғәмәлгә ашырыу буйынса компетентлы вазифаларға биш йыл ваҡыт бирҙе. Алдан күҙаллау буйынса, Рәсәй ысынлап та элекке СССР республикалары ара ында (Балтик буйы дәүләттәрен иҫәпкә алмайынса – **М.Х.**) бындай ролде үтәй алырына шик тыуҙырырлыҡ дәлилдәр юҡ кеүек. Ҡаҙағстан, Белоруссия, Ҡырғыҙстан, Тажикстан .б. кеүек дәүләттәр Рәсәй менән тығыҙ иҡтисади бәйләнештә. Быға хатта Иран менән Монголияның дә ҡушылыуы ихтимал.

Ҡаҙна килемдәрен арттырыу йә әтенән әлегә файҙаланылмаған ике сығанаҡ бар: физик шәхестәр килеменә прогрессив әм күсмәҫ милеккә алым индереү. Был ғәмәл демократия ереккән илдәр конституцияларында нығытылған. Эш хаҡын йөҙәр меңләп алғандар, билдәле, алымды ла күберәк түләргә бурыслы. Был – демократик дәүләт ҡануны. Үкенескә ҡаршы, Рәсәйҙә аман 90-сы йылдарҙа индерелгән 13 процент алым ғәмәле йәшәп килә. Ә инде ҙур ҡалаларҙа ғына түгел, ҡасабаларҙа ла ҡуҡырайып ултырған бер нисә ҡатлы йорттар хужаларынан милек алымы алмау бөтөнләй аңлашылмай. Ошо ике ғәмәлде индергәндә, ил ҡаҙна ы Рәсәй Конституция ында нығытылған, Рәсәй – социаль дәүләт, тигән ығымтаның буш үҙ түгеллегенә ышандыра алыр ине.

Кризис тура ында өйләгәндә юғары дәрәжәле чиновниктарҙың халыҡ алдында яуаплылыҡ тоймауын да әйтеп үтергә кәрәк. Улар ара ында ныҡ таралған үҙаллы ҡарар ҡабул итеүҙән ҡурҡыу, юғарыраҡ вазифа артына ышыҡланып эшләү ҙә ниндәйҙер дәрәжәлә ҡотолғо оҙ кризис билдәләрен күрмәүгә сәбәп булды.

Марксизм-ленинизм тәғлимәтен нигеҙләүселәр даими ҡабатланып торған кризис – капиталистик йәмғиәттең төп сифаттарының бере е икәнлеген күптән яҙып ҡалдырған. Уның сәбәбе – баҙар мөнәсәбәттәрендә, сөнки баҙар шарттарында төп этәргес көс булып ихтыяж әм тәҡдим тора. Был стихиялы көс бер яҡтан, шул иҫәптән хөкүмәттәр тарафынан да, көйләнмәй, көйләнә лә алмай, сөнки баҙар мөнәсәбәттәре өсөн иң мө име – алыш-биреш итеү азатлығы. Социализм быға үҙенсә сик ҡуйырға маташып, яңы дәүләт институты – планлаштырыуҙы индергәйне. Был алым артығын етештереүгә юл ҡуймай, әммә, төрлө сәбәптәр арҡа ында, ҡытлыҡтан арына алманы. Ә бына уның өҫтөнлөктәрен Икенсе донъя уғышынан уң япондар оҫта файҙаланды әм әле лә шуның игелеген күрә.

Яман эштәрҙә яманлыҡ ла юҡ түгел, тигән кеүек, кризис илдең сәләмәтләнеүенә килтерәсәк, тигән фекерҙәр ҙә ишетелә. Иң элек белгестәр сит илдәрҙән индерелгән тауарҙар, шул иҫәптән аҙыҡ-түлек, ҡырҡа кәмеп, уларҙы илдә етештереү артасағын күҙаллай. Алып атарҙарға ла – ә улар торлаҡ төҙөлөшө, сауҙа .б. тармаҡтарҙа хәтәр ныҡ үрсене – көн бөтәсәк, имеш. Ғөмүмән, кешеләр үҙ сығымдары иҫәбенә йәшәргә күнегәсәк. Ә "яңы байҙар", имеш, үлеп бөтәсәк. Хәйер, ундай өлгө күр әтеүселәр бар. Донъяның артына тибеп, үҙен бер ниҙә лә сикләмәй йәшәргә күнеккәндәр иҫәпләп тотоноуҙы үҙ енмәй.

Рәсәй Президенты йәмәғәтселекте кризис йә әтенән шау-шыу күтәрмәҫкә саҡырып, бының өсөн бер ниндәй ҙә сәбәптәр юҡ, илдә 1998 йылғы дефолт ҡөтөлмәй, Рәсәй үҙенең бурыстарын үтәрлек хәлдә, тип белдерҙе. Эш хаҡы, халыҡтың килеме кәмемәйәсәк, пенсиялар, кире енсә, артасаҡ. Был иң мө име, тине Д. Медведев.

**Ваҡытлы матбуғат мәғлүмәттәрен**
**файҙаланып, Мәхмүт ХУЖИН әҙерләне.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd  13.04.2009  23:29  Page 180





**Марат**
**КӘРИМОВ**

# ҠЫҘЫЛ КАЛЕЙДОСКОП

*Тәбиғәттә әллә күпме  төç бар. Уларҙың бөтә е лә үҙенсә матур. Ә бит ҡасан ғына әле беҙҙең йәмғиәт өсөн бер генә төç бар ине —  ул ҡыҙыл төç. Байрағыбыҙ ҙа ҡыҙыл, үҙебеҙ ҙә ҡыҙыл. Был ғына етмәгән, бар донъяны ҡыҙыл итергә тырыштыҡ.*

*Әле хәтерем калейдоскобын әйләндереп ултырғанда, уның быяла ватыҡтарында шул замандар сағылып ҡалды. Ә ниңә әле ул күренештәрҙе хәҙерге быуынға ла күр әтмәçкә? Сатира алымы менән күпертеп, әлбиттә. Әммә уларҙың нигеҙендә барыбер ысынбарлыҡ ята.*

*Шулай итеп, уҡыусылар иғтибарына — калейдоскоптағы сағылыштарҙың өсәү е.*

## Беренсе сағылыш

Гәзит редакция ына ҡыйыр-ҡыймаç ҡына йәш автор керҙе.

– Шиғыр алып килгән булдыңмы?– тип ҡаршыланы уны редактор.

– Минең шиғыр килтергәнемде ҡайҙан белдегеҙ?– тип ғәжәпләнде йәш автор.

– Нисек белмәçкә. Беҙгә шиғыр яҙыусыларҙан башҡа бер кем дә йөрөмәй,– тип был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерҙе редактор.– Йә, яҙмаңды уҡып ебәр.

Йәш автор кеçә енән ҡағыҙ сығарҙы ла дәртләнеп уҡый башланы:

*Зәңгәр күктә аҡ болоттар йөҙә...*

– Стоп!– тип шунда уҡ уны бүлдерҙе редактор.– Беҙҙең совет система ында ҡыҙыл байраҡтан башлап бөтә нәмә ҡыҙыл, йәғни революцион төçтә булырға тейеш. “Аҡ” тигән  үҙ барлығын онот, уны “ҡыҙыл”ға алыштырырға кәрәк булыр. Күк тә зәңгәр түгел, ә ҡыҙыл булырға тейеш... Ә зәңгәр тип әйтеү икенсе төрлө ассоциация тыуҙыра. Быуыны ҡатмаған йәш быуынды юлдан яҙҙырыуы бик ихтимал. Ары китәйек. “Йөҙә” үҙе лә шиғырға бармай. Ул батыуға ишара. Берәй буржуй, мәçәлән, йөҙә, ти. Ул йөҙә-йөҙә хәле бөтөп, мотлаҡ батырға тейеш. Ә беҙҙең совет кешеләрен капиталистар менән сағыштырырға ярамай. Беҙҙекеләр утта янмай,  ыуҙа батмай. Улар ғорур атлай. Тәбиғәт тә уларҙан үрнәк  алырға тейеш.

Автор шиғырын үҙгәртеп уҡыуға күсте:

*Ҡыҙыл күктә ҡыҙыл болоттар ғорур  атлай...*

– Стоп!

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 181



– Тағы ни булды?
– Уйлап еткерелмәгән. Күктә нисек атларға мөмкин? Ерҙә генә атлап була. Шуға күрә...
Әйтелеп бөтмәгән фекерҙе йәш автор шунда уҡ тотоп алды:

*Ҡыҙыл ерҙән ҡыҙыл болоттар ғорур атлай,*
*Ҡыҙыл ергә төшә аҡ ҡар бөртөгө...*

– Стоп! Ул ниндәй бөтмәгән “аҡ” тағы? Аҡты ҡыҙылға әйләндереү тура ында үҙ булды бит инде. Унан уң “төшә” үҙе лә урынлы түгел. Ул нимәне аңлата? Аҫҡа тәгәрәүҙе аңлата. Ә был – совет кешеләренә күрәләтә яла яғыу. Беҙҙең совет халҡы юғарынан-юғарыға күтәрелеүҙе маҡсат итеп ҡуя. әм шулай итә лә. Бөртөк тигән үҙең дә беҙҙең бәхетле әм яҡты ысынбарлығыбыҙға тура килмәй. Ул ярлылыҡты күр әтә. Ишеткәнең юҡмы ни, бер бөртөк тә иген үҫмәне, тип өйләй халыҡ. Ә юлбашсыбыҙ ана нимә ти: “Жить стало лучше, жить стало веселее”. Тимәк, беҙ яҡшы йәшәйбеҙ, тигән үҙ был. Беҙҙең илебеҙҙә бөтә нәмә мул. Муллыҡты анау берәмеге, минеңсә, вагон. Эйе, муллыҡтар вагон-вагон. Шулай булғас...
Йәш автор шиғырҙы йәнә үҙгәртте:

*Ҡыҙыл ерҙән ҡыҙыл болоттар ғорур атлай,*
*Ҡыҙыл ерҙән юғарыға күтәрелә вагон-вагон ҡыҙыл ҡарҙар...*

Редактор, ни айәт, шиғырҙан ҡәнәғәт ҡалды.
– Бына хәҙер был шиғырға “идеологик яҡтан невыдержанный” тип бәйләнеп ҡарa ындар!
Маҡтауҙан йәш авторҙың башы әйләнде.
– Ағай, уны ҡасан гәзиткә баҫа ығыҙ?
Яуап ҡыҫҡа булды:
– Ҡыҙыл ҡар яуғас, ҡусты. Ҡыҙыл ҡар яуғас...

## Икенсе сағылыш

Яҙ. Игенселәрҙе ҡыуандырып, көндәр ҙә сыуаҡ тора. Сөгөлдөр сәсергә бик уңайлы ваҡыт. Агроном баҫыуға алып барыу өсөн сөгөлдөр орлоҡтарын арбаға тейәтеп яҡкан-да, юғарынан уполномоченный килеп төштө. Ул арбалағы тоҡтарға ымлап:
– Сәсергә йыйына ығыҙмы?– тип ораны.
– Эйе, сәсергә.
– Бик әйбәт. Бына мине шул яҙғы сәсеү кампания ын уңышлы үткәрттереү өсөн, гәзит эшенән айырылып, еҙгә ебәрҙеләр. – Ул тоҡтарҙы ҡапшап ҡараны.– Нимә сәсә егеҙ?
– Сөгөлдөр. Аҡ сөгөлдөр.
Уполномоченный ҡурҡышынан тирә-яғына ҡарап алды:
– Тсс... Ишетеп ҡалма ындар! инең менән минең өҫтән донос яҙып ебәр әләр, нишләрбеҙ? Уйламаған-нитмәгән ерҙән “илле игеҙенсе” статьяны сәпәп, ултыртып ҡуйҙылар булыр.
– Ә уны ы ниндәй статья тағы?
Уполномоченный, был ниндәй аңғыра зат тигәндәй, агрономдың ҡолағына бышылданы:
– Ул, белгең кил ә, Уголовный кодекстың ин дә шәтле статья ы... инең менән мине халыҡ дошманы итә торған статья...
Агроном сөгөлдөр менән был дә шәтле статья ара ындағы бәйләнеште аман да төшөнмәй ине әле.
– Беҙҙең ул статьяға ниндәй ҡыҫылышыбыҙ бар?
Уполномоненный түҙем еҙләнеп мәсьәләнең асылын аңлатып бирҙе:
– Нисек бар әле! Аҡ сөгөлдөр сәстеләр, тиәсәктәр. Аңлай ыңмы? Аҡ! Аҡ!– Ул унғы үҙгә айырыуса ныҡ баҫым я аны.– Тимәк, ҡай берәүҙәргә “былар аҡтар заманын ағына икән” тигән ығымта я арға урын ҡала.
Быны ишетеп, агроном ҡойолдо ла төштө.
– Улай а, сәсмәйбеҙме ни?

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 182



– Сәсмәйенсә лә ярамай,– тине нимә эшләргә лә белмәгән уполномоченный.– Ул ваҡытта, яуыз ниәт менән сәсеү кампания ын өҙҙөләр, тип йәнә әлеге статьяны сәпәйәсәктәр.

Унын күҙ алдынан бер-бер артлы Колыма шахталарында күмер ҡаҙыуҙар, Себер тайгаларында урман ҡырҡыуҙар, конвой эттәренән таланыу күренештәре үтте. Маңлайына шыбыр тир бәреп сыҡты, күлдәге арҡа ына йәбеште.

Шул саҡ агрономдың ҡыйыу ыҙ ғына әйтелгән тәҡдиме ишетелде:

– Ә аҡ сөгөлдөр урынына... ҡыҙыл сөгөлдөр сәс әк?

Уполномоченныйҙың күҙенә күренгән әлеге иләм еҙ күренештәр минут эсендә юҡ булдылар.

– Ундай сөгөлдөр ҙә бармы ни?

– Бар, бар.

– Нишләп уны, теленде йотоп, баштан уҡ әйтмәнең?– Ул бөтөнләй йәнләнеп китте.– е. Ҡыҙыл тиген, ә? Был бит – беҙҙең система идеология ына тура килә торған тамыр аҙыҡ! Сәсергә кәрәк уны, непременнә сәсергә! Бөтә майҙандарҙы тултырып сәсергә! Унан көҙөн урожайҙы элеваторға ҡыҙыл ылауҙар менән оҙатырбыҙ. Бының өсөн беҙҙе республиканың ҡыҙыл таҡта ына индерәсәктәр. Ҡыҙыл вымпел бирәсәктәр. Күсмә ҡыҙыл байраҡ та тапшырыуҙары бик ихтимал.

Дәртле телмәрҙе агроном бүлдерҙе:

– Сәсер инек тә, беҙҙең хужалыҡта ул идейный тамыр аҙыҡтың орлоғо юҡ бит әле. Күрше колхоздан алып торма аҡ...

Уполномоченный үҙенең етәкселек форма ына тамам кереп бөткәйне инде:

– Нимә ҡатып ҡалдың? Бар тиҙерәк. ораш! Эҙлә! Тап!

Атҡа атланған агроном елтәргә тип күтәргән ҡамсы ын кире төшөрҙө:

– Э-э-э... беҙ редиска ла сәскәйнек бит әле, иптәш уполномоченный. Шытып та сыҡҡан.

– Уны ы нимә тағы?

– Унын ҡабығы ҡыҙыл, ә эсе аҡ. Нишләтергә бойора ығыҙ?

Уполномоченный уйға ҡалды. Йолҡоп ташлатыр инең, тышы ҡыҙыл булған өсөн йолоҡторҙо, ти әләр... Йолоҡторма аң, эсе аҡ булған өсөн үҫтерергә рөхсәт итте, тиәсәктәр... Тегеләй ит әң дә – әлеге статья, былай ит әң дә – әлеге статья. Нишләргә? Хоҙайҙың хикмәте, көтмәгәндә унын зи ене эшкә егелеп, иң кәрәкле ҡарарҙы теленә күсерҙе:

– Ярар, ҡалдырығыҙ. Тик әрсеп, ҡабығын ғына ашар ығыҙ. Ә эсен кәзәләргә ташларға тура киләсәк. Бәлә енән баш-аяҡ...

## Өсөнсө сағылыш

Гәзит редакторына уға тәғәйенләнгән колхозда яҙғы сәсеү кампания ын юғары кимәлдә үткәргәне өсөн юғары ойошмала рәхмәт белдерҙеләр ҙә көҙгө урып-йыйыу кампания ын тағы ла юғарыраҡ кимәлдә үткәрергә йәнә шул колхозға ебәрҙеләр.

Юғары вәкәләтле уполномоченный эште ферманы ҡарауҙан башланы. (Яҙын унда барырға форсаты сыҡмағайны.) Фермала, эйе, ыйырҙарҙың төрлө төҫтә булыуы ла уға оҡшаманы.

– Ҡыҙыл ыйырҙарҙы ғына ҡалдырығыҙ, ҡалғандарын иткә тапшырығыҙ,– тигән күр әтмә бирҙе ул.– Оппортунистик ала ыйырҙарҙы ла йәлләмәгеҙ, уларға ышаныс юҡ.

Уполномоченныйҙы оҙатып йөрөгән парторг шунда уҡ унын менән килешеүен белдерҙе:

– Дөрөҫ. Ул идея миндә күптән йөрөй ине.

өйләшеү идарала дауам итте.

– Колхозығыҙҙың исеме оҡшамай. Яҙғы кампанияла ла уға иғтибар иткәйнем: “Аҡ шишмә”... Кем тәҡдиме менән ҡуштығыҙ уны?

Парторг хәтерләп башын ҡашыны:

– Йыйылышта уны Аҡмал тигән ағай тәҡдим иткәйне шикелле. Әйткәндәй, бына үҙе лә килеп инде.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 183



Ишектә скотник Аҡмал, быларҙың үҙен бүлмәйем тип, тапанып тора ине, уполномоченный уға тексәйҙе:

– Колхозды “Аҡ шишмә” тип атарға ин тәҡдим индерҙеңме?

– Мин. Ауыл осонда бына тигән саф ыулы шишмәбеҙ бар. Ауыл халҡы уны Аҡ шишмә тип йөрөтә. Шуға әйттем инде.

– Бөгөндән ундай шишмә юҡ. Танауыңа киртеп ҡуй. Ул Ҡыҙыл шишмә тип йөрөтөлөргә тейеш.

Парторг был тәҡдимде лә хупланы:-

– Дөрөҫ! Миндә лә шундай идея бар ине.

– Колхозығыҙ ҙа бынан уң “Ҡыҙыл шишмә” тип аталасаҡ. Йыйылыш ҡарарын үҙгәртеп яҙырға тура килер.

– Миндә лә ошо идея...

Уполномоченныйҙың иғтибары йәнә скотникка күсте:

– Исемеңде Аҡмал тинеңме әле?

Аҡмал ауыҙын асып өлгөрмәне, парторг уны маҡтап алды:

– Беҙҙең алдынғы мал ҡараусы ул. Тапшырған эште әр саҡ еренә еткереп үтәй. Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтергәне юҡ.

Уполномоченный парторгка шелтәле ҡараны:

– Нисек инде “ҡыҙыллыҡ килтермәй”? Улай тип маҡтарға ашыҡма әле. Ҡыҙыл төҫтө анға уҡмау була бит был. Кире енсә, “ҡыҙыллыҡ килтерә” тип маҡтарға кәрәк.

– Эйе, эйе, тапшырған эште еренә еткереп үтәй, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерә.– Парторг тиҙ генә үҙ үҙенә төҙәтмә индерҙе.

Уполномоченный фекерләүен дауам итте:

– ем... Исеме Аҡмал икән. Аҡ... Мал... Беҙҙең илдә аҡтарҙың малы юҡ. Бөтә мал да ҡыҙылдарҙыҡы. Был контрреволюцион исемен бөгөндән Ҡыҙылмал тип алыштырын. Революцияға ҡаршы агитация таратып йөрөмә ен.– Ул Аҡмалға ишара я аны.– Бар, силсәүиткә барып, алыштырып кил!

Аҡмал сығып китергә ашыҡманы.

– Йомошом бар ине бит әле.

– Ниндәй йомош?

– Малайымды өйләндерергә ине.

Парторг менән упономоченныйҙың күҙҙәренә йылылыҡ бөркөлдө:

– Бик әйбәт! Ҡаршылығыбыҙ юҡ. Коммунистик идеялар менән уғарылған яңы совет семья ы барлыҡҡа килеүен беҙ хуплайбыҙ ғына. Туйҙы нисек үткәрергә уйлай ың?

– Ата-баба йола ы буйынса инде...

– Ярамай. Боронғо йолаларҙы оноторға ваҡыт. Совет власы яңы йолалар уйлап сығарҙы. Туйҙарҙы ла хәҙер яңыса уҙғаралар. “Ҡыҙыл туй” тигәнде ишеткәнең бармы?

– Ишеткән нәмәм түгел шул. Уны нисек уҙғаралар?

Ҡыҙыл туй тип өйлә ә лә, уполномоченныйҙың был өлкәлә мәғлүмәте юҡ ине, буғай, ул парторгка ҡараны:

– Өйрәтеп бир шуға.

Парторгтың да белгән нәмә е түгел ине “ҡыҙыл туй”, шуға уполномоченный алдында белмәгәнен белдермәҫкә теләп, үҙенсә упалаштырҙы:

– Нисек тип... э-э... Иң беренсе, йәштәр ҡунаҡтар алдына ҡыҙыл галстук тағып сыҡ ындар. Унан мәжлестә мотлаҡ ҡыҙылды ғына эсергә кәрәк. Күп түгел түлке. Уны ҡыҙыл эремсек менән закусывать итәләр. Унан э-э... ҡыҙыл ҡатыҡ ашайҙар. Ҡатыҡ ҡыҙыл бул ын өсөн уға ойотор алдынан ҡыҙыл сөгөлдөр телеме алалар. Ә өҫтәлгә ҡыҙыл ашъяулыҡ йәйәләр.– Парторгтың фантазия ы шунан ары китә алманы. Шуға үҙен икенсе яҡҡа борҙо.– Малайыңдың исеме Вил бит әле?

– Эйе. Владимир Ильич Лениндың беренсе хәрефтәренән алып ҡушҡайным.

Был үҙҙәрҙе ишеткәс, уполномоченный Аҡмалдың арҡа ынан өйҙө.

– Бик әйбәт! Идейный исем. Был беҙҙең сәйәсәткә бик тура килә. Тем более үҙеңдең контрреволюцион исемеңде немедленно алыштырырға кәрәк.

– Уны ын ғына булдырырбыҙ ҙа ул, тик бына туй үткәрергә он кәрәк ине бит әле. Шуны бер-ике кило яҙҙырып алып булмаҫмы тип председателгә килгәйнем дә, уры-

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 184



нында юҡ икән,– Аҡмал, ни айәт, үтенесен әйтергә мөмкинселек тапты.

Парторг, был ҡыҙыл туй үткәреү мәсьәлә е шулай еңел генә үтеп киткәнгә шатланып:

– Ярар, борсолма, председателгә үҙем әйтермен,– тип ярҙам итергә әҙерлеген белдерҙе.

Аҡмал рәхмәт әйтеп сығып барғанда, уполномоченный уны туҡтатты, орауы ҡалған икән:

– Ә буласаҡ килененеңдең исеме кем уң?

– Люция. Ата-әсә е революция үҙенән алып ҡушҡандар.

– Революцияның башы юҡ икән,– тип үкенес белдерҙе уполномоченный. – Төшөп ҡалған.

– Нисауа,– тине парторг.– Ҡатын-ҡыҙға баш әллә ни кәрәк тә түгел, уйлап ҡарағанда. Ҡалғаны ла еткән. Бына, мәҫәлән, минең ҡатын... – Нимәлер өйләй башлағайны ла, ғаилә серҙәрен асыуын иҙеп, телен тешләне.

Шулай итеп, Аҡмал малайына ҡыҙыл туй үткәрҙе. Кейәү егете менән кәләш ҡунаҡтар янына галстук тағып сыҡты, ҡыҙыл шарап эсте, ҡыҙыл эремсек менән ҡыҙыл ҡатыҡ ашаны. Бөтә е лә парторг әйткәнсә эшләнде. Тик өҫтәлгә йәйгән ашъяулыҡ ҡына йәшел ине. Ауыл буйлап йөрөп эҙләп ҡара алар ҙа, таба алманылар шул ҡыҙылын.

... Бөтә бәлә ана шул йәшел ашъяулыҡтан сыҡты.

Ҡыйыш атлаған әр аҙымды күҙәтеп барыу әм уны тейешле органдарға еткереп тороу бурысы йөкмәтелгән йәшерен агенттар юҡ ти еңме ни ауылда! Әлеге йәшел ашъяулыҡ уларҙың иғтибарынан ситтә ҡалманы. Икенсе көндө үк юғарыға сабата киндерә е оҙонлоғо сигнал осто. Уның ҡыҫҡаса йөкмәтке е былай: “Ауылыбыҙҙа Аҡмал тигән кеше Рәсәйҙе тарҡатып, унда йәшәгән мосолмандарҙан айырым дәүләт төҙөү тура ында хыяллана. андығында ислам диненең йәшел байрағын йәшереп аҡлай. Был уның панисламистар платформа ында тороуын раҫлаусы дәлил булып тора. Шул байрағын ул демонстратив рәүештә улының туйында килтереп сығарҙы. Был факт, ни айәт, уның ысын йөҙөн күр әтте – битлеге асылды. Был аҙымға барырға уның үҙенең генә ҡыйыулығы етмәҫ ине, уны рухландырыусы көстәр бар. Ул көстәр – колхоздың парторгы менән өлкәнән килгән уполномоченный. Туй алдынан улар өсәүләп идарала йәшерен кәңәшмә лә үткәрҙеләр. Унда ниндәй план ҡороуҙары билдәле: нисек тә Рәсәйҙе тиҙерәк тарҡатып, ислам дәүләте төҙөү. Уларҙың мәкерле пландары бының менән генә сикләнмәй, өйөклө юлбашсыбыҙҙың ғүмерен өҙөргә уйлайҙар улар. Беҙҙең арала халыҡ дошмандарына урын булма ын!”

Аҡмал исемен алыштырырға өлгөрә алмай ҡалды. Шул төндө үк наганлы кешеләр килеп, уның өйөндә тентеү үткәрҙеләр әм иҫке андыҡтан әлеге йәшел ашъяулыҡты ҡармап сығарҙылар:

– Бына ул панисламистар байрағы!

Шунда уҡ хужаның ҡулына бығау кейҙерҙеләр ҙә парторг менән уполномоченныйҙы ҡулға алырға киттеләр.

... Ғәҙел суд көтөп аҡ аҫтында ятҡан уполномоченный ҡулға алыныуына әллә ни борсолмай ине. Судта уның ғәйеп еҙ икәнлеге ис шик еҙ асыҡланыр. Был ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡ ҡына. Уны көҙгө урып-йыйыу кампания ын ахырғаса үткәрә алмауы нығыраҡ борсой. Был юлы ул рәхмәт кенә түгел, орден алырмын тип өмөт итә ине. Ә парторг и ә бисә е тура ында уйлана. Ире юҡтан файҙаланып, әхлаҡ рамкаларына ыймаған берәй төрлө ярамаған эш эшләмәҫ тимә. Ул баш ыҙҙан булыр... Тотҡондарҙың ике е лә ҡыҙыл ҡапҡанға бер килеп эләккәс, унан ысҡынып булмаясағын баштарына ла килтермәйҙәр ине. Ул ҡапҡанға бары ы ла бер: үтә ҡыҙылмы ин, аҡмы, йәшелме. Ҡарап тормай.

Аҡмал и ә яңы өйләнешкән йәштәргә бәхет теләй ине...

**Өфө, 2008 йыл.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 185



# НЕФТТЕ КАМАЛАЙ АҒЫҘҘЫ

1955 йылдың декабрендә Краснокама районының Арлан ауылынан алыҫ түгел урында мастер Шәрифйән Сәхәпов бригада ы быраулаған 3-сө скважинанан нефть бәреп сыға. Рәсәйҙә иң ҙур Волга-Урал нефть-газ төбәгендә күләме буйынса икенсе бай нефть ятҡылығы асылып, яңы яғыулыҡ районын үҙләштереү башлана. 1958 йылдың йәйенә Күтәрем-Өфө магистраль нефть үткәргесе төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырыла. Ә июлдә Арлан нефте Өфө нефть эшкәртеү заводына ҡыуыла.

әр ҡаланың – үҙ тарихы. Былтыр 45 йәшен тултырған Нефтекаманың донъя карта ында барлыҡҡа килеүенә үрҙә бәйән ителгән ваҡиғалар сәбәп була. Был тарафтарға нефтселәр артынан төҙөүселәр ҙә килә, әм ике йылда киң яланда ҙур эшселәр ҡасаба ы ҡалҡып сыға. Кисә генә палаткалар ултырған ерҙә бараклар, берике ҡатлы өйҙәр барлыҡҡа килә. 1963 йылдың февралендә БАССР Юғары Советы Президиумының ҡарары менән Нефтекама эшселәр ҡасаба ы республика буй оноуындағы ҡала итеп үҙгәртелә. Ул төҙөлә, үҫә, ҙур сәнәғәт предприятиелары менән бергә мәктәп, дауахана, мәҙәниәт учреждениелары биналары алына.

Мул ыулы Кама йылға ынан йыраҡ түгел урынлашҡан Нефтекама – Башҡортостандың Өфөнән 250 саҡрымда ятҡан төньяҡ-көнбайыш төбәгенең ҙур сәнәғәт, мәҙәниәт әм мәғариф үҙәге. Бөгөн был ҡалала 128 мең кеше йәшәй. Ныҡ үҫешкән автомобиль юлдары селтәре уны Өфө, Бөрө, Яңауыл, Ағиҙел, Октябрьский, Ижевск, Пермь, Ҡазан, ә йылға транспорты и ә тағы ла Сарапул, Чайковский, Воткинск, Яр Саллы ҡалалары менән бәйләй.

Нефтекамала сәнәғәт әм торлаҡ зоналары айырым булып, уларҙы автомобиль юлы, ағаслыҡтар бүлә. Нефтселәр ҡала ы – республикала иң таҙа, йәшеллеккә күмелгән ҡалаларҙың бере е. 2006 йылда "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡалалары" конкурсында ҡатнашып, ул ҡала мөхитенә инвестицияларҙы әүҙем йәлеп итеү буйынса махсус бүләк яуланы. Башҡортостан Республика ы Президенты әм Хөкүмәте ярҙамында ҡала иҡтисадын артабан үҫтереү, инвесторҙар йәлеп итеү өсөн ыңғай шарттар тыуҙырыла. "НефАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә төп капиталға ҙур инвестициялар йәлеп итеү әүҙем бара. "Я алма күн етештереү берекмә е"ндә лә уңғы йылдарҙа етештереү ҡорамалдарын яңыртыуға байтаҡ сығымдар бүленде. Берекмәнең эштән бушаған майҙандарында "Туҡылмаған материалдар заводы" урынлашты. Проекттың инвестиция сығымдары 1,6 миллиард ум тәшкил итеп, уны ғәмәлгә ашырыу инвесторҙар сығымдарына булыр, тип күҙаллана. Яҡын йылдарҙа был завод Рәсәйҙә "спанбонд" технология ы буйынса туҡылмаған материалдар етештереүсе иң ҙур предприятиеға әүерелмәксе.

"НефАЗ" – КамАЗ шассиҙарына махсус өҫҡорма етештереү буйынса Рәсәйҙә иң ҙур предприятие. Унын төп конвейеры 1977 йылда эшкә ҡушылып, 1993 йылда завод асыҡ акционерҙар йәмғиәте булып китте. "НефАЗ"да быға тиклем йылына 10 миллиард умлыҡ продукция эшләп сығарылды. Илдең башҡа предприятиелары кеүек үк, автомобилдәр заводының да иҡтисади ҡыйынлыҡтар кисергән дәүере 90-сы йылдарға ҡайтып ҡала. 1998 йылда бында ни бары

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 186



200 миллион умлыҡ тауар етештерелеп, заводтың бурысы 450 миллион умға барып етте. Уны күрсөктән сығарыу өсөн иң яҡшы матди етештереү әм финанс белгестәрен йәлеп итеп, 10 йылға үҫеш планы эшләнә. Пассажирҙар автобусы сығарыу предприятиеның төп проектына әүерелә. уңғы игеҙ йылда бында етештереү күләме 40 тапҡырға артып, “НефАЗ”да хәҙер 11 мең кеше эшләй. Рәсәйҙә етештерелгән 80-дән алып 35 кубометрға тиклем ыйҙырышлы яғыулыҡ ташығыстарҙың ярты ы Нефтекама автомобилдәр заводында йыйыла. Рәсәйҙең әр өсөнсө автобусы ошо конвейерҙан сыға. Пассажирҙар транспорты етештереүҙең күп кенә алдынғы технологиялары илдә тәүгеләрҙән булып Нефтекамала индерелде. “НефАЗ” маркалы 5 мең ярым автобус, Рәсәйҙән тыш, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Украинала әм Яҡын Көнсығыш илдәрендә юлаусылар хеҙмәтләндерә. Туристарға тәғәйенләнгән әм аҙ кеше ыйҙырышлы автобустар Мәскәүҙә халыҡ-ара автосалонда үҙенең класында иң яҡшы ы тип табыла. 2007 йылдан алып предприятиела Европаның VDL корпорация ы менән берлектә уның шассиҙарында автобустар етештереү проекты ғәмәлгә ашырыла. VDL-НефАЗ-52997 ҡала автобусы 2007 йылда “Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары программа ы” лауреаты исеменә лайыҡ булды. VDL корпорация ы вице-президенты Маринус Фермелендың фекеренсә, уларҙың “НефАЗ” йәмғиәте менән берлектә эшләүенең сәбәбе шунда: унда етештереү культура ы, менеджмент яҡшы, продукцияның сифаты ла тел тейҙерерлек түгел.

Нефть промыслалары ҡорамалдары заводы Башҡортостандың ҙур әм тотороҡло эшләгән предприятиеларынан анала. “Башнефть” компания ы ерлегендә барлыҡҡа килгән был заводҡа нигеҙ 1975 йылда алынып, уға нефть промыслаларын әм быраулау ҡорамалдарын йүнәтеүҙе, прокатлауҙы үҙләштереү йөкмәтелә. Предприятие тиҙ арала “аяҡҡа баҫа”, партнерҙар әм ҡулланыусылар ара ында абруй яулай, заманса алдынғы технологиялар индереп, яңы етештереү урындары асып, башҡарылған эштәр сифатын камиллаштырып, хеҙмәтләндереү тармаҡтарын киңәйтә башланы. Юғары күр әткестәре өсөн коллектив “Башнефть” компания ы тарафынан бер нисә тапҡыр бүләкләнде, Бөтә Союз Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмә е миҙалдарын яуланы, Нефть сәнәғәте министрлығы әм Тармаҡ профсоюздары үҙәк комитетының Маҡтау грамоталарына, “Юғары мәҙәниәтле етештереү предприятие ы” тигән абруйлы исемгә лайыҡ булды. Завод коллективы Башҡортостан нефтселәре менән генә түгел, ә “Белкамнефть”, “Преображенскнефть”, “Лукойл-Пермь” йәмғиәттәре әм “Южуралнефть” предприятие ы менән дә хеҙмәттәшлек итә. 2006 йыл аҙағында бында заманса автоматлаштырылған күтәреү ҡоролма ы файҙаланыуға тапшырылды. Ул тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәүе менән ә әмиәтле.

АҠШ-тың “Butler-tech” компания ы менән эшлекле бәйләнештәр урынлаштырыу ҙа — предприятие өсөн ыңғай күренеш. Сит илдәрҙәге коллегаларының, завод белгестәренең берлектәге уйлап табыуҙары нефть торбаларының эсен әм тышын тутығыуҙан аҡлау буйынса яңы технологиялар индерергә, яңы етештереү ҡеүәттәре асырға мөмкинлек бирҙе. 2007 йылда предприятиела полимер торбаларҙы файҙаланыу ваҡытын бер ярым-ике йылға арттырырға мөмкинлек биреүсе технология үҙләштерелде.

“Нефтекама машиналар эшләү заводы” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт тә 2002 йылдан эшләп килә. Уның төп йүнәлештәренең бере е — нефть әм газ скважиналарында продуктлы ҡатламдарҙы асыу өсөн тәғәйенләнгән перфораторҙар әҙерләп етештереү. Бер тапҡыр ғына ҡулланылыусы был перфораторҙар АҠШ нефть институты стандартына ярашлы ынауҙы уңышлы үтте, тейешле сертификат алды, ә ынау өҙөмтәләре APL интернет-сайтында донъя күрҙе. “КЛИН” сериялы перфораторҙар иң ышаныслылары тип табылды әм шартлатыу өсөн тәғәйенләнгән ҡорамалдар ил баҙарында алдынғы урындарҙы тота. Предприятие юғары технологик станоктар атып алыу, булған ҡорамалдарҙы яңыртыуға байтаҡ сығымдар тотона. уңғы йылда ғына перфораторҙар корпустарын әҙерләү өсөн

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 187



анлы программа буйынса идара ителгән ҡорамалдар алынған. Германияның “Тубематик” фирма ынан торбаларҙы лазер ярҙамында эшкәртеүсе станоктар ҡайтарып ҡуйыу ҙа сифатты яҡшыртыуға булышлыҡ итә.

“Интеграл” асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә нигеҙ Рәсәйҙә эшҡыуарлыҡ аяҡҡа баҫып килгән 90-сы йылдарҙа алына. Ошо йылдар эсендә ул бәләкәй предприятиенан күп тармаҡлы холдингка әүерелеп, бөгөн уның ҡарамағында 14 үҙаллы предприятие иҫәпләнә. Бөтә е лә компьютерҙар менән атыу итеүҙән башланды. Йәмғиәттең генераль директоры Әлфәт Нәжмиев иҫкә алыуынса, Ленин урамындағы бер йортта биш энтузиастан башланған коллективта бөгөн 3 меңдән күберәк кеше эшләй. Холдингтың филиалдары Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Яңауыл, Ағиҙел ҡалаларында ла бар. Инвестициялар менән ярҙам итеп, “Интеграл” ҡалалағы бер нисә предприятиеға үҙен аҡлап ҡалырға ярҙам итте. Улар ара ында Нефтекаманың икмәк комбинаты, өт, тимер-бетон әйберҙәр заводтары бар.

Ҡала хакимиәте, тармаҡ министрлыҡтары тарафынан бирелгән дипломдар, Маҡтау грамоталары – уларҙың уңышлы эшмәкәрлегенә оло ба а. Холдингтың 14 предприятие ының туғыҙы ҡала үҫешенә үҙенең тос өлөшөн индерә. “Интеграл” яуаплылығы сикләнгән ширҡәт төҙөлөш тармағында 2002 йылдан билдәле. Был арала төҙөүселәр яңы күп фатирлы йорттар, социаль-мәҙәни, сәнәғәт объекттарын файҙаланыуға тапшырҙы. Коллектив емерелергә торған ҡала кинотеатры бина ы урынында дөйөм майҙаны 4,6 мең квадрат метрлы “Маяҡ” сауҙа-мәҙәни үҙәген төҙөп бирҙе. “Интегралжилстрой” төҙөлөш эштәре күләмен йылдан-йыл арттыра барып, Нефтекаманан тыш, Ағиҙел, Яңауыл ҡалаларында, Үрге Йәркәй ауылында ла заказдар үтәй.

Ҡасандыр зыян күреп эшләгән тимер-бетон әйберҙәр заводы хәҙер 300-ҙән ашыу төрҙәге продукция етештереп, уларҙы Башҡортостандан ситтә: Удмуртияла, Татарстанда, Ямал-Ненец әм Ханты-Манси автономиялы округтарында, Пермь крайында, Төмән өлкә ендә лә теләп атып алалар. 2006 йыл йомғаҡтары буйынса иң яҡшы төҙөлөш сәнәғәте предприятие ы исеменә II Бөтә Рәсәй конкурсында коллектив өсөнсө урын яуланы. Икмәк комбинаты ҡалала иң иҫке предприятиеларҙың бере е булып, 1959 йылдан бирле халыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерә. Уның, икмәк, булка-керәндил әм шәрбәтле ашамлыҡтар бешереү цехынан тыш, “Хлебосольный” сауҙа селтәре әм йөҙ урынлыҡ кафе ы ла бар. Комбинатта 200 исемле ризыҡ етештерелеп, шуларҙың 18-е Рәсәйҙең иң яҡшы аҙыҡ-түлеге исемлегендә көмөш, бронза миҙалдарға лайыҡ булды, 33-ө республиканың сифат конкурстарында еңде, 10-ы “Башҡортостандың иң яҡшы 100 тауары”, туғыҙы “Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары” конкурстары лауреаттары әм дипломанттары исемен яуланы.

Атап үтелгәндәрҙән тыш, “Интеграл” ширҡәтенең автомобиль яғыулығы ҡойоу станциялары, дарыуханалар селтәре, проектлау предприятие ы, сервис ойошмалары, сауҙа бүлеге әм үҙ гәзите лә бар. Ширҡәт шулай уҡ халыҡҡа социаль ярҙам күр әтеү менән дә шөғөлләнә, спорт саралары, абантуйҙар уҙғара.

“Я алма күн” асыҡ акционерҙар йәмғиәте – Рәсәйҙә иң ҙур предприятиелар иҫәбендә. 1970 йылда нигеҙ алынған фабрика күп йылдар автомобиль, трактор сәнәғәте, авиация, ауыл хужалығы өсөн машиналар, мебель эшләү, аяҡ кейемдәре предприятиелары, күн-галантерея, тегеү, трикотаж фабрикалары өсөн я алма күн тышлыҡтар әм көпләүсе материалдар – бөтә е бер мең төрлө продукция етештерә. Йәмғиәт бик күп дипломдарға, бүләктәргә, шулай уҡ продукция сифаты өсөн халыҡ-ара призға лайыҡ булды. Ул атып алыусыларға юғары сифатлы, күп төрлө продукция тәҡдим итеүгә тулы гарантия бирә, сөнки әр тауар төрөнөң сифат паспорты, гигиена сертификаты бар. Предприятиеның Нефтекама иҡтисадына, Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫешенә өлөшө ярай ы тос. 2005 йылда йәмғиәт БР Сауҙа-сәнәғәт палата ы ойоштортан сараларҙа әүҙем ҡатнашҡан өсөн диплом менән бүләкләнде.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 188



Ҡала урамдарының матурлығы, таҙалығы — хәҙерге тормоштоң мө им сифаттарының бере е. Был үҙ ҡалаңа, иленә өйөү тойғо о тәрбиәләй. "Төҙөкләндереү" яуаплылығы сикләнгән ширҡәткә йөкмәтелгән был бурыс. Юлдар, тротуарҙарҙы йүнәтеүгә ширҡәт тиҫтәләрсә миллион ум тотона. әр етди предприятие коллективы традицияларға, ветерендар тәжрибә енә таяна. Ҡай ы бер юл эшселәре, йәшелләндереүселәр, асфальт ҡайнатыусылар, шоферҙар .б. бында тиҫтәләрсә йыл эшләй. Нәзифә Солтанова, Флорид Хажиуллин, Зө рә Ғәлиева, Соня Әдиева, Кәрим Ғәлиәхмәтов, Рузилә Сәфиуллина әм Вәзих Лоҡманов — шундайҙарҙан. Бөгөн ширҡәткә йәштәр ҙә килә, был уның үҫеше, абруйы тура ында өйләй.

2007 йылда 40 йыллығын билдәләгән "Нефтекамскводоканал" предприятие ы йылъяҙма ы ҡала тарихы менән туранан-тура бәйле. Ул 1962 йылда "Арланнефть" нефть әм газ сығарыу идаралығының торлаҡ-коммуналь участка ы составында ойошторолоп, биш йылдан уң ыу үткәргес-канализация хужалығы етештереү идаралығы булып китә. Бөгөн предприятие Нефтекама, Ағиҙел ҡалалары, Әмзә, Ташкин, Николо-Березовка, Ивановка, Иҫке әм Яңы Уразай, шулай уҡ Краснокама районының башҡа ауылдары халҡын ыу менән тәьмин итеү, ыу йүнәлдереү буйынса хеҙмәттәр күр әтә. Әлбиттә, халыҡты эсәр ыу менән тәьмин итеү — предприятиеның беренсе сираттағы бурысы.

Алдынғы технологиялар, материалдар файҙаланыу иҫәбенә предприятие торба үткәргестәрҙең ышаныслылығын, файҙаланыу ваҡытын оҙайтыу буйынса яҡшы өҙөмтәләргә өлгәшә. уңғы йылдарҙа бында полиэтилен торбаларҙан 20 саҡрымға яҡын ыу селтәре алынды, иҫкергән торбалар алмаштырылды. Кама йылға ына ағыҙылған ыуҙың сифатын яҡшыртыу ҙа әүҙем бара. Предприятиела хеҙмәтте аҡлау, хәүеф еҙлек техника ы, социаль ихтыяждарҙы хәстәрләү мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бирелә. Эшселәр өсөн көнкүреш бина ы бар, медицина пункты эшләй. Хеҙмәткәрҙәр өсөн шифаханаларға, уларҙың мәктәпкәсә йәштәге балаларына балалар учреждениеларына, спорт- ауыҡтырыу лагерҙарына юлламалар бирелә. 1986 йылда ҡала Советы башҡарма комитетында капиталь төҙөлөш бүлегенән башланып киткән "Нефтекамскстройзаказчик" муниципаль унитар предприятие ы — төҙөлөш тармағында алдынғыларҙың бере е. Ул заказсы-төҙөүсе вазифа ын ғына алып бармай, бәлки, объекттар төҙөү, үҙгәртеп ҡороу, йүнәтеүгә техник күҙәтеү ҙә ойоштора, генераль подрядсы ролен үтәй әм үҙ көсө менән дөйөм төҙөлөш, биҙәкләү, сантехника, электр-монтажлау эштәрен дә башҡара. Бында шулай уҡ заказ, шәхси проекттар буйынса халыҡ ҡулланыуы тауарҙары эшләтеп алырға мөмкин, төҙөлөш өсөн төрлө конструкциялар ҙа етештерелә. Предприятиеның проект-конструкторлыҡ бүлеге, төҙөлөш-монтаж, биҙәкләү участкалары, машина-трактор паркы .б. бар. Торлаҡ йорттарҙан тыш, ул социаль объекттар ҙа төҙөй. Шулар иҫәбенә ҡаланың Ротково микрорайонында балалар баҡса ын, башланғыс мәктәпте индерергә мөмкин. Башҡортостанда беренселәрҙән булып, предприятие әр фатирҙа "аристон" ҡаҙанлыҡтары менән газ йылылығы система ын ҡулланды, полиэтилен торбалар эшләп файҙаланыуға индерҙе. Биҙәкләү сифатын яҡшыртыу өсөн яңы технологиялар даими үҙләштерелә, йылы иҙәндәр түшәү .б. эштәр атҡарыла. Фатир алыусылар эш сифатынан да, хаҡтарҙан да ҡәнәғәт.

"Автосбыт" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт тә автомобиль баҙарындағы уңыштары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. 1999 йылда "НефАЗ" предприятие ының рәсми дилеры сифатында ойошторолған ширҡәткә "НефАЗ", "КамАЗ" заводтары етештергән автомобилдәргә ҡушып "УралАЗ", "ГАЗ", "ЗИЛ", "МАЗ" машиналарын да күмәртәләп атыу бурысы йөкмәтелә. Артабан ширҡәт тағылма техника, шул иҫәптән вагон-йорттар етештереүҙе үҙләштереп, хәҙер 43 төрҙәге вагон-йорттар эшләп сығара. Бөтә уңайлыҡтары ла булған был продукция хәҙер Рәсәй баҙарында ғына түгел, сит илдәрҙә лә ихтыяж менән файҙалана. 2006, 2007 йылдарҙа үткәрелгән "Газ. Нефть. Технология" күргәҙмә ендә "Автосбыт" ширҡәте Маҡтау грамота ына лайыҡ булды.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 189



Нефтекама – үҫешкән сәнәғәт, көслө социаль сәйәсәт кенә түгел, ә мәғариф өлкә ендә лә алға киткән ҡала. 2000 йылдан бында Башҡорт дәүләт университеты филиалы эшләй. Уны асыу был төбәктә бер генә уҡыу йорто ла булмау, шул арҡала йәштәрҙең сит өлкәләргә китеп белем алырға мәжбүр ителеүе әм шунда төпләнеп ҡалыуы менән бәйле ине. Нефтекама, Ағиҙел, Яңауыл ҡалалары, Ҡалтасы, Краснокама, Тәтешле районлары хакимиәттәре филиал астырыуҙы башлап йөрөүселәр әм бағымсылар булды. Хәҙер был уҡыу йортонда хоҡуҡ, финанс, математика әм информатика белгестәре, телселәр әм тарихсылар әҙерләнә. Башҡортостандан тыш, бында Пермь крайынан, Коми Республика ы әм Төмән өлкә енән барлығы ике мең ярым сама ы студент белем ала. Төплө белгестәр әҙерләү өсөн филиалда барлыҡ шарттар ҙа бар: дүрт корпусты (өсө ө – уҡыу корпустары) эсенә алған әйбәт матди база, Интернетҡа тоташтырылған 10 компьютер класы, мәғлүмәт технологиялары үҙәге, нәшриәт бүлеге, ике спорт әм бер тренажер залы, йәштәр клубы әм ашхана эшләй. Китапханала 95 мең дана китап иҫәпләнә, дүрт уҡыу залы бар, шуларҙың бере е – электрон зал.

Филиал аҡрынлап мәғлүмәт технологиялары әм фән үҙәгенә лә әүерелә бара. 2004 йылда үткән Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференция ында (ул гуманизм тема ына арналды) төрлө ҡалаларҙан 500-ҙән ашыу педагог ҡатнашты. 2005 йылда филиалға тәжрибә уртаҡлашыу өсөн Ҡытай Халыҡ Республика ынан да вәкилдәр килде. Шул йылда уҡ фән әм мәғариф буйынса уҙғарылған форумда Рәсәй, Украина, Беларусь, Әзербайжан, Ҡаҙағстан республикаларынан 300-ҙән ашыу вәкил ҡатнашты. Бындай саралар филиалда йыл айын ойоштоup ролоп, уның абруйы күтәрелеүе хаҡында өйләй. Ғалимдар шулай уҡ ҙур ғилми үҙәктәрҙә: Мәскәү, Санкт-Петербург, Өфө .б. ҡалаларҙа ойошторолған конференцияларҙа ҡатнашып, белем биреүҙе камиллаштырыу тәжрибә ен өйрәнә. Филиалда ғилми эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән аспиранттарҙы, студенттарҙы берләштергән йәш ғалимдар советы, студенттарҙың ғилми йәмғиәте әм йәш педагог мәктәбе эшләй. Ете йыллыҡ эш дәүерендә филиалда 14 кандидатлыҡ диссертация ы яҡланған, 40-лап кеше аспирантурала белем ала.

Филиал студенттарынан Салауат Әхмәтов (хоҡуҡ фәндәре), Әлмира Мостафина (иҡтисад) Гүзәл Шәмсиәхмәтова (филология) 2007 йылда Өфө ҡала ында уҙған студент эштәре конкурсында тәүге өс урынды яуланы. Ә йәш ғалим А. Йәнгировтың хеҙмәте Бөтә Рәсәй конкурсы “Ғилми китап-2006”ла иҡтисад фәндәре буйынса иң яҡшыларҙан тип табылыуы коллектив өсөн оло шатлыҡ.

Филология факультеты студенттары йыл айын фольклор әм диалектология ғәмәле буйынса райондарға сығып, материал туплай. Улар Краснокама, Яңауыл, Ҡариҙел, Ҡалтасы, Дүртөйлө, Балтас райондарында йөрөп ҡайтты ла инде. Студенттар XIX быуаттың күренекле әҙибе Ғәли Соҡоройҙоң тыуған ерендә булды, шағирҙар Назар Нәжми, Әнғәм Атнабаевтарҙың йорт-музейҙарын ҡараны. Ғөмүмән, филиал студенттары бай йөкмәткеле тормошта йәшәй: төрлө түңәрәктәрҙә үҙҙәренең сәхнә оҫталығын камиллаштыра, КВН фестивалдәрендә ҡатнаша, спорт менән шөғөлләнә.

Ҡалалағы икенсе уҡыу йорто – Машина эшләүселәр техникумы. Тармаҡҡа белгестәр әҙерләү йә әтенән ул 23 йылда 7,5 меңдән ашыу белгескә диплом биреп сығарған. Бында уҡытыу 15 белем биреү программа ы буйынса алып барыла. 2006 йыл йомғаҡтары буйынса коллектив “Рәсәйҙең иң яҡшы 100 махсус урта уҡыу йорто” исемендә “Европа сифаты алтын миҙалы” конкурсы лауреаты итеп танылған. Уҡыусыларҙың өнәри белемен камиллаштырыу маҡсатында, уларға “НефАЗ” йәмғиәтендә практика үтеүгә айырыуса иғтибар бирелә. Техникум студентының Бөтә Рәсәй профессиональ оҫталыҡ олимпиада ында иретеп йәбештереү өнәрендә тәүге урынды яулауы үҙе үк бында белемдең сифаты юғары булыуы тура ында өйләй.

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 190



Мәғариф учреждениеларының төп бурысы — уҡытыу  әм тәрбиә биреүҙең юғары  өҙөмтәлелегенә өлгәшеп, шәхес менән йәмғиәттең мәнфәғәттәрен берләштереү. Ҡалалағы 24 мәктәптә 16 меңдән ашыу бала уҡый. 2006 йылда Нефтекамала Башҡорт гимназия ы асылды. Ротковола үҙенсәлекле башланғыс мәктәп-балалар баҡса ы эшләй башланы. 1-се лицейҙа физика  әм математика дәрестәрен уҡытыу буйынса ҙур тәжрибә тупланған,  әм уны тамамлаусыларҙың байтағы Мәскәү дәүләт университеты студенттары булып китте. 1-се гимназияла уҡыу гуманитар йүнәлештә булып, уҡыусылар ошо фәндәр буйынса Рәсәй, Башҡортостан олимпиадаларында юғары  өҙөмтәләргә өлгәшә. 2006-2007 уҡыу йылында фән олимпиадалары буйынса ҡала уҡыусылары өсөнсө урынға сыҡты. Уҡыусылар республика олимпиадаларында 13, Рәсәйҙекендә ике призлы урындар яуланы. Был йә эттән 1-се лицей, 1-се гимназия  әм 6-сы мәктәптәр алда бара. Башҡорт гимназия ында төбәк компоненттары программаларын үҫтереү үҙәге эшләй. 10-сы мәктәптә кадет кластары үҙҙәрен  әйбәт яҡтан күр әтеп, уҡыусыларға хәрби-патриотик тәрбиә биреү буйынса ресурс үҙәге кимәленә күтәрелде. 13-сө мәктәптә икенсе йыл инде белем биреү- ауыҡтырыу үҙәге эшләп килә.

Шуны ла әйтеп үтеү мө им:  уңғы  игеҙ йылда ҡала мәктәптәрен 52 бала — алтын, 663-ө көмөш миҙалға тамамлаған. Нефтекама уҡыусыларын Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарында ла беләләр. Мәҫәлән, 6-сы мәктәпте алтын миҙалға тамамлаған Лиана Мәксүтова Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтын тамамлап, Голландияла эшләгән. 1-се лицейҙы тамамлаған 700-ҙән ашыу егет  әм ҡыҙ Мәскәү  әм Санкт-Петербург ҡалаларының юғары уҡыу йорттарында белем ала. Алексей Горяев Голландияла диссертация яҡлап, әле Мәскәүҙә Юғары иҡтисад мәктәбендә инглиз теленән уҡыта.

Нефтекама хаҡлы рәүештә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендә мәҙәниәт үҙәге иҫәпләнә. Бында 80-гә яҡын ижади коллектив эшләп, уларҙың 18-е "халыҡ" йәки "өлгөлө" исемен йөрөтә. 400 белгестең 24-нә Башҡортостан Республика ының  әм Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған артисы йәки мәҙәниәт хеҙмәткәре исеме бирелгән. Балалар менән үҫмерҙәрҙе нәфис-эстетик тәрбиәләү буйынса Нефтекама республиканың иң яҡшы  өс ҡала ы иҫәбендә. Музыка, нәфис, сәнғәт мәктәптәрендә 2 меңдән ашыу бала уҡый. Нефтекама фестивалдәр үҙәге булараҡ та билдәле. "Турғай" өлгөлө балалар музыка театры, "Виктория" өлгөлө заманса бал  әм эстрада-спорт бейеүҙәре ансамблдәре  әм башҡа коллективтарҙың ижади ҡеүә е, башҡарыу оҫталығы республиканан ситтә лә билдәле. "Виктория" ансамбле 2007 йылда Мәскәүҙә Бөтә донъя бейеү олимпиада ы сиктәрендә үткәрелгән бейеү тамаша ы буйынса Рәсәй беренселегендә алтын кубок яуланы.

Ҡалала бейеү сәнғәтен айырыуса яраталар. Халыҡтың дүрттән бер өлөшө халыҡ, эстрада, заманса бал  әм эстрада-спорт бейеүҙәре, шулай уҡ "модерн" стилендәге бейеү менән шөғөлләнә. "Ҙур Урал ритмдары" фестиваленең бында үткәрелеүе осраҡлы түгел, сөнки был сара Урал  әм Иҙел буйы төбәктәренән килгән ҡатнашыусылар, тамашасылар ара ында ла популярлыҡ ҡаҙанды. Нефтекамала 22 вокал  әм хор коллективы уңышлы эшләй, бише е "үҙешмәкәр халыҡ коллективы" тигән маҡтаулы исем менән йөрөтөлә. Башҡорт, славян, татар, мари мәҙәни үҙәктәренең әүҙем эшмәкәрлеге  өҙөмтә ендә, төрлө милли байрамдар күп халыҡ ҡатнашлығында  әм юғары кимәлдә үтә. Нефтемкама дәүләт филармония ы, башҡорт-татар халыҡ театры, балалар сәнғәт мәктәбенең милли бүлектәре уларға ҙур ярҙам күр әтә.

**Мәғсүм ФӘЙРУШИН.**

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 191



**Халыҡ шағирын тәбрикләү**

Башҡорт дәүләт опера  әм балет театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле публицист  әм йәмәғәт эшмәкәре Рауил Бикбаевтың 70 йәшлек юбилей кисә е уҙҙы. Тантанала Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов уға “Башҡортостан Республика ы алдындағы хеҙмәттәре өсөн” орденын тапшырҙы  әм, әҙиптең башҡорт әҙәбиәте үҫешенә индергән өҙөмтәле ғилми, сәйәси  әм ижтимағи эшмәкәрлеген билдәләп, талантына  оҡланыуын белдерҙе:

– үҙ оҫта ы булыуҙан тыш, еҙ – илдәге иң ҙур яҙыусылар ойошма ының  абруйлы етәксе е лә. 1995 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе итеп  айланған сағығыҙҙа башҡа төбәктәрҙә әҙәби ойошмаларҙың ниндәй хәлдә булыуын яҡшы хәтерләйбеҙ. Мәгәр еҙҙең тырышлыҡ менән беҙ мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итә алдыҡ. БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт  әм йәштәр эштәре комитетына етәкселек итеп, хоҡуҡи нигеҙҙәрҙе булдырыуға  әм камиллаштырыуға  әлмәк өлөш индерә егеҙ. Йәнә Башҡортостан Дәүләт гимнының  үҙҙәре еҙҙең әүҙем ҡатнашлығығыҙҙа ижад ителде  әм раҫланды. Башҡортостан Республика ының Президент Советы ағза ы бурыстарын да оло яуаплылыҡ  әм намыҫ менән үтәй егеҙ: бөгөн дә халыҡ ғәме менән яна ығыҙ, үҙегеҙҙе уның айырылғы ыҙ өлөшө кеүек хис итеп, намыҫлы хеҙмәт итә егеҙ.  еҙгә тәрән аҡылығыҙ  әм күңел йомартлығығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

Рауил Бикбаев Ырымбур  тупрағында тыуып үҫкән. Юбилярға өлкә хакимиәте вәкиле Федор Чеботарев етәкселегендәге делегация ағзалары ихлас дала сәләмен күндергәс, оло бүләк – икмәк  әм яҡташтары тарафынан сығарылған китабын тотторҙо.

Шағирыбыҙ ижадын туған халҡы ғына түгел, бүтән милләт вәкилдәре лә ололай. Быны төрлө тарафтан йыйылған ҡунаҡтар ҙа раҫланы. Рәсәй Яҙыусылар союзы идара ы  рәйесе,  Йәмәғәтселек  палата ы ағза ы, БР Президенты тарафынан булдырылған Сергей Аксаков исемендәге премия лауреаты Валерий Ганичев коллега ын «Сәнғәткә хеҙмәте өсөн» ордены менән бүләкләне.

Татарстан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе Илфак Ибра имов  әм Татарстандың халыҡ шағиры, ТР Дәүләт Советы депутаты Роберт Миңнуллин юбилярҙы туғандаш халыҡ исеменән ҡотланы. Улар Рауил Бикбаевтың Ҡазанда яңы сығарылған мөхәббәт лирика ы йыйынтығын алып килгәйне. Ҡаҙағстан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесенең беренсе урынбаҫары Ғалым Жайлыбаев менән Дағстандың халыҡ шағиры, Дағстан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе Магомед Ахмедов Рауил Бикбаевты бөгөнгө әҙәби донъяла иң мәртәбәле  милли шағирҙарҙың бере е, халыҡтар дуҫлығын нығытыусы шәхес, тип атаны.

Шағирҙы ҡәләмдәштәре – Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Тимер Йосопов, Александр Филиппов, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаттары Хәсән Назар, Ҡәҙим Аралбай, Факи а Туғыҙбаева бағышлауҙар менән тәбрикләне.

Республикабыҙҙың танылған сәнғәт коллективтары  әм сәхнә оҫталары, шулай уҡ юбиляр биография ын сағылдырған кадрҙар кисә барышына йәм өҫтәне.

Тантаналы кисә алдынан хөрмәтле ҡунаҡтарға баш ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урындарын күр әтеү программа ы ла тәҡдим ителде. Бер төркөм башҡорт әҙиптәре оҙатыуында улар Мостай Кәрим ҡәберенә  зыярат ҡылып, сәскәләр алды, милли геройыбыҙ Салауат Юлаев, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдындағы Аҡмулла  әйкәлдәренә шулай уҡ сәскә гөлләмәләре алды, Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейын ҡараны  әм хөрмәтле

Agidel 3:Agidel 3.qxd 13.04.2009 23:29 Page 192



ҡунаҡтар кенəгə ендə иҫтəлекле яҙмалар ҡалдырҙы.

...Иҫтəлекле юбилейы алдынан ғына Рауил Төхвəт улы Бикбаев БР Фəндəр академия ы ағза-корреспонденты итеп айланды. Ҡотлайбыҙ!

***

“Башҡорт яҙыусы ы Баязит Бикбайҙың тыуыуына 100 йыл!” – февраль башында Көйөргəҙе районының Баязит Бикбай исемендəге Мораптал урта мəктəбендə уҙғарылған республика ғилми-ғəмəли конференция ы шулай тип аталды. Конференцияла Башҡортостан райондары мəктəптəрендə башҡорт теле əм əҙəбиəтен, Башҡортостан мəҙəниəтен уҡытыусы 86 педагог ҡатнашты.

Көйөргəҙе районы мəктəптəрендə Башҡортостандың атҡаҙанған сəнғəт эшмəкəре, Салауат Юлаев исемендəге премия лауреаты, Хеҙмəт Ҡыҙыл Байраҡ, “Почет Билдə е” ордендары кавалеры, күренекле əҙип Баязит Бикбайҙың ижадына арналған асыҡ дəрестəр, улар буйынса фекер алышыуҙар уҙғарылды. Мəктəптəрҙə яҡташ яҙыусылар ижады буйынса күргəҙмəлəр ойошторолдо. Башҡортостан мəғариф министры урынбаҫары Артур Сурин, бүлек начальнигы Рəйсə Күзбəкова уҡытыусылар алдында эш йомғаҡтары буйынса сығыш я аны.

Ике көн дауамында барған конференция эшенə Башҡортостан яҙыусылары, Баязит Бикбайҙың ҡыҙы Элиза Бикбаева, Өфө ҡала ы мэры урынбаҫары Сынтимер Баязитов килеп ҡушылды. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рəйесе урынбаҫары шағир Риф Тойғонов, шағирҙар Тамара Ғəниева, Ҡəҙим Аралбай, Зө рə Ҡотлогилдина, Миңлегөл Хисамова, Фəрзəнə Ғөбəйҙуллина, Зөбəржəт Йəнбирҙина, Бөтə донъя башҡорттары ҡоролтайының президиум ағза ы Румил Аҙнабаев, скульптор Өлфəт Ҡобағошовтар уҡыусылар əм уҡытыусылар, Мораптал халҡы алдында сығыш я - ап, əҙиптең əҙəби мираҫының ҡиммəте хаҡындағы фекерҙəрен əйтте, шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

– Баязит Бикбай – Көйөргəҙе яҙыусы ы ғына түгел, Башҡортостаныбыҙҙың билдəле шəхесе, уның иҫтəлеген мəңгелəштереү эшен беҙ дауам итəбеҙ. Баязит Бикбай исемендəге премия булдырҙыҡ, уның əйкəлен я атыу хыялыбыҙ ҙа бар, – тине халыҡ алдында сығыш я ап Көйөргəҙе районы муниципаль районы хакимиəте башлығы Əхəт Ҡотлəхмəтов. – Быйыл беҙ Баязит Бикбай исемендəге Мораптал урта мəктəбендə уның музейын ойоштороуға өлгəштек. Йəйгə əҙиптең тыуған ауылы Ҡалтала “ аумы ығыҙ, ауылдаштар!” байрамы уҙғарыласаҡ.

***

Салауат Юлаев исемендəге дəүлəт премия ы лауреаты шағир Хəсəн Назар менəн "Ағиҙел" журналының баш мөхəррире яҙыусы Əмир Əминев февраль башында Ейəнсура районында булып, Яңыбай, Сирғол, Трушин мəктəптəрендə, Иҫəнғол башҡорт гимназия ында уҡыусы балалар, уҡытыусылар, район үҙəк китапхана ында, шулай уҡ Яңы Себенле, Ҡужанаҡ, Таулыҡай ауылдары клубтарында халыҡ менəн осрашыуҙар үткəрҙе. үҙ, нигеҙҙə, Хəсəн Назарҙың яңы ғына сыҡҡан "Ғүмер əм дəүер" исемле китабы, ғөмүмəн, уның ижады, "Ағиҙел" журналында донъя күргəн əҫəрҙəр, редакция эшмəкəрлеге, алдағы пландары хаҡында барҙы.

Əҙиптəргə бөгөнгө əҙəбиəткə, үҙ ижадтарына ҡағылышлы орауҙар бирелде, Хəсəн Назар шиғырҙарын уҡыны, мəктəп уҡыусылары уның əҫəрҙəрен яттан өйлəне, концерт номерҙары күр əтте. Осрашыуҙар əр ҡайҙа ла юғары рухи күтəренкелектə, халыҡсан ауаздашлыҡта үтте.

Əҙиптəрҙе Ейəнсура районы муниципаль районы хакимиəте башлығы Ə. С. Байсурин ҡабул итте.

***

Татарстандың халыҡ шағиры, Ғабдулла Туҡай, Муса Йəлил исемендəге премиялар лауреаты, драматург Илдар Юзеевтың (1933–2004) тыуған яғы Яңауыл районы Ямаҙы ауылында əҙиптең мемориаль музейы асылды. Тантанала уның ауылдаштары, ижадташ дуҫтары, ҡунаҡтар ҡатнашты. “Түңəрəк өҫтəл”дə Ҡазан дəүлəт педагогия гуманитар институты проректоры Фираз Харисов, Яңауыл районы муниципаль районы хакимиəтенең мəҙəниəт бүлеге етəксе е Рима Фазылова, Яңауыл яҙыусылар ойошма ы етəксе е Фəрит Суфияров .б. шағир тура ында йылы иҫтəлектəре менəн уртаҡлашып, ижадын əм тормош юлын байҡаны.